# Ағиҙел

Өфө,
август
2013

8(1084)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева,Тәнзилә Сәлихова (корректорҙар),
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.08. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 120 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0107.13.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2013 (8,1084)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Рауил Бикбаев.** Граждандарҙы ҡабул итеү көнө. Поэма. ............5
**Мөхәммәт Илбаев.** Яу һалдатына хат. Шиғырҙар. ...................12
**Сәрүәр Ғәләүетдинов.** Ҡайнай тормош. Шиғырҙар. ................17

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Камил Фазлый.** Ел осорған ауыл. Сатирик повесть. ............23
**Ғәлим Хисамов.** Өн һәм һан. Роман-фараз. Башы. ................61

ШИШМӘЛӘР

**Фәрит Әхмәтов.** Хоҙай ҡушҡан. Шиғырҙар. ...........................100
**Таңсулпан Рәсүл.** Өй икмәге. Шиғырҙар. ...............................104

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Фәрзәнә Аҡбулатова.** Һүҙ һәм нур үлсәме. .................................107
**Зәки Әлибаев.** Камиллыҡҡа табан. .............................................115

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Суфиян Поварисов.** Йософ һәм Зөләйха мөхәббәте
*(Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы донъя күреүгә – 800 йыл).* ...124
**Марат Зәйнуллин.** Төрки һәм башҡорт тел ғилеменә нигеҙ
һалыусы *(Н. К. Дмитриевтың тыуыуына – 115 йыл).* .................131
**Фәүриә Аҡкужина.** Даны һәм эше ҡалды
*(Булат Ғафаровтың тыуыуына – 75 йыл).* .................................137

РУХИ ХАЗИНАЛАР

**Рәшиҙә Ғиззәтуллина.** Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә. ...........................139

ПУБЛИЦИСТИКА

**Наоми Вульф.** Матурлыҡ хаҡында миф. .....................................144
**Нияз Мәжитов.** Яйыҡтар – башҡорт халҡының иң боронғо
ата-бабалары. ..................................................................................165
**Рауил Бикбаев.** Өфө-1, Өфө-2. Шиғыр. ....................................181
**Хажи Әхмәтйәнов.** Оҡшаш яҙмыштар. ........................................183

ДОНЪЯ ӘҘӘБИӘТЕ ҮРНӘКТӘРЕ

**Әхәт Сәлихов.** Ҡарасауғлан – төрөктәрҙең Ҡарас сәсәне. ...........186
**Ҡарасауғлан.** Мин гүзәлгә гүзәл тимәм. Шиғырҙар.

"АҒИҘЕЛ"ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:


ПОЭЗИЯ

**Р. Бикбаев.** День приема граждан. *Поэма.*
**М. Ильбаев, С. Галяутдинов.** *Стихи.*

ПРОЗА

**Камиль Фазлый.** Деревня, унесенная ветром. *Повесть.*
**Г. Хисамов.** Звук и число. *Роман-гипотеза.*

РОДНИКИ

**Ф. Ахметов, Тансулпан Расуль.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Ф. Акбулатова.** Мера слова и света.
**З. Алибаев.** К гармонии.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**С. Поварисов.** Любовь Юсуфа и Зулейхи
*(800 лет поэме «Киссаи Юсуф» Кул Гали).*
**М. Зайнуллин.** Основоположник тюркского и башкирского языкознаний *(115 лет со дня рождения Н. К. Дмитриева).*
**Ф. Аккужина.** Остались труды и слава
*(70 лет со дня рождения Б. Гафарова).*

ДУХОВНЫЕ СОКРОВИЩА

**Р. Гиззатуллина.** Глас народа.

ПУБЛИЦИСТИКА

**Н. Вульф.** Миф о красоте.
**Н. Мажитов.** Яики — древние предки башкир.
**Р. Бикбаев.** Уфа-1, Уфа-2. *Стихотворение.*
**Х. Ахметьянов.** Похожие судьбы.

ОБРАЗЦЫ МИРОВОЙ ЛИТЕРАТУРЫ

**А. Салихов.** Карасауглан — Карас сэсэн турецкого народа.
**Карасауглан.** *Стихи.*

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...


---


**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәрририҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)



● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Рауил**
**БИКБАЕВ**

# ГРАЖДАНДАРҘЫ ҠАБУЛ ИТЕҮ КӨНӨ

ПОЭМА

*Граждандарҙы ҡабул итеүҙәрем —*
*Ниндәй өмөт менән көтөүҙәре...*
*Бәләләргә тарыған йәштәр, ҡарттар*
*Ярҙам һорап килә депутатҡа.*

*Дәртлеләр бар,*
*Эш тип сапҡандар бар,*
*Суйыр ташҡа ҡаҙыҡ ҡаҡҡандар бар,*
*Яҙмыштарын мәкер саҡҡандар бар,*
*Алдаҡ тоҙағына ҡапҡандар бар.*

*Йәш эшҡыуар килгән,*
*Ене һөймәй*
*«Бөгөн эш юҡ» тигән ялҡауҙарҙы:*
*— Барҙы юҡ итеүе еңел дә ул,*
*Ә һин эшләп ҡара юҡтан барҙы.*

*Малдар табыла ҡара тирҙәр түгеп,*
*Намыҫлыға бәхет күктән төшмәй.*
*Тырыш ҡына түгел,*

---

*Рауил Бикбаев (1938) Ырымбур өлкәһенең Үргә Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты, комитет рәйесе.*

*Зирәк тә бул,*
*Ҡул менән дә,*
*Баш менән дә эшлә.*

*Беҙ, йүнселдәр, эш тип талпынғанда,*
*Инде ныңынам тип ҡалҡынғанда,*
*Һалымдары һаман артып тора,*
*Һалым быуа беҙҙең алҡымдарҙан.*

*Мисәтле бер ҡағыҙ алыр өсөн*
*Йөҙ һыуымды түгеп йөрөгәндәрем,*
*Түрәләргә күпме төрткәндәрем!*
*Ағай,*
*Ҡасан булыр ҡаты закон*
*Өнөн тығырлыҡ шул бирәндәрҙең?*

* * *

*Эй, тилмереп ҡарай бер йәш ҡатын,*
*Эскәйҙәре тулы хәсрәт-ялҡын:*
*Ике сабый, ятаҡ, алғаны тин,*
*Бомж булып йөрөй эскесе ир.*

*— Сабыйҙарым асҡа тилмергәне,*
*Эт күрмәгәндәрҙе мин күргәнем,*
*Муйыныма элмәк элергәме?*
*Был мәхшәрҙе ташлап китергәме?*

*Күпме генә тырышып эшләһәм дә,*
*Бурысым арта.*
*Ҡыуылам ятаҡтан.*
*Түҙемем бөттө инде.*
*Бына килдем,*
*Булмаҫмы, тип, ярҙам һеҙҙең яҡтан.*

*...Еңеләйтергә ауыр хәлкәйҙәрен*
*Ни сара бар, Раббым, ни сара бар?*
*Күҙ йәштәре түгелеп миңә ҡарай*
*Гонаһһыҙ йән, изге бисаралар.*

* * *

*Граждандарҙы ҡабул итеүҙәрем —*
*Тамуҡ ғазаптарын үтеүҙәрем.*
*Йәннәт еребеҙҙе йәһәннәмгә*
*Әйләндерә күпме һөмһөҙ бәндә.*

Кеше бәхетен ялмауыҙҙар ялмай,
Ундайҙарҙа тамсы тәүфиҡ ҡалмай.
Ҡабул итеү көнө йәнде талай,
Иң ҡыйыны — ярҙам итә алмау.

Иң ҡыйыны — ярҙам итә алмау,
Ватандаштар сабыр, түҙә генә.
Һеҙҙең ҡайғы сыға йөҙҙәремә,
Күҙ йәшегеҙ тула күҙҙәремә.

* * *

Уҡытыусы инде.
Күптән инде
Ул директор.
Иңдә оло мәктәп:
— Нисәмә йыл биҙгәк тота илде,
Мәктәбем тип, ауыл йәшәй миктәп.

Мин — мөғәллим.
Беҙҙең яҙмыштан да
Буталсыҡ хәл илдә бармы икән?
Һуғыш барғанда ла мәктәп булған,
Тыныс замандарҙа мәктәп бөтә.

Ҡара таңдан тау юлдары үтеп,
Саҡ-саҡ килә уҡыусылар туңып.
Интернат тар. Яңыһын төҙөргә тип,
Йөрөп аяҡ талды, яҙып ҡулым.
Емерелһен тиһәң бөйөк Рәсәй,
Һин мәктәбен генә емер уның.

Рәсәй мәктәптәре бар донъяны
Хайран иткән саҡтар ҡайҙа, илем?
Әрәм булды ниндәй хазиналар!
Ҡыйрала рух. Меҫкен хәлдә ғилем.

Интернат тип, хужаларға йөрөйөм,
Янғялсы тип улар исем таға.
Хаҡ талапты ҡат-ҡат кире ҡаға.
Депутатҡа килдем, аптырағас.

Уҡытыусы ҡустым!
Үтте ғүмерем
Милли мәктәп, рухиәтте яҡлап.
Нығыраҡ һыҙлай йөрәк яраларым
Мәктәп өсөн һин һыҙланған саҡта.

*(Аҙағы шул: эштең осона сыҡтыҡ,*
*Ҡат-ҡат йөрөнөк, барыбер юлын таптыҡ.*
*Ожмах ишеге асылғандай булды —*
*Асылғанда ишеге интернаттың.)*

* * *

*Иң ҙур бәхет — кешене ҡыуандырыу,*
*Ярҙам итә алмау — иң ғәрлеге.*
*Ғәрлегеңдән шартлап китергәме?*
*Яҡлай алмағас, һин ниндәй ирһең?*
*Үтәлгәндә үтенестәр — байрам,*
*Күп саҡтарҙа үҙгәрмәй бит бер ни.*

*Иң ҡыйыны — ярҙам итә алмау.*
*Ҡомһоҙ заман бары аҡса һанай,*
*Кешеләрҙе кешегә һанау ҡайҙа?*
*Супербурҙар һаман илде талай.*

*Тормошобоҙ ҡотҡа тулыр ине,*
*Ҡанун боҙоуҙарҙан ил ҡотолһа.*
*Беҙ иң азат халыҡ булыр инек,*
*Барыһын да тик законса ҡылһаҡ.*

*Думалағы закондарға көйләп*
*Дәүләт Йыйылышында — Ҡоролтайҙа*
*Үҙебеҙҙекен яңынан яҙған саҡта,*
*Өмөт һүнмәй,*
*Барыбер яуа хаттар,*
*Һуңғы өмөттәре — депутатта.*

*Совет заманынан әйтелә килде:*
*Депутаттар — халыҡ ялсылары,*
*Ә ялсының һәр саҡ бәйле ҡулы.*
*Рәсәй халҡы үҙе — ялһыҙ ялсы,*
*Тимәк, депутат — ялсының ялсыһы,*
*Ни эш ҡыйратаһың, ялсы булып.*

* * *

*Тағы ла уҡытыусы.*
*— Һаумыһығыҙ!*
*— Ҡайҙа инде беҙҙең һаулығыбыҙ...*
*Ауылыбыҙ менән ауырыйбыҙ,*
*Танымаҫлыҡ хәҙер ауылыбыҙ.*

*Заманында илде илатҡандар,*
*Мәсет манараһын ҡолатҡандар.*
*Бөгөн аҡса һаҡлар юл тапҡандар —*
*Сығым кәмей мәктәпте япҡандан!..*

*Ауылыбыҙҙа хәҙер яңы мәсет.*
*Мәсет асыҡ та ул,*
*Мәктәп бикле.*
*Беҙ мәктәпһеҙ ауыл.*
*Беҙҙең һымаҡ*
*Берәү генә түгел,*
*Йөҙәрләгән*
*Ауылдарҙың киләсәге шикле.*

*Онотола намыҫ. Биҙә йәштәр*
*Тыуған тамырҙарҙан, телдән, моңдан.*
*Беҙ уҡыған саҡта мәктәбебеҙ*
*Тәүфиҡ, иман менән тулған булған.*

*Аҙмы күрҙем:*
*Изге әлифбаны*
*Алмаҡ булып сабый ҡулын һона,*
*Бөгөн күпме бала мәхрүм бынан.*
*Аңлағанға ҡыйын.*
*Иң ҡыйыны*
*Миңә — ғүмер буйы тел тип янған*
*Башҡорт теле уҡытыусыһына.*

*Тик әлифба аша асыла юл*
*Ҡөрьәндәргә, изге китаптарға.*
*Мәктәптә бит тибә ил йөрәге,*
*Мәктәпһеҙ ил етә упҡын-ярға.*

*Егерме йыл башҡорт телен уҡытып,*
*Мин — урамда,*
*Эшһеҙ исемен алдым.*
*Ирем — ауырыу.*
*Балаларым үҫә.*
*Ни гонаһым, ни гонаһым өсөн*
*Барыһын да яҙмыш ҡырып һалды?*

*Күңеле тулышһа ла,*
*Күҙ йәштәрен*
*Түкмәйенсә ҡала саҡ-саҡ тыйылып.*

Ниндәй һүҙҙәр табып йыуатайым?
Ярҙам итә алмау — иң ҡыйыны.

Һаман бөтмәҫ ҡороу-үҙгәртеүҙәр,
Күпме беҙҙең сығыш, туҡыу, тылҡыу.
Мәктәп тә тел тибеҙ, мәктәп тә тел,
Төп мәсьәлә һаман —
Уҡыу-уҡытыу.

* * *

Бына миңә бер мыҡты ир һөйләй:
— Мин — урмансы.
Күрҙем хөрмәт-ҡәҙер.
Урманыма юл бикләнде хәҙер,
Ҡыҫҡарттылар.
Эшһеҙ ҡалдым хәҙер,
Бөттө ҡәҙер.

Урман-урман ағас ултырттым мин,
Яттар ҡыра бөгөн урмандарҙы.
Ҡайҙан килә был законһыҙ закон?
Еребеҙгә хоҡуғыбыҙ бармы?

Донъя көтөргә лә юл табырмын,
Балтам һыуға төшмәҫ.
Көс бар ҡулда.
Кем уйлаған, ошо көн килер, тип?
Төшкә инмәҫ ине, ҡайҙа уйлау!
Урманынан яҙған урмансы мин,
Ҡаңғырамын бына ағас юллап.

Борон-борондан бит ата улын
Өйләндерер булған һалып йортон.
Ауылдарҙы тере ҡулһыҙ итә
Еребеҙгә килгән бәлә-ҡырғын,
Урман кодексы — ил ҡоротор ҡуртым.

Ҡайҙа барма, ауыл һайын күрәм:
Өйөрө менән буйҙаҡ ир-егеттәр.
Буйҙаҡтар күп. Ҡыҙҙар ситкә китә.
Яҡшыртмай шул хәлде буш өмөттәр.
Ике улым үҫте.
Күҙ теймәһен,
Намыҫҡа тап төшөрмәҫ кеүектәр.

Халыҡ кәмей, тибеҙ, зарланабыҙ,
Арттырмай шул халыҡ һанын өгөт.

*Яңы йорт бөтөрһәк,*
*Оло улым*
*Күҙле-башлы булыр, тигән өмөт.*

*(Аҙағы шул:*
*Тырыштыҡ, эш уңды,*
*Ағас юллап алдыҡ урмансыға.*
*Әле күпме кеше,булып көтөк,*
*Ағас юллап һаман яфа сигә.)*

* * *

*Граждандарҙы ҡабул итер көнөм*
*Нисәнсе ҡат өтөп килеп етте.*
*Кешеләрҙең өҙгөләнгәндәре*
*Бәғеремде тағы телеп үтте.*

*Ҡабул итеү бара ике сәғәт,*
*Бында ваҡыт башҡаса үлсәнә.*
*Самаларға килмәй бында сама,*
*Өлгөрөргә нисек, эй, ҡурсалап.*

*Берәү әле утта янған саҡта,*
*Берәү ялан аяҡ бара ҡарҙан.*
*Миңә хаттар килә.*
*Мин хат яҙам.*
*Хаттарымдан булһын ине ярҙам!*

*Күҙ алдымда кеше яҙмыштары:*
*Ҡанатлана, һүнә, ярһый, һына.*
*Шаңҡыһаҡ та тормош алдағынан,*
*Өмөт менән бағам алдағыға.*

*Өмөт менән иман ҡанат бирһен,*
*Аҙ булманы батып ҡалҡҡаныбыҙ,*
*Һыҙланһаҡ та, эш тип ең һыҙғандыҡ,*
*Хаҡ эшебеҙ — беҙгә ҡалҡаныбыҙ,*
*Башҡортостан — аҫыл ватаныбыҙ.*

*Ҡабул итеү бара ике сәғәт,*
*Ауырайғандан-ауырая иңем.*
*Һыҙландырып,*
*Нығырак сыныҡтыра*
*Граждандарҙы ҡабул итеү көнөм.*

**27–28.04; 5–13.05.2013.**



**Мөхәммәт**
**ИЛБАЕВ**

## *Яу һалдатына хат*

*— Одеял ябынаһыңмы,*
*Юрған ябынаһыңмы?*
*Мине төштәреңдә күреп,*
*Илап уянаһыңмы?*

*— Одеял да юҡ бында,*
*Юрғаны ла юҡ бында.*
*Эснәрәдтәр шартлап тора,*
*Һинең ҡайғың юҡ бында!*

**(Халыҡ һүҙҙәре)**

*Эй, Хоҙайым!.. тимәç инем,*
*Иçән булһаң, Иçәнғол!..*
*Миңә ауыр булған саҡта*
*Еңел елдәй иçкән бул.*

*Тын алыуҙарым үҙгәрер*
*Һине күргәндәй булып.*
*Уйға батып ултырам бит,*
*Күҙемә йәштәр тулып.*

*Мөхәммәт Илбаев (1939) Ейәнсура районының Мөхәммәтйән ауылынан. Башҡортостан ауыл хужалығы институтын тамамлаған. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы. Күмертауҙа йәшәй.*

*Нисә генә хат яҙҙым һуң*
*Таҡмаҡлап та һамаҡлап.*
*Күңелеңде күтәрәм тип...*
*Ҡайғы алдым һәр яҡлап.*

*Киткән саҡта*
*Дошмандарға*
*Ҡәһәрле ине үсең.*
*Бүре суҡмары хәтлем дә*
*Булманымы ни көсөң?*

*Ауыл осона сығып та*
*Өлгөрмәнең түгелме?*
*«Ур-ра, ур-ра!» тигән булып,*
*Утҡа һалдың үзеңде.*

*Утҡа һалдың үзеңде лә,*
*Мине  ҡайғыға һалдың.*
*Донъя көтөр саҡта ғына*
*Бына  —  аптырап ҡалдым...*

*Һин һоратҡас, эй ҡыуандым,*
*Бер ҙә ҡайғы көтмәнем...*
*...Исмаһам, шул*
*Өй бураһын*
*Күтәреп тә бөтмәнең.*

*Хәҙер уны кем күтәрә,*
*Өмә итер кеше юҡ.*
*Сулаҡ «силсәүит» «һуғыш!..» ти,*
*Миндә уның эше юҡ.*

*Һарына кеүек һары итеп*
*Картуф киптертә үҙе.*
*Ойоҡ, бейәләй бәйләтә...*
*«Һуғыш, һуғыш!» бар һүҙе.*

*Туйға төшкән тайың йөрөй,*
*Һине эҙләп ер тапай.*
*Күҙемә ҡарап һорай кеүек:*
*«Ҡайҙа булды һуң, ҡайтмай?».*

*Артыҡ мал тип һанамайым,*
*Әммә колхозға «инһен».*
*«Һалдат»ҡа киткән аттарға*
*Алмаш булһын ул, тимен.*

*Һин киткәс тә,*
*Күкте ябып,*
*Ҡорт боларҙы, саҡ «тыйҙыҡ».*
*Туйға япҡан күс ҡайтманы...*
*Был хәлдән хәүеф тойҙоҡ...*

*Туй һандығымда — бүләктәр...*
*Күбеһе ҡулға теймәгән.*
*Бүләк биргән саҡта*
*Кемдер*
*«Тигеҙ ғүмер!» тимәгән...*

*Миңә ун һигеҙ ҙә тула...*
*Кит, шуны ла белмәйһең!*
*Ер аҫтынан сыға алмайһың,*
*Унда нимә эҙләйһең?..*

*Ер өҫтөндә мин бар бит һуң,*
*Өн бир, барып етәм ул.*
*Тыным менән йән өрәм дә*
*Алып ҡайтып китәм ул.*

*Килгәнемде һиҙһәң, үҙең*
*Һикереп торорһоң әле...*
*Илатма мине, Иҫәнгол,*
*Илатма мине, йәме!..*

*Ә мин һиңә бер сер әйтәм,*
*Ишеткән бул, Иҫәнгол:*
*Оҙаҡламай улың тыуа!..*
*Бирһен Хоҙай, тигән бул.*

*Ә мин ҡайҙан белә, тиһең,*
*Кендек әбейе юрай.*
*Ултыра торғас, уйлап ҡуйҙым:*
*Ил тағы һалдат һорай!*

*Ҡарттарыбыҙ әйтә бит һуң:*
*«Ир бөтмәһә, ил бөтмәй».*
*Береһе лә әйтмәй бына:*
*«Һуғышып донъя берекмәй».*

*«Нишләп һуғышалар? тиһәм,*
*Донъяһы шулай, имеш!*
*Һуғыш — батшалар эше ул,*
*Илде һаҡлау — беҙҙең эш...*

*Һин һораткас, эй ҡыуандым,*
*Һис тә ҡайғы көтмәнем.*
*Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ икелә...*
*Яҙып һүҙем бөтмәне.*

*Һуғыш бөткәнсә яҙһам да*
*Һине терегә һанап,*
*Яҙғанымды... бетеү итәм,*
*Улың уҡыһын аҙаҡ...*

*Эй, Хоҙайым!.. тиməç инем,*
*Иҫән булһаң, Иҫәнғол.*
*Тыуаһы балаң хаҡына*
*Иҫемдә гел иҫән бул...*
*Хуш, хәҙергә...*

## *Өс батыр*

(1895 йыл... Мифтахетдин Аҡмулла вафат була.
Шул уҡ йылда Шәйехзада Бабич тыуа.
1919 йыл... Ш. Бабич вафат була. Шул уҡ йылда
Мостай Кәрим тыуа.)

*Тәбиғәтебеҙгә күрә,*
*Хоҙай яратҡан һөйөп.*
*Болһоҙ, болоҡһоҙ, тимәгән,*
*Ҡашын төймәгән, көйөп.*

*Майҙаныбыҙға сығарған*
*Бер-бер артлы өс батыр.*
*Батырҙарға*
*Халыҡ биргән*
*Баһа артҡандан-артыр.*

*Майҙан күрке булғандарҙың*
*Нәҫеле таныш һиңә:*
*Ер-һауабыҙҙы йәмләгән*
*Урал батырҙан килә.*

*Батырҙарыбыҙ булғанға*
*Тәбиғәтебеҙ шулай:*
*Беҙ түгелбеҙ*
*Дәртһеҙ, моңһоҙ*
*Елгә һыҙғырған ҡурай.*

## Үҫәргәндәр ерендә бороңғо ҡалмыҡ ҡәберлеге

*— Нишләп ятаһығыҙ бында? —*
*Ят тупраҡта, йәндәрем?..*
*— Барымтаға яу сапҡайныҡ...*
*Был килгәндә юл уңманы,*
*Аңла донъя хәлдәрен.*

*— Аңланым...*
*Аҡыл юйманым, —*
*«Баттым» тәрән уйҙарға...*
*Ерләп,*
*Ҡәҙер күрһәткәндәр*
*Алла ҡаршыһында — изге.*
*Ә һеҙ...*
*Кем һуң уларға?..*



Сәрүәр
**ҒӘЛӘҮЕТДИНОВ**

## *Ҡайнай тормош*

*Тамъян ере тарих һаҡлай,*
*Шәхестәрен ил данлай:*
*Уңъандары уңыш яулай,*
*Тормошта артта ҡалмай.*
*Беҙҙә ҡыҙҙар сәскә кеүек,*
*Бейегәндә — орсоҡтай;*
*Егеттәре ут сығарыр,*
*Беләктәре ҡоростай.*
*Ҡулдарына ҡурай тотһа,*
*Донъя күмелер моңъа:*
*Ситтән килгән тағы килер,*
*Юл төштө, тип, Тамъянъа.*
*Эй, тыуъан ер! Ғәзиз ерем,*
*Шәхестәрең ил беләː*
*Шәъәле Шаҡман төйәгендә*
*Ҡайнай тормош —*
*гөж килә.*

---

*Сәрүәр Ғәләүетдинов (1950) Бөрйән районы Ҡолғана ауылынан. Баймаҡ ауыл хужалығы техникумын, Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаған. Тыуған ауылы мәктәбендә уҡытты, әле ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы.*
*Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

## Әсә булыу

*Ҡатын-ҡыҙҙың байлығы —
Йөрәгенең сафлығы,
Күңеленең паклығы,
Уйҙарының аҡлығы.
Ҡатын-ҡыҙҙың байлығы —
Ябайҙан-ябайлығы:
Тормошта инсафлығы,
Һөйкөмлө-ыҫпайлығы.
Ҡатын-ҡыҙҙың байлығы —
Наҙлап бала көтөүе:
Ғаиләһенә терәк булып,
Татыу ғүмер итеүе.
Ҡатын-ҡыҙҙың байлығы —
Ябайҙан-ябайлығы:
Иң мөһиме — һаулығы,
Бәхетле әсә булыу —
Уның бөтмәҫ байлығы.*

## Атайыма

*Түшкәйендә орден-миҙал,
Береһе ялтыр — алтындан,
Икенсеһе — һары баҡыр,
Ҡояш нурына ялтырай.
Ни тип кенә әйтһәләр ҙә,
Хеҙмәтенә — был баһа.
Ҡай берәүҙәр тир түкһә лә,
Ҡәҙер-хөрмәт юҡ таһа.
Түшкәйенә таҡҡан миҙал,
Сыңлап китә тауышы.
Орден-миҙал сыңдарында —
Үткәндәрҙең һағышы.
Миҙалдар ҙа төрлө була,
Ап-аҡтары — ҡалайҙан.
Әлдә атай бик күптәргә
Өлгө булған. Ябай ҙа.
Киң Себерҙе айҡап сыҡҡан,
Күпте күргән былай ҙа,
Сталинград һуғышында
Имен ҡалған алай ҙа.
Немец менән алышҡанда
Днепрҙа — Дунайҙа
Дүрт мәртәбә яраланып,*

*Имен ҡалған алай ҙа.*
*Ҡыуанысым сиге юҡтыр,*
*Мең-мең рәхмәт Хоҙайға:*
*Дошман яуын еңеп ҡайтҡан,*
*Түшкәйенә орден таҡҡан,*
*Беҙҙең бәхет өсөн атай*
*Имен ҡайтҡан алай ҙа.*

## Ауыл ҡыҙы

*Ауылдарҙан китә ҡыҙҙар —*
*Белем ала — ҡалаға.*
*Өйҙә ҡалған атай-әсәй*
*Бәхет теләп оҙаталар*
*(Еткән ҡыҙға — балаға).*
*Шаулы ҡала — уҫтә ҡала*
*Белем алған йылдарҙа.*
*Аҡ яҙмыштар насип булһын*
*Һеҙ үтәһе юлдарҙа.*
*Ауыл ҡыҙы һис һынатмаҫ*
*Уҡыуҙа ла, эштә лә.*
*Ана шуға һөйөнәм мин*
*Өндә түгел — төштә лә.*

## Шәреҡ ҡыҙы

*Әллә ниңә, әллә ниңә*
*Һаман һиңә ғашиҡмын.*
*Шул төйөндө сисер өсөн*
*Яндарыңа ашыҡтым.*
*Шәреҡ ҡыҙы. Тәү күреүҙән*
*Әсир иттең ғүмергә.*
*Мин бәхетле һинең менән*
*Осрашҡанға был ерҙә.*

## Серем бар

(*Шаярыу*)

*Һөйгәнемә ҡайтып киләм,*
*Һағынғанын беләмен.*
*Бер көн уны күрмәй торһам,*
*Һуштан яҙам — үләмен.*
*Әлдә миңә ҡанат ҡуйған*
*Берҙән-берем — йәрем бар,*
*Ғүмер буйы һөйөп, һөйөләп,*
*Һиңә һөйләр серем бар.*

## *Рухташым*

Шағир Самат Ғәбиҙуллиндың яҡты иҫтәлегенә

*Бар Йыһандың матурлығы*
*Күңеленә һыйған ине —*
*Сал имәндең һомғоллоғон*
*Буй-һынында тойған инем.*
*Һулышында — Ағиҙелдең*
*Сылтыр-сылтыр тын ағышы;*
*Һандуғаслы йәйге кистең,*
*Кәкүктәрҙең моң-һағышы.*
*Ҡарашында — киң даръяның*
*Икһеҙ-сикһеҙ киңлектәре;*
*Уй-маҡсаты, киләсәге,*
*Яҡты ине кисерештәре.*
*Йор ҙа ине, йомарт ине.*
*Төшлөктә ине ҡояшы.*
*Арҡа терәр дуҫ та инең,*
*Серҙәш инең, рухташым.*

## *Хуш килдегеҙ*

Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Арал-байға, шағир һәм тәнҡитсе Фәнил Күзбәковҡа, шағирә Таңһылыу Ҡарамышеваға

*Хуш килдегеҙ, туғандар,*
*Баш ҡаланан — Тамъянға,*
*Һеҙҙең ҡылған эштәрегеҙ*
*Күмелер әле данға.*
*Юлдарығыҙ — йәйғорло,*
*Күңелдәрегеҙ — йырлы!*
*Хыялдарығыҙ сикһеҙ,*
*Маҡсаттарығыҙ нурлы!*
*Хуш килдегеҙ, туғандар,*
*Йәм өҫтәп һеҙ табынға.*
*Тарих битен яҙғанда*
*Биҙәк булһын Тамъянға.*
*Хуш килдегеҙ, туғандар,*
*Аҡмулланың улдары.*
*Маҡсаттарығыҙ нурлы,*
*Күңелдәрегеҙ йырлы —*
*Ҡыҫышайыҡ ҡулдарҙы!*

## *Егет даны*

Мәғариф алдынғыһы Дамир Аллабирҙинға

*Һомъол һынлы имән кеүек,*
*Олпат булып үҫкәнһең.*
*Йән-тәнеңә сихәт алып,*
*Иҙел һыуын эскәнһең.*
*Ата-бабаң рухлы булъан,*
*Аҡмуллалай нур сәскән.*
*Алдар батыр кеүек ъәййәр,*
*Ете быуының сәсән.*
*Айҡап тарих төпкөлдәрен,*
*Гиҙеп сыҡтың донъяны.*
*Заман менән бергә атлап,*
*Яуланың егет данын.*

## *Өлгө булдың*

Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Рәхим
Вәлиуллиндың яҡты иҫтәлегенә

*Тормош ҡәҙерен белгәнгә лә,*
*Өлгө булдың һәр эштә.*
*Күпме йәнгә тылсым өрҙөң,*
*Тыумыштан һин — фәрештә.*
*Ҡылъан изгелектәреңде*
*Татыъандар тоялыр.*
*Изге йәнле әүлиәләр*
*Быуатҡа бер тыуалыр.*

## *Һөйөнөрлөк*

Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы
Эльмира Әминеваға

*Ышаныслы дуҫтарың бар,*
*Бөрйәнең бар, илең бар.*
*Ошо ерҙә үҫкәнгәме,*
*Моңло, рухлы телең бар.*
*Хоҙай биргән буй-һының бар,*
*Тылсым биргән телеңә.*
*Ғүмереңде баъышланың*
*Балаларъа, илеңә.*
*Хеҙмәтеңә баһа биргән*
*Ғорур халҡың, ереӊ бар.*
*Мәърифәт донъяһында*
*Һөйөнөрлөк телең бар.*

## Ҡәрҙәштәр

*Сәләм һеҙгә, әй дуҫтарым,*
*Алыҫ-алыҫ ерҙәрҙән —*
*Сит тарафта ғүмер иткән*
*Аҫыл-аҫыл ирҙәрҙән.*
*Сәләм һеҙгә еткерәйем*
*Йөрәгемдең түренән.*
*Һеҙҙе тағын күрмәй китһәм,*
*Ҡабат нисек күренәм?*
*Сәләм һеҙгә, әй туғандар,*
*Мине көтөп торғандар.*
*Алсаҡ күңел менән һәр саҡ*
*Һыйлы табын ҡорғандар.*
*Сәләм һеҙгә, әй дуҫтарым,*
*Йәндәй күргән серҙәштәр;*
*Ғүмер юлын бергә үткән*
*Беҙ бит әле — ҡәрҙәштәр!*

## Күңел йәш

*Маңлайҙар һырланһа ла,*
*Сал баҫһа ла сәсемде,*
*Ҡай берәүҙәр әллә ниңә*
*Ҡат-ҡат һорай йәшемде.*
*Таң ата ла кис була,*
*Ғүмер үтә, йәш ырай:*
*«Әйтсе, сере ниҙә икән —*
*Һиндә һаман йәш сырай», —*
*Тиеп дуҫтар шаярталар,*
*Белһәләр ҙә йәшемде.*
*Ғүмерҙәр үткән һайын шул*
*Күңел мәңге йәш инде.*

## Талҡаҫ

*Сал ҡаяла бөркөт саңҡый,*
*Һыҙылып таң атҡас та.*
*Быйыл яҙҙар иртә килде*
*Ирәндектә — Талҡаҫта.*
*Аҡҡоштар ҙа ҡайтты инде*
*Йәмле Талҡаҫ буйына.*
*Күңелемде хискә күмеп,*
*Аҡҡош һыуҙа ҡойона.*
*Талҡаҫ, Талҡаҫ! Оноталмам*
*Йәшнәп килгән яҙҙарын.*
*Мин ҡайтһам да, киләм әле:*
*Көтә мине эштә уңған*
*Һаҡмарымдың ҡыҙҙары.*



**Камил ФАЗЛЫЙ**

# Ел осорған ауыл

**САТИРИК ПОВЕСТЬ**

1

Франгиза Сәғитовна – математика уҡытыусыһы. Вуз тамамлап килеп, Тәпәләп ауылына урта мәктәпкә эшкә урынлашыуына ла ике тиҫтә йыллап ваҡыт уҙған. Эшен еренә еткереп башҡара ул. Уҫаллығы ла бар. Ғәҙеллекте ярата. «Дөрөҫлөк һинең яғыңда булһа, ҡырҡ мең кеше ҡаршы торһа ла, ҡурҡма», – тигән ныҡлы ҡараштан сығып эш итә. Хәҡиҡәт өсөн судлашырға ла күп һорамай, тегендәй-былдай түрәләр алдында ла баш эйеп йөрөй торған заттан түгел. Шуға күрә үҙен ауыл халҡы ла, коллегалары ла, уҡыусылар ҙа хөрмәт итә. Ләкин хөрмәттең дә төрлө сорттары бар: ысын йөрәктән хөрмәт, яһалма хөрмәт, дуҫтарса хөрмәт, ҡурҡыу ҡатыш хөрмәт... Бына һуңғыһы тап Франгиза Сәғитовнаға ҡағыла ла инде. Миҫалға уҡыусылар араһындағы һөйләшеүҙе ишеттереү ҙә етәлер тип уйлайым:

– Малайҙар, «матем»дан кем өй эшен эшләне? Күсерергә бирегеҙ әле, әтүһә Франция, дәрестән һуң алып ҡалып, нервыла уйнаясаҡ. Үҙегеҙ беләһегеҙ, о-о, крутая!

«Франция», әлбиттә, – уҡыусылар араһында Франгиза Сәғитовнаға тағылған ҡушамат.

– Берегеҙ ҙә эшләмәнеме ни?! Улайһа бөгөн дә төштән һуң футбол уйнап булмай инде... Ә һин, Уйҡыя, нимә ҡараның? Ҡыҙ башың менән ялҡауланаһың. Тырышҡан – таш ватҡан, тиҙәр. Ниңә таш ватмайһың?

– Һеҙ малай башығыҙ менән ватмағанға күрә! – Ҡыҙыҡай, ауыҙын бүлтәйтеп, малайҙарға телен күрһәтте лә ситкә китте.

Бына бөгөн дә Франгиза Сәғитовна, ғәҙәттәгесә, мәктәптән бер ҡулына –

---

*Камил Фазлый (Фазлетдинов Камил Нәжми улы, 1949) Бәләбәй районының Тоҙлоҡуш ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай, тыуған ауылында уҡыта. БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзаһы, биш юмористик китап авторы.*

ҡосаҡ дәфтәрҙәр, икенсеһенә ауыр сумкаһын күтәреп Үҙәк урам буйлап һуң ғына ҡайтып килгәндә, тирә-йүндә ниндәйҙер үҙгәреш һиҙгәндәй, уйҙарынан бүленде. Уйҙарынан бүлеүсеһе ҡайҙа баҡһаң да биҙәнеп ултырыусы май айының ҡупшы ағастары муйыл, сирендәрҙән аңҡыған хуш еҫтәргә ҡушылған буяу еҫе ине. Уҡытыусы туҡтап, үткер ҡарашы менән донъя йөҙөн байҡаны. Ҡапыл күңеле күтәрелеп китте: бөтә ҡоймалар ҙа зәңгәр төҫкә буялып, ялт итеп балҡып тора. Урамдың ике яғынан, гүйә, зәп-зәңгәр шишмәләр сылтырап ағып ята.

«Самат Сәлимовичтың тырышлығы был. Рәхмәт үҙенә. Һүлпәнерәк ҡыланһа ла, ҡулынан килгән, – тип уйлап ҡуйҙы ул күңеленән, ауылдың хакимиәт башлығы тураһында яҡшы фекер туплап. – Зыярат ҡоймаларын да ул яңыртты. Ете класс белеме менән дә алдыра егетең. Вуз белеме алғандарҙың да күптәре хужалыҡ эшен тарта алмай».

Ана теге башта бер нисә ҡатын-ҡыҙ, көлөшә-көлөшә, бумала тотоп ҡойма буяй. Тауыштары ел ағышына ап-асыҡ булып бында тиклем ишетелә. Ел көсәйә барып, ағас япраҡтарын да шыбыр-шыбыр һөйләндерә, Франгиза Сәғитовнаның косынкаһын да тартҡылай.

«Ярай, ҡоймамды буяп өлгөрмәгәйнем әле. Ә бит һарыға манырға ине иҫәп», – ошо уйҙар менән ул үҙе йәшәгән тыҡрыҡҡа боролдо. Ләкин унда бер үҙгәреш тә күрмәне. Үҙ йорто ла, тыҡрыҡты тыҡрыҡ яһап торған ҡалған биш-алты йорт та әүәлгесә ҡояшта ашалған ҡайһы йәшел, ҡайһы һары, ҡайһы ҡыҙыл ҡоймалы. Күрәләтә бындай ғәҙелһеҙлек ғүмере буйы йәш быуынды ғәҙеллеккә өйрәткән уҡытыусының йөрәген тетрәтте.

«Ә, бәлки, өлгөрмәгәндәрҙер, иртәгә буяйҙарҙыр», – тигән өмөт саҡҡылары үтте уйынан.

Франгиза Сәғитовна тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға ярата. Иртәгәһе көндө көтөп торманы ул, мәсьәләгә бөгөн үк, хатта минуты-секунды менән асыҡлыҡ индерергә булды. Ул, өйөнә лә инеп тормайынса, сумка-дәфтәрҙәрен күтәрмә өҫтөнә ҡуйҙы ла тура буяусылар эргәһенә китте. Юлында һәр бер тыҡрыҡҡа күҙ һалды: Пролетар тыҡрығы ла, Һаҙламыҡ менән Мәктәп тыҡрыҡтары ла, һуғышта ирҙәре ятып ҡалған тотош тол апайҙар йәшәгән Хәтер тыҡрығы ла буялмаған.

Һаулыҡ һорашҡас та, Франгиза Сәғитовна һүҙҙең ағышын үҙен борсоған төп мәсьәләгә борҙо:

– Ҡыҙҙар, Үҙәк урамдың ҡоймаларын буяп бик тә матур иткәнһегеҙ. Ә бына тыҡрыҡтарҙы ниңә ҡалдырҙығыҙ, әллә иртәгә буярға уйлайһығыҙмы?

– И-и, беҙҙән генә торһа икән ул, – тип яуапланы мәҙәниәт йортонда техничка булып эшләүсе Зөбәйҙә. – Ҡоймаларҙы ғына түгел, тотош ауылды буяп сығыр инек. Тәпәләп, исемен алмаштырып, Зәңгәркүл ауылына әйләнер ине. Нәсәлство нисек бойора, шуны үтәйбеҙ.

– Нәсәлство бойорһа, өйөңдөң түбәһен дә буяп төшөрбөҙ, ялт итеп торор, – тип Зөбәйҙәнең һүҙен ҡеүәтләне мәҙәниәт йорто методисы Тәлиға. – Ана, Самат Сәлимовичҡа мөрәжәғәт итегеҙ, – ул хакимиәт бинаһынан сығып, был яҡҡа табан атлаусы ауыл хакимиәте башлығына ишараланы.

– Һаумыһығыҙ, Франгиза Сәғитовна! – Башлыҡ аҡ бейсболкаһын һалып, маңлайына бөрсөк-бөрсөк бәреп сыҡҡан тирҙәрҙе шаҡмаҡлы ҡулъяулығы менән һөрттө.

– Һаумыһығыҙ, Самат Сәлимович!

– Йә, беҙҙең башҡарған эштәребеҙ Һеҙгә оҡшаймы? Ниндәй баһа ҡуйырһығыҙ? – тип һораны башлыҡ, йылмайып.

– «Икеле», – тине уҡытыусы, күҙ ҙә йоммай.

– «Икеле?» – Башлыҡ, аптырап, ауыҙ асҡан килеш ҡалды. – Хараша. Ни өсөн?

– Үҙегеҙ ҙә белеп тораһығыҙ. – Франгиза Сәғитовнаның йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Юҡ, оялыуҙан түгел, башлыҡтың белмәмешкә һалышыуына асыуы ҡабарып. – Үҙәк урамды буяғанһығыҙ, ә тыҡрыҡтарҙы ҡалдырғанһығыҙ!

– Ә... бына Һеҙ нимә тураһында... Хараша, аңлатып бирәм. Эш былайыраҡ тора бит, Франгиза Сәғитовна, – Самат Сәлимович түңәрәк башындағы аҡ бейсболкаһын маңлайына табан этеп, киң елкәһен ҡашып ҡуйҙы: – Иртәгә ауылға оло нәсәлство килеүе көтөлә. Үҙегеҙ беләһегеҙ: яңы мәҙәниәт йортон төҙөп бөттөк. Бына хәҙер ҡыҙыл таҫманы киҫеп, ишектәрен асып инергә лә бейеп-йырлап ғүмер итергә... Нәсәлство район үҙәгенән генә түгел, баш ҡаланың министрлығынан да килә икән. Ә лимит буйынса ҡоймаларҙы буярға бирелгән буяу самалы. Шуға күрә етәкселәр күҙенә салынаһы Үҙәк урамды ғына матурларға булдыҡ. Тыҡрыҡтарға буяу ҡалманы.

Был яуап, әлбиттә, уҡытыусыны ҡәнәғәтләндермәне.

– Урамды буя, тыҡрыҡтарҙы ҡалдыр, имеш. Күҙгә төртөп торған ғәҙелһеҙлек! – тине Франгиза Сәғитовна, тағы ла ҡыҙа төшөп. – Ә беләһеңме, кемдәр йәшәй унда? Фронтта, яу ҡырында ирҙәре башын һалған инәйҙәр, ауыр һуғыш йылдарында илебеҙгә еңеү өлөшө индергән тыл батырҙары, Афғанда, Чечняла ҡан ҡойоп, яраланып, инвалид булып ҡалған егеттәребеҙ... Бына үҙегеҙҙең ҡоймағыҙҙы, тыҡрыҡта ултырһа ла, буятҡанһығыҙ бит.

Хакимиәт башлығының битен аҡлы-ҡыҙыллы тимгел-тимгел бөрсөктәр ҡапланы:

– Минең йортом тыҡрыҡтың был башында, йәғни килгән ҡунаҡтарға күренеп тора. Бәлкем, өйгә инеп, сәй эсеп тә сығырҙар, кем белә, – тине ул. – Үҙ аҡсама һатып алып буяйыммы ни һуң?

– Һеҙ – ха-ки-ми-әт! Табығыҙ! Халыҡты сорттарға айырмағыҙ! Урынығыҙҙа мин ултырһаммы, әғүҙи биллаһи, табыр инем дә, буятыр инем дә! – тип төкөрҙө уҡытыусы, әсенеп.

Эх, алдан белгән булһа икән Франгиза Сәғитовна был төкөрөктөң ниндәй хафаларға илтәсәген. Әллә ҡайҙан бөтөрөлөп сығып көсәйеп киткән ел ергә осоп төшөп барған төкөрөктө күтәреп алып, хакимиәт башлығының битенә сәпәне.

Ҡулы аҫтында эшләүсе хеҙмәткәрҙәре алдында көтөлмәгән хәлдән оятҡа ҡалған башлыҡтың күңелендә ажғырғыс февраль бурандары уйнаны. Шулай ҙа ул үҙен сабыр тотор көс тапты:

– Күрҙегеҙме?! – тине, төкөрөктө пинжәгенең еңе менән һөртөп.

– Эйе, – тинеләр, ҡурҡышып, Зөбәйҙә менән Тәлиға, улар менән бергә малярлыҡ итеүсе китапханасы Динә, мәктәптән ярҙамға ебәрелгән социаль педагог Ҡәмәр, химия уҡытыусыһы Мәстүрә. – Эйе. – Шаһиттар ҙа күп икән...

– Һеҙгә төкөрөргә теләмәгәйнем, ел ғәйепле бит, – тип тәүҙә Франгиза Сәғитовна хакимиәт башлығынан ғәфү үтенергә лә теләгәйне, ләкин, тегенең шаһиттар йыйыуын күреп, зәһәр йылмайыу менән өндәшмәҫкә булды.

– Иртәнән бирле бөтә нәмә арҡыры тора. Тфү, шайтан! – тип ләскелдәтеп ергә төкөрҙө Самат Сәлимович. Абынып йығылырымды алдан белгән булһам, аҫтыма мендәр һалған булыр инем, тигән бераү. Һуң, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: ергә осҡан төкөрөк шундуҡ Франгиза Сәғитовнаның ел ҡабартып алға этәргән күлдәк итәгенә килеп төшһөн инде! Бына ҡайҙа ул тантана! Уҡытыусының йөҙө хатта яҡтырып уҡ китте:

– Ҡыҙҙар, шаһит булырһығыҙ: Самат Сәлимович мине «шайтан» тип мыҫҡыл итте һәм итәгемә төкөрҙө. – Ошо һүҙҙәр менән уҡытыусы, уҡыусыларға картина күрһәткәндәй, итәген йәйеп, төкөрөктө ҡойма буяусыларға күрһәтеп сыҡты. –

Тиҫтә йылдар бергә йәшәп, иремдән дә бындай яманлыҡты күргәнем булманы.

– Һеҙҙең менән телгә тел килешеп башты төрмәгә тығырға мөмкин, – тип ҡул һелтәне Самат Сәлимович һәм малярҙарға бойороҡ бирҙе: – Зөбәйҙә! Хәҙер үк биҙрәңдәге буяуың менән Франгиза Сәғитовнаның ҡоймаһын буяп кил. Өнө тығылһын. Ярҙамға Тәлиғаны ла ал!

– Ярай, ярай. Ә ҡалған өйҙәрҙекен?

– Юҡ! Бары тик ошо ҡомһоҙ уҡытыусыныҡын!

Был һүҙҙәр Франгиза Сәғитовнаға төкөргән ише генә түгел, башына күҫәк менән тондорғандай тәьҫир итте. Ул иҫәңгерәне, күҙ алдары ҡараңғыланды. Һуң, шулай булмай ни, үҙе өсөн тырышамы ни ул, халыҡ өсөн бит! Уҡытыусы, үҙен үҙе белештермәй, Зөбәйҙәнең ҡулынан буяулы силәкте тартып алды ла Самат Сәлимовичтың башына кейҙерҙе. Уҡытыусынан быңдай уҡ криминаль еҫе аңҡыған хәлде көтмәгән башлыҡтың түңәрәк башын ярым ҡаплап торған аҡ бейсболкаһы буяуға мансылап, ергә шыуып төштө, сөм-ҡара сәстәре лә, вельвет костюмы ла, тулышып ҡыҙарған бите лә яңы буялған ҡойма төҫөнә инде. Бераулыҡ ул ни эшләргә белмәй өнһөҙ торҙо, теле тотлоҡто, бушап ҡалған силәкте башынан тартып алып, ергә ҡуйҙы:

– Ха-ра-ша! Һыйыр тулаһа, аттан уҙыр. Әҙәм тулаһа, эттән уҙыр. – Ул салбар кеҫәһенән шаҡмаҡлы ҡулъяулығын алып, тәүҙә ауыҙ тирәһенән, унан күҙ ҡабаҡтарынан буяуҙы һөртөп алды. Ҡаршыһында берсә ҡурҡышып, берсә түрәнең тышҡы ҡиәфәтенән көлөүҙәрен саҡ тыйып тороусы малярҙарға ҡарап, һүҙен оҙаҡҡа һуҙыуҙы кәрәкһеҙ тапты:

– Быңа күрҙегеҙ. Бөтәгеҙ ҙә понятой булырһығыҙ. Этенән дә, бетенән дә үҙемде мыҫҡыл иттерә алмайым! Был криминалға нөктә ҡуйырға кәрәк! – Артабан һүҙ көрәштереүҙең мәғәнәһеҙ икәнлеген аңлап, ул тәүәккәл аҙымдар менән хакимиәт бинаһына инеп китте лә милиция бүлегенә шылтыратты.

Ярты сәғәтләп ваҡыт үткәндерме-юҡмы, мигалкаларын яндырып, сиреналарын үкертеп, ҡаланан ауылға милиция машинаһы килеп тә етте. Тәүҙә ул хакимиәт бинаһына килде, унан тура Үлмәҫколова Франгиза Сәғитовна йорто ҡаршыһына барып туҡтаны. Өйөнә ҡайтып, тынысланыу түгел, көндөҙгө ашын да ашарға өлгөрмәгән уҡытыусыны, ай-вайына ҡуймай, тәртип һаҡсылары милиция бүлегенә алып та киттеләр.

Кесе йәшенән пионер, комсомол ойошмаларын етәкләп үҫкәнгә, төрлө рангылағы чиновниктар менән аралашҡанға һәм, әйтергә кәрәк, ҡырыҫ тәбиғәтле совет мәктәбендә заман һулышын тойоп сыныҡҡанға, бөгөнгө властар ҡаршыһында Франгиза Сәғитовна бөгөлөп төшмәне:

– Дөрөҫлөк барыбер еңәсәк! Йөҙ яуыҙлыҡты бер дөрөҫлөк еңә, докажу! – тип ҡысҡырҙы ул пистолетлы, погонлы бәндәләргә, ярым урыҫсалатып һәм, башын ғорур тотоп, юғары сөйөп, «Варшавянка»ны йырлай-йырлай, машинаға инеп ултырҙы. Йыр тауышы машина ауылдан сығып киткәнсе ишетелде:

*...Вихри враждебные веют над нами,*
*Темные силы нас злобно гнетут...*

Ошо хаҡта уҡытыусыны оҙатырға сыҡҡан күршеләре һөйләне.

2

Мәктәп директоры кабинетында телефон шылтыраны.

– Тәпәләп мәктәбе директоры Мөслим Надирович Яушев тыңлай! – тине, трубканы күтәреп, сәсен бер яҡҡа ҡырын һалып «Йәшлек» прическаһы яһатҡан утыҙ – утыҙ биш йәштәрҙәге ир заты.

– Һаумыһығыҙ, Мөслим Надирович! Был мин – урындағы хакимиәт башлығы.

– Һаумыһығыҙ, Самат Сәлимович! – Гүйә, бүлмәһенә башлыҡ үҙе килеп индеме ни: ултырғысын артҡа этеп, ул аяғүрә тороп баҫты. – Һеҙҙе, хөрмәтле Самат Сәлимович, тауышығыҙҙан уҡ танып торабыҙ. Бөтә зиһенем менән тыңлайым Һеҙҙе...

Трубка бер аҙға тынып торҙо.

– Алло! Алло!

– Нисек унда, иртәгәһе тантаналы сараға, ҡунаҡтарҙы ҡаршыларға әҙерһегеҙме?

– Ә-ә-ә...

– Уҡыусыларҙы әҙерләнегеҙме, тимен?

Оло түрәме ул, кесеһеме – үҙенән өҫтәгеләрҙән ҡурҡа торған ғәҙәте бар Мөслим Надировичтың. Өҫтән ниндәй бойороҡ төшһә лә, сәғәте-минуты менән үтәргә әҙер. Әгәр юғарынан «һыуы ҡайнап торған ҡаҙанға һикер!» тиһәләр, ыһ та итмәй һикерәсәк. Әле лә ҡаушау ҡатыш яуап бирҙе:

– Еңһыҙғанып әҙерләнеп ятҡан көн, Самат Сәлимович. Йыр, бейеү, шиғыр номерҙарынан торған бынамын тигән монтаж әҙерләнек.

– Хараша. Уныһы яҡшы. Әммә ләкин минең Һеҙгә әйтә торған бик важный сообщение бар. Имынны Һеҙгә үпкә белдерәм һәм имынны Һеҙгә бойороҡ та бирәм.

– Бер нәмә лә аңламайым, Самат Сәлимович, мөмкин булһа, асыҡлабыраҡ һөйләгеҙ әле. Ниндәй үпкә ул? Һеҙҙе үпкәләтерлек эштәр ҡылманым шикелле. Бирегеҙ бойороҡто, үтәрмен. Һеҙ тигәндә – мин иҙәндә...

– Хараша, аңлатып бирәм. Уҡытыусыларығыҙ менән абсолютно эшләмәйһегеҙ бит, бөтөнләй тәртәнән сыҡҡандар! Нәсәлствоға ҡул күтәрәләр. Әле генә береһен төрмәгә оҙаттым...

– Ғәфү,.. кемде? – Шаҡ ҡатмалы хәбәрҙән ҡаушап ҡалған директорҙың ҡулынан ручкаһы төшөп китте.

– Франгиза Сәғитовнағыҙҙы! Үҙенең урам ҡоймаһын буятмаған өсөн ул тәүҙә битемә төкөрҙө, унан башыма бер биҙрә буяу кейҙерҙе. Не хараша бит. Понятойҙар етерлек – бөтә халыҡ күрҙе. Әле лә өҫ-башымдан буяу тамып тора. Кисекмәҫтән үҙен статьялап эштән ҡыуырға кәрәк!

Бойороҡто ишеткәс, Мөслим Надировичтың башында вулкан ҡайнаны. Ҡайнар ҙа, сөнки, беренсенән, ете класс белемле мужик һиңә, йәғни юғары белемле етәксегә, приказ биреп ултырһын, етмәһә, һин уны еренә еткереп үтәргә тейешһең. Икенсенән, үтәмәһәң, был буйһонорға теләмәй тип, үҙеңде лә креслоңдан осороуҙары мөмкин. Өсөнсөнән, эшенән бушатҡан хәлдә, әрһеҙ математик барыбер тынғы бирмәйәсәк. Бына ошондай ике ут араһында ҡалды директор.

– Һеҙҙең бойороҡҡа нимә тип яуап бирергә белмәйем. Башҡа һыймаҫтай хәл. – Мөслим Надирович үҙе лә һиҙмәҫтән ҡолаҡ артынан бер ус сәсен йолҡоп алды. Ә хакимиәт башлығының тауышы күтәрелгәндән-күтәрелә барҙы:

– Башҡа һыймаҫтай хәл, тиһегеҙ. Ләкин биҙрәне һыйҙырҙы бит башыма.

– Уныһы шулайын шулай ҙа... Франгиза Сәғитовнаға уҡытыу өлкәһендә бәйләнерлек урын тапмайым: дәрескә ваҡытында килә, белем кимәле һәйбәт, дәфтәр-пландары тәртиптә, – тип ҡарыулашты директор.

– Мөслим Надирович! – Трубкалағы тауыш ҡолаҡ барабанын ярырҙай булып яңғыраны. – Миңә ҡалһа, кеше битенә төкөргән, етәксегә ҡул күтәргән кешенең йәш быуынды тәрбиәләргә хоҡуғы юҡ.

– Ыһы...

– Шуға өҫтәп, «Уҡытыусылары ниндәй – директоры ла шундай» тигән халыҡ

мәҡәле лә бар. Тәрбиә Һеҙҙең арҡала аҡһай ҙа баһа. Һеҙ армияла хеҙмәт иттегеҙме?

«Ҡара әле һин уны, мине директорлыҡтан бушатып, армияға оҙатырға уйлай микән ни?»

– Ике йыл хеҙмәт иттем, – тип яуапланы ул.

– Хараша. Приказ нәсәлникә – закон для подчиненного. Подчинятса итергә өйрән, йәғни хәҙер үк ул енле бисәне эшенән алып ат! Аңланыңмы?

– Аңланым. Тимәк, Һеҙҙең һүҙҙәргә таянып, Үлмәҫколова Франгиза Сәғитовнаны эшенән бушатыу тураһында приказ яҙам. – Директор, ауыр һулап, телефон трубкаһын һалды.

3

Оло юлдан, ауылға табан осоп барған аҡҡоштар кеүек, бер-бер артлы теҙелешеп килеүсе машиналар колоннаһы күренде. Иң алдан, мигалкаларын яндырып, милиция машинаһы, уның артынса бер нисә яңы аҡ «Волга» күпер уртаһында икмәк-тоҙ менән ҡунаҡтарҙы ҡаршы алыусы халыҡ эргәһенә килеп туҡтаны. Тәртип һаҡсылары, өркөшөп торған ағай-энеләрҙе артҡа ҡыҫырыҡлап, машинанан төшөүсе етәкселәргә юл асты.

Гармун, ҡурай моңдары аҫтында ҡунаҡтар биҙәкле таҫтамал өҫтөнә һалынған икмәк-тоҙҙан, аҙ ғына әскелтем «зәм-зәм» һыуы өҫтәлгән ҡымыҙҙан ауыҙ иттеләр. Кистән махсус рәүештә Самат Сәлимович, техничка Зөбәйҙәгә әйтеп, һәр сирек ҡымыҙға берәр шешә «зәм-зәм» һыуын өҫтәп һалырға ҡушҡайны. Бирелгән нарядтың үтәлеү-үтәлмәүен иртән иртүк үҙе тикшерергә лә онотманы.

– Нисек, мин әйткәндәрҙе үтәнеңме? Ҡымыҙҙың ҡеүәтен арттырҙыңмы, тип һорауым.

– Арттырмаймы һуң! Араҡы ла өҫтәнем, «төндә тыуған»ды ла ҡуштым.

– Хараша, – тип ҡәнәғәтлек белдерҙе хакимиәт башлығы, эселгән бер көрөшкә ҡымыҙҙың күңелен күтәреүен самалап. – Һин нисек тә ҡунаҡтарҙың ауыҙын ошоноң менән нығыраҡ «майларға» тырыш. – Ул муйынына тағылған галстук осо менән ауыҙ ситен һыпырып ҡуйҙы.

– Ауылға аяҡ баҫыу менән, үҙҙәрен ҡымыҙҙы тәрән фужерҙарға һалып һыйлаясаҡбыҙ, Самат Сәлимович.

– Хараша, килештек.

Ысынлап та, ҡунаҡтарҙы ихлас күңелдән ҡыҫтай-ҡыҫтай һыйланы ошо сараға беркетелгән, уның тейешле кимәлдә үтеүе өсөн яуаплы хеҙмәткәрҙәр. Техничка Зөбәйҙә лә, методист Тәлиға ла, ҡумыҙсы Исрафил да, гармунсы Миңлебулат та, музыка аҫтында күбәләктәй осоп бейей-бейей, таҡмаҡтар әйтте:

*Әйҙә, бейергә төшәйек,*
*Уйнат, егет, ҡумыҙҙы.*
*Күтәрелһен күңелегеҙ,*
*Йә, эсәйек ҡымыҙҙы!..*

Өфөнән килгән вәкил дә, район хакимиәте башлығы ла, башҡа ҡунаҡтар ҙа йола шарттарын тейешенсә еренә еткереп үтәргә тырыштылар: ҡымыҙҙан да ауыҙ иттеләр, ябай халыҡ менән күңелле аралашып, бейергә лә төшөп киттеләр.

Яңы мәҙәниәт йортон асыу тантанаһы ишеккә арҡыры бәйләнгән ҡыҙыл таҫманы киҫеү йолаһы менән башланды. Әлбиттә, ундай ҙа үтә яуаплы бурысты Өфөнән килгән вәкилгә тапшырҙылар.

Ҡулына ҡайсы тотоп, таҫманы киҫер алдынан, өлкә ҡунағы йыйылыусылар алдында сығыш яһаны:

– Хөрмәтле әфәнделәр! – тине ул, һүҙҙе артыҡ оҙонға һуҙмайынса, кәлүш һөйрәп килгән халыҡҡа мөрәжәғәт итеп. – Һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә яңы мәҙәниәт йортон асыу тантанаһы менән ихлас ҡотлайым. Был йортта мәҙәниәт уты, культура усағы бер ҡасан да һүнмәһен. Хәйерле сәғәттә! – Ошо йылы һүҙҙәр менән ул, таҫманы киҫеп, бер киҫәген ҡала һәм район хакимына, икенсеһен Самат Сәлимовичҡа тапшырҙы. Унын артынса район үҙәгенән килгән башҡа абруйлы ҡунаҡтар ҙа, береһенән береһе уҙҙырып, яңы йортҡа мәҙхиә уҡынылар. Сығыштарҙың һәр береһе көслө алҡыштарға күмелде. Әллә ҡунаҡ һыйы ауыл халҡының да ауыҙын ситләп үтмәгән – тирә-йүн шаян көлкө, күтәренке кәйеф аҫтында шаугөр килеп торҙо.

Бары ауыл башлығы трибуна артына сығып һүҙ башлағас ҡына, гөрләп торған халыҡ, бер мәлгә, ауыҙға һыу уртлағандай, тынып ҡалды. Әллә Самат Сәлимовичтың килештереп һүҙ һөйләүенә ҡолаҡ һалды ағай-эне, әллә зәңгәр сәсле башын күреп һушынан яҙҙы, белмәҫһең. Эйе, әллә нисә төрлө шампунь менән дә, һабын ышҡып та ҡат-ҡат йыуып ҡарағайны буяу йәбешеп ҡатҡан сәстәрен Самат Сәлимович: кисен дә, иртән әтәстәрҙән алда уянып көтөү киткәнсе лә, көтөү ҡыуғас та, тик сәстәр генә һаман зәңгәр күктәй зәңгәр килеш ҡалды. Ҡатыны Әнисәнән, хатта, бер мәл сәстәрен үткер бәке менән ҡырҙырып алдырырға ла уйлағайны, тик был уйынан кире ҡайтты. Ниндәй генә төҫкә инмәһен, сәс бит әле ул! Сәстәреңдән бер ҡолаҡ ҡаҡһаң иһә, ҡолаҡ артын күреп булмағандай, яңынан өс-дүрт айһыҙ ҡулға тараҡ алам тимә. Дөрөҫ, битендәге буяуҙарҙы Әнисәһе оҙон тырнаҡ остары менән, ауырттырып, йәрәхәтләп булһа ла, ҡуптарып төшөрҙө, артынан эйәк остарына тиклем хуш еҫле крем өйкәп ҡуйырға ла онотманы.

– Иптәштәр! – тип һүҙ башланы Самат Сәлимович, тамаҡ ҡырып. – Бына күрәһегеҙ: яңы мәҙәни һарайлы булдыҡ. Элек, совет осоронда, клуб бар ине. Ағай-эне баҡсаһында клубника үҫтереп, шул йортта клубника һатып аҡса эшләй ине. Шуға клуб тип атағандар уны. Ә бына һарайға килгәндә, ауылыбыҙҙа ат һарайы ғына бар ине. Колхоздарҙы тараҡҡас, ул һарай ҙа аттары менән бергә юҡҡа сыҡты. Нәкәнис, бына бөгөн халыҡҡа ла һарай төҙөнөк. Мәҙәни йорт тип атала. Харашамы был? Хараша! Хәҙер уйна ла бейе, башҡаһын да майтар. Ләкин, хакимиәт башлығы буларaҡ, ҡәтғи әйтәм: төнгө яҡта... Эсеп килеп, унда һуғышып, күҙ сығарып ятмайыҡ. Конюх Бадыхшан ағай ат һарайын нисек бөхтә тота ине, иҫегеҙҙәме?! Мәҙәниәт һарайы ла ат һарайынан бер яғы менән дә ҡалышмаһын! Ә көндөҙ ең һыҙғанып эшләргә, ипәштәр!

Шул саҡ ҡала ҡунағы еткергән наказ, авиапочта шикелле, ҡылт итеп Самат Сәлимовичтың иҫенә килеп төштө. Хәҙер ул «Наказығыҙҙы тейешенсә үтәрбеҙ!» тип әйтергә тейеш тә баһа. Нимә тигәйне әле? Эй, был тишек хәтерҙе, иҫкә төшмәй тора... «Усаҡ...усаҡ һүнмәһен... Культура усағы...» «Нимә ул культура? – Башы, компьютер кеүек, шалт та шолт яуап эҙләй. – Тә-әк. Культура – ул гәзит-журналдар, китаптар, бейеү, йыр... Бейеү менән йырҙы, әлбиттә, усаҡҡа яғып булмай. Былары отпадает... Гәзит-журнал, китап яғырғамы? Ә ниңә утын яҡмаҫҡа, брикет, күмер ҙә етерлек... Ғөмүмән, йылытҡыс торбалар үткәрелгән мәҙәниәт йортона ни бысағыма кәрәк икән ул усаҡ, янғын сығарырғамы ни?!» Баш та әйләнә, уға эйәреп күҙҙәр ҙә орбитанан сығырҙай булып зырылдап әйләнә. Ә яуапты ыңғай биреү һорала. Ниһайәт, ул күтәренке рух менән телмәрен дауам итте:

– Усаҡты беҙ уны, хөрмәтле етәкселәребеҙ, бер ҡасан да һүндермәҫкә һүҙ бирәбеҙ. Мәҙәни усаҡҡа ла утын, күмер өҫтәп торорбоҙ. Ишек алдында ла айлы кистә усаҡ яғып, күктәге йондоҙҙарға ҡарап, һанап ултырырбыҙ. Ә бына

мәҙәниәт йортона мотлаҡ рәүештә йыйнаҡ ҡына бер мөрйә сығарып ҡуйырға бөтәгеҙ алдында вәғәҙә итәм. Торбаһы ла йылытһын, мөрйәһе лә. Килештекме? Хараша.

Сығыш тамамлағандан һуң оҙайлы алҡыштар, яҙғы ташҡындай, тиҙ генә тынманы.

– Һай, маладис! Һай, афарин! Башың юморлы икән. – Ҡунаҡтарҙың ҡайһылыр хатта Самат Сәлимовичты арҡаһынан һөйөп ҡуйҙы.

Маҡталыуҙан ҡәнәғәт йылмайыусы хакимиәт башлығының ауыҙы ҡолағына етте:

– Эйе, башым тыуғандан бирле йомро, – тине ул, ҡунаҡтың һүҙен йөпләп. – Шуға унда кәпәс тә йүнле-рәтле тормай, шыуа ла төшә. Мәктәптә уҡыған йылдарҙа тиҫтерҙәрем мине гел генә «Ҡабаҡ баш» тип йөрөтәләр ине.

Кисәнең тантаналы өлөшө тамамланғас, ҡунаҡтарҙы табын артында һыйлау ғәҙәте бар. Тәпәләплеләр ҙә был изге йоланан ситкә тайпылманы. Рюмкаларға «Федор Шаляпин» шешәләренән хәмер ҡойола, этикеткаһына һайрар ҡоштар ҡунаҡлаған оҙон муйынлы «Калина»лар үҙ сиратын көтә. Арала йондоҙло «Наполеон» да ҡорһаҡ киреп ултыра. Ә закускаларҙың ниндәйе генә юҡ: заморский ҡыҙыл икра, уның эргәһендә табаҡ-табаҡ ҡаҡлаған ҡаҙ, бешкән өйрәктәр... Ауыҙҙы ғына ас – үҙҙәре осоп инергә әҙер торалар.

Самат Сәлимовичтың урыны тап министрлыҡ вәкиленең ҡаршыһына тура килде. Бай табын артында һүҙ байлығы ла ташып тороусан.

– Һеҙҙең башығыҙ – океан, – тине, һыйҙан ҡыҙарған йөҙөн балҡытып, өлкә ҡунағы.

– Рәхмәт ҙурлауығыҙға. – Эйе, кем генә үҙен маҡтағанды яратмай икән был фани донъяла. Иркәләп ҡолаҡ артын ҡашыһаң, һыйыр ҙа, муйынын һуҙып, рәхәтлек кисерә. Самат Сәлимович та һүҙен дауам итте:

– Хакимиәт эше үтә яуаплы. Шуға күрә глобаль масштабта, океандай тәрән фекерләргә тура килә.

– Юҡ, мин ул мәғәнәлә түгел. Сәстәрегеҙҙең зәңгәр төҫкә буялыуына ишара итеүем. Әллә берәй төрлө ойошмала ағза булып тораһығыҙмы?

Әле генә үҙен океанға тиңләгән өлкә ҡунағының маҡтау һүҙҙәренән ғорурлыҡ хисе кисереп ултырыусы Самат Сәлимовичтың ҡолағына ҡапыл күңелде йәрәхәткә һалған «зәңгәр» һүҙе килеп ингәс, кикреге шиңеп төштө. Шулай ҙа уға ҡунаҡтар алдында үҙен һынатмау бурысы йөкмәтелгән.

– Аңлап бөтмәнем, – тине ул, буяулы башын ҡашып.

– Ярай, тәрәндәнерәк аңлатайым. – Вәкил рюмкаһын бушатып, артынан тоҙлаған ҡыяр киҫәге ҡабып ҡуйҙы. – Хәҙер бит төрлө группалар, әкәмәт ойошмалар донъя тулы. Әйтәйек, скинхедтар, панктар, гел генә ҡара кейемдән йөрөүсе готтар, эмо, рэппер, металлистар... Мин «голубой»ҙар тураһында ла былай ишетеп беләм, ләкин улар бер ҡасан да сәстәрен зәңгәр төҫкә буятмайҙар.

Бындай һүҙҙәрҙе ишеткәс, Самат Сәлимович сәсен ҡырҙырмауына үкенеп тә ҡуйҙы, хатта кисә булған хәлдәрҙе һөйләмәй саҡ тыйылып ҡалды. Ярай әле, һүҙ дилбегәһен бында уҙған ваҡиғалар менән хәбәрҙар булған район хакимиәте башлығы ваҡытында үҙ ҡулына алды:

– Беҙҙең яҡтар шифалы шишмәләргә, йылға-күлдәргә бай. Һыу байлыҡтарын һаҡлау, экология йөҙөнән сығып, беҙҙең уңған Самат Сәлимовичыбыҙ «Зәңгәр һыу» ойошмаһы төҙөнө. Унда тиҫтәнән ашыу егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ ағза булып тора. Әйтәйек, ситтәр килеп күлдән рөхсәтһеҙ балыҡ тота икән, Самат Сәлимович бөркөттәре, пограничниктар кеүек, килеп тә етәләр, балыҡтарын тартып алып, күҙ алдында усаҡ яғып, бешереп тә ашайҙар. Бындай үтемле саранан һуң тегеләрҙең аяҡ эҙҙәре һыуына.

– Уйлап эш итәләр, әтнәке, молодцы! – тип хупланы өлкә ҡунағы.

– Бына ошо бөркөттәр, – тип дауам итте мэр, – бөтәһе лә сәстәрен зәңгәр төҫкә буяп йөрөй.

– Ләкин мин бында зәңгәр башлы бер Самат Сәлимовичты ғына күрәм. – Вәкил, ата ҡаҙ шикелле, башын юғары һуҙып, тирә-йүнде байҡаны. – Ҡалғандары ҡайҙа?

– Бөгөн беҙҙә экологик өмә уҙғарыла. Шуға күрә ҡалғандар бөтәһе лә шишмә баштарын сүп-сарҙан таҙартып, буралап йөрөйҙәр.

– Бындай хеҙмәт һөйөүсән халыҡ алдында мин билгә тиклем баш эйәм, – тип өлкә ҡунағы аяҡ өҫтө тороп баҫты, ләкин түбәтәй аҫтына күберәк «тейәгәнлектән», аяҡтары йомшарып китте, һәм уны, башын аҫҡа һалындырған килеш, ике яҡтан ике кеше ҡултыҡлап, халыҡты йырып, машинаға һалып оҙаттылар. Ә ул ни өсөндөр бәләкәстәр генә йырлай торған «Голубой вагон»ды йырлап китте.

4

Милицияның дежур бүлегенә килтергәс тә, Франгиза Сәғитовна нәсәлник менән осраштырыуҙарын талап итте. Ләкин ҡыҙыл бәйләмес таҡҡан дежур лейтенант та, уның ярҙамсыһы кесе сержант та һүҙҙе ҡоро тотто:

– Етәкселәрҙең эш сәғәте сыҡты. Һеҙҙең менән иртәгә тикшереү органдары шөғөлләнер. Ә бөгөнгә, гражданка, ҡылған енәйәтегеҙ өсөн изоляторға ябабыҙ.

– Мин бер ниндәй ҙә енәйәт ҡылманым. Был – миңә ҡаршы ойошторолған провокация. Хәҙер үк иреккә ебәреүегеҙҙе талап итәм!

– Ебәрә алмайбыҙ, гражданка, – тине лейтенант һәм уҡытыусы алдына ҡағыҙ менән ҡәләм ҡуйҙы. – Ауыл хакимиәте башлығына ҡул күтәреүегеҙ тураһында аңлатма яҙығыҙ.

Ғәрлегенән донъяның аҫтын өҫкә килтерерҙәй ине Франгиза Сәғитовна был минуттарҙа. Теле менән туҡтауһыҙ үҙенең ғәйепһеҙлеген иҫбатлап, ҡулы менән бит ярымлыҡ аңлатма яҙып бирҙе. Унда Самат Сәлимович адресына ошаҡтан башҡа бер нәмә лә юҡ ине: төкөрөү ҙә, ҡул күтәреү ҙә, гүйә, уйҙырма....

– Миңә хәҙер үк адвокат килтереүегеҙҙе талап итәм. Закон буйынса һеҙ теләгемде кире ҡағырға тейеш түгелһегеҙ, – тип сираттағы дәғүәһен белдерҙе ул.

– Адвокат та булыр, тикшереүсе лә, тик бөтәһе лә – таң атҡас! – Дежурный, ошоноң менән һөйләшеү тамамланғанды аңлатып, ярҙамсыһына ҡулға алыныусыны изоляторға оҙатырға бойорҙо.

Иртә менән һорау алыуҙар башланды. Бәхетенә күрә, һорау алыусы капитан үҙенең ҡасандыр вузда бергә уҡып йөрөгән танышы, аҙаҡ профессияһын алыштырып, ситтән тороп юрфакты тамамлаған, бөгөн килеп тикшереү органында эшләүсе Илгиз Харрамович Марданов булып сыҡты. Уны күргәс, уҡытыусы берауыҡ аптырап ҡалһа ла, тикшереүсе аптыраманы, сөнки ул ваҡиға менән осрашыр алдынан танышып өлгөргәйне.

Франгиза Сәғитовнаны изоляторҙан оҙата килеүсе сержант артынан ишек ябылып, кабинетта икәүҙән-икәү генә тороп ҡалғас, Илгиз Харрамович, йылы ҡараш менән йылмайып, күрешергә ҡулға алыныусыға ҡулын һуҙҙы... Уңайһыҙ хәлдә ҡыҙарынып торған элекке курсташына ул нисек тә ярҙам ҡылырға әҙер ине.

– Һин, Франгиза, ваҡиғаны нисек бар шулай, бер эпизодын да ҡалдырмай һөйләп бир, – тип башланы ул һүҙен. – Минән ҡурҡма: бөтәһен дә протоколға индермәбеҙ.

– Ярай, һиңә ышанам, Илгиз. Тик, зинһар, миңә ярҙам ит, кемдәндер мыҫҡыл ителгем килмәй. – Уҡытыусы башынан кисергәндәрен энәһенән ебенә тиклем

үҙенә генә хас ҡыҙыу темперамент менән һөйләп биргәс, капитан күпмелер ваҡыт ручкаһын өҫтәл өҫтөндә бейетеп ултырҙы.

– Да-а, наломала дров, – тип ҡуйҙы ул бер аҙҙан, көрһөнөп.

– Бына күр ҙә тор, Илгиз Харрамович, ғәҙеллектең еңеүе өсөн көрәшәсәкмен. Дөрөҫлөк – ул һәр ваҡыт еңә! – Уҡытыусы йоҡоһоҙ, борсоулы уйҙар эсендә үткәргән төндән һуң ҡыҙарған күҙҙәрен ҡулдары менән ыуғылап алды.

– Уныһы шулайын шулай ҙа... Тик бына ауыл хакимиәте башлығының башына  биҙрә ҡаплаған факт ҡамасаулай бит. Етмәһә, был мәхшәрҙе унда эшләүсе бөтә халыҡ күреп торған. Нисек кенә итмә, был фактты ғәмәлдән һыҙып алып булмай...

– Ҡайғырма, Илгиз Харрамович, уныһын үҙ өҫтөмә алам.

– Нишләмәксе булаһың?

– Бөтә понятойҙар менән дә һөйләшеп сығасаҡмын.

– Шунан?

– Улар биргән мәғлүмәттәренән баш тартасаҡтар. Һәр береһе менән индивидуаль һөйләшеп, килешеп ҡуясаҡмын. Эйе, ауыҙҙарына һыу уртлаясаҡтар! Дәрестәрем ҡала, Илгиз Харрамович, зинһар, ебәр мине...

– Башҡарған енәйәтең өсөн һине мәктәп директорың эштән бушатып та өлгөргән. Бер нәмәне ҡолағыңа кертеп ҡуй: кешегә ҡул күтәреү – енәйәт тип һанала.

– Юҡ, Илгиз Харрамович. Минең осраҡта былар – дөйөм ғәҙелһеҙлек емештәре. Ғәҙеллек тантана итһен өсөн бөтәһенә лә барасаҡмын. Дөрөҫлөк үҙе генә еңә алмағас, булышлыҡҡа ялғанды саҡырған, тиҙәр бит. Изге ниәт өсөн ялғандан да баш тартмам! Үҙемә яҡшы ғына адвокат яллайым да бөгөн үк хакимиәт башлығы менән мәктәп директорын үҙҙәрен судҡа бирәм! Ятмаһындар мин-минләнеп! Беренсеһен – халыҡты сорттарға айырып ҡойма буятҡаны өсөн, икенсеһен – үҙемдең ризалығымдан башҡа бер ғәйепһеҙгә эштән бушатҡаны өсөн. Маҡсатыма ирешмәй ҡалһам, исемем Франгиза булмаһын!

–  Тел төбөңдө аңланым, курсташ, – тине капитан. – Ярай, әлегә ебәреп торам. Тик үҙеңде ҡулда тот, сынйырҙан ысҡынмаҫҡа һүҙ бир.

– Йөҙ процент менән бирәм. Бынан һуң бары тик аҡыл көсө менән көрәшәсәкмен, – тип хушлашты уҡытыусы тикшереүсе менән.

## 5

Эйе, Франгиза Сәғитовнаның мәшәҡәттәре йырып сыҡҡыһыҙ: әле ул суд юлын тапай, әле ҡулынан эш килерҙәй булдыҡлы адвокат эҙләй. Барыһы ла оло сығымдар һорай. Июнь айының гүзәл сәскәһеләй күпереп, һоҡландырып торған урта йәштәрҙәге ханым, октябрь айының һалҡынға бөрөшкән япраҡһыҙ ағастары кеүек, күҙгә  күренеп шиңде: ут янып торған күләс күҙҙәре эскә батты, уң күҙе хатта, был шыҡһыҙ йәмғиәтте күргем килмәй тигән шикелле, ситкә ҡыйшайып ҡалды. Табиптарға барғайны, «нервылар көсөргәнешлеге»  тигән диагноз ҡуйҙылар. Биргән дарыуҙарына өҫтәп, күберәк бал менән мәтрүшкәле сәй эсергә ҡуштылар, саф һауала йөрөргә, күңелле ял итергә һәм, әлбиттә, йоҡларға.

Йоҡларһың бында, алдыңда тауҙай проблемалар өйөлөп торғас! Хәҙер теге маляр ҡатындарҙы күреп, һәр береһе менән һөйләшеп, килешеп сығырға тейеш ул.

Тәүҙә, мәҙәниәт йортона һуғылып, швабра тотоп иҙән йыуып йөрөүсе техничка Зөбәйҙәне күреп һөйләште ул:

– Һаумы, Зөбәйҙә, хәлдәрең нисек?

– Ярайһы, Франгиза Сәғитовна, – тине тегеһе, резина перчаткаларын алып. – Үҙегеҙ ни хәлдәһегеҙ?

Уҡытыусы суд юлдарында йөрөүе тураһында ҡыҫҡаса һөйләп бирҙе.

– Һине лә понятой итеп саҡырасаҡтар, – тине ул. – Әгәр ҙә минең теге саҡ ҡул күтәреүем тураһында һораһалар, ундай хәл булманы, тиген... Тел менән генә әйтештеләр, тиген. Ауылдың бөтә ҡоймаларын да буятырға теләүемде еткер судьяларға!

– Ой, ул судтарынан ҡурҡам. Ә бөтөнләй бармаһам?

– Барырға тейешһең, Зөбәйҙә! Мин һиңә ышанам. Повестка менән саҡырғас, баралар. Бармағандарға ла енәйәт кодексы ҡаралған...

– Ә, ялған һүҙ һөйләнең, тип язаға тарттырмайҙармы?

– Тарттыралар, әлбиттә. Шуға күрә мин әйткәнде башҡаларға ла еткерергә тейешһең.

– Ой, ҡурҡам, харап бит, – тине Зөбәйҙә, уфтанып. – Ә нисек бар шулай һөйләһәм, нимә була?

– Бына быныһы категорически ярамай. Мин баш бирмәйем, судта еңәсәкмен. Судьяларҙы төбө-тамыры менән һатып алдым. Ә һиңә, һүҙемде йыҡһаң, бик насар буласаҡ. Теге саҡ Сатан Ғәләүи минең менән алышҡайны, иҫеңдәме?

– Иҫемдә. Үҙен шоферлыҡтан алдырттығыҙ ҙа эшһеҙ ҡалдырттығыҙ...

– Бына, бына, аңлайһың. Ябай уҡытыусы тигәс тә, минең тотҡаларым күп һәм ныҡлы. Ә һинең мәктәптә белем алыусы өс балаң бар. Мин кластан класҡа күсерәм ул шыр наҙандарҙы. Күсермәй ҙә ҡалдыра алам. Етмәһә, эскесе ireң өйҙә эшһеҙ ята. Бөтә килемегеҙ – һинең техничка зарплатаһы...

– Аңланым, Франгиза Сәғитовна. Бынан ары ыҙғышҡанығыҙҙы күрмәнем дә, белмәнем дә.

– Молодчина! Ошо фекереңде судта әйтерһең!

Методист Тәлиғаны ла уҡытыусы, ошондайыраҡ ҡурҡытыу юлын ҡулланып, үҙ яғына ауҙарҙы.

Китапханасы Динә лә бумала тотоп ҡойма буяп йөрөгәйне ул көндө. Уның менән һөйләшеү айырыуса еңел булды. Ни тиһәң дә, ҡоҙағыйҙар бит. Ҡоҙағый ашы менән ҡунаҡ һыйлашҡан саҡтары әллә нисек яҡынайта бер-береһен. Динә – йомарт ҡатын ул. Тәкә һуйҙырһа ла, ауыҙ итергә ҡоҙағыйына керетә, ҡаҙ өмәһе үткәрһә лә, табындың иң түрендә, йомшаҡ мендәр өҫтөндә, ҡоҙағыйы урын ала. Әлеге мөһим үтенесен еткергәс тә, Динә Фәтиховна тартҡылашып торманы:

– Франгиза, ҡоҙағый, – тине ул. – Кәрәкһә, һинең өсөн утына ла, һыуына ла инергә әҙермен. Шулай булмай ни, беҙҙең уртаҡ ғаиләгә уртаҡ килгән бәлә лә баһа был. Тимәк, ҡайғыңды ла уртаҡ күтәрербеҙ.

– Рәхмәт, ҡоҙағыйым, изгелегең ерҙә ятмаҫ, бер саҡ беҙҙең урамда ла ҡояш сығыр әле, һәр саҡ иҫемдә тотормон. – Күңеле тулған математиктың күҙҙәренән ҡайнар йәштәр эркелеп сыҡты.

Кеше менән нисек эш итергә белә стажлы педагог. Теге мәхшәр көндө тағы ла кемдәр булды икән? Эһә, коллегалары: социаль педагог Ҡәмәр Ҡыямовна менән химия уҡытыусыһы Мәстүрә Зиннәтовна, о-о, былар – уҫал халыҡ. Ябай ҡурҡытыу юлы менән алдырып булмай. Һин дә мин белгәнде былар Батый хан заманында уҡ киптереп элгән. Эйе, быларға ҡарата башҡасараҡ берәй әмәл уйлап табырға кәрәк. Көс менән ала алмаған нәмәне хәйлә менән алалар түгелме һуң?..

Быларын кис ҡорон ҡунаҡҡа саҡырҙы Франгиза ханым, ирҙәренән башҡа, ҡатын-ҡыҙ ашына. Өҫтәлде мулдан әҙерләне. Ҡартына ишек алдында ла, аҙбар эстәрендә лә тауыҡ еменә эйәләшеп киткән бер нисә күгәрсенде тотоп һуйырға

ҡушты. Унан уларҙы тиҙ арала эшкәртеп, табаға картуф менән бергә турап һалып бешерҙе лә табын уртаһына ҡуйҙы. Ҡоймаҡ-бәрәмәстәр ҙә өҫтәл өҫтөн биҙәне. Оло ҡорһаҡлы графин менән «сәмиғулла»һын да ултыртырға онотманы.

– О-о! Ниндәй мул табын! Президент өҫтәле лә был тиклем бай булмайҙыр, – тип һоҡланды килгән ҡунаҡтар табын артына үткәндә. – Булмаһа бында, бәлкем, күгәрсен һөтө генә юҡтыр!

– Эйе, күгәрсен һөтө юҡ, әммә күгәрсендең ите бар, – тип хужабикә таба ҡапҡасын асып ебәрҙе.

– Китсәле?!

– Ысынлап әйтәм, йәле ауыҙ итегеҙ – деликатес!

Сәнске алып, ышанмайыраҡ иттән ауыҙ итеүсе коллегаларынан:

– Йә, нисек, оҡшанымы? – тип һораны.

– Иҫ китмәле! – Уҡытыусылар тел шартлатты, баш бармаҡтарын өҫкә күрһәтте. – Күгәрсен ите майһыҙ була икән дә баһа.

– Дөрөҫ иҫләнегеҙ. – Хужабикә фекерҙе күтәреп алды. – Холециститҡа ҡаршы бынамын тигән ризыҡ. Бына мин әйтте тиерһегеҙ: киләсәктә хужалыҡтар, тауыҡ-ҡаҙ аҫрамайынса, күгәрсен генә үрсетәсәк...

Тоҙланған ҡыяр сәйнәп, уның менән бергә дошмандарын «сәйнәп», йорт хужаларына береһенән береһе йөрәккә май булып ятмалы маҡтау һүҙҙәре яуҙырып төн уҙғарҙы уҡытыусылар. Революцияға әҙерләнгән эшселәр шикелле, был мәжлестә гел генә революцион йырҙар яңғыраны, айырыуса «Смело, товарищи, в ногу!» күңелдәренә хуш килде:

*Смело, товарищи, в ногу,*
*Духом окрепнем в борьбе...*

Икенсе көндө Франгиза Сәғитовна күтәренке кәйеф менән эш урынына – мәктәпкә барҙы, ишек шаҡып тормайынса, әммә рөхсәт һорап, директорҙың бүлмәһенә үтте. Ултырғысҡа барып ултырҙы ла, бер аяғын икенсеһе өҫтөнә ҡуйып, өҫтәл артында ҡағыҙҙар аҡтарыусы директорға мөрәжәғәт итте:

– Мөслим Надирович, – тине ул, – мин юристарға барҙым... Һеҙҙең приказ дөрөҫ түгел. Ул приказды ғәмәлдән сығарыуығыҙҙы һорайым, юҡ, талап итәм. Мине хәҙер үк вазифама ҡайтарығыҙ!

– Енәйәт ҡылған бәндәне ҡайтанан эшкә алырға башыма тай типмәгән. – Директор элекке математикка үтәнән-үтә тишеп ҡараны.

– Үкенерһегеҙ, – тип һүҙен дауам итте Франгиза Сәғитовна. – Юридик консультацияла миңә, директор эш бирһә лә, бирмәһә лә, судҡа тиклем хеҙмәт урыныма килеп, эш сәғәтемде тултырып йөрөргә ҡуштылар. Ә мин Һеҙҙең өҫтөгөҙҙән судҡа бирҙем!

– Бирһәгеҙ биргәнһегеҙҙер, ләкин Һеҙ еңеләсәкһегеҙ!

– Ҡара уны, егет, – тине уҡытыусы, – кәк бе эшһеҙ ятҡан көндәрем өсөн кеҫәңдән сығарып түләмәгәйең! – Ул, директорҙың кабинетынан сығып, тура уҡытыусылар бүлмәһенә үтте һәм, эш көнөн файҙалы уҙғарыу маҡсаты менән, педагогик журналдар атҡарырға кереште.

Франгиза Сәғитовна суд эштәре буйынса районға киткән көндәрҙең береһендә, оҙон тәнәфес ваҡытында, Мөслим Надирович коллективты акттар залына йыйып алды:

– Хөрмәтле коллегалар! – тип һүҙ башланы ул – Бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙ, Франгиза Сәғитовна тарафынан мәғарифҡа ҙур ҡара тап төштө. Ә беҙ йәш быуынды эт-бесәйҙәргә лә мәрхәмәтле булырға өндәйбеҙ. Ҡыҫҡаһы, мин уны эшенән бушаттым. Ул, әлбиттә, хеҙмәт урынына киренән ҡайтырға теләй, хатта мине судҡа ла

биргән. Беҙҙең бөгөнгө йыйылыуыбыҙҙың төп маҡсаты ла ошо мәсьәләгә бәйләнгән. Мине район мәғариф бүлегенә саҡыртып алып та һөйләштеләр. Һеҙҙән йәшереп тормайым: ҡарар ҡабул иткәндә аҙ ғына хата ебәргәнмен – приказды ашығыбыраҡ яҙғанмын. Ошо хатаны һеҙҙең менән бергәләшеп хәҙер үк төҙәтергә кәрәк.

Коллектив бер мәлгә дауыл алдынан ғына була торған сәйер тынлыҡ эсендә ҡалды.

– Ниндәй хата ул, сер булмаһа? – тип һорап ҡуйҙы бер аҙҙан профсоюз ойошмаһы рәйесе Вәсим Ширҡәтович Әхмәтҡужин.

– Ул шунан ғибәрәт, – директор тамаҡ ҡырҙы. – Мин приказ яҙырҙан элек, беҙгә профсоюз йыйылышы үткәрергә кәрәк булған. Унда уҡытыусыбыҙҙың ғәйебен фашлап, уны вазифаһынан бушатыу тураһында ҡарар сығарып, администрацияға, йәғни миңә тапшыраһығыҙ ҡалған. Профсоюздың ошо протоколы нигеҙендә приказ яҙырға тейеш инем. Ә приказды, беләһегеҙ, Самат Сәлимович ҡушыуы буйынса, теге мәхшәр ҡупҡан көндө үк яҙғайным. Тимәк, бөгөнгө йыйылышты ла артҡа күсереп, приказ яҙылған көнгә тура килтереп билдәләргә кәрәк. Юҡһа, бөтә бәлә-казаның бер минең елкәгә төшөүе ихтимал. Мин һеҙҙең бөтәгеҙгә лә яҡшы хеҙмәт хаҡы түләп киләм. Хәлемә инерһегеҙ, тип уйлайым. Эйе, кем әйтмешләй, һуң булһа ла, уң булһын... – Директор берауыҡ коллективҡа төбәлеп, ни тиерҙәр икән тигәндәй, тынып ҡалды.

Ләкин ел ул теләгән ағышҡа ғына иҫмәне. Иң элек профсоюз рәйесе ҡаршы төштө:

– Франгиза Сәғитовна – прекрасный уҡытыусы. Ундай белемле педагогтар ерҙә аунап ятмай. Хакимиәт башлығының башына биҙрә ҡаплаған икән – по делом! Ултырмаһын унда кешеләрҙе сорттарға айырып! Беҙҙең уҡытыусы дөрөҫлөк өсөн көрәшкән. Бынан тыш, биҙрә ҡаплау-ҡапламау мәсьәләһен иҫбатларға кәрәк тәүҙә. Ялған яла яғыу өсөн дә законда статья ҡаралған. – Профсоюз лидерының, ҡурҡмайынса, былай аяҡ терәп һөйләшеүе директор яғына ауышҡан коллективты икегә бүлде. Әлеге йыйылыштан элгәреге көндәрҙә Франгиза Сәғитовна профсоюз рәйесен дә ныҡлап әҙерләп ҡуйғайны шул.

– Вәсим Ширҡәтович, Өммөгөлсөм Баяновна, – тип мөрәжәғәт иткәйне ул табын артында, ирле-бисәле Әхмәтҡужиндарҙы сәйгә алып. – Һеҙҙең үҙегеҙгә директор йүгәнен ҡулға алырға ваҡыт. Һеҙ, Вәсим Ширҡәтович, йәш тә, шәп тә, энергияғыҙ ҙа ташып тора. Ә Мөслим Надировичҡа килгәндә, ул ябай ғына уҡытыусы булырлыҡ та түгел... Үҙ фекере юҡ, флюгер кеүек: ел ҡайҙан иҫһә, ул шул яҡҡа ҡарай. Бер һүҙ менән әйткәндә – шыр ҡурҡаҡ. Үҙ күләгәһенән дә ҡурҡып йәшәй. Юғарыла минең таныштарым бар. – Математик баш бармағы менән түшәмгә күрһәтте. – Улар һинең кандидатураңды оҡшаттылар, перспективалы, тинеләр. Һин – йәш кенә түгел, үҫә торған шәхес, оса торған бөркөт. Дөрөҫ әйтәмме, Өммөгөлсөм Баяновна?

Оло ҡорһаҡлы графиндан «сәй» һемереп, бит алмалары ҡыҙарған йыр уҡытыусыһы:

– Мин только за, – тине лә «Аҡҡоштар» йырын һуҙып та ебәрҙе. Йырҙы тыңлап бөткәс, хужабикә, теманан ситкә тайпылмайынса:

– Йә, Вәсим, директор булырға ризаһығыҙмы? – тип һораны.

– Барып сыҡһа – риза, – тине тегеһе. – Ярай, мин Һеҙгә таяныс булырға һүҙ бирәм.

Күмәк көс яу ҡайтарған. Коллективты үҙ яғыбыҙға ауҙарырға кәрәк. – Хужабикә уны кисекмәҫтән директорға ҡаршы үҙе ҡорған тоҙаҡтар менән таныштыра башланы.

Әле бына бөгөнгө йыйылышта профсоюз лидеры әтәсләнеп китте:

– Йә әле, әйтегеҙ, – тине ул, трибуна артынан ҡул болғап: – кем күргән битенә төкөргәнде лә  башына биҙрә кейҙергәнде? – Светофорҙай янып торған йәшел күҙҙәрен директорға төбәне.

Тегеһе, ултырған еренән эйәген алға һуҙып, хакимиәт үтенесе буйынса мәктәптән ул көндө ҡойма буярға ебәрелгән социаль педагог менән химия уҡытыусыһына ымланы:

– Бына, улар күргәндәр: Ҡәмәр Ҡыямовна менән Мәстүрә Зиннәтовна.

– Юҡ, юҡ, беҙ күрмәнек, – тиеште теге уҡытыусылар икеһе бер юлы, бер-береһенә һынаулы ҡарашып.

– Шунда бумала тотоп, буяу менән булашҡас, нисек инде күрмәнегеҙ?! – Үҙенә йәтешле яуапты ишетмәгәс, етәксе уларға һөҙөп ҡараны.

– Беҙҙең башҡаларҙа эшебеҙ юҡ, улар талашҡанда, беҙ артыбыҙ менән торҙоҡ, ҡойма буяныҡ, – тине Ҡәмәр Ҡыямовна.

– Ауыртмаған башыма тимер таяҡ һуҡтырып, судтарына бер аҙым аяҡ та баҫмаясаҡмын! – тип яуапланы Мәстүрә Зиннәтовна.

– Һеҙҙе, шаһит булараҡ, повестка менән саҡырасаҡтар, ә миңә ҡаршы сығаһығыҙ икән, бөгөндән үк үҙ теләгегеҙ менән ғариза яҙып эштән китегеҙ!

– Эйе, Мөслим Надирович өйҙә – арыҫлан, ҡырҙа – ҡуян холоҡло.

– Нишләп китәйек, ти, китмәйбеҙ!

– Үҙегеҙ китә белмәһәгеҙ, китешергә ярҙам итермен! – Түрәнең металл тауышынан коллектив тертләп ҡуйҙы.

Шул саҡ республиканың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ғәлимә Мәрҙәновна һүҙ һораны. Ул, ғәҙәтенсә, бер аҙ ҡабаланыбыраҡ һәм ҡыҙыбыраҡ һөйләргә кереште:

– Халыҡ араһында һүҙ сыҡҡан икән, был, һис шикһеҙ, дөрөҫ. Йөрөмәһен Франгиза инә хулиган булып. Кеше башына буяулы түгел, буяуһыҙ силәк кейҙерергә лә хаҡы юҡ уның! Тәрбиә ғаиләнән килә. Бына беҙ ишле булып үҫтек. Беребеҙ ҙә кеше башына биҙрә кейҙермәне. Дошман кешенең йәнен ҡыйһаҡ ҡыйҙыҡ, әммә – тел менән, ҡул менән түгел. Рәхмәт атай-әсәйемә ошондай аҡыллы тәрбиә биргәндәре өсөн. Мин, икеләнеүһеҙ, директор яҡлымын. Эштән ҡыуып, ул дөрөҫ эшләгән.

Үҙенә ышыҡ табыуҙан тағы ла батырайыбыраҡ киткән директор артҡы рәттә башын эйеп, боҫоборaҡ ултырыусы мәғариф алдынғыһы Хәлит Хәмитовичҡа мөрәжәғәт итте:

– Был факт буйынса Һеҙ ни тиерһегеҙ?

Үткән аҙнала ғына директор ҡулынан әлеге юғары бүләкте алған оялсаныраҡ уҡытыусы һиҫкәнеп китте, ҡайҙа ҡуйырға белмәгән һонтор ҡулдарын бергә тотоп, бер ауыҡ уйланыбыраҡ торҙо ла көсһөҙөрәк сабыр тауыш менән:

– Мин директор яҡлы, – тине. – Әйтһәң, яман булаһың, әйтмәһәң, ишәк булаһың. – Ул ҡара костюмының түш кеҫәһе өҫтөнә беркетелгән ете тажлы ҡурай һәм китап төшөрөлгән билдәгә ҡарап алды. – Миңә тиклемге оратор һөйләгәнсә, кешегә ҡул күтәргән кешенең педагог булырға хаҡы юҡ!

– Рәхмәт, – тине директор, күңеле булып, – әйткәндәй, хеҙмәттә ирешкән уңыштарығыҙ өсөн Һеҙҙе аҡсалата премияға тәҡдим иттем.

– Һеҙҙең тарафтан һәр саҡ хәстәрлек тойоп йәшәүем менән бик бәхетлемен. Һеҙгә киләсәктә лә оҙаҡ йылдар буйы ошо коллективты етәкләргә яҙһын, хөрмәтле Мөслим  Надирович! – Йыуашланып ҡалған Хәлит Хәмитович баҫалҡы ғына кире урынына ултырҙы.

– Һүҙ Әҙеһәмов Айнур Ғиндулловичҡа бирелә, – тине директор.

Беренсе хеҙмәт йылын башлаған йәш уҡытыусы ла директорҙы маҡтаны.

– Ағайҙар, апайҙар, – тине ул, коллективҡа ҡарап. – Мин ошо мәктәпте тамамлағас, вуздың математика бүлегендә уҡыным. Үҙ ауылыма ҡайтып эшләгем

килде. Ләкин Франгиза Сәғитовна, математика дәрестәре үҙемдән артмай, тине. Ә бына директор ағай арттырҙы: уның дәрестәренең бер өлөшөн миңә йолҡоп алып бирҙе, шуға күрә мин – директор яҡлы.

– Яҡшы, – тине етәксе. – Тиҙҙән бөтә сәғәттәрҙе лә Һеҙгә йөкмәтәсәкбеҙ.

– Хужалыҡ эштәре буйынса мөдир Әкрәм Барлыбаевич нимә тип әйтер? Һүҙ дилбегәһен Һеҙгә тотторабыҙ, иптәш Ҡоҙаҡаев.

– Мин нимә тип әйтәйем, – тине тегеһе, баҫып. – Иптәштәрҙең һүҙенә ҡушылам, – тине, ҡулындағы таушалған кәпәсен һыулы сепрәк борғандай бора-бора. – Дөрөҫ әйтә улар...

– Туҡта, бөтәбеҙ ҙә иптәш бында, – тип директор уның һүҙен бүлдерҙе, – һин минең яҡлымы, әллә миңә ҡаршымы?

– Нишләп ҡаршы булайым, мин Һеҙҙең яҡлы, теге списать иткән компьютерҙарҙың иҫкеһен миңә бүләк иттегеҙ, яңыһын үҙегеҙгә алдығыҙ. Юҡһа, минең компьютер алырлыҡ аҡсам бармы ни! Балаларым хәҙер, донъяларын онотоп, төндәр буйы компьютер төбөндә ултыра.

– Нишләп яңы компьютерҙы списать иттегеҙ? – тип һикереп торҙо профсоюз рәйесе.

– Икеһе лә иҫке улар, хан заманындағы ватыҡ-мотоҡ, – тип тынысландырҙы директор. – Ултыр, аңғыра баш! – Эйәк ҡағып, Ҡоҙаҡаевҡа ултырырға ҡушты.

– Эйе шул, – тип тегеһе, кәпәсен йомарлай-йомарлай, урынына һеңде.

Һөҙөмтәлә профсоюз йыйылышы илле бер процент тауыш менән «Уҡытыусы Франгиза Сәғитовнаны эшенән бушатырға!» тигән ҡарар ҡабул итте. Протоколға ул ошо хаҡта приказ яҙылған дата менән теркәлде.

7

Суд бинаһына кереүсе кешеләрҙе пристав металл әйберҙәрең барлығын-юҡлығын һиҙҙертә торған ишек аша үткәрҙе. Әлеге тикшереү суд әһелдәрен ҡораллы һөжүмдән һаҡлау сараһы булараҡ башҡарыла. Металл әйберең бар икән, ишек һыҙғырған тауыш сығара. Килгән халыҡтың күбеһе кеҫәләрендәге аҡсыстарын, тимер башлы ҡайыштарын, йөҙөк-беләҙектәрен һалып ҡараны. Ләкин, кеҫәләрендә был тиклем дә күп тимер-томор йөрөтөүселәргә шаҡ ҡатҡан шикелле, ишек һыҙғырыуын дауам итте. Инде ҡайышһыҙ салбар менән бер ҡат күлдәктән тороп ҡалған Хәлит Хәмитовичты үҙ һүҙле ишек үткәрмәй торғас, шикләнгән пристав уҡытыусыны баштан-аяҡ салбар төптәренә тиклем тикшереп, ҡапшап сыҡты.

– Бер нәмә лә юҡ миндә, үҙем дә ике күҙем, – тине уҡытыусы, ҡыҙарынып.

– Әһә, тештәрегеҙ тимер икән дә баһа! – Пристав Хәлит Хәмитовичты залға үткәрҙе, әммә тулҡынланыуҙан нервылары ҡаҡшаған педагог тура судья кабинеты эргәһендә урынлашҡан туалетҡа инеп китте. Уның ул тарафта үткәргән биш минут ваҡыты суд приставына биш сәғәт кеүек тойолдо.

– Шикле күренә был әҙәм. Террорист түгелме икән?! Биш минут буйы нимә эшләгән ул унда? Берәй төрлө шартлатҡыс ҡуймағанмы? – Ошо уйҙар биләне приставтың башын.

– Нәкәнис! – тип еңел һулап ҡуйҙы ул, Хәлит Хәмитович сыҡҡас, һәм, атлығып, уның артынса үҙе бәҙрәфкә инеп китте. Әгәр ҙә мәгәр шартлатҡыс матдә тапһа һәм террорҙы булдырмау сараһын күрһә, о-о-о, приставҡа миҙал бирәсәктәр, ә, бәлки, Президент үҙе... Ярай, быларын аҙаҡ уйлар ул. Әлегә шартлатҡысты табырға кәрәк. Ишек төбөндәге ҡағыҙлы кәрзинде лә аҡтарып ҡараны, һыу багын да, туалет тишеген дә ҡалдырманы. Шикләнерҙәй бер нәмә юҡ.

Йәш ине шул әле пристав, армиянан яңы ғына ҡайтҡайны, ҡырҡ йәштән һуң ир-аттарҙың күпселегенә хас простатит ауырыуы тураһында ишетеп тә белмәй ине әле.

Миҙалға өмөтө өҙөлгән пристав ҡалған халыҡты тиҙ үткәрҙе.

– Кемдәр йәнә тимер тешле? – тип һораны ул.

Биш кеше ауыҙҙарын асып күрһәтте. Тешһеҙ, һыңар күҙһеҙ, уң аяҡһыҙ, бер ҡолаҡһыҙ бәндә алдында ишек һыҙғырып торманы: «Рәхим итегеҙ!» – тип яғымлы ғына өндәште лә, йәшел ут яндырып, шар асылып китте.

– Бына был әфәнденән ҡурҡыныс янамай, бер тимер әйбере лә юҡ, – тине пристав.

– Минең һынған ҡулбашымды тимер таяҡ тығып ялғанылар. – Урман кисҫкәндә ағас аҫтында ҡалған хеҙмәт уҡытыусыһына суд залына шулай аҡлана-аҡлана инергә тура килде.

– Баҫығыҙ, суд килә!

Залдағы бөтә халыҡ, аяғөҫтө баҫып, суд әһелдәрен ҡаршыланы. Һәр ҡайһыһы үҙ урынын алғас, судья суд ултырышын асыҡ тип иғлан итте һәм прокурорға һүҙ ҡушты. Һуңғыһы Франгиза Сәғитовнаның мәктәп директоры менән ауыл хакимиәте башлығы өҫтөнә биргән ғаризаһын уҡып ишеттерҙе лә ошо мәсьәлә өҫтөндә алып барылған тикшереү эштәре менән таныштырҙы. Унан һуң һорау алыуҙар башланды.

Судья Мөслим Надировичты баҫтырҙы.

– Үҙегеҙ хаҡында белешмә бирегеҙ, – тине ул.

– Мөслим Надирович Яушев булам, Тәпәләп урта мәктәбе директоры.

– Һеҙгә ошондай һорау. – Судья пауза яһаны. – Ни өсөн Һеҙ Үлмәҫҡолова Франгиза Сәғитовнаны үҙ теләгенән башҡа эшенән ҡыуҙығыҙ?

Директорҙың башына ҡан йүгерҙе, тамаҡ төбөнә төйөр ултырҙы, шуға тауышы ҡарлығып сыҡты:

– Беренсенән, ул хакимиәт башлығының битенә түккөргән, башына буяулы силәк кейҙергән; икенсенән, ауыл хакимиәте башлығы миңә шылтыратып, уны эшенән бушатырға бойорҙо...

– Тимәк, Һеҙгә юғарынан бойорһалар, ата-әсәгеҙҙе лә атып үлтерергә әҙерһегеҙ?! –Был һорауҙы ҡаршы яҡтың адвокаты бирҙе.

«Эх, хәҙер үҙемдең адвокатым булһа, яҡлашыр ине лә, ялламаным шул»,– тип уйлап ҡуйҙы эсенән директор, ә тыштан, әйтер һүҙе булмағас, ғәйепле уҡыусы шикелле, башын аҫҡа эйҙе.

– Унан башҡа ла сәбәп бар, – тине бер аҙҙан.

– Ниндәй сәбәп? – Адвокат һөжүмен дауам итте.

– Мин приказ яҙырҙан алда, беҙ мәктәптең профсоюз йыйылышын үткәрҙек. Унда коллектив күпселек тауыш менән Франгиза Сәғитовнаны амораль ҡылығы өсөн эшенән бушаттырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Ошо ҡарар нигеҙендә мин приказ яҙҙым.

– Дөрөҫ түгел, ялған һөйләй, – тип һикереп торҙо урынынан Франгиза Сәғитовна.

– Тынысланығыҙ, гражданка Үлмәҫҡолова, Һеҙгә әлегә һүҙ бирелмәне, – тип судья киҫәтеү яһаны.

– Ғәфү итегеҙ, Ваша честь. – Математик урынына ултырҙы.

–Тағы ла өҫтәр дәлилдәрегеҙ бармы? – тип һораны судья директорҙан.

– Юҡ.

– Ултырығыҙ.

– Ул саҡта Франгиза Сәғитовнаны тыңлап китәйек, – тине судья. – Ни өсөн Һеҙ директор һөйләгәндәр менән килешмәйһегеҙ?

– Ваша честь! – тип өҙөлгән һүҙен дауам итте дәғүәсе. – Уның бөтә һөйләгәндәре лә дөрөҫлөккә тап килмәй. Ни өсөнмө? Беренсенән, мин хакимиәт башлығына төкөрмәнем. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: дөйәме ни мин тиктомалдан кеше битенә төкөрөргә?! Буяулы силәкте лә башына кейҙермәнем. Уның аңғыра башына ҡаплағансы, берәй тол ҡалған инәйҙең ҡоймаһын буярға сарыф итәм мин ул буяуҙы...

– Гражданка Үлмәҫҡолова, кешене кәмһетмәүегеҙҙе һорайым! – Судья киҫәтеү яһаны.

– Ғәфү итегеҙ, Ваша честь, тулҡынланам. Икенсенән, директор приказды профсоюз йыйылышы үткәнсе яҙған, власть ҡулланып, протоколды аҙаҡ үҙе телләгән дата менән ҡуйҙыртҡан, ә был – законды тупаҫ рәүештә боҙоу, беләһегеҙ, уға статья ҡаралған.

– Әлеге әйткәндәрегеҙҙе иҫбатлай алаһығыҙмы?

– Әлбиттә, шаһиттарым быуа быуырлыҡ.

– Ярай, ултырып тороғоҙ. Хәҙер Тәпәләп ауылы хакимиәте башлығы Самат Сәлимович Фәйзуллиндың судҡа мәғлүмәт биреүен һорайбыҙ.

Самат Сәлимович – кеше менән артыҡ әләгешеп бармайынса, ниндәй мәсьәләне лә тыныс юл менән хәл итергә тырышыусы шәхес. Уның да аяҡ аҫтында тыуған бәлә арҡаһында суд йортона тәү тапҡыр аяҡ баҫыуы ине. Шуға ла ул, үҙ исемен ишетеүгә, теләр-теләмәҫ кенә урынынан ҡуҙғалды. Теге саҡ милицияға хәбәр иткәненә, директорға приказ яҙырға бойорғанына, хатта, үкенеп тә ҡуйҙы. Тик йөрөһөн ине мәктәбендә уҡытып. Ә буяуға ҡатҡан костюмын ул әллә ҡасан утҡа һалып яндырҙы инде. Сәсенә йәбешеп ҡатҡан буяуҙы ла уңған ҡатыны йыуып төшөрөп бөттө. Нимә менән, тиһегеҙҙер, моғайын. Нимә менән булһын, әлеге лә баяғы шул трактор солярҡаһы менән. Ике-өс көн буйы әсетеп, эшләп торған двигатель кеүек ҡыҙып йөрөнө башы. Радиаторы булһа икән баштың, юҡ бит. Ҡояш аҫтында йөрөп керә лә һыу краны аҫтында һыуыта был «двигателен».

Судья биргән һорау уйҙарынан арындырҙы:

– Һеҙгә гражданка Үлмәҫҡолова төкөрҙөмө, ҡул күтәрҙеме? Биҙрә ваҡиғаһы дөрөҫлөккә тап киләме?

Әллә ҡаушауынан, әллә хөкөмдарҙарҙың үҙенә төбәлгән һынаулы ҡараштарынан нисектер кесерәйеберәк ҡалған хакимиәт башлығы, бер алға, бер залға күҙ һалғас:

– Булды ундай хәл, – тине. – Битемә лә төкөрҙө...

– Төкөрмәнем, – тип ҡысҡырҙы урындан дәғүәсе. – Бына һин минең күлдәк итәгемә төкөрҙөң. Бөтәһе лә күрҙе. Был – факт.

– Һеҙҙең күлдәк итәген ел ҡабартҡанға мин ғәйепле түгел. Мин асыуымдан ергә төкөргәйнем.

– Үәт, үәт! Бына мин дә, һинең шикелле, ергә генә төкөргәйнем. Ә һин, биткә төкөрҙө, тиһең. Тимәк, ел ғәйепле.

– Гражданка Үлмәҫҡолова, мин Һеҙгә һүҙ бирмәнем. – Судья йәнә киҫәтеү яһаны.

– Ғәфү итегеҙ, Ваша честь.

– Гражданин Фәйзуллин, фекерегеҙҙе әйтеп бөтөгөҙ.

– Хараша, дауам итәм. Битемә лә төкөрҙө, башымды ла, күптән түгел генә промтауарҙан һатып алған өр-яңы вельвет костюмымды ла зәңгәр буяуға батырҙы.

– Ни рәүешле? Асыҡлабыраҡ әйтегеҙ.

– Ун литр һыйышлы буяулы биҙрәне ҡойма буяусы Зөбәйҙәнең ҡулынан тартып алды ла көтмәгәндә башыма ҡапланы.

– Аңлашылып бөтмәй. Беҙрә ҡапларлыҡ хәлгә нимә еткергән гражданка Үлмәҫколованы?

– Хараша, аңлатам. Ауылда өҫтәге етәкселәрҙең ярҙамы менән яңы мәҙәниәт йортон төҙөп бөттөк. Уны асыу тантанаһына ҙур нәсәлство килә, тинеләр. Урам ҡоймаларын буятырға ҡуштылар. Хараша, мәйтәм, буярбыҙ. Ләкин лимит буйынса буяу Үҙәк урам ҡоймаларына ғына етә.

– Тимәк, гражданка Үлмәҫколованың дәғүәһендә күрһәтелгән факттар дөрөҫ? – Судья һораулы ҡараш ташланы: – Тимәк, ысынлап та, ветерандар йәшәгән тыҡрыҡтар буялмаған?

– Ысынлап та. – Самат Сәлимович ҡарашын тәҙрәгә борҙо.

– Һеҙҙеңсә, халыҡ йәшәгән урамдарҙың ҡайһыһын буятып, ҡайһыһын буятмау дөрөҫмө?

– Юҡ, әлбиттә.

– Тимәк, хатағыҙҙы таныйһығыҙ?

– Хараша. Таныйым.

– Уҡытыусы миңә ҡул күтәрҙе, тиһегеҙ. Шаһиттарығыҙ бармы?

– Нишләп булмаһын, ти, клуб хеҙмәткәрҙәре, библиотекарь, уҡытыусылар...

– Ялған! – тип ҡысҡырҙы дәғүәсе.

– Гражданка Үлмәҫколова, тыныс ултырыуығыҙҙы һорайым. – Судья киҫәтеү яһаны.

– Шаһит булараҡ, һүҙ Сәфәрғәлиева Зөбәйҙә Муллағәли ҡыҙына бирелә. Үҙегеҙ менән таныштырып китегеҙ.

Етди ҡарашлы сит-ят суд әһелдәре алдында үҙен нисегерәк тоторға белмәйенсә, Зөбәйҙә һул ҡулының имән бармағын уң ҡулы менән борғолағандай итте:

– Мин, ней,.. клубта эшләйем, техничка булып. Ней, хакимиәт башлығы беҙҙе ҡойма буярға ҡушты. Ней, ҡойма буяғанда эргәбеҙгә Франгиза Сәғитовна килде...

– Һүҙегеҙҙе бүләм... – тине судья – Һеҙ әле генә хакимиәт башлығы әйткән фактты раҫлай алаһығыҙмы? Бер нәмәне иҫегеҙгә төшөрөп китәйем: законда ялған мәғлүмәт биргән өсөн шаһитты язаға тарттырыу статьяһы ҡаралған...

Төнө буйы Франгиза Сәғитовнаның сәмәйен һемереп, иртә менән судҡа уны яҡларға килгән айнып бөтмәгән иңле-шәйле Зөбәйҙә, судьяның киҫәтеүен ишеткәс, ҡурҡып ҡалды, теле кирегә һуҡалай башланы:

– Бәй, ней... мин... беҙ... улар эләгешкәндә бөтәһен дә күреп торҙоҡ. Тәүҙә Франгиза Сәғитовна лас итеп... – Ул, һиҫкәнеп, нимә әйтер икән тигәндәй, ситтәрәк ултырған уҡытыусыға күҙ һалды, тегеһе өттөргөс уҫал ҡарашы менән аҫтан йоҙроҡ күрһәтте. Ә һабантуйҙарҙа йыл һайын ҡатын-ҡыҙҙар араһында үткәрелә торған ҡул көрәше бәйгеһендә был дәғүәсенең еңеү яулағанын бик яҡшы хәтерләй Зөбәйҙә, уның суҡмар йоҙроғо башыңа төшһәме, буяулы беҙрә төшкән ише генә булмаҫ. Унан туҡмалып көн күргәнсе, төрмәлә ятыуың биш артыҡ, тип уйлап алды ул һәм ашыға-ҡабалана һүҙ ағышын үҙгәрте: – Ней... лас итеп хакимиәт башлығының битенә төкөрөр, тигәйнек, ул ергә төкөрҙө, ә буяулы беҙрәгә тотонманы ла. Уға тотоноп, ап-аҡ ҡулдарын бысратмаҫ бит инде.

– Тимәк, Һеҙҙеңсә, гражданка Үлмәҫколова гражданин Фәйзуллинға ҡул күтәрмәне?

– Юҡ-юҡ. Ул кешегә түгел, серәкәйгә лә ҡул күтәрмәй.

– Ә нимә генә эшләнеләр һуң улар, һеҙҙең эргәлә осрашҡас? – тип төпсөндө судья.

– Улар икеһе лә ергә төкөрә-төкөрә һөйләштеләр. Ней... Франгиза Сәғитовна бөтә ҡоймаларҙы ла буярға ҡушты. Самат Сәлимович, ней... тыңламаны. Бына шул.

– Ултырығыҙ. Шаһит булараҡ, гражданка Ҡәйүмова мәғлүмәт бирергә саҡырыла. Үҙегеҙ менән таныштырып китегеҙ.

– Мин Ҡәйүмова Тәлиға Мөзәһит ҡыҙы булам. Тәпәләп ауылы мәҙәниәт йортонда методист вазифаһын башҡарам.

– Гражданка Үлмәҫҡолова гражданин Фәйзуллинға ҡул күтәрҙеме, һеҙ буяу эше менән шөғөлләнгәндә?

– Мин, мәҫәлән, күрмәнем. Улар юғары тонда һөйләштеләр үҙ-ара... ошо ҡойма буяу мәсьәләһендә. Франгиза Сәғитовна ауылдағы бөтә ҡоймаларҙы ла Самат Сәлимовичтан буятыуын үтенде.

– Тимәк, ҡул күтәрмәне? – Һүҙгә адвокат ҡушылды.

– Нишләп күтәрһен инде, – тип яуапланы Тәлиға Мөзәһитовна. – Хакимиәт башлығы менән уҡыусыны айырмаҫҡа Франгиза Сәғитовна һуҡыр түгел бит, наҙан уҡыусыларҙың тимер кеүек туң баштарына һуғып та ҡулдары ауыртып бөтәлер уның...

Суд әһелдәре лә, залдағы халыҡ та, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, йылмайышып ҡуйҙы.

– Гражданка Ҡәйүмова, әгәр әйтер һүҙҙәрегеҙ бөтһә, урынығыҙға ултырырға мөмкин, – тине судья. – Судҡа мәғлүмәт биреү өсөн гражданка Казакова саҡырыла. Үҙегеҙ менән таныштырығыҙ.

Ҡәмәр Ҡыямовна ҡыйыу ғына урынынан тороп баҫты, ғүмере буйы ошо һорауҙы көткәндәй, тәмен белеп һөйләй башланы:

– Казакова Ҡәмәр Ҡыямовна булам. Тәпәләп урта мәктәбендә социаль педагог булып эшләйем. Әйтергә кәрәк, үтә лә яуаплы эш. Быны мәктәптә минән башҡа бер кем дә тарта алмай, сөнки...

– Гражданка Казакова! – Судья, бүлдереп, һорау бирҙе: – Хакимиәт башлығы менән дәғүәсе араһындағы низағ тураһында, шаһит булараҡ, нимә әйтә алаһығыҙ?

– Бер нәмә лә әйтә алмайым. Улар ҡоторонғанда, мин тыныс ҡына ҡойма буяу менән мәшғүл инем. Артым менән торғас, бер нәмә лә күрмәнем.

– Һуң, ҡолаҡ-күҙҙәрегеҙ бар бит, – тип һүҙ ҡушты прокурор. – Күҙ күрмәһә, ҡолаҡ ишетергә тейеш ине бит?!

– Нимә тиһегеҙ? Һорауығыҙҙы ҡысҡырып бирегеҙ! – тине Ҡәмәр Ҡыямовна. – Күп уҡый торғас, күҙҙәремдең нурҙары ла бөткән. Етмәһә эргәмдә күҙлегем дә юҡ. Әллә һин биргәйнеңме һорау? – тип залда эргәһендә ултырыусының ҡабырғаһына төрттө.

– Аңлашылды, гражданка Казакова, ултырығыҙ. – Судья алдында ятҡан ҡағыҙға ҡарап алды: – Шаһит булараҡ, Тәпәләп ауылы китапханасыһы Муллаянова Динә Фатих ҡыҙын тыңлап китәйек.

– Ауырыу сәбәпле, ул судҡа килә алмаған, – тип белдерҙе ишек төбөндә тороусы хеҙмәткәр.

– Бер ниндәй ҙә ауырымай. Кистән башмағы көтөүҙән ҡайтманы. Иртә менән шуны эҙләргә сығып китте. – Ҡәмәр Ҡыямовна белдекле ҡиәфәт менән яңынан тороп баҫты. – Динә лә бер нәмә лә күрмәне. Минең аша ошо турала әйтергә ҡушты.

Самат Сәлимовичтың йөҙө бүртенеп сыҡты:

– Һуң, мине мыҫҡыл иткәнде бөтәгеҙ ҙә ауыҙ йырып ҡарап торҙоғоҙ ҙаһа! – «Әйҙә, ҡыланығыҙ» тигәндәй, ул ҡул һелтәне. Килгән халыҡ шаулашып алды.

– Залдың тынысланыуын һорайым, – тине судья, – юҡһа тәртип боҙоусыларҙы сығарып ебәрәсәкбеҙ. Был мәсьәлә буйынса беҙҙең тағы ла бер шаһитыбыҙ бар. Ул да булһа – Тәпәләп мәктәбенең химия уҡытыусыһы Имәнғолова Мәстүрә Зиннәтовна. Уны тыңлап китәйек.

– Гражданка Имәнғолова, ауырыу сәбәпле, судҡа килә алмаған, – тип белдерҙе баяғы хеҙмәткәр.

– Тарт танауыңды, ауырыған, ти. – Ҡәмәр Ҡыямовна мыҫҡыллы ҡараш менән яңынан тороп баҫты. – Бөгөн ире менән икәүһе улдарын Себергә оҙаттылар... эшкә. Таң һарыһы менән, еңел машиналарына ултырып, үҙен Өфө аэропортына тиклем оҙата киттеләр. Көтөү ҡыуырға малдарын, күрше булараҡ, миңә ҡуштылар.

– Аңлашылды, – тине судья һәм социаль педагогҡа ултырырға ымланы ла ҡабат Самат Сәлимовичҡа мөрәжәғәт итте: – Гражданин Фәйзуллин, дәлил йөҙөнән буяуға ҡатҡан вельвет костюмығыҙҙы, зәңгәр сәстәрегеҙҙе судҡа күрһәтә алаһығыҙмы?

– Мин ул турала уйламаным да, – тине аптырап ҡалған хакимиәт башлығы. – Костюмды, эшкинмәгәс, яндырҙым, сәстәремде солярка менән йыуҙым...

Әлеге хәбәрҙе ишеткәс, Франгиза Сәғитовна иркен һулыш алып, еңеүсе ҡиәфәтендә йылмайып ҡуйҙы.

– Бына нисек бит, гражданин Фәйзуллин! – Судья һығымта яһаны. – Һеҙҙең гражданка Үлмәҫҡоловаға ташлаған ғәйептәрегеҙ, күреп тораһығыҙ, шаһиттар тарафынан раҫланманы. Тимәк, Һеҙҙең әйткәндәрегеҙ дөрөҫлөккә тап килмәй, яуыз ниәт менән һөйләнгән?! Һеҙ, ошоға ярашлы статья нигеҙендә, яуапҡа тартылаһығыҙ. Ултырығыҙ!

Судтың бындай йүнәлеш алырын көтмәгән Самат Сәлимович алан-йолан ҡаранып алды ла, бөршәйеп, өндәшмәй генә кире урынына ултырҙы.

– Дәғүәсе белдереүенсә, – тип дауам итте судты алып барыусы, – профсоюз йыйылышы приказ яҙылғас үткәрелгән, ә протоколы приказға нигеҙ итеп алынған. Әйҙәгеҙ, ошо мәғлүмәтте лә асыҡлап китәйек. Шаһит булараҡ, гражданин Әхмәтҡужин саҡырыла. Үҙегеҙ менән таныштырып китегеҙ.

– Хөрмәтле суд! – тип һүҙен башланы Вәсим Ширҡәтович, ҡулдарын ҡаушырып. – Мин мәктәптә география уҡытам, профсоюз ойошмаһын етәкләйем.

– Һеҙгә һорау! – Быныһын прокурор бирҙе. – Гражданка Үлмәҫҡоловаға арналған профсоюз йыйылышын ҡасан, ҡайҙа, ниндәй составта үткәрҙегеҙ, ниндәй ҡарар ҡабул иттегеҙ?

– Эш былай тора. – Профсоюз етәксеһе ҡырын ятҡан сәстәрен һыйпап ҡуйҙы. – Беҙ, ғөмүмән, Франгиза Сәғитовнаның хакимиәт башлығы менән әлегешеүе турһында ишетмәнек. Бары тик приказ яҙылып, уны эшенән бушатҡас ҡына, был турала директорҙан һорашып белдек. Ә профсоюз йыйылышы һуңынан, Франгиза Сәғитовна тарафынан эш судҡа алып барып еткерелгәс кенә, Мөслим Надировичтың баҫымы аҫтында, уға суд алдында аҡланыу йөҙөнән көсләп үткәрелде, һәм директор йәтешле ҡарарҙы сығартыуға ирешә.

– Тимәк, профсоюз йыйылышы приказ яҙылған көндән һуң үткәрелде?

– Имынны шулай.

– Ә ниңә Һеҙ, профсоюз лидеры, белә тороп, ялған документҡа ҡултамға һалдығыҙ? Кеше яҙмышы менән уйнайһығыҙ ҙа баһа! – Адвокат биргән һорау әсе ине. Эйе, был мәсьәләлә хаҡлыҡ өҫкә ҡалҡа, ялған төпкә бата башланы.

– Йыйылыш, күпселек илле бер процент тауыш йыйып, Франгиза Сәғитовнаны эштән бушатыу тураһында ҡарар сығарҙы. Был – бер. Икенсенән, протоколға ҡултамғаңды ҡуймаһаң, бер ставкаға ҡалдырам, тине директор, ә минең әлеге зарплатам ставка ярым тәшкил итә. Аҡсаға алданып ҡылған хатам өсөн мин Франгиза Сәғитовна алдында ғәфү үтенәм... – Боролоп, дәғүәсегә түбәнселек менән баш эйҙе, унан, ҡабат суд әһелдәренә боролоп: – Һеҙҙең алда бөгөн ошо хаталарымды төҙәтәм, – тине.

– Хеҙмәт урынында үҙен нисек тота Франгиза Сәғитовна? – Был һорауҙы ла дәғүәсе яллаған йыуан кәүҙәле, пеләш башлы адвокат бирҙе. Ғыж-ғыж һулауына ҡарағанда, астма ауырыуы менән яфалана, күрәһең.

– Абруйлы уҡытыусы, предметын биш бармаҡтай белә. Ы-ы-ы... – Вәсим Ширҡәтович бесәй ҡойроғондай һалынып тороусы һорғолт сәстәрен өҫкә һыйпап алды ла телмәрен дауам итте: – Ата-әсәләр, ғөмүмән, халыҡ араһында абруйы ҙур, прекрасный педагог...

– Бик кәрәкле мәғлүмәт бирҙегеҙ, рәхмәт. Профсоюз лидерына минең башҡаса һорауым юҡ, – тине адвокат.

Йыйылыштың шаһиты булараҡ, Хәлит Хәмитовичҡа һүҙ бирелде.

– Үҙегеҙ менән таныштырып китегеҙ, – тине судья.

– Ҡоҙаҡаев Хәлит Хәмитович, Тәпәләп урта мәктәбендә немец теле уҡытам.

– Гражданка Үлмәҫколова мәсьәләһе тикшерелгән профсоюз йыйылышы ҡасан үткәрелде?

Хәлит Хәмитовичтың ғүмерендә суд залына тәү тапҡыр аяҡ баҫыуы ине. Шуға ла, тороп баҫҡас, аяҡ быуындарының ҡалтыраныуын тойҙо, тамағына төйөр тығылды. Башы сыуалды:

– Дас ист... Дас ит... Ғәфү итегеҙ, мин теүәл генә әйтә алмайым... склероз... Протоколға дата ҡуйылған көндө үткәрелде, буғай...

– Буғаймы? Дөрөҫөн әйтегеҙ!

– Әйтәм бит, склероз. Энтшулдиген зи битте... Ғәфү итегеҙ, старческий...

– Франгиза Сәғитовнаға ниндәй ҡылыҡһырлама бирер инегеҙ? – Һүҙгә йәнә адвокат ҡушылды.

– Ҡыҙыулығы бар инде. Урта һәләтле уҡытыусы. Зо-зо-ля-ля... Методиканы бик белеп бөтмәй. Дәрестә күберәк үҙе һөйләргә ярата. Уҡыусылар менән эшләп бармай...

– Күреп торам: Һеҙ уны өнәп бөтмәйһегеҙ. Ни өсөн? Әллә электән берәй төрлө конфликтығыҙ бармы? – Адвокат ғыжлай-ғыжлай төпсөнөүен дауам итте.

Франгиза менән йәштәштәр улар, бер класта уҡып үҫтеләр. Сәстәрен ике толомға үреп, остарына ҡыҙыл таҫмаларҙы бантиклап бәйләп йөрөүсе, уҡыуҙа алдынғы, төҫкә сибәр был ҡыҙға ул һәр ваҡыт һоҡланып, ғашиҡ булып йөрөнө. Франгиза ҡайһы партаға күсеп ултырһа ла, арттағы парталағы урын уныҡы булды. Һиҙҙермәй генә ҡыҙҙың йомшаҡ толомдарын тотҡолап та ала ине. Ул ғына ла түгел, ҡыҙҙы үҙенә нисек тә йәлеп итеү өсөн тегенең сәстәрен ҡара һауытына тыҡҡыланы һәм, әлбиттә, бының өсөн унан йыш ҡына «ялҡынлы сәләм» алғыланы. «Ялҡын»дан ҡыҙарып сыҡҡан битен устары менән ышҡып, мөхәббәте тураһында уйланды. Танау аҫтына яҙғы үлән шикелле сәс бөртөктәре ҡалҡып сыҡҡас, ҡыҙға, яйын тура килтереп, мөхәббәтен тәҡдим итте, хатта, тегенең ай-вайына ҡуймай, бер нисә тапҡыр өйөнә лә оҙатҡыланы. Анауы армиянан ҡайтҡан Бөркөт Ғабдрахман малайы араға инмәһәме, Франгиза эргәһендә башҡаса эҙең булмаһын, тип танауын емереп ҡайтармаған булһамы, бәлки, яҙмыш уны һөйгәне менән ҡауыштырған да булыр ине. Тик Сәғиттең шул тиҫкәре ҡыҙы үҙенә ғүмерлек йәр итеп әлеге Ғабдрахман малайын һайланы, уға кейәүгә сығып, ике ул, ике ҡыҙ тапты, ошолай итеп Хәлит Хәмитовичтың иң нескә күңел хистәрен – ҡайнар мөхәббәтен дорфа рәүештә ергә һалып тапаны. Бына һиңә бөтә конфликт! Күңелендә ҡайнаған фекерҙәрҙе ул, әлбиттә, судка сығарманы.

– Арабыҙҙа бер ниндәй ҙә конфликт юҡ, – тине.

Хәлит Хәмитовичтан һуң мәғлүмәт биреүсе шаһит Ғәлимә Мәрҙәновна ла дәғүәсенең кире яҡтарын асып һалырға тырышты:

– Ул үҙе былай һәйбәт кенә уҡытыусы, ләкин уның миңә характеры оҡшамай.

Кешенең уңыштарынан көнләшә, башҡалар тураһында маҡтап һүҙ әйтмәç. Мин-минлеге айырыуса көслө...

– Беҙ бында характер тикшермәйбеҙ, – тип бүлдерҙе судья. – Факттар буйынса мәғлүмәт бирегеҙ.

– Мин һөйләгәндәр бөтәһе лә факт. – Һүҙен бүлдергәнгә шаһит ҡыҙыбыраҡ китте. – Эйе, факт – мин директор яҡлымын. Ул һөйләгәндәргә ҡушылам, бөтәһе лә дөрөç.

– Ялған күрһәтмә биргән өсөн шаһиттар ҙа язаға тарттырылыуын тағы бер тапҡыр иçегеҙгә төшөрәм, – тип киçәтеү яһаны судья.

– Ҡурҡытмағыҙ! Минең бер гонаһым да юҡ. Кеше үлтермәнем, бәндә таламаным. Бәйләнерлек бер нигеҙегеҙ ҙә юҡ!

– Юҡ икән юҡ. Аңлашылды, ултырығыҙ... – Телсән шаһит менән артабан һөйләшеүҙең файҙа бирмәйәсәген аңлаған судья тағы ла бер мәғлүмәт биреүсене баçтырҙы:

– Үҙегеҙ менән таныштырығыҙ, – тине ул, Айнур Ғиндулловичҡа мөрәжәғәт итеп.

Ҡуңыр күҙҙәрен ҙур асып, залға нисектер ҡурҡыбыраҡ ингән Айнур трибуна артына үтте:

– Мин Әҙеһәмов Айнур Ғиндулла улы булам. БДУ-ны тамамлап ҡайтҡас, мәктәптә беренсе йыл математика уҡытам.

– Франгиза Сәғитовнаға ҡағылышлы ниндәй мәғлүмәт бирә алаһығыҙ? Ғөмүмән, уның тураһында ниндәй фекерҙәһегеҙ?

Шаһит берауыҡ танауын ҡул арты менән ышҡып уйланып торғандай итте:

– Мәктәптә әле мин яңы ғына уҡыта башланым, шуға күрә коллегаларымды ныҡлап белеп бөтмәйем. Франгиза апай ул, былай, уртаса ғына уҡытыусы инде.

– Һеҙ Тәпәләп урта мәктәбен тамамлағанһығыҙ, – тип һүҙгә ҡушылды ғыжғыж быуылып йүтәлләүсе адвокат, – һорауым бар: – математиканан Һеҙҙе кем уҡытты?

– Кем тип... Франгиза Сәғитовна, – Айнур Ғиндуллович ҡул арты менән йәнә танауын ышҡып алды.

– Ул уҡытҡан, тимәк, Һеҙгә ул төплө белем биргән. Башҡа фәндә һайламайынса, ул уҡытҡан фән буйынса артабан белем эстәгәнһегеҙ. Дөрөç әйтәмме? – Адвокат тешен тәрәнерәк батыра барҙы.

– Мин улай тимәç инем. – Шаһит, тиктормаç ҡулдарын тыйыу йөҙөнән, трибунаға йәбеште, – мин был фәнде күберәк үҙ алдыма өйрәндем, ә дәрестә тыңламай инем...

– Тыңламаған уҡыусыға уҡытыусы сара күрмәнеме ни?

– Нишләп күрмәһен, ти, күрҙе: башҡа аҡбур менән ҡундыра ине.

– Ә үҙегеҙ ошондай осраҡта нимә эшләйһегеҙ?

– Ҡул күтәрмәйем. Уҡыусыны елкәһенән генә тотам да дәрестән ҡыуып сығарам.

– Профсоюз йыйылышы ҡасан үтте? – Был һорауҙы прокурор бирҙе.

– Франгиза Сәғитовна ауыл хакимиәте башлығын тәпәләгән көндө, – тип яуапланы Айнур Ғиндуллович, күҙ ҙә йоммайынса.

– Тәпәләгән, тиһегеҙ, үҙегеҙ күрҙегеҙме һуң?

– Юҡ, халыҡ һөйләй бит...

– Башҡаса мәғлүмәтегеҙ булмаһа, ултырығыҙ.

Франгиза Сәғитовнаға ҡарата судта кире мәғлүмәт биреү өсөн Әҙеһәмовтың үтә мөһим сәбәптәре бар ине. Әгәр ошонда ул дәғүәсене яманлап сығыш яһаһа, директор уға ставка урынына ставка ярым эш хаҡы түләргә вәғәҙә итте. Ә аҡса тигәнең ғаиләле, бер балалы атай кешегә ҡара төндә ут кәрәккән шикелле би-ик кәрәк.

Әлеге һорау алыуҙан һуң судтың ҡалған өлөшө Франгиза Сәғитовна файҙаһына китте. Тик кенә, алдағы яҙмышын көтөп ҡул ҡаушырып ултыра торған бисәләрҙән түгел Үлмәҫҡолова ханым. Бөгөнгө судҡа ул ҡасандыр үҙе уҡытып, хәҙер илебеҙҙең алыҫ һәм яҡын мөйөштәрендә юғары вазифалар биләүсе, исемдәре массаларға шаҡтай киң билдәле төрлө дәрәжәле түрәләрҙе лә саҡырҙы. Әлбиттә, бөтәһе лә уның үтенесен аҡламаны, ҡайһылары, эш тығынлығына һылтанып, килмәне. Шуға ҡарамаҫтан, килгән өс-дүрте генә лә суд барышын йөҙ һикһән градусҡа бороуға иреште.

– Һеҙ кемдән көләһегеҙ, кемде мыҫҡыл итәһегеҙ?! – тип һүҙ башланы сауҙа министрлығынан килеп төшкән ҡалын тауышлы, оло ҡорһаҡлы, тәпәш буйлы, сәскәле галстук таҡҡан түрә. – Франгиза Сәғитовна – ғилем үҙәге ул, бик белгең килһә. Бына мине, ябай крәҫтиән балаһын, нисек итеп сауҙаның иң юғары нөктәһенә менеп етте, тиһеңме, әйтәм: алгебраик ысул менән, хөрмәтле математигым өйрәткәнсә, бөтә нәмәне лә тигеҙ өлөштәргә бүлеп. «Бер алманы бишкә бүләйек» тип юҡҡа йырламайҙар бит. Дүрткә бүлдеңме, үҙең өлөшһөҙ ҡалаһың, ә бөтөнләй бүлмәй һаранлашһаң, ғүмерең буйы ана шул һыңар алмаға ҡарап ҡалыуың да ихтимал. Уның кеүек оҫта белгес районда ғына түгел, республикабыҙҙа ла бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Эшкинмәгән буш ҡыуыҡтарға грамота бирмәйҙәр. Остазымдың Маҡтау грамоталары минең ҡулда ғына өсәү, бына күрегеҙ, – ул ҡултамғалы мисәт һуғылған ялтыр ҡағыҙҙарҙы өҫкә күтәреп күрһәтте, – бына берәүһен үҙем әле кисә генә министрҙан ҡул ҡуйҙырып әҙерләп ҡуйғайным, тырыш уҡытыусыма рәхмәт йөҙөнән. Икенсе грамотаны Франгиза Сәғитовнаға йәшерәк сағында «Сибәр ҡыҙҙар» конкурсында еңеп, «Иң сибәр мисс» титулына лайыҡ булған өсөн биргәндәр. Бына өсөнсө грамота: һабантуйҙа ҡул көрәше буйынса иң көслө ҡатын-ҡыҙ призын яулаған. Тимәк, эшсән шәхес! – Мәғлүмәт биреүсе тағы ла юғарыраҡ тонға күсте: – Бына әле лә ул, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып, ауыл хакимиәте башлығы менән конфликтҡа ингән. Бөтә ҡырын эштәргә башҡалар шикелле күҙ йомоп, өйөнә ҡайтып тыныс ҡына ял итһә, беҙ ҙә бөгөн суд залында ултырмаҫ инек. Ул йәмғиәтебеҙҙе төрлө яманлыҡтан арындырыу өсөн, бер үҙенең генә көсө етмәгәс, ярҙамға беҙҙе – үҙе уҡытҡан уҡыусыларын саҡырҙы. Мин күҙгә бәреп әйтәм: хакимиәт башлығы ҡойма буямаған – күҙ буяған, – ул арттараҡ ултырыусы Самат Сәлимовичҡа ишара яһаны: – Ни хаҡың бар һуғышта Ватан өсөн баштарын һалған яугирҙарҙың ғаиләләренә ярҙам ҡулы һуҙмаҫҡа?! Яңғыҙ көн күреүсе ул тол ҡалған инәйҙәр яҙмыш тарафынан былай ҙа ҡыйырһытылған, ә һин уларҙың ҡоймаһын буяуға буяу тапмайһың? Миңә шылтыратҡан булһаң, ҡоймаларҙы ғына түгел, аҙбар-ҡураларҙы ла буярлыҡ буяу табып бирә инем. Хөрмәтле суд! Мин Һеҙҙән гражданин Фәйзуллинға ауылдың бөтә ҡоймаларын да буятып сығыуын йөкмәтеүегеҙҙе һорайым, ә ҡәҙерле уҡытыусым Франгиза Сәғитовнаға гражданин Фәйзуллин мораль зыянды үҙ кеҫәһенән аҡсалата ҡаплаһын! – Тир бәреп сыҡҡан йөҙөн ҡулъяулыҡ менән һөртөп, сәскәле галстук таҡҡан түрә урынына ултырҙы.

Шаһиттар тирләп-бешеп, береһенән-береһе уҙҙырып мәғлүмәт биргән ваҡытта, судьяның кеҫә телефоны шылтыраны:

– Был Өлкә Юғары судынан, – тине судьяға таныш тауыш. – Нисек унда беҙҙең Франгиза апай, еңәме? Ярҙам кәрәкмәйме?

– Судтың ҡыҙған мәле. Шаһиттарҙың күпселеге уның мәнфәғәтен яҡлай, борсолмағыҙ, – тип бышылданы судья һәм телефонын һүндерҙе.

Эйе, Өлкә Юғары судында ла кесерәк вазифала бер уҡыусыһы эшләй ине дәғүәсенең. Суд алдынан уның менән дә элемтәгә инеп, аһ-зарҙарын еткергәйне ул.

Һөйләр булһа – тел яҡшы, сәскә атһа – гөл яҡшы, тип әйтәләр халыҡта әйтеүен. Оҙонға киткән суд ултырышында һәйбәт һүҙҙәр ҙә ялҡытты. Ниһайәт, һуңғы мәғлүмәт биреүсе тороп баҫты:

– Хөрмәтле суд! – тине ул. – Мин – Франгиза Сәғитовнаның уҡыусыһы. Оло урында халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлап ултырам. Әлбиттә, математиканан бик көслө түгелмен. Ошо көсһөҙлөгөм арҡаһында байыным. Әйтәйек, дүрт ғәмәлдең өсөһөн ярайһы ғына үҙләштерҙем, ә бына бүлеү ғәмәле башыма инмәгәс инмәне. Алыу ғәмәле – иң оҡшағаны. Йәшерен-батырын түгел, тура килгәндә әле лә тегеһенән-быныһынан бушлай алып йәшәйем. Унан уларҙың бөтәһен бергә ҡушып, байлыҡ туплайым. Иң күңеллеһе – байлыҡты байлыҡҡа ҡабатлау. Мәгәр бүлешә белмәйем. Шуға күрә баш ҡалала өс квартирам, ике дачам, дүрт еңел машинам, өс компьютерым, алты телевизорым бар... Бына ошо бүлеү тигән яуыз ғәмәлде өйрәтә алмағаны өсөн хөрмәтле уҡытыусыма үҙебеҙҙең «Эрзинкә итек» компанияһының Маҡтау грамотаһын тапшырырға рөхсәт итегеҙ! – Шаһит рәт араһынан үтеп, Франгиза Сәғитовнаның ҡулын ҡайнар ҡыҫып, уға герб төшкән ҡатырға тапшырҙы. Был сара, бәлки, оҙаҡҡараҡ та һуҙылыр ине, тел ҡыҫҡартыусы судья бүлдерҙе:

– Мәғлүмәт биреүсе, теманан ситкә тайпылмауығыҙҙы һорайым. Конкретыраҡ һөйләгеҙ.

– Ғәфү итегеҙ, судья әфәнде! Ниндәй булдыҡһыҙ директор ултырттығыҙ унда Тәпәләп мәктәбенә?! Яушевты әйтеүем... – Мөслим Надировичтың күҙҙәренә тура ҡарап, уны утта бейетергә кереште: – Өйҙә өйрә бешерә белмәгән башы менән илдә бутҡа бешерергә тотонған. Наҙанлыҡ – яманлыҡ. Төптән уйлап эш итмәйенсә приказ яҙғаны өсөн кисекмәҫтән үҙен эшенән алып осорорға кәрәк, ә уҡытыусыға түләнмәгән хеҙмәт хаҡын һуңғы тиненә тиклем ҡайтарып бирһен!

– Суд ҡарар сығарырға китә! – тигән иғлан яңғыраны. Суд әһелдәре урындарынан ҡуҙғалып, күрше бүлмәгә инеп юғалды.

Шаҡтай ғына ваҡыт үтте. Ҡаршы яҡтар бер-берeһенә күтәрелеп ҡараманы, һөйләшмәнеләр. Ҡайҙандыр осоп ингән бал ҡорто ғына, бер туҡтауһыҙ безелдәп, тәҙрәне «штурмлау»ын дауам итте.

– Баҫығыҙ, суд килә! – тигән тауыш залдағыларҙы һиҫкәндереп ебәрҙе.

– Суд ҡарар итә. – Судья бөтәһенә лә ишетелерлек тыныс тауыш менән уҡыуын башланы. – Беренсе: Тәпәләп мәктәбе директоры гражданин Мөслим Надир улы Яушев тарафынан урындағы коллектив договорҙы һәм хеҙмәт тураһындағы кодексты тупаҫ рәүештә боҙоп, үҙ башбаштаҡлығы менән гражданка Франгиза Сәғит ҡыҙы Үлмәҫколованы эштән бушатыу тураһында яҙған приказды ғәмәлдән сығарырға;

икенсе: гражданка Франгиза Сәғит ҡыҙы Үлмәҫколоваға эшенән бушатылған көндән алып әлеге суд ҡарары сыҡҡан көнгә тиклем түләнмәгән хеҙмәт хаҡын, тарификацияла ҡаралғанса, Тәпәләп урта мәктәбе директоры гражданин Мөслим Надир улы Яушевтың кеҫәһенән түләтергә;

өсөнсө: Тәпәләп ауыл хакимиәте башлығы гражданин Самат Сәлим улы Фәйзуллиндан, нахаҡ яла яғып мыҫҡыл иткәне өсөн, гражданка Франгиза Сәғит ҡыҙы Үлмәҫколова файҙаһына илле мең һум күләмендә әхлаҡ зыянды ҡаплатырға, аҙна эсендә уға ауылдың бөтә урамдарындағы ҡоймаларын да буятып сығырға, артабан уның әлеге вазифала ҡалыу-ҡалмау мәсьәләһен хәл итеүҙе район хакимиәтенә йөкмәтергә!

Ошоноң менән суд ултырышы тамам! – Судья алдында ятҡан суд сүкешен шапылдатып өҫтәлгә һуҡты.

8

Ошо ваҡиғаларҙан һуң Тәпәләп ауылы икегә бүленде: бер төркөм халыҡ – властар яғында, икенсеһе – оло еңеүҙәргә ирешкән хөрмәтле Франгиза Сәғитовна яҡлы. Эйе, авторитет тигәне бермә-бер үҫеп китте уҡытыусының. Уның менән һәр ерҙә иҫәпләшәләр, түрҙән урын бирәләр. Әтәстәрҙең пыр туҙышып һуғышҡандарын күргәнегеҙ барҙыр. Еңелеүсе әтәс, күшеккән тауыҡ шикелле, башын түбән һалындырып, йүгерә-атлай ситкә ҡасып китә, ә еңеүсе әтәс, күкрәген киреп, ҡанаттарын йәйеп, башты юғары сөйөп һәм, әлбиттә, иң бейек кәртәгә баҫып, «Бөтәгеҙ ҙә мине күрегеҙ, бына мин – еңеүсе!» тигәндәй, бар тарафҡа оран һала.

Дә-ә, өҫтәгеләр иҫкесә идара итә алмай, аҫтағылар яңыса йәшәргә теләй торған ваҡыттар етте. Тәпәләптә ысын мәғәнәһендә граждандар һуғышы башланды. Ләкин үткән быуаттың егерменсе йылдарында бында йәшәгән халыҡ берберенә ҡаршы һәнәк, салғы күтәреп барһа, бөгөнгө тәпәләплеләр башҡасараҡ көрәшеү ысулдарын тапты. Был аңлашыла ла: элекке наҙандар ҡултамға урынына һәнәк йә тәре һүрәте төшөргән. Ә бөгөнгөләр? Бөгөнгөләр бөтәһе лә исем-фамилияһын яҙа белә, һәр ҡайһыһының урта белеме бар. Урта мәктәптә уртаса белемле уҡытыусылар уҡытҡас, белем дә уртаса була.

Бына шул икегә бүленгән халыҡ, аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышҡан шикелле, бер-береһен һис аямай әле район мәғариф бүлегенә береһе икенсеһе өҫтөнән шикәйәт яҙа, әле – хакимиәткә, әле – министрлыҡҡа, әле – суд, собес, милиция, редакция, прокуратура органдарына. Тикшереү артынан тикшереү, йыйылыш артынан йыйылыш. Бер һүҙ менән әйткәндә, бөтә ауыл үҙе тоҡандырған утлы табала бейей.

Самат Сәлимович Фәйзуллин өҫтөнән дә ялыуҙар, боҙло ямғыр шикелле, баш күтәреп эшләргә ирек бирмәй, ишеп яуып тора. Ул суд ҡарарҙарын еренә еткереп, теүәл үтәргә бөтә көсөн һалды: район хакимиәтенә сығып, ҡалған ҡоймаларҙы буярға аҡса юлланы. Ләкин унда лимит юҡлыҡҡа һылтандылар. Аптырап, төрлө эшҡыуарҙарға барып баш эйҙе. Бер аҙ тапты-табыуын. Ай һайын Франгиза Сәғитовна файҙаһына тотоп ҡалынған хеҙмәт хаҡының үҙенә теййешле һуңғы һумдарын ҡушып, ҡалған ҡоймаларҙы ла мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре менән бергә буяп сыҡты.

Бер көн хакимиәт бинаһы ҡаршыһына юл хәрәкәте хеҙмәте машинаһы килеп туҡтаны. Унан төшкән милиция капитаны бүлмәгә үтте лә, честь биреп, үҙе менән таныштырғас:

– Бына Һеҙҙең өҫтән сираттағы шикәйәт, – тине. – Аноним хат рәүешендә яҙылһа ла, факттар күҙгә бәрелеп тора. Ысынлап та, ҡала менән Тәпәләп араһындағы юл ситтәрен дегәнәк, шайтан таяҡтары баҫты. Саптырмайһығыҙ. Һеҙгә үткән айҙа ошо турала яҙма киҫәтеү ебәргәйнек. Кәмселектәрҙе бөтөрөргә бер ай ваҡыт та биргәйнек. Үтәмәгәнһегеҙ. Бына һеҙгә бер мең һум күләмендә штраф түләү өсөн ҡарар менән квитанция ҡалдырам. – Капитан арҡаға аҫылған махсус күн сумкаһынан бланктар алып тултырҙы ла Самат Сәлимовичҡа һуҙҙы.

Тәртип һаҡсылары менән һүҙ көрәштерергә яратмай хакимиәт башлығы. Шуға ла:

– Хараша, – тип кенә ҡуйҙы. Ғөмүмән, ул кешегә ҡарата үс һаҡламай. Судта үҙенә ҡаршы сыҡҡан, яҡлап бер йылы һүҙ әйтмәгән, ҡул аҫтында эшләп, унан игелек күргән хеҙмәткәрҙәрен дә ғәфү итте.

Мәгәр түҙемлектең дә төбө төшә. Кәзә майын сығарып көн күргәнсе, ул тынысыраҡ эш һайларға булды. Үҙ теләге менән ғариза яҙып, хакимиәт

ҡамытынан арынды ла, дилбегәне ошо постҡа тәғәйенләнгән клуб методисы Тәлиғаға тапшырып, фермаға юлланды. Ауыл көтөүен көтөргә, фермала малсы булып тир түгергә һәр ваҡыт вакансия була.

– Үҙемә үҙем – баш та, түш тә, бер кем менән дә эләгешәһе юҡ. Быҙау-һыйырҙарҙы пыр туҙҙырып тиргәһәм дә, миңә ҡаршы береһе бер һүҙ әйтмәйәсәк. Хайуан һин, скотина, сәбәке, тип ебәр – көйшәп, тыныс ҡына, аҡыллы күҙҙәре менән ҡарап, тыңлап тик торасаҡтар. Жизнь хараша! – тип йыуатты үҙен Самат Сәлимович.

Ферма тигәс тә, уҡыусым, ул элекке совет осорондағы гөрләп торған ферма түгел инде. «Кем өлгөргән – шул сәлдергән» принцибынан сығып, районның аграр бүлеген етәкләүсе Мөштөк Һәүбән малайы Мирхәтим ферманы ҡустыһы Миңләхмәткә тартып алып бирҙе – әлбиттә, эсендәге йөҙ баш һыйыры һәм ошо тиклем быҙауҙары менән бергә. Ләкин, үҙегеҙ беләһегеҙ, аттан ала ла тыуа, ҡола ла. Мирхәтим шәп тә бит, Миңләхмәт – эскесе. Башы үлтереп сатнаған мәлдәрҙә бер-ике шешә «наркомовский» өсөн быҙау йә һыйыр һатып ебәргән саҡтары ла булғыланы. Мәгәр ул үҙен эскеселәр рәтенә индермәй, киреһенсә, донъялағы иң айныҡ кешеләр иҫәбендә йөрөтә. Үҙе әйтмешләй, башы «сеп-свежий» уның, аяҡтары иҫерек. Ошо аяҡтары арҡаһында йыш ҡына уға йә һыйыр эргәһендә, йә быҙау ҡосағында йоҡларға тура килә. Бер көн шулай быҙауҙар араһында ҡунған был. Уянып китһә, фуфайкаһын алмаштырып кейҙергәндәрме ни – ҡара фуфайка йәшел төҫкә ингән. Йәшеллеге суҡынып китһен – еүеш. Еүешлегенә лә, бәлки, түҙер инең – тоҙло, тәнде әсеттерә. Бына ошо хәлдәрҙән һуң бөтөнләй ҡоторҙо был мөдир тигәнең. Иртәнге яҡта уның, ғәҙәттә, бер күҙе айныҡ, береһе иҫерек була. Ҡатынынан йәшереп фуфайка еңенең эсенә бер шешә болғансыҡ «наркомовский»ҙы тығып алып килә лә, уның бер аҙын бушатып, ҡалғанын һалам араһына йәшереп ҡуйғас, малсыларҙы «смирно»ға баҫтыра.

– Мал аҫтарын таҙарттыңмы? – тип һорай Самат Сәлимовичтан.

– Таҙарттым.

– Иҙәндәрҙе сепрәк менән ҡороттоңмо?

– Ҡороттом.

– Ярай, тикшереп ҡарайыҡ, – ул, ышанһаң ышан, ышанмаһаң, тамсы ла ышандырырға йыйынмайым, фуфайкаһы менән бетон иҙәнгә ятып тәгәрәйаунай башлай. Унан тороп баҫып, фуфайкаһын һалып, ентекләп әйләндереп ҡарай. Әгәр ҙә фуфайкаға тиҙәк-фәлән йәбешмәгән, ҡоро икән, малсыға эш көнө яҙыла, еүеш икән – үҙенә үпкәләһен – көрәк-һәнәген күтәреп, яңынан иҙән ҡыра башлай...

Мөслим Надировичҡа килгәндә, суд ултырышында үҙенә ҡаршы сығыш яһағандарҙы аҡылға ултырырға ине иҫәбе – яйы тура килгән һайын һалам аҫтынан ут йөрөтөргә тырышты. Ләкин, әлеге лә баяғы Франгиза Сәғитовна арҡаһында, бөтәһе лә ул тигәнсә килеп сыҡманы. Һин ишектән ингәнсе, был үҙ һүҙле математик тәҙрәнән керә. Вазифаһына һалҡын ҡарай, тип социаль педагогты эшенән бушатырға ауыҙ ғына асҡайны, судтан еңеү яулап ҡайтҡан Үлмәҫҡолова директорға себеш алырға күктән уҡтай атылып төшкән ҡарсығалай ташланды:

– Әле миңә суд ҡарары нигеҙендә түләнмәгән эш хаҡымды зарплатаң менән ҡаплап киләһең. Инде ат шикелле егелеп ауыр педагогик йөк тартыусы Ҡәмәр Ҡыямовнаға тел тейҙерәһең, ҡара уны: судҡа бирһә, икебеҙгә түләргә зарплатаң етмәйәсәк. Уны яҡлап үҙем алдан йөрөйәсәкмен!

Быңдай ҡурҡыныс янауҙарҙан һуң директорҙың кикреге бер аҙ шиңде шиңеүен, шулай ҙа ул бирешмәне. Өйрәк биреп ҡаҙ алған, ҡаҙын биреп ҡаҙалған, тиҙәр халыҡта. Нисек тә бер-икәүһенә ҡаҙалмай тороп, йәнем тыныслыҡ

тапмаç, тип уйланы ул. Бик әтәсләнеп китмәһендәр. Әллә балта һына, әллә түмәр ярыла бит әле. Осло ҡаҙауын директор профсоюз ойошмаһы етәксеһе Вәсим Ширҡәт улы Әхмәтҡужин ғаиләһенә батырырға булды. Йәшәмәһен әле бисәһе Өммөгөлсөм ханым менән пар күгәрсендәрҙәй гөрләшеп кенә. Ҡылған ғәмәлдәре өсөн улар ҙа яза алырға тейеш. Нисек тә араларын боҙорға кәрәк. Бының өсөн кәкүк кеүек яңғыҙы көн күреүсе сибәр генә иркәй – аккомпаниаторыбыҙ бар. Тыуғандамы, тыуғасмы – бер шөрөбө төшөп ҡалған, шуғалырмы, еңел-елбәҙәк аҡыллыраҡ. Ҡатын-ҡыҙ итәге күҙенә салындымы, ул итәктең кемдеке булыуына ҡарамаҫтан, артынан тағыла ла китә. «Эх, яратам бит үҙеңде» тиеүселәрҙе ҡайһы ғына һылыу йән хуп күрмәҫ икән! Ләкин һылыу йәндәрҙең тән һаҡсылары – суҡмар йоҙроҡло үҙ ирҙәре лә бар бит әле. Бына парадокс: ҡатындар тегене хуп күрә, ирҙәре, киреһенсә, ен итә. Шуға күрә аккомпаниаторҙың көпә-көндөҙ күҙ төбөндә емелдәтеп «фонарь» яндырып йөрөүе ғәҙәти күренешкә әйләнде. Бер көн ҡатыны Мөслимәне ҡапҡа төбөнә тиклем ҡултыҡлап оҙатып килгәс, түҙҙе Мөслим Надирович, әммә ишек алдына инеп, Мөслимәнең күҙҙәренән сут-сут үбә башлағас, өйҙән атылып сығып, аккомпаниаторҙың әпәй шүрлегенә менеп төшөүен үҙе лә абайламай ҡалды.

О-о, егеттәр, көнләшеү – үлем менән бер ул. Иң аптыратҡаны Мөслимәһе булды. Аккомпаниатор эйәген тотоп ергә ауып төшөүгә, ҡатын, бесәй кеүек, оҙон тырнаҡтарын иренә батырҙы:

– Ниңә бер ғәйепһеҙгә кешегә ҡул күтәрәһең?! Ул бит күҙемә ингән серәкәйҙе тел осо менән һыпырып алды. Директор башың менән нисек оялмайһың, ә?! Хәҙер бөтә ауылға ҡысҡырып хур итәм үҙеңде, хайуан!

Ә бит  Мөслим Надирович урынлаштырҙы Тәпәләп мәктәбенә эшкә һигеҙ класс белемле Ильяс Рамазанович  Ямаловты гармунсы-аккомпаниатор итеп. Былай матур ғына уйнай гармунда. Тик әлеге шул ҡырын, әхлаҡһыҙ һыҙаттары ҡамасаулай. Уның һөйәркәләрен һанай китһәң, терпе өҫтөндәге энәләр ҙә етмәҫ. Ошо йүнһеҙ ғәҙәте арҡаһында ҡатыны ла түҙмәгән, өйөнән ҡыуып сығарған. Юҡ, ҡапыл ғына түгел. Тәүҙә табиптарға барып, иренең сәйер ғәҙәте тураһында һөйләп ишеттергән. Тегеләре, дауалауҙы кисектермәй, «тиҙ ярҙам» машинаһында ирҙе тура психиатрия дауаханаһына оҙатҡандар. Унда диагнозды тиҙ билдәләгәндәр: теге саҡ башында етмәгән бер шөрөбө салбар эсендәге ағзаға тәгәрәп төшкән, ти. Шуға салбар эсе, аҙбарға ябылған алтын айғыр шикелле, дөбөр-шатыр килә, ти.

– Тимер рәшәткә артына тығырлыҡ шыр диуана түгел түгеллеккә, әммә кәзә майына сыҙаша алмай. Дәртен баҫа торған таблеткалар биреп дауаларбыҙ, – тигәндәр һәм биш-алты ир-ат ятҡан ауырыуҙар палатаһына урынлаштырғандар. Ысынында иһә Ильяс Рамазанович был дауаханала үҙен кәбеҫтә баҡсаһына төшкән кәзә шикелле тойған. Палатаһына инеп, ундағы ауырыуҙарға сәләм дә биреп тормаҫтан:

– Ҡайһы палаталарҙа ҡатын-ҡыҙ йәшәй! – тип һораған. Фәлән ерҙә, тигәс, сығып та шылған. Күп тә үтмәй, ул әле бер, әле икенсе ҡатын-ҡыҙ менән йә ҡултыҡлашып, йә ҡосаҡлашып зал буйлап үтә, ял бүлмәһенә бикләнеп, ғишыҡ-мишыҡ ҡуйырта. Ә унан хәле бөтөп, һуты һығылған лимон шикелле бәлшәйеп, палатаһына инеп ята ла ауырыу ир-ат  алдында күкрәк һуға: – Фәлән палаталағы фәлән ҡатын хәҙер минеке, – ти. – Сиратта фәлән ханымдың йөрәген яулап алыу – изге бурысым, – ти. Юҡ, гүзәл заттарҙың да төрлөһө бар. Бер күҙ ҡарашы менән дә баҫҡан ереңдә туңдырып ҡуя ҡайһы берәүҙәре. Әммә бындағы гүзәлдәрҙең ошо уҡ психиатрияла ятыуҙарын иҫтән сағармаһаҡ ине. Таблеткаларға килгәндә, Ильяс Рамазанович уларҙың береһен дә йотоп ҡарамай, «йоҡо дарыуы» тип, башҡа пациентарға «бүләк» итә.

Бына ошо аккомпаниаторҙы директор кабинетына саҡырып алып, ҡолағына түбәндәгеләрҙе бышылданы:

– Һинең ҡулдан ғына килә торған үтә мөһим эш бар, Ильяс дуҫ, – тип башланы ул һүҙен. – Иң мөһиме: һин яратҡан шөғөл...

– Булмаҫ. Минең нимә яратҡанды беләһең дә инде, – тип йылмайҙы тегеһе.

– Белгәнгә әйтәм дә: мө-хәб-бәт!!!

«Мөхәббәт» һүҙен ишеткәс, Ильяс Рамазановичтың күҙҙәре осҡонланып, быяла кеүек ялтыраны, урынынан һикереп үк торҙо.

– Ҡайҙа, күрһәт, кем?

Директор сабыр ғына кеткелдәп көлөп алды:

– Хә...хә... Өммөгөлсөм Баяновна...

– Бәй, ул бит Вәсим Ширҡәтовичтың ҡатыны!

– Булһа һуң... Бөгөн – уныҡы, иртәгә – һинеке...

Эйе, Мөслим Надирович аккомпаниаторҙың сәйер ҡылыҡтарын биш бармаҡтай белә. Нишләптер кейәүҙәге ҡатындарҙы хуп күрә ул, кейәүгә сыҡмағандар менән сыуалып бармай. Бының сәбәптәре бар. Беренсенән, кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙарҙы «тәртә араһына» индереү өсөн күп тир түгергә кәрәк. Икенсенән, ирҙәге ҡатындарҙы оҙаҡ көйләп тораһы юҡ. Тәүҙә күҙ менән һөйләшеп аңлашаһың да, теләктәреңә йәшел ут тоҡанһа, сираттағы мөхәббәт мәсьәләһен сисергә лә була. Өсөнсөнән, Ильяс Рамазановичтың эсендә, ниндәй ҙә булһа ҡатын-ҡыҙҙың ире менән ҡултыҡлашып барғанын күрһә, ен үкерә башлай. Нишләп әле ул – уның ҡатыны, ә минеке түгел? Булһын һис тә юғы – икебеҙҙеке лә. Тел төбөн «сылатып», күңеле асылып киткән мәлдәрҙә ул эргәһендәге ир-атҡа әле әйтелгән сәбәптәрҙе бармаҡ бөгөп аңлата. Ҡатын-ҡыҙҙың тоғролоғо – башҡа мәсьәлә. Ә бына хәләле эргәһендә икенсе берәүҙең сыуалыуы теләһә ниндәй ныҡлы ғаиләгә лә бәҫ өҫтәмәй. Ильяс Рамазановичтың ҡөҙрәте менән ҡайһы бер ғаиләләрҙең тарҡалыу сәбәбе ошондалыр.

– Әгәр Вәсим Ширҡәтович менән Өммөгөлсөм Баяновнаның араларын боҙоуға ирешһәң, ай һайын үҙеңә мул ғына премия яҙасаҡмын, ставкаңды арттырасаҡмын, – тип дәртләндерҙе директор ауылдың атаҡлы Дон-Жуанын.

Ильяс Рамазанович кеҫәһенән осһоҙло «Прима» сигареты алып ҡабыҙҙы.

– Әгәр бөгөндән ошо эшкә егелһәң, бынан ары «Прима» түгел, «Мальборо» ғына тартырһың.

– Мин риза! – Күҙҙәренән шайтан осҡондары сәсеп, аккомпаниатор урынынан ҡуҙғалды.

Дә-ә... Үҙгәрҙе Вәсим Ширҡәтовичтың хәләл бисәһе, ҡояшта уңған яулыҡ шикелле, күҙгә күренеп үҙгәрҙе. Иренә генә һөйөп ҡарай торған наҙлы ҡараштарын, гүйә, йәй уртаһында ҡаты ҡырау һуҡты. Көтөп алған ул сихри ҡараштар нисектер һиҙҙермәй генә үҙҙәренән-үҙҙәре юҡҡа сыҡты. Күҙ алдында яңы Өммөгөлсөм ҡалҡып баҫты: һалҡын, битараф, ҡырыҫ холоҡло ят ҡатын... Был ханым, элеккеһенән айырмалы булараҡ, көҙгө ҡаршыһынан китә белмәй. Элек айға бер тапҡыр эре мунса тарағы менән тарай торған ҡара сәстәрен көн эсендә төрлө төҫкә буятып өлгөрә. Бер ҡараһаң, ул – брюнетка, икенсе тапҡырында – шатен, өсөнсөһөндә – блондинка... Электр бигудийын да, пластмасса бигудиҙарҙы ла ҙур дәрт менән туҡтауһыҙ сәстәренә урай. Теҙҙәрен ҡаплап торған һоро юбка бер көндө ҡыҫҡарып, теҙҙең өҫтөнә менде. Аяҡтарына сепрәк тапочка кейеп йөрөүсе, буйға иренән баш ярымға оҙонораҡ ханым, тағы ла оҙонораҡ һәм зифараҡ күренеү йөҙөнән, бейек үксәле лакировкалы туфлиҙар кейеп ебәрҙе. Ғүмер буйы балыҡ менән ҡыҙыҡһынмай ине – эргәләге Йүрүҙән йылғаһы буйына барып, бер үҙе балыҡ ҡармаҡларға әүәҫләнеп китте.

– Йәнем, мине лә үҙең менән ал әле, бергәләшеп ҡармаҡлауы күңеллерәк тә инде, – тигән иренә:

– Мин һуңғы ваҡытта яңғыҙлыҡты яратам. Тәбиғәт менән бергә-бер ҡалып серләшһәм, күңелем рәхәтлек кисерә. Унан һуң, кеше күп булһа, балыҡ сиртмәй, – тине.

Кистәрен бисәһенең ҡосағына сумған профсоюз лидеры, башын юрған аҫтынан сығарып, аптыраған хәлдә ҡатынына һорау бирә:

– Бына мин, – ти, – ҡиммәтле «Мальборо» сигареты тартам. Ә беҙҙең бөтә донъябыҙҙан, айырыуса һинән һаҫыған тәмәке, тиреҫ башында үҫкән, эшкинмәгән «Прима» еҫе килә. Нилектән икән?

Күп белһәң, тиҙ ҡартайырһың. Әй, был диуана ирҙәрҙең бер ҡатлылығы! Әйтмәҫ бит инде Өммөгөлсөм Баяновна уға дөрөҫөн: һыу буйында аккомпаниатор менән ғишыҡ-ғишыҡ уйнаныҡ, тип. Шуға ла ул, хәйләле донъя файҙалы, тигән әйтем күҙ уңында тотоп, ялған тоғон сисә:

– Исеме генә «Мальборо» уның, ә бөтә сигареттарҙың да эсенә «Прима» тултырып аҡса эшләйҙәр. Хәҙер бит, ҡайҙа ҡарама – контрабанда...

Шулай ҙа бисәһенең был һүҙҙәре бигүк ышандырманы Вәсим Ширҡәтовичты – ул ҡатынын аҫтан ғына күҙәтеү аҫтына алды. Ғәҙәттәгесә бейек үксәле туфлиҙарын кейеп, ҡабартма прическа яһап, мини юбка менән аҡ кофтанан ғына ҡармаҡ ҡолғаһы күтәргән бисәһе, ауыл осона сығып, бөҙрә ҡуйы талдар араһына инеп юғалғас, ул, ҡаса-боҫа, артынан ҡуҙғалды. Шыйыҡ тал ботаҡтарын айырып, башын алға һоноп ҡараһа, ни күрһен: аҡ нейлон күлдәкле аккомпаниатор менән, һыуҙан сыҡҡан пар аҡҡоштар шикелле, ирендәрен иренгә терәшеп... юҡ, булмаҫ... Вәсим Ширҡәтович, парланған күҙлеген күлдәк итәге менән һөртөп, әлеге тарафҡа ҡарап таштай ҡатты, тамаҡ төбөнә төйөр ултырҙы, күҙ алдарын томан баҫты.

– Эй, нишләүегеҙ был? – Ошо һүҙҙәр менән, асыуынан тыны ҡыҫылып, аяҡ аҫтында ятҡан ҡороған талдарҙы шарт-шорт һындыра-һындыра, алдарына килеп сыҡты.

Ләкин Өммөгөлсөм Баяновнаны ҡаушатырмын тимә, күптән элеп киптергән ул ҡаушап ҡала торған йылдарын. Шуға ла үтә тыныс ҡына яуап ҡайтарҙы:

– Балыҡ тотабыҙ.

– Ярай, тотаһығыҙ ҙа, ти. Ә ниңә ҡосаҡлашып үбешәһегеҙ.

– Эй, көнсөлһөң дә инде үҙең. – Өммөгөлсөм Баяновна уҫал ҡарашы менән ирен өтөп алды. – Мәҙәниәт йортонда спектакль ҡуябыҙ. Шуға бына әле балыҡ ҡармаҡлағанда осраштыҡ та репетиция үткәреп ҡарарға булдыҡ. Мирхәйҙәр Фәйзиҙең «Ғәлиәбаныу» пьесаһы буйынса... Ул – Хәлил, мин – Ғәлиәбаныу...

– Һуң, репетицияны ҡыуаҡ араһында ҡасып түгел, мәҙәниәт йортонда йә иһә мәктәп бинаһында үткәрәләр! – Өйгә ҡайтырға һис кенә лә теләге булмаған ҡатынын Вәсим Ширҡәтович, ай-вайына ҡуймай, елтерәтеп, ҡулынан етәкләп алып ҡайтып китте.

«Балыҡ тотоу» ваҡиғаһынан һуң ул төплө ҡарарға килде: ауылдағы йорт-ерен һатып, ҡала тирәһенә яҡыныраҡ ергә урынлашырға! Китмәгән осраҡта, был ишектән инеп, тәҙрәнән сыға торған шыр тиле аккомпаниаторҙың гармунда ғына түгел, ғүмер буйы ҡаҡшаған нервыла ла уйнаясағы, тыныс йәшәргә ирек бирмәйәсәге көн кеүек асыҡ ине.

Үҙ теләктәре менән эштән бушатыуҙарын һорап ғариза күтәреп ингән ирле-ҡатынлы Әхмәтҡужиндарҙы директор, әлбиттә, өгөтләп торманы, ғаризаларына ризалыҡ белдергән ҡултамғаһын һалды ла улар менән иҫәп-хисап яһаны.

«Тейешле язаны алдылар», – тип йыуатты үҙен Мөслим Надирович, суд ултырышындағы сығыштарҙы иҫенә төшөрөп.

– Әйткән һүҙ – атҡан уҡ. Бынан ары бөтә йыр дәрестәре һиңә йөкмәтелә, – тине ул үҙ кешегә әйләнгән аккомпаниаторға, икәүләшеп кабинетҡа бикләнеп, «Мальборо» сигаретының зәңгәр төтөнө аҫтында сәкәштерә-сәкәштерә «Путинка» шешәләрен бушатҡанда.

Сираттағы һөйәркәһенән ҡолаҡ ҡаҡҡан аккомпаниаторҙы аҙна-ун көн буйы махмыр синдромынан сығара алмай яфаланды коллектив.

Тәпәләп мәктәбендә елгә еленләп йәшәү ялҡытты Мөслим Надировичты. Ул йылға яҡын ваҡыт арауығында, суд ҡарарына ярашлы, Франгиза Сәғитовна кеҫәһенә түләйһе һумдарҙы түләп бөттө лә, тауыҡ һымаҡ кирегә тырмаусылар араһында йән ҡыйғансы, тауыҡ түлендә йомортҡа бөтмәгән, баш иҫән булһын, тип, был яҡтарҙан күсеп китергә ҡарар ҡылды.

Буш ҡул менән китеүсе директорҙың башы ла буш була. Ә беҙҙең Мөслим Надировичтың башы, үҙе йыуаш ҡына булыуға ҡарамаҫтан, хәйлә, мәкерҙәр менән шыплап тултырылған. Әйтәйек, үҙе киткәс, нимәгә кәрәк мәктәпкә машина менән трактор? Акт төҙөп, тегеләрҙе иҫәптән сығарҙы. Ә комиссия ағзаларынан ҡултамғаларын нисек ҡуйҙырырға? Тапҡанһығыҙ проблема. Хәүефһеҙлек техникаһы өсөн ҡул ҡуйҙырғанда ҡағыҙ араһына ҡыҫтырып ебәрҙе ул әлеге акттарҙы. Тәнәфес араһында ҡул ҡуйырға ингән уҡытыусы һинең яҙыуыңды ҡарап торамы ни!

И, ағай-эне, бөгөн металлоломға хаҡтың хәтәр күтәрелгән мәле. Сереп бөткән «Жигули»ҙы ла хөкүмәт илле мең һумға һатып ала ла баһа. Трактор менән машина «Утильсырье»ға барып инеүҙәре булды, уларҙан килгән килем Мөслим Надировичтың аҡса янсығына инеп ятты. Быларҙан тыш, телевизор, компьютер кеүек «ваҡ-төйәктәр»ҙе лә «йомдо» ул. Коллектив һиҙмәй ҙә ҡалды. Үҙе юҡтың – эҙе юҡ: һуңынан, бар, эҙләп ҡара. Кемдәрҙер уны, ғаиләһе менән сит илгә юллама буйынса эшкә киткән тип тә һөйләнде, икенселәр, имеш, Тәпәләптә йыйған аҡсалары сумаҙанға һыйып бөтмәгән, шул мул һумдарға ҡалала бер нисә бүлмәле ҙур квартира алған, тип тә ишеттерҙеләр, белмәҫһең...

Суд юлдарында йөрөп, күптәрҙең ҡоттарын боттарына төшөргән Франгиза Сәғитовна алдында районның мәғариф етәкселеге түбәнселек менән ғәфү үтенде. Ебәргән хаталарын төҙәтеү йөҙөнән, уны тиҙҙән Мөслим Надирович урынына директор вазифаһына үрләттеләр.

– Әйҙә, үҙе болғатҡан һыуҙа үҙе йөҙһөн!

Франгиза Сәғитовна йүгәнде ҡулына алған көндө үк педколлективты утлы табаға баҫтырҙы, дөрөҫөрәге – судта үҙенә ҡаршы сығыш яһағандарҙы.

– Һеҙ нишләп минең менән иҫәнләшә белмәйһегеҙ? – тине ул, залда йүгереп йөрөүсе уҡыусыға киҫәтеү яһап торған Хәлит Хәмитовичҡа, үтеп барышлай ризаһыҙлыҡ белдереп.

– Ғәфү итегеҙ, иҫләмәнем. – Уңайһыҙ хәлдә ҡалыуҙан теге уҡытыусының йөҙө ҡыҙарҙы.

Директор алыҫлашыуға, уҡытыусынан шелтә ишеткән малай ауыҙын йырҙы:

– И-и, ағай, бәйләнмә әле, ана, үҙең дә тәртип боҙаһың. Мин йүгерһәм, һин, ана, иҫәнләшә лә белмәйһең хатта! – Имән бармағын сикәһенә терәп борғандай итте лә ҡабат йүгереп китте.

Иң элек вазифаларынан көсһөҙөрәктәрҙе бушатты яңы директор, йәғни йәштәрҙе – ирле-бисәле Әҙеһәмовтарҙы.

Бик теләһәң, хеҙмәт урынынан үҙ теләге менән дә ебәреп була кешене. Бының өсөн уға ҡарата ошо теләккә илтеп еткерерлек оҙайлы саралар күрергә генә кәрәк. Әйтәйек, көн һайын уҡытыусының дәрестәренә инеп ултырып, һуңынан сәғәттәр буйы ентекләп анализ яһайһың. Мәғарифҡа арналған журналдарҙан

цитаталар килтереп, ул үткәргән дәрестәрҙең заман талаптарына тура килмәүен иҫбатлайһың. Унан һуң дәфтәр-пландарын тикшерәһең, класс журналынан кәмселектәр эҙләйһең. Ныҡышмалы эҙләһәң, тырнаҡ аҫтынан да кер табып була. Инде, бер ҙә барып сыҡмаһа, уҡытыусының үҙенән, уның тышҡы ҡиәфәтенән ғәйеп табаһың. Әйтәйек, кисен йоҡлар алдынан улай-былай теге «наркомовский»ҙы түбәтәй аҫтына ебәрмәгәнме тип, ауыҙ тирәһен еҫкәштерәһең.

Әлбиттә, йәш коллегаһының эшенән яңы директор тауыҡ сүпләп бөтмәҫлек етешһеҙлектәр табып, көн һайын тегенең ҡолағына туҡып торҙо:

– Айнур Ғиндуллович! Нишләп Һеҙҙең күҙҙәрегеҙ һуңғы ваҡытта гел генә ҡыҙарып йөрөй, әллә, мәйтәм, күберәк мауығаһығыҙмы аҡ башлы «шайтан һыуы» менән?! – Франгиза Сәғитовна, танауын тартып, еҫкәнгәндәй итте: – Эйе, көн кеүек асыҡ, эсеп килгәнһегеҙ. Француз одеколоны һөртөп кенә алкоголде йәшереп булмай.

«Лимонад», «Спрайт», «Кока-Кола» кеүек газлы һыуҙарҙан ауыҙ иткәне бар Айнур Ғиндулловичтың. Ә бына хәмергә килгәндә, ул тарафҡа күҙ һалғаны ла юҡ уның, сөнки ата-әсәһе унда кесе йәшенән алкоголизмға нәфрәт тәрбиәләне. Етмәһә, уҡымышлы кешеләр ҙә булғас, Горбачев заманында киң таралыу алған «Айныҡтар йәмғиәте»н етәкләне улар.

– Мин төнө буйы дәрескә план яҙып, әҙерләнеп, уҡып ултырҙым. Йоҡо ике сәғәт самаһы ғына тейҙе, – тип йәш педагог, ни эшләргә белмәй, күҙҙәрен бер нөктәнән икенсеһенә йүгертте.

– Йә, дөрөҫөн генә әйтегеҙ ҙә был турала оноторбоҙ, – тип директор хәйләләүгә күсте, тик хәйләһе барып сыҡманы.

– Әпекәйем, ер йотһон, эсмәнем, Франгиза апай. Бына, иҙән үбеп ант итәм. – Ул ысынлап та, теҙләнеп, аяҡ аҫтындағы иҙәнде үбергә эйелде, ләкин аҙна-ун көн һыу түгел, һепертке күрмәгән таҡталар өҫтөндә уны джунглиҙа ла һирәк осрай торған ҡот осҡос бөжәктәр теш ыржайтып ҡаршыланы. Юҡ, эсеп килмәгәнлекте дәлилләйем тип, бысраҡ иҙән үбеп, әллә ниткән сирҙәр йоҡтороп булмай инде. Йәш педагог тороп, салбар балаҡтарынан туҙанды ҡаҡты.

– Бына, күрҙегеҙ, ялған тотолдо. Иҙәнде үпмәнегеҙ бит.

– Тәүҙә йыуҙырырға кәрәк ине.

– Директор эшенә ҡыҫылма. Танауың кипмәгән. Үҙем беләм мин ҡасан йыуҙырырға. Техничка Мәрфуға апайың ауырып ята.

– Ауырымай ул, көн һайын өй беренсә йөрөп, баш төҙәтергә һоранып, аҙна-ун көн буйы эскелек һаҙлығынан сыға алмай. Ниңә уны тикшермәйһегеҙ?

– Барығыҙ, дәресегеҙҙе үткәрегеҙ. Хәҙер артығыҙҙан тикшерергә керәм!

Айҙар буйы йоҡоһоҙ төн уҙғарған улының, уның менән бергә хафаланған килененең һурылып ҡалған йөҙҙәрен күреп торған атай кеше бер көндө, икәүһен дә эргәһенә ултыртып, кәңәш итте:

– Улым, хеҙмәт урыныңда ыҙа сиккәнеңде күреп, һиҙеп торабыҙ. Әллә, мәйтәм, эш урыныңды алмаштыраһыңмы? Ҡала ерендә бензозаправкала танышым бар. Беҙгә диспетчерҙар кәрәк, ти. Килен менән икәү шунда урынлашһағыҙ, күсеп китһәгеҙ, нисегерәк булыр икән? Квартир алырға ла ярҙам итер инек. Ғаилә капиталыбыҙ ул тиклем буш түгел. Иң мөһиме: өйгә артыңдан бөтмәҫ-төкәнмәҫ эш эйәреп ҡайтмаҫ ине. Бына мин үҙем ғүмерем буйы агроном булдым. Дөрөҫ, иртә яҙҙан алып ҡара көҙгә тиклем баҫыуҙа үтте көндәрем, ләкин зарланырлыҡ бер нәмә лә юҡ, сөнки ҡыш оҙоно ял итә инем. Иген үҫәме-үҫмәйме, ставка билдәләнгән, йыл буйы хеҙмәт хаҡым бара. Әсәйең менән бергәләп санаторий-курорттарҙа ла аҙ ял итмәнек. Унан һуң, бөгөнгө Тәпәләп тотош пенсионерҙар ауылына әүерелеп бара бит. Бында йәштәргә перспектива юҡ. Ҡайҙа

эшләһен улар? Теге Һәүбән малайы Миңләхмәттең дә һыйыр фермаһы янып, көлө күккә осто. Осмай ни... быҙауҙар менән иҫерек баштан ҡосаҡлашып ятҡас... Тәмәке тартҡан, ти, бит. Тәмәке көлөнән һаламға ут тоҡанып, янғын сыҡҡан. Ярай, ҡарауылсыға рәхмәт: фуфайкаһынан һөйрәп саҡ алып сыҡҡан үҙен, кәпәсе генә янғын эсендә тороп ҡалған, ти. Уянып китеп, иҫерек башынан кәпәсе артынан яңынан ут эсенә ташланған, ти. Сәстәре, ҡаштары көйөп, ауыҙ йырып, ут эсенән килеп сыҡҡан да, ярай, үҙем зирәк, юҡһа кәпәстән ҡолаҡ ҡаға инем, тип маҡтана, ти, етмәһә.

Әлеге һөйләшеүҙәрҙән һуң, ата-әсәһенең һүҙенән бер ҡасан да сыҡмаған егет, ҡатыны менән балаһын алып, ҡалаға юлланды. Диспетчер булып автозаправкаға урынлашты. Бындағы хеҙмәт хаҡы мәктәптекенә ҡарағанда өс-дүрт тапҡырға күберәк икән. Тормош иптәше Элеонора ла гимназияла уҡыта башланы.

– Я вам покажу Кузькину мать! – тип урыҫсалап ебәрҙе үҙ алдына Францгиза Сәғитовна, элекке ил башлығы Хрущевтың бәтинкәһен һалып, трибунаға бәрәбәрә, капиталист американдарҙы тиргәгәндә әйткән һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп. – Әҙеһәмовтарҙан үс алдым. Сиратта кемдәр унда? Әһә, атҡаҙанған менән мәғариф алдынғыһы. Быларын дәрес тикшереп кенә еңермен тимә. Улар министр алдында ла һынатмаясаҡтар, сөнки ғүмер буйы асыҡ дәрес күрһәтеп өйрәнеп бөттөләр – профессоналдар. Етмәһә, әленән-әле уҡыусылары ла район һәм республика күләмендә призлы урындар ялай. Ялаһа ни! Үрмәксе тоҙағына өйрәк эләкмәҫ, тимә, эләгеп тә ҡуя ул. – Францгиза Сәғитовнаның башындағы уйҙар вентилятор кеүек әйләнде. – Әһә, белдем! – Ул, хатта, ат башылай алтын тапҡан бәндә шикелле, һөйөнөсөнән ҡулдарын сәпәкәйләп, һикереп үк ҡуйҙы. – Был икәүҙең өҫтөнән туҡтауһыҙ уңға-һулға шикәйәт яҙырға кәрәк: ауыл халҡы, уҡытыусылар, уҡыусылар, ата-әсәләр исеменән. Әйҙә, килһендәр, тикшерһендәр, нервыларын ашаһындар. Ә мин аҡтан аҡ килеш, тамашаһы кеүек, ситтән генә күҙәтеп торормон.

Кем өҫтөнә бысраҡ атһа ла, Францгиза Сәғитовна аноним йә дөйөм халыҡ исеменән ебәрәһе шикәйәтен, үҙен танытмау йөҙөнән, һул ҡулы менән яҙа. Бына әле лә ул, ҡағыҙ-ҡәләм алып, сираттағы «ижад эше»нә кереште: «Хөрмәтле мәғариф министры, беҙҙең яратҡан етәксебеҙ! – Кем исеменән яҙырға икән тип, берауыҡ ҡәләм осон ауыҙына тығып, тешләп торғандай итте. – Беҙ, Тәпәләп ауылы халҡы, Һеҙгә беҙҙе борсоған мәсьәлә буйынса мөрәжәғәт итергә булдыҡ. Ниңә Һеҙ өс тинлек белеме булмаған шыр наҙан уҡытыусыларға «атҡаҙанған», «мәғариф алдынғыһы» кеүек исемдәр биреп ятаһығыҙ? Һеҙ, әлбиттә, юғарынан бик күреп тә бөтмәйһегеҙҙер кемдең кем икәнлеген. Шуға күрә беҙ уларҙы исем-фамилиялары менән күрһәтеп китеүҙе изге бурысыбыҙ итеп һанайбыҙ. Береһе – себен бәшмәге кеүек тыштан ялтырап, эстән ҡалтырап ултырыусы сит тел уҡытыусыһы Ҡоҙаҡаев Хәлит Хәмитович. Ауыҙында үҙ теште́ре түгел, яһалма тештәр ҙә тормай. Самауырҙы «шамауыр» тип бала-сағаның телен боҙғас, ниндәй уҡытыусы була һуң ул! Икенсеһе – шырпы көкөртө кеүек тиктомалдан тоҡанырға тороусы һаңғырау ҡолаҡ Ғәлимә Мәрҙәновна Бүребаева. Һин уға: «Хәлдәрегеҙ нисек?» – тиһәң: «Йөрөмәнем эсеп», – тип ҡыҙып китә. «Яңылыш ишеттегеҙ»,– тиһәң: «Яңылышмайбыҙ ишекте беҙ», – тип яуаплай. Улар компьютерҙы белмәй, кабинеттары хан заманынан ҡалған һарғайған плакаттар менән биҙәлгән. Хәлит Хәмитович уҡытыу бүлмәһен ҡайын ботаҡтары төшөрөлгән обой менән йәбештереп сыҡҡан. Унда инһәң, эләүкәле ауыл мунсаһына ингән кеүек булаһың. Стеналағы ботаҡ һүрәттәре миндекте хәтерләтә. Етмәһә, тәҙрә ҡаршыһында – ҡатын-ҡыҙҙар туалеты. Махсус дәфтәр асып ебәргән ул. Кемдең нисә тапҡыр бәҙрәфкә барғанын көндәр буйы һанап, ошо дәфтәргә билдәләп ҡуя.

Тәнәфес араларында ир-аттарға – простатит ауырыуы тураһында, ҡатын-ҡыҙҙарға гинекология өлкәһендә файҙалы кәңәштәрен бирә. Үҙе менән һәр ваҡыт бинокль йөрөтә. Ниңә кәрәк икән уға дәрестә бинокль? Ошо биноклде туҙандан таҙартып тороу өсөн көн дә ҡырҡ градуслы шешә алып килә. Физик эш үҙенә килешеп тора, юғиһә: күрше бүлмәгә инеп бикләнеп, ошо аппаратын һөртөп сығыуға, йөҙөнә «байҙар сырайы» инә, күҙҙәре һыу өҫтөндәге кәмәләй йөҙә башлай. Зал буйлап, ултырғыс киҙәнеп, уҡытыусыларға ташланған саҡтары ла йыш була. Дәрестәрен ташҡа үлсәйем. Бына шуға ла Һеҙҙән кисектергеһеҙ рәүештә килеп тикшереүегеҙҙе һорайбыҙ. Хөрмәт менән: ата-әсәләр.»

Франгиза Сәғитовнаның ошондай эстәлекле аноним хаттар яҙып атҡарыу буйынса «ижади һәләте» торған һайын күпереп үҫте. Ҡайһы берен һул аяҡ бармаҡтары, ҡайһыларын уң аяҡ бармаҡтары менән яҙырға ла өйрәнеп китте.

Һаман бер сүбекте сәйнәү үҙенекен итте: юғарылағы әле бер инстанциянан, әле икенсеһенән килеп тикшереүҙәр башланды. Уларға ни  һәш тиһәң – ары, һөш тиһәң – бире...

Факттарҙың күпселеге раҫланманы. Ләкин арала раҫлағандары ла етерлек булды. Эйе, сит тел кабинеты, ысынлап та, ҡайын ботаҡтары төшөрөлгән ҡарағусҡыл обой менән йәбештерелгән.

– Нишләп ундай обой йәбештерҙегеҙ? – тип һорау биргән инспекторға Хәлит Хәмитович кабинеттың тап ошолай биҙәлергә тейешлеген аңлатырҙай дәлилдәр килтерҙе:

– Балалар үҙҙәрен тәбиғәт ҡосағында ултырғандай хис итергә тейеш.

– Ә бинокль нимәгә кәрәк?

– Уның аша уҡыусылар тәҙрәнән ҡоштарҙы, кейектәрҙе яҡындан күрә ала. Был инша яҙҙырғанда айырыуса әһәмиәтле.

– Һеҙ коллегаларҙың нисә тапҡыр бәҙрәфкә барыуын иҫәпләйһегеҙ икән. Шул дөрөҫмө? – Инспектор тәҙрә ҡаршыһындағы туалетҡа ымланы.

– Һис шикһеҙ. Уларҙың сәләмәтлеге өсөн борсолоуымдан был сара. Булдырылған тиклем фәһемле кәңәштәрем менән  уртаҡлашам.

– Һеҙҙе «эсә, һуғыша» тип ялыу яҙғандар. Үҙегеҙ нимә тиерһегеҙ?

– Берәй «аҡыллы баш» яҙғандыр. Минең эсмәгәнемә биш былтыр. Мине, миңә һиҙҙермәйенсә, эскелектән ҡатыным дауалаған. Бер туған һеңлеһе табип уның. Ашар алдынан ашыма һәр ваҡыт ошо табиптан алған таблеткаларҙы һалып ашатҡан. Шунан бер заман һин күр ҙә мин күр: әҙ генә түбәтәй аҫтына ебәрҙемме, ауыҙ-ирендәрем сабаталай ҡабара ла сыға. Шуға күрә эсмәйем, ә эсмәгәс, айныҡ баштан нишләп һуғышып йөрөргә тейеш әле мин?!

Ошондайыраҡ эстәлекле аңлатмаларҙы Хәлит Хәмитович торған һайын әле район мәғариф бүлеге тикшеренеүселәренә, әле хакимиәт вәкилдәренә, әле министрлыҡтан килгән етәкселәргә яттан һөйләр булды. Тикшереү өҫтөнә тикшереү. Ҡайһы ерең ҡысыта, түҙеп кенә тор. Ләкин түҙемлектең дә төбө төшә! Гел генә эсе табала бейеү аяҡ табандарын бешерҙе стажлы педагогтың, шуға ла ул ғаризаһын директор өҫтәленә һалды ла, кабинет асҡысын тапшырып, ҡала тирәһенә педагогикаға ҡағылышы булмаған хеҙмәт урыны эҙләргә сығып тайҙы. Әле яңыраҡ ҡына үҙен күргән бер ауылдашы ҡайтып һөйләне: ниндәйҙер шәхси хужалыҡҡа ҡарауылсы булып урынлашҡан. Арҡаһына «Охрана» һүҙе яҙылған махсус кейем кейеп йөрөй, ти. Муйынына бинокль аҫып алған, ти. Эсенән бур-ҡараҡтар килеп сыҡмаймы, тип гел генә ҡатын-ҡыҙҙар бәҙрәфен күҙәтә, ти. Бөтәһе лә ысын булһа, сырағас төҫлө һарғайып ҡатҡан кәүҙәһенә ит ҡунып, амбалға әйләнгән, ти.

Ә бына Ғәлимә Мәрҙәновна, туй уҙған – тун туҙған, тип педагогик стажы өсөн

түләнгән кескәй пенсияһына шөкөр ҡылып, мәктәп менән алыш-биреш яһаны. Яһарһың да. Районда килгән инспекторҙар алдында мәктәптең крайҙы өйрәнеү музейында асыҡ дәрес күрһәткәйне. Тыуған илгә патриотик тәрбиә биреү йөҙөнән, уҡыусыларын тыпырҙатып бейергә алып төшөп китте. Быңаса һуғыш ветерандарының, һәләк булған яугирҙарҙың фоторәсемдәренән ҡарап, ҡайғыхәсрәтле дәрестәрен күҙ йәштәре һығып үткәрә ине уҡытыусылар. Ә Ғәлимә Мәрҙәновнаның дәресе уларҙыҡынан төптө айырыла: заманса, күңелле. Гүйә, ысын һуғыш яланын күрҙе уҡыусылар был дәрестә. Уларҙың тыпырҙап бейеүенән, тамаҡ ярып йырлауынан тәүҙә бер-береңде күрмәҫлек дәрәжәлә туҙан өйөрмәһе күтәрелде. Инспекторҙар ошо ҡуйы туҙанға сәсәп, ауыҙ-танауҙарын ҡулъяулыҡ менән ҡапланы. Татыһындар һуғыштың нимә икәнен! Бына бер заман стеналағы портреттар, «ура» ҡысҡырғандай, һикерешеп иҙәнгә төшә башланы ла бейеүселәргә ҡушылды. Тик инспекторҙар ғына ни алтара, ни пылтара – аңламанылар патриотик тәрбиәне. Наҙанға маҡсат аңлатмаҡ – ишәккә шиғыр ятлатмаҡ. Күпме тел алдырҙы, күпме нервы туҙҙырҙы. Ғәлимә Мәрҙәновна, ҡаршыһында ултырыусы ошо түрәләргә дәресенең йөкмәткеһен һөйләп, аяҡ тибеп тә индерергә тырышты тегеләрҙең таш баштарына үҙенең тәрән эстәлекле мәғлүмәттәрен, ҡайҙа ул, лакировкалы туфлийының бейек үксәһе генә һынып төштө. Дә-ә. Наҙанға фекер әйтеп баҡтың ни – эт ҡойроғона ынйы-мәрйен таҡтың ни!

Бына шунан һуң педагог булып эшләгең килерме, юҡмы?!

Киткән уҡытыусылар урынына Франгиза Сәғитовна күсмә ҡоштар шикелле бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөүселәрҙе ҡабул итте.

– Былар беҙҙә лә оҙаҡ тормаҫтар, – тип ҡаршы төшөүселәрҙең ауыҙҙарын директор тиҙ япты:

– Бик мөмкин. Улар тәрән белемлеләр – универсалдар. Ҡайҙа ла үҙҙәрен ҡолас йәйеп ҡаршы алалар. Ете йорттоң телен бел, ете төрлө белем бел, тигән боронғолар. Кәрәкһә, ана, япон телен дә үҙебеҙ уҡымай тороп уҡыта алабыҙ, тиҙәр. – Нормаһына килмәһә, формаһына килә, тип фекер йөрөттө яңы директор. Әйҙә, бесәй төкөрөгөнә лә тормаған дәрес бирһендәр. Миңә унан эҫе лә, һалҡын да түгел. Эйе, ни думбыра белмәгән, ни һыҙғыра белмәгән, ни башына ни ҡунған наҙан хеҙмәткәрҙәр менән идара итеү күпкә еңелерәк ине уға.

Әле ҡасан ғына ҡырмыҫҡа иләүеләй гөрләп торған коллектив йоҡа тиренән ҡалды. Ата-әсәләр, уҡыусылар, үҙ балалары уҡыған уҡытыусылар араһында мәктәптә белем һәм тәрбиә кимәлененң ныҡлап аҡһай башлауы ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырҙы. Был тәү сиратта етди предметтар иҫәбенә ингән математика, урыҫ теле, химия, физика кеүек фәндәрҙә сағылыш тапты. Уҡытыусыларҙың үҙ-ара әләгешеүе, эт-бесәй кеүек ырылдашып йәшәүҙәре, бер-береһе өҫтөнән шикәйәт яҙыуҙары, суд юлдары үҙ емештәрен көтмәгәндә, өйөрмәле дауылдай килтерҙе.

– Нишләп әле мин балаҡайымды – ғәзиз йәнемде күрәләтә белемһеҙ ҡалдырырға тейеш? Уға Илаһи көс тарафынан академик башы бирелгән, – тине социаль педагог Ҡәмәр Ҡыямовна тәнәфес ваҡытында, өс-дүрт коллегаһы араһында һүҙ ҡуйыртып. – Минең балам – вундеркинд, буласаҡ Ломоносов. Ул Мәскәү университетында уҡырға тейеш. Шулай икән, алдағы аҙнанан үҙен ҡала гимназияһына күсерәм. Йәшерен-батырын түгел: беҙ үҙебеҙ наҙан уҡытыусылар.

– Эйе, дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, – тиеште эргәһендәге ҡатын-ҡыҙҙар.

– Һин улыңды бирәһең икән, миңә лә ҡыҙымды ҡала мәктәбенә урынлаштырырға тура киләсәк. Улар бит бер класта икәүһе генә уҡый, – тип һүҙҙе ҡеүәтләп алды Мәстүрә Зиннәтовна. – Юҡһа, уҡытыусы халҡын үҙегеҙ беләһегеҙ: баштарыбыҙҙа ел уйнаған, дәрес буйы уҡыусынан һорау алабыҙ. Мин, ҡыҙҙар,

һеҙгә асыҡтан-асыҡ әйтәм: бына ун биш йыл инде химия уҡытам. Дөрөҫөн генә әйткәндә, аҡса өсөн генә йөрөйөм. Заманында педучилищены нисек кәрәк шулай йыртышып тигәндәй тамамланым да ошо мәктәпкә килеп төпләндем. Ярты йыл самаһы һөнәрем буйынса башланғыс кластарҙа уҡыттым. «А» хәрефен өйрәтергә дворник та булдыра ала, тип директор урыныма анауы ҡарауылсы ҡылый күҙ кемде ҡуйҙы ла үҙемә химия дәрестәрен йөкмәтте. Ошо оло арауыҡ эсендә уҡытып, мин тик бер нәмәне аңламайым: ниңә ул фәнде тиктомалдан «органик» һәм «органик булмаған химия» тип икегә бүлделәр икән? Китаптан ентекләп ҡараштырып сыҡтым, әммә органик бүлегендә бер ниндәй ҙә органдарға тап килмәнем. Фекерләү даирәм киң булғанға, төрлөсә фараз ҡылам: тәртип һағында тороусы органдар түгелме икән, тип тә, әлеге лә баяғы, суд-прокуратураһы түгелме, тип тә уйлайым. Шунан кешенең үҙенә күсереп ҡарайым, уның организмы ла органдарҙан тора бит. Юҡ, үпкә, бауыр, бүтәкә тураһында ла бер нәмә лә әйтелмәгән.

– Кешенең бүтәкәһе ҡайһы ерендә була икән? Бер ҙә ишеткәнем юҡ, – тип һүҙ ҡыҫтырҙы ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһе.

– Һүҙҙең тамыры «тәкә» лә баһа. Тимәк, ул орган – ир-аттарҙа ғына була торған нәмә. – Тел уҡытыусыһының әлеге фекере менән бөтәһе лә килешеп, баш ҡаҡты.

Ҡәмәр Ҡыямовна һүҙен дауам итте:

– Химия фәненең ошо органик бүлеге мәсьәләһендә икеләнеүемде мәғариф бүлегенән килгән методисҡа ла белдергәйнем, күҙҙәре маңлайына менде. Ярай, был турала мәғлүмәтте ҡайтыу менән тейешле органдарға еткерермен, тине. Еткерегеҙ, мәйтәм, исеме есеменә тап килһен. Бына ошолай итеп китап яҙған аңғыра ғалимдарҙың да хаталарын беҙгә төҙәтергә ҡала. Миндилиев яҙған, тиме шунда. Аҙ ғына хәреф танып, әлепте таяҡтан айырһалар, бөтәһе лә минминлектәренә баралар шул.

Ысынлап та, аҙна-ун көн эсендә, ҡапыл ғына өйөр-өйөр ҡоштар ерҙән айырылып осоп киткән шикелле, ике-өс уҡытыусының балалары ҡала мәктәптәренә урынлашып, шунда уҡырға кереште. Был хәбәрҙе техничка Зөбәйҙә Сәфәрғәлиева иртәнге сәй ваҡытында махмырҙан айныр-айнымаҫ, иңле-шәйле ултырыусы ҡартына һөйләп ишеттерҙе:

– Ана, күр, уҡытыусылар бөтәһе лә бала-сағаларын гимназияға урынлаштыра. Бынамын тигән өр-яңы интернаты бар, ти. Береһе лә Тәпәләп мәктәбенә ҡарап ятмаған. Ә беләһеңме ни өсөн?

– ..? – Ҡарты ҡулбашын һикертеп, елкәһен ҡашып ҡына ҡуйҙы.

– Бына шулай шул. Бер нәмә лә белмәйһең. Гимназияла ҡорһаҡты тултырғансы көнөнә биш тапҡыр ныҡлап ашаталар, ти. Тороп ер – бушҡа. Уҡыу – бушҡа, ашау – бушҡа. Был бит ысынында – капитализм даръяһында теге беҙ телләгән коммунизм утрауы. Әле генә шунда тороп уҡыусы Әпәләй Таяғы ялға ҡайтҡан, ти. Һис танырлыҡ түгел, ти, үҙен. Таяҡ тимәҫһең, бүкәнгә әүерелгән. Әйҙә, уйлашайыҡ та беҙ ҙә ебәрәйек улыбыҙҙы ошо гимназияға. Исмаһам, ул да бүкән булыр.

Көпә-көндөҙ, йыл уртаһында мәктәптең тарала барыуы Франгиза Сәғитовнаны хафаға һалды. Быға тиклем йөҙ йыл буйы гөрләп торған учреждение ул етәксе булғас ҡына тарҡала башланы түгелме һуң?! Кисекмәҫтән төплө саралар күрергә кәрәк. Тәүҙә директор ата-әсәләр йыйылышында, унан педагогик советта көнүҙәк мәсьәләне күтәреп сығыш яһаны. Балаларының белем тураһындағы танытмаларын юллап килгән ата-әсәләрҙе ишектән кире борҙо. Ләкин ташҡын бер ҡуҙғалған икән, туҡтатырмын тимә. Ауыҙын күмәкләшеп яптылар.

– Беренсенән, закон беҙҙең яҡта, – тине Ҡәмәр Ҡыямовна. – Әгәр ҙә документтарҙы биреүҙән баш тартаһың икән, үҙең шикелле, эште судҡа тапшырасаҡбыҙ. Хәҙер суд юлдарында йөрөргә өйрәнеп бөттөк инде. Икенсенән, үҙең дә бит былтыр ике балаңды ла ҡала мәктәбенә урынлаштырҙың. Береһен – композитор, икенсеһен бизнесмен итеп үҫтерәм, тинең...

Төн йоҡоларынан яҙҙы Франгиза Сәғитовна. Мәктәптәге егерме һигеҙ баланың һигеҙе документтарын алды, дөрөҫөрәге, ата-әсәләре йыртышып алды. Ҡалғандар ҙа документ талап итә. Кемдәр әле – иң тәүҙә мәктәп хеҙмәткәрҙәре: ике ашнаҡсы, бер иҙән йыуыусы, дүрт уҡытыусы...

– Балаларығыҙҙы сит мәктәптәргә бирәһегеҙ икән, үҙегеҙҙе лә эштән ҡыуам. Был – ультиматум! – тип белдерҙе ул тегеләргә. Ләкин ағай-эненең мыйығы ла һелкенмәне.

– Үҙеңде эштән бушатҡан директорҙы ни рәүешле язаға тарттырғайның әле һин?! – тип ауыҙ йырып көлөштөләр. – Ҡара уны, һин дә директор! – Бер-береһенә күҙ ҡыҫышып, төрттөрөп ҡуйҙылар.

– Уҡытыусыларҙың үҙ-ара талашҡанын ҡарап ултырһынмы ни беҙҙең сабыйҙар. Баламдың нервыһын ҡаҡшатыр хәлем юҡ. Кәрәкмәй беҙгә бындай мәктәп! – тине ата-әсәләр.

Көндәрҙән бер көндө инде ун биш уҡыусы менән тороп ҡалған Тәпәләп урта мәктәбенә район хакимиәте, мәғариф бүлеге етәкселәре килеп төштө.

– Ун биш балаға утыҙ хеҙмәткәр, әҙәм көлкөһө, – тип башланы сығышын мәғариф бүлеге мөдире. – Был хәл күрәләтә хөкүмәттең аҡсаһын һауып ятыу тип атала. Бер уҡыусыға – ике эшсе. Илебеҙ финанс көрсөгөнә килеп терәлгән бөгөнгө ауыр осорҙа сығымдар үҙҙәрен аҡламай.

Халыҡ түбәтәй аҫтын ҡашып торған арала, Франгиза Сәғитовна тороп һүҙ алды:

– Бөйөк Ватан һуғышы барған йылдарҙа, илебеҙ ҡанға сәсәгәндә лә мәктәптәр ябылмаған, гөрләп эшләгән. Өҫтә ултырыусы шыма түрәләр, Березовский, Абрамович кеүектәр миллиард һумдарҙы үҙ кеҫәләренә үҙләштергәс, нишләп ил көрсөккә ҡалмаһын! Етмәһә, быйылғы йыл – Уҡытыусы йылы. Мәктәптең йөҙ йыллыҡ юбилейын билдәләйбеҙ. Нисек уны япмаҡ кәрәк?!

– Һүҙегеҙҙе бүләм, – тип район хакимиәтенән килгән вәкил өҫтәлгә ручка менән шаҡылдатты: – Һуғыш осоронда беҙҙәге система икенсе ине. Бөгөн капиталистик мөнәсәбәттәрҙә йәшәйбеҙ. Бөтәһен дә юғарынан ҡушалар. Мәктәпте ябыу мәсьәләһе оптимизация тип атала. Шуға күрә бәхәсләшеү, һүҙ көрәштереү был осраҡта урынһыҙ. Күҙгә бәреп әйтәм: Тәпәләп ауылының киләсәге юҡ, сөнки төп халыҡ – пенсионерҙар. Улар ашарын ашаған, йәшәрен – йәшәгән. Ә уҡыусыларҙың бөтәһен дә ҡала гимназияһына тапшырабыҙ. Өр-яңы автобус бар: килеп алыр, килтереп ҡуйыр.

– Ҡала менән ауыл араһындағы юлға асфальт түшәлмәгән, автобусыбыҙҙың яҙлы-көҙлө батып ултырыуы ихтимал.

– Асфальт та түшәлер, бөтәһе лә уйланылған, – тип ауыҙын япты вәкил ҡаршы һүҙ әйтеүсенең.

– Эшһеҙ халыҡҡа нисек көн күрергә?

– Эшкә урынлаштырыу бюроһына барып, эш табып биреүҙәрен һорап ғариза яҙырға кәрәк. Етмәһә, алты ай буйына эшләмәйенсә лә хеҙмәт хаҡығыҙҙы түләп барасаҡтар. Хатта пенсия өҫтөнә эшләгәндәргә лә өс ай буйы аҡса түләнәсәк.

– Һүҙ көрәштереү урынһыҙ, тинегеҙ... – Мәстүрә Зиннәтовна хакимиәт вәкиленә мөрәжәғәт итте, – ә ниңә ауылға килеп, беҙҙе йыйҙығыҙ һуң? Бикләргә ине мәктәпте өҫтән күрһәтмә биреп кенә...

– Нисек кенә булмаһын, мәктәптең киләсәк яҙмышын һеҙҙең менән бергә хәл итәбеҙ, – тип яуапланы вәкил, уңайһыҙланып, – Быйылғы йылда мәктәп яптырыу буйынса һеҙ – беренсе ҡарлуғастар. Алдағы йылдарҙа башҡа күп кенә белем биреү учреждениеларын да һеҙҙәге яҙмыш көтә.

– Баламды ҡала мәктәбенә уҡырға ебәрмәйенсә, өйҙә генә ятҡырһам, ни тиерһегеҙ? – Әлеге һорауҙы аранан бер педагог әсенеп бирҙе.

Йыйылған халыҡҡа былдай һорау көтөлмәгән кеүек тойолһа ла, мөдирҙең яуабы күптән әҙер ине:

– Теләйһегеҙ икән, балаларығыҙҙы итәк аҫтында аҫрағыҙ, уныһы – һеҙҙең ихтыярҙа. Бер кем ҡағылмаясаҡ. Әйтәм бит: ка-пи-тализм... Бында гел генә уҡытыусылар мәктәпте япмай ҡалдырыу хаҡында һүҙ алып баралар. Ә һеҙ, ата-әсәләр, уҡыусылар, ниңә өндәшмәйһегеҙ?

– Мөмкинме, уларға һүҙ бирер алдынан, миңә лә үҙ фекеремде әйтеп китергә? – Итәғәтле йылмайып, һөйкөмлө йөҙлө йәш кенә ханым тороп баҫты. – Мин оҙон-оҙаҡ һөйләргә йыйынмайым. Һеҙгә гимназиябыҙҙың ҡайһы бер өҫтөн яҡтары тураһында ғына әйтеп китмәксемен. Конкретлаштырғанда, беҙҙә бөтә нәмә лә бушҡа. Миңә тиклемге һөйләүселәр аңлатҡанса: ашау ҙа, уҡыу ҙа, өр-яңы интернатта йәшәү ҙә – бөтәһен дә хөкүмәт күтәрә. Ашау-эсеүгә түләү шартлы рәүештә генә, күп тигәндә, айына биш-алты йөҙ һумдан артмай. Былардан тыш, йөҙөргә өйрәнеү өсөн бассейныбыҙ, стадионыбыҙ, заманса йыһазландырлыған спорт залдарыбыҙ бар. Айына ике тапҡыр уҡыусылар менән экскурсияға баш ҡалаға барабыҙ: циркка, драма, балет театрҙарына, музейҙарға, зоопаркка... Компьютер кластары, интерактив таҡталар тураһында әйтеп тә тормайым...

Шул арала яңыраҡ Президент ҡулынан «Әсәлек миҙалы» алып ҡайтҡан ханым урынынан ҡуҙғалмайынса ғына яңғыратып әйтеп ҡуйҙы:

– Биш баламды ла гимназияға бирәм. Бында ҡоро макарон кимергәнсе, унда әҙәм рәтле ашарҙар, исмаһам!

Уның фекерен башҡа ата-әсәләр ҙә ҡеүәтләп алды:

– Уҡытыусыларҙы зарплаталы итәм тип, баламды белемһеҙ ҡалдыраһым юҡ. Туғаным, бына, ғариза яҙҙым. Ал минекен дә. – Гимназия директорына ғаризалар ишелеп яуҙы.

– Тәпәләп мәктәбе менән талҡан бешереп булмай. Мин дә баламды гимназияға бирәм...

– Бына, күрҙегеҙме, братва! – тип тороп баҫты нәҙек муйынлы йылғыр малай. – Футбол тибергә стадионы бар, ти, һыу инергә бассейны, кататься итергә автобусы. Тағы һеҙгә ни кәрәк?! Ожмах бит был. Ошо мәктәптә «икеле» алып, кәкшеп көн күргәнсе, әйҙәгеҙ, киттек! Кто за? – Ул нәҙек оҙон ҡулын өҫкә күтәреп, иптәштәренә ҡараны.

– Эйе, кто за? – тип уҡыусының фекерен ҡеүәтләп алды мәғариф бүлеге мөдире.

Ата-әсәләр һәм уҡыусылар гимназия өҫтөнлөгө өсөн дәррәү тауыш биреп, урындағы коллективты эшһеҙ ҡалдырҙылар, тулайымыраҡ әйткәндә, йөҙәр йыллыҡ тарихы булған Тәпәләп урта мәктәбенә ясин сыҡтылар. Хәйер, мәктәпкә генәме икән?!

Мәктәп ҡапҡаһына ат башы тиклем йоҙаҡ элеп ҡуйғас, унда илтеүсе һуҡмаҡҡа кеше эҙҙәре һыуынғас, ауылдың да тормошо тамырынан үҙгәрҙе...

Эйе, мәктәпһеҙ ауыл двигателһеҙ тороп ҡалған машина кеүек. Һәр көн шаугөр килеп, күңелдәргә йылы нур сәсеп шатлыҡ бөркөүсе шаян бала-саға тауыштары тынып ҡалды. Урамдарҙа ығы-зығы, үҙ-ара һөйләшеүҙәр ҙә һиҙҙермәйенсә

генә һирәгәйә барҙы. Бер яҡлап урындағы уҡыу йортоноң ябылыуы, икенсе яҡлап тарҡалған колхоз урынына, инде тиҫтәләгән йылдар үтһә лә, яңыса агротехник комплекс һалдырмау ауыл халҡының бәкәленә ҡаты һуҡты шул. Хеҙмәт йәшендәгеләр, айырыуса йәштәр, бөтәһе лә аптыраған көндән эш юллап төрлө тарафтарға таралышты. Йәштәрһеҙ ҡалған ауылда киске яҡта дәртле ҡурай моңдары ла ишетелмәҫ булды, ҡапҡа төптәрендә һыҙҙырып гармунда уйнаусы егеттәр ҙә юҡҡа сыҡты. Ошо көйҙәрҙе илһамланып тыңлаусы һылыуҡайҙарҙың: «Ҡыҙҙар, көй әрәм булмаһын, әйҙәгеҙ, йәһәт кенә бейергә төшәйексе», – тип, хуш еҫтәрен тирә-яҡҡа таратыусы аҡ сәскәгә төрөнгән ҡупшы муйыл ағасы эргәһендәге эскәмйәнән тороп, күбәләктәй осоп-осоп бейеп китеүҙәре инде бер күңелле һәм ҡабатланмаҫ төш кеүек булып ҡына ҡалды. Урам тултырып иртәкисен көтөүгә йөрөүсе малдар һаны күҙгә күренеп кәмене. Улары ла, машиналарға тейәлешеп, ауылды ташлап киттеләр, тик хужалары кеүек йыраҡ тарафтарға түгел, ә район үҙәгенең ит комбинатына. Режим ҡаты, тиҙәр, унда: барып ҡапҡан һәүкәштәрҙең комбинат ҡапҡаһынан бығаса кире сыҡҡанын күргәнем юҡ. Хатта ҡыҫҡа ваҡытлы отпускыға ла ҡайтармайҙар, ти.

Пенсионерҙарҙы өс юл сатына баҫтырҙылар. Тап әкиәттәгесә. Теләгән юлыңды һайлап ал, үҙ ихтыярыңда. Беренсе юлдың теге осонда пенсионерҙы үҙ аллы донъя көткән балалары ҡаршылай, йәғни улдары һәм ҡыҙҙары. Улар, ҡайһы тарафтарҙа йәшәһәләр ҙә, үҙ эргәләренә алып, ҡарттарға хәлдәренән килгәнсә тейешле тәрбиә күрһәтә. Былары – бик бәхетле ҡарттар. Икенсе юл да күңелгә һары май кеүек ята. Унылы хәҙерге көндә күптәргә һуңғы таяныс булған ҡарттар йортона илтә. Ашау – байҙан, үлем – Хоҙайҙан, тип түшәмгә төкөрөп тик йәшәп ятаһың. Ә бына өсөнсө – һуңғы юлдың осо ауыл башында урынлашҡан мәңгелек йорт ҡапҡаһына барып тоташа. Ҡапҡа башына түбәндәге һүҙҙәр яҙылған:

*Иҫәндәрҙең ҡәҙерен беләйек,*
*Үлгәндәрҙең ҡәберен беләйек.*

Был ҡапҡа һәр кем өсөн, тәүлектең һәр мәлендә асыҡ. Һуңғы юл ҡолас йәйеп ҡаршылап торһа ла, ағай-эне, нишләптер, уны өнәп барманы. Шулай ҙа ҡыҫҡа ғына арауыҡ эсендә, юҡ-юҡ та, дүрт-биш кеше әлеге ҡапҡаның ишектәрен шаҡып инергә өлгөрҙө.

Ауылда халыҡ бөткәс, ҡыҙыл таҫмалап тантаналы рәүештә асылған яңы мәҙәниәт һарайының кәрәге ҡалманы. Тиҙҙән кемдәрҙер ҡаланан килеп, уның ишегенә арҡыры таҡта ҡағып ҡуйҙы.

Почта, медпункт, ауыл хакимиәте менән нимә булды, тип ҡыҙыҡһынаһыңдыр, уҡыусым. Яуап бирәм. Ана теге двигателенән ҡолаҡ ҡаҡҡан машина менән беҙҙәге ойошмаларҙа, ғәҙәттә, нимә була? Дөрөҫ уйлайһығыҙ: уны ағай-эне тиҙ арала һүтеп, запчасҡа алып бөтә. Ауылдағы учреждение биналары ла тап шул рәүешле күҙ менән ҡаш араһында юҡҡа сыҡты. Армияһыҙ генерал булмаған шикелле, хакимиәт башлығы ла ҡойроғон күптән һыртҡа һалды.

Ҡышын бурап-бурап өйөлгән ҡар тауҙары яҙҙың ҡыҫҡа бер мәлендә ҡапылдан ғына ирей ҙә бөтә, юҡҡа сыға. Әммә алдағы ҡышта әлеге көмөш тауҙарҙың ҡабаттан ҡалҡып ултырыуында беҙҙең шигебеҙ юҡ, сөнки бөтәбеҙ ҙә йыл миҙгелдәренең ҡабатланып килеүен яҡшы беләбеҙ. Тик бына йөҙәр йыллыҡ данлы тарихы булған гүзәл Тәпәләп ауылының ғына көтмәгәндә ер йөҙөнән мәңгегә юҡҡа сығыуы йөрәкте тетрәндерә.

И-их, теге саҡ шаян ел төкөрөк менән уйнамаған булһа, мәктәп тә, ауыл да, ошо төкөрөккә йәбешеп, тарих төпкөлөнә осмаҫ ине!

---



Ғәлим
ХИСАМОВ

# ӨН ҺӘМ ҺАН

РОМАН-ФАРАЗ

## *Бағыу – тәрбиәләү*

Йылғыр ғына малай ҡомлоҡта уйнай. Бер ир рәшәткәгә килеп терәлде лә быны күҙәтергә тотондо. Аҙыраҡ торғас, һорайһы итте:

– Һин нимә эшләйһең?

Малай башын күтәреп ҡараны, ҡом һоҫоп алған бәләкәй көрәк тотҡан ҡулы туҡтап ҡалды.

– Уралтау яһайым.

– О-о! Бигерәк ҙур эшкә тотонғанһың икән. Өйөп бөтөрә алырһыңмы һуң?

– Алырмын. Бына Ямантауҙы, Елмерҙәк һыртын ҡойоп ҡуйҙым инде. Теге яҡҡа тәпәшерәк үрҙәр китә.

– Бөтәһен дә белеп, уйлап эшләйһең икән. Исемең кем һинең?

– Мин – Урал. Урал булғанға уйлайым да инде.

– Ә һиңә был матур исемде кем ҡушты?

– Ҡушыуын атайым ҡушты. Ә уға мине Урал тип атарға бик ҙур ғалим кеше кәңәш иткән.

– Нимә тип әйткән?

– Улыңа Урал тип ҡуш, тигән. Урал исеме – башҡорттоң бик боронғо, урыҫса әле лә үҙгәрмәй торған исеме. Уны йөрөткән кеше бөйөк була. Кешегә ниндәй исем бирәһең, ул шуға тиңләшә, тигән.

– Атайыңа ул кәңәште мин бирҙем.

Малай оло кешегә күҙен ҡыҫа биреберәк ҡараны, ирен осонда ғына йылмайыу ғәләмәте сағылды.

– Ә һинең исемең кем, ағай?

– Мин – Сәсән.

– Сәсән ағай, ә һин тормоз икәнһең.

---

*Ғәлим Хисамов (1949) Көйөргәҙе районының Кинйәбай аулынан. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай, матбуғат органдарында, төрлө етәксе вазифаларҙа эшләй. Бик күп проза китаптары авторы, БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзаһы. Өфөлә йәшәй.*

– Ниңә?

– Ниңә, ниңә? Мин һиңә әйтеп торам бит: атайыма Урал кәңәшен бик ҙур ғалим, ныҡ аҡыллы кеше биргән, тип. Ә һин – Сәсән. Ғалим түгел, кәүҙәң дә ҙур түгел...

Сәсән, был һүҙгә ни тиергә лә белмәй, шаҡ ҡатты ла ҡуйҙы. Малай, шунан файҙаланып, йәнә өндәште.

– Ҡулыңдағы гәзиттәге һүрәткә кем төшкән?

– Кем?

– Уны кем белмәһен. Минең һеңлем Ғәлиә лә белә.

– Ҡайҙа ул Ғәлиә?

– Ана йөрөй, бәләкәйҙәр төркөмөндә.

– Ә һин ниндәй төркөмдә?

– Уртансыла.

– Ғәлиәне саҡыр әле. Һорайыҡ.

Малай йән фарманға ҡысҡырҙы:

– Ғәлиә! Ана һине Сәсән ағай саҡыра.

– Ни эшләп ҡысҡыраһың? Барып етәкләп кенә килтер.

– Минең ваҡыт юҡ ыбыр-сыбыр менән йөрөргә. Һинең менән һөйләшеп былай ҙа эшем ҡалды. Ғәлиә! – Йәнә бер һөрәнләне лә тау өйөргә тотондо Урал.

Ул арала күбәләктәй кейенгән өс йәштәр самаһындағы ҡыҙыҡай эргәләренә йүгереп килде һәм ағаһына текәлде. Урал, һис ни өндәшмәҫтән, рәшәткә аръяғындағы кешегә эйәге менән генә ымланы:

– Һине саҡыра.

Ғәлиә ят кеше яғына атламаны, һораулы ҡарашын ғына Сәсәнгә төбәне. Сәсән гәзитте йәйгәс, һүрәткә төртөп күрһәтте.

– Был кем?

– Әйткәйнем дә инде: Ахимов. Башҡотостандың, э-э, пезиденты.

– Кемгә әйткәйнең?

– Атайыма һуң.

– Тағын әйтте... – Урал, белдекле кеше булып, Ғәлиәне арҡаһынан рәшәткә яғына табан этте. – Белә ул.

– Нимә тинең, Ғәлиә?

– Уны әйтегә бүтән һүәт юҡ бит.

Урал ярҙамға килде.

– Атайҙың журналында тағы берәүҙең һүрәте бар ине. Кемдеке әле, Ғәлиә?

– Ельсиндыҡы.

– Кем һуң ул Ельцин?

– Әсәйҙең (Рәсәйҙең) Ахимовы.

Сәсән көлөп ебәрҙе. Шунан файҙаланып, Ғәлиә үҙ төркөмөнә йүгерҙе, Урал ҡом тауы төҙөргә ныҡлап тотондо. Әммә күп эш ҡыра алманы, йәнә Сәсәндең тауышы ишетелде.

– Урал, әйт әле, ҡайһы ҡапҡанан инергә була һеҙҙең баҡсаға?

– Ниндәй баҡсаға? Балалар баҡсаһынамы? Йәшелсә баҡсаһынамы? Был һүҙҙәр баҡ, бағыу, йәғни ҡарау, тәрбиәләү мәғәнәһенән килә. Балалар тәрбиәләү урыны һәм йәшелсә тәрбиәләү ере. Шуға уларҙы аныҡ әйтергә кәрәк.

Сәсән асҡан ауыҙын ябырға ла онотоп торҙо. Шулай ҙа һораны.

– Быларҙы һиңә кем өйрәтә һуң?

– Атайым.

– Атайың агроном да инде, тел белгесе түгел.

– Агроном булғанға баҡсаны белә, вәт!

Сәсән был малай менән башҡаса һүҙ көрәштерә алмаҫын аңланы.

– Рәхмәт һиңә, Урал. Тау өйөү эшендә уңыштар теләйем, – тип йәшелсә баҡсаһына табан атланы. Уралдың атаһы уға, баҡсанан һуған өҙ, тип сығарғайны, ә ул, Уралға әүрәп, йомошто онота яҙған.

## *Олатай*

Көндө арттырыуға була, берәү Ҡояшты офоҡ ситендә ҡалҡып килгәндә генә тотоп, арҡанлап ҡуйырға самалаған. Бәйләп ҡуйһаң, йәнәһе, көн бөтмәҫ тә бөтмәҫ ине. Тик был бәндә Ҡояш ҡалҡҡан офоҡтоң ситен генә тапмаған. Тапһа, бәлки, бәйләп тә ҡуйыр ине. Шунан бирле Ҡояшты туҡтатырға самалаусы булғаны юҡ. Ҡояш тәгәрәй ҙә тәгәрәй һәм үҙе артынан ваҡытты һөйрәп тик бара. Ваҡыт уҙа, көндәр, айҙар, йылдар тулып китә...

Сәсән менән Уралдың ҡабаттан осрашыуы күп ваҡыт уҙғас булды. Уралдың атаһы менән әллә ниҙә бер күрешеп йә телефондан һөйләшеп торҙо Сәсән. Шуға Урал тураһында ла хәбәрҙар ине. Уның, үҙ ауылында мәктәпте алтын миҙалға тамамлағас, беҙҙең тирәлеге юғары уҡыу йорттары менән мөрхәтһенмәйенсә, Мәскәү дәүләт университетына барып һис бер ауырлыҡһыҙ инеп китеүен белә ине. Өҫтәүенә, ниндәй һөнәр һайлаған бит – математик. Башҡорт егеттәренең күбеһе хәрби кеше булырға хыяллана, әммә күҙгә күренгәндәре, нигеҙҙә, филолог, уҙа барһа – химик йә биолог. Шуға Уралдың математикаға ынтылыуы ғәжәберәк тойолғайны.

– Ни эшләп уны һайланы? Үҙенә ҡыйын булмаҫмы? – тип һораны Сәсән Уралдың атаһынан.

– Әлләсе. Математика – барлыҡ фәндәрҙең дә һөҙлөгө. Аҡыл менән йәшәүҙең, эҙмә-эҙ фекерләүҙең иң һуңғы түбәһе лә – математикала, ти, бит. Әйҙә инде, йәне теләгән – йылан ите ашаған, үҙ яҙмышын үҙе ҡорһон.

Уларҙың күрешеүе уйламаҫтан ғына булды. Сәсән балет театрынан сығып килә ине. Ҡаһирәнән килгән театрҙың сығышын ҡарап, шуның тәьҫирендә ине әле. Бер уйлаһаң, барыбер бәхетле инде Египет. Ни заман элек фирғәүендәр унда пирамидалар, һарайҙар, теге донъя храмдары һалдырған. Шуның менән дан тотҡан ул саҡтағы Египет. Һуңғы дәүерҙә сит ил кешеләре – күбеһенсә инглиздар – шул тарихи байлыҡтарҙы өйрәнгән дә Египетты йәнә бөйөк иткән. Ә бөгөн ниндәйҙер француз Ҡаһирә театрында ер йөҙөндә тиңдәше булмаған балет ҡуя. Башҡарыусылары араһында берәр ғәрәп булдымы икән һуң? Әммә был бер кемде лә борсомай. Бөтөнөһө лә Ҡаһирәне, Египетты маҡтай. Форма (спектакль) менән йөкмәткеһенең (башҡарыусылар, йәғни ғәрәп түгел) тура килмәүе Сәсәндең йөрәген һыҡрандырҙы.

Шуны уйлап ҡына килә ине, таныш тауышҡа боролоп ҡараны. Бәй, Ишдәүләт тә баһа. Тик Ишдәүләт егерме-егерме биш йылдар әүәл шулай ине. Моғайын, Уралдыр. Кеше бер-береһенә шул тиклем дә оҡшар икән. Сәсән быының яғына атланы. Сал сәсле кешенең үҙенә табан килгәнен самалап, Урал да шымды.

– Беҙҙең йәшлектең тауышын ишетеп туҡтаным. Мин Сәсән ағай булам, бәлки, ишеткәнең барҙыр.

– Ишетеү генә түгел, китаптарығыҙҙың һәр береһен уҡып барам. Телгә һаран атайым да, һеҙҙең турала һүҙ сыҡһа, туҡтамай һөйләргә әҙер.

– Рәхмәт. Бына йылдар осраштырҙы беҙҙе.

– Мин Өфөгә ҡайттым, Сәсән ағай. Үҙебеҙҙең университетта юғары математика кафедраһына эшкә саҡырҙылар. Ризалаштым да...

– Мәскәүҙе ҡалдырып китеү йәл булманымы һуң?

– Йәл дә бит. Әммә ҡайтҡы килә. Һәр башҡорт илендә тороп илен күтәрергә тейеш. Ситкә хеҙмәт итеп ил күтәреп булмай.

Сәсән сәп иттереп үҙ маңлайына үҙе һуғып алды. Ҡаһирә театры менән баяғы француз тураһындағы фекерҙең осо бына ҡайҙа ята бит. Француздың хеҙмәте Ҡаһирәне күтәрә, ә Францияға бынан бер генә бөртөк тә файҙа юҡ. Ҙур оҫталыҡ менән уйналған балет ғәрәптең дә ике ятып бер төшөнә инмәй. Ул ашар ризыҡ, балаларын кейендерерлек аҡса хаҡына Францияға барып бил бөгә. Ә француздар, ғәрәпкә рәхмәт әйтәһе урынға, уны төрлөсә ҡыйырһыта, мыҫҡыл итә.

Бына ни өсөн ҡаршылыҡлы уйҙар тыуҙырған Ҡаһирә театрының балеты Сәсән күңелендә. Фекеренең осона сығып бөтмәй ҡалған икән. Шуның ҡарауы, быны Урал бер һүҙ менән генә әйтте лә бирҙе: ситтә хеҙмәт итеп ил күтәреп булмай.

Сәсәндең үҙ маңлайына үҙе һуғып алғанын күргән Урал һорайһы итте:

– Олатай, берәр мәшәҡәт иҫегеҙгә төштөмө әллә?

– Юҡ, һис мәшәҡәт юҡ. Былай ғына... Ә һин ниңә мине олатай тинең әле?

– Беҙҙең яҡта атайҙан оло хөрмәтле кешегә шулай өндәшәләр бит.

– Эйе шул. Ә беҙҙә башҡасараҡ. Олатай – ул әсәйҙең атаһы. Атайҙың атаһы – ҡартатай. Ә атайҙан йә әсәйҙән өлкән ир кешеләрҙең һәммәһе лә – бабай. Бына бит, бер башҡорт телендә бер үк төшөнсәне сағылдырыр өсөн ни тиклем фекер йыйылған.

– Ниҙән улай тинең, олатай?

– Үҙең уйлап ҡара: **ба, аба** – һүҙе менән бик күп телдәрҙә һөйләшкән кешеләр бер үк төшөнсәне – ир кеше тигәнде аңлатҡан. Әйтәйек, төрөктәр **баба** тип атаһына өндәшә, башҡорттарҙың бер өлөшө атаһынан өлкән ир кешегә **апа** тип әйтә, урыҫтарҙа **баба** оло кешегә әйтелә торған һүҙ, инглизда ла, фарсыла ла ошоға оҡшаш һүҙҙәр бар.

Сәсәнде тыңлаған һайын Уралдың күҙҙәре сағыулана барҙы.

– Олатай, һине минең ҡаршыма Хыҙыр Ильяс сығарғандыр, моғайын.

– Әллә...

– Эйе, эйе. Һүҙҙәр тамырын юллаусы берәр ғалим менән танышырға кәрәк ине, тип йөрөй инем әле. Ундай кеше үҙемдең олатайым икән дә баһа.

– Мин бит телсе ғалим түгел. Тик үҙемдең зауҡым өсөн генә һүҙ тамырын эҙләп китәм ҡай саҡта.

– Ә миңә ғалим дәрәжәһен йөрөтөү-йөрөтмәү мөһим түгел. Миңә һүҙ ҡәҙерен белеүсе кәрәк.

– Нимәгә ул һиңә? – Сәсән ғәжәпләнде. – Һин бит математик. Һинең эшең – һан.

– Һан бит, олатай, һүҙҙән тора, өндән ҡорола. Бер, ике, өс... Ни өсөн тап шулай, ә башҡаса түгел? Ҡасан барлыҡҡа килгән һан? Һүҙ – өн менән бергәме, әллә һуңмы? Һандарҙың тыуыу хәжәте фекер үҫешенең һөҙөмтәһеме, әллә башҡасамы? Кеше тәүҙә нимәне һанарға өйрәнгән: ерҙәге малдымы, әллә күктәге йондоҙҙарҙымы?

Уралды тыңлай-тыңлай элгестән кейемен алған Сәсән инде үҙе Уралдың һорауҙарына фекер ялғарға дәртләнә башланы. Әммә күмәк кеше араһында оҙаҡ һөйләшеүҙе хупламайынса, кейенеп тышҡа сыҡҡас ҡына:

– Һин ҡайҙа йәшәйһең, туған? Әйҙә, беҙгә барайыҡ. Шунда һорауҙарыңа яуап эҙләрбеҙ, – тип саҡырҙы.

Урал ҡалайтырға ла белмәне. Оло кешенең саҡырыуын кире ҡаҡһаң да ҡыйын. Ризалашһаң...

– Ғәфү үтенәм, олатай. Киленең булырҙай кешегә вәғәҙә биреп ҡуйғайным.

Көтәлер. Бармаһам, үпкәләр. Бүтән ваҡытта инермен инде һеҙгә.

– Ярар. Ҡатын-ҡыҙға биргән һүҙҙе үтәү фарыз. Телефон һандарыңды әйт. Икенсе юлы мин шылтыратҡас та килеп ет.

– Вәғәҙә.

## *Хоҙайҙар*

Ял көнөндә Сәсән Уралға шылтыратты. Тегенеһе, Сәсәндең саҡырыуын ишеткәс тә, ҡанатланғандай итте.

– Кешеләр араһында биоток бар, тип раҫлай берәүҙәр, икенселәр ҡырҡа кире ҡаға. Минеңсә ул бар, һис шикһеҙ бар.

– Ни әйтергә самалайһың? Тел төбөңдө төшөнөп бөтмәйем.

– Сәсән олатайҙы күрергә кәрәк ине, тип уйлағайным. Тап шул мәлдә шылтырау яңғыраны...

– Ә-ә. Һин әйткән биотокты борон башҡорттар **уй, һиҙем** тигән. Халыҡ ижады менән таныш булһаң, белергә тейешһең, унда ике сәсәндең әйтеше бар. Береһе: «Ни була ул иң етеҙ елгән нәмә?» – тип һорай. Икенсеһе: «Уйҙан да етеҙерәк, унан да шәберәк сапҡан бер нәмә лә юҡ,» – ти. Ана шул була инде биоток. Һин уйың менән кемгәлер ҡуҙғытыу һалаһың, ул шунда уҡ һинең уйыңа яуап рәүешендә ниндәйҙер хәрәкәт яһай. Йәғни һинең ни уйлағаныңды һиҙә. Әгәр уйың уға оҡшай һәм уйлаған кешегә кире яуабын биреүҙе һораһа, әлеге минең кеүек шылтырата йә башҡаса хәбәр еткерә. Ошондай осраҡта ғына һин биоток барлығын аныҡ беләһең инде. Юҡҡа ғынамы ни беҙҙең атай-әсәйҙәр: «Кешегә яманлыҡ эшләмәү генә түгел, хатта кеше тураһында яман уйлама», – тип өйрәткән.

– Олатай, һинең менән һөйләшеү үҙе аҡыл һандығын асыу менән бер. Әйткәндәй, олатай, мин артабан үҙеңә «һин» тип өндәшһәм, асыуланмаҫһыңмы?

– Киреһенсә, улым. Беҙҙең телебеҙҙә күплектә өндәшеү тик күп кешегә генә өндәшкәндә урынлы. Юҡһа беҙ, бүтәндәргә эйәреп, бер кешегә лә күп иткәндәй өндәшәбеҙ. Шулайтып тел ҡағиҙәһе боҙола. Ә телде боҙоу – үҙеңдән үҙең көлөү, үҙеңде кәмһетеү тигәнгә бәрәбәр.

Ярар, күберәк тә һөйләп ташланым, буғай. Телефон уй түгел бит, тиҙлеге яй, хаҡы – күп. Әйҙә, килен баланы ал да кил. Ҡалғанын күрешкәс һөйләшербеҙ.

Бер нисә сәғәттән осраштылар. Сәсән олатай ҡаланан ситтә йәшәй булып сыҡты. Матур, ыҡсым ғына йорт, ҡура-ҡора, баҡса. Алма ағастарын күреп аптыраны Урал. Берҙән, ағас күп. Икенсенән, быйыл уңыш шул ҡәҙәр ишелеп үҫкән. Бер ағас емештәрен күтәрә алмағас, төбөнә Сәсән таяуҙар терәткән.

Хужа ҡапҡа төбөндә ҡаршыланы ҡунаҡтарҙы. Сәләм алғас та, эре ике алма өҙөп, ентекләп йыуҙы ла йәштәргә һуҙҙы.

– Ошо алмалай күкрәп йәшәгеҙ.

Өй яғынан тауыш ишетелде:

– Ирек, ҡунаҡтарҙы өйгә саҡыр, сәйем әҙер. – Урта йәштәр тирәһендәге мөләйем, сибәр ҡатын ине. Урал бер иргә, бер ҡатынға ҡараш ташланы. Уның ни уйлағанын тойҙо Сәсән.

– Минең ҡатыным, – тип таныштырҙы. – Исеме Сәскә.

– Ниндәй сәскә?

– Сәскә генә, бер ниндәй ҙә түгел.

– Ә мин Зөлхизә булам. – Урал менән килгән ҡатын тупһала торғанына ҡул һуҙҙы.

– Сәскә, – булды яуап, ҡул ҡыҫыштылар.

Өйҙә матур ғына табын ҡоролған. Ирҙәр ҡул йыуып, ул-был иткәнсе, ҡатын-ҡыҙ үҙ-ара аңлашып, өҫтәлгә аш-һыуҙы бергәләп урынлаштыра башлаған да, Зөлхизә:

– Ҡайҙа, еңгә, үҙем эшләйем. Ошоноһон тегендә ҡуяйыммы? – тип йүгергеләй ине инде.

Сәскә иренә лә йомош ҡушҡылап өлгөрҙө:

– Ирек, ҡунаҡтарҙы түргә әйҙә. Һүҙ менән генә һыйлап ни.

Урал күрһәткән урынға ултырҙы, үҙенең теле осона ғына һорау эленде. Ахыр түҙмәне, әйтте.

– Олатай, еңгә үҙеңде Ирек ти ҙә ҡуясы.

Быны ишетеп, Сәскә келтерләтеп көлдө.

– Олатайыңдың исеме Ирек бит. Сәсән тигәне – ҡушаматы. Күптәр уны Ирек тип белмәй ҙә инде, сәсәнлегенә шул тиклем күнделәр. Ҡәҙимге исем тип белә лә ҡуялар.

– Тәүге осорҙараҡ ауыҙ салшайтыусылар бар ине. Имеш, үҙен үҙе сәсән тип атаған. Сәсән исемен йөрөтөрҙән элек есеменә өлгәшер кәрәк, йәнәһе. Хәҙер мыҫҡыл итергә маташыусы юҡ. Шиғыр ҙа сығарғас, бүтән әҫәр ҙә яҙғас, сәсән булһын инде был, тинеләр шикелле. Ә ҡушаматты, ысынлап та, мин үҙем алдым. Берәүҙәр үҙҙәрен шағир тип атай, икенселәр – яҙыусы, өсөнсөләр – драматург. Мин дә шулар араһына инеп китер ҙә инем, бер хәл булмаһа...

– Әйҙәгеҙ, ҡунаҡтар, аш-һыуҙан етешегеҙ әле. Һыуынып китмәһен.

Урал, быны ишетеп, үҙенсә генә уйланы: «Вәт зирәк ҡатын. Ирен һүҙҙән тыйып, битен йыртманы. Ризыҡҡа өндәне лә ҡуйҙы». Сәсән дә аңланы ишараны.

– Рәхим итегеҙ аҙыҡ-әүҡәттән, – тип үҙе ҡалаҡҡа үрелде.

Һүҙҙең дауамын Урал ялғаны. Сәй эсеп, иркенәйеп-ирәйеп алғас:

– Олатай, бая һүҙҙең осона сыға алмағайныҡ, – тип әңгәмәгә әйҙәне.

– Эйе шул. – Сәсән, гүйә, шуны ғына көткән. – Боронғо кешеләр, элекке телдәр, уларҙың тарихы тураһында күберәк белергә тырышам мин. Бер китапта әлеге беҙҙең Уралтауҙа бынан дүрт-биш мең йылдар әүәл ҙур ғына дәүләт булғаны тураһында яҙылғайны. Тора-бара ул йәмғиәт бүлгеләнеп бөтә, берәүҙәре бынан күсенә, икенселәре торған ерендә ҡала. Китеүселәрҙе, имеш, Иран тигәндәр. Ҡалыусылар Туран булған. Урал армыттары араһында бейек кенә һырт бар – Ирәндек тиҙәр. Ана шул ирандарҙың бында йәшәүенә бер дәлил инде ул. Ирәндекте бөгөнгө беҙҙең телгә әүерелдерһәң, Иран тауы була бит.

– Был Ирандың әлеге Көнбайыш Азиялағы Иран дәүләтенә ниндәйҙер ҡағылышы бармы?

– Ҡағылышы туранан-тура. Уралдағы боронғо Иран менән әлеге Иран – икеһе бер үк донъя.

– Бер үк донъямы, әллә бер үк дәүләтме?

– Үҙең дә һиҙгерһең, улым. Минең дәүләт тип әйтергә теләгәнде тойоп өлгөрҙөң.

Урал тыйнаҡ ҡына йылмайып ҡуйҙы.

– Әммә, дәүләт түгел, әлбиттә. Бер үк дәүләт икән, тимәк, бер үк ерҙә урынлашырға тейеш.

– Тап шулай. Әлбиттә, икеһе ике дәүләт. Әммә бер үк тамырҙан, бер үк ерҙән сыҡҡандар.

– Уралдан?

– Эйе. Әгәр уҡыған йә ишеткәнең булһа, «Авеста» тип яҙыулы балсыҡ таҡталар бар.

– Улары – шумерҙарҙыҡы. Боронғо шумер халҡыныҡы.

– Улым, кемгәлер нимәлер бирергә йә тартып алырға ашыҡмай тор. Мин һине аңлайым, йәш кеше бик ҡырҡыу, ҡыйыу, өҙә һуғырға әҙер була. Сөнки уның беләктәре, күкрәге көскә тулышҡан. Типһә тимер өҙөрҙәй сағы. Үҙенең көсөн һиҙгәнгә күрә, ул ҡырҡа һуғырға әҙер. Уның көсөнә ҡаршы сығырҙай әҙәм юҡ. Йәшерәктәре – әле көсһөҙ, ҡарттарының көсө шиңгән инде.

– Олатай, минең бер һүҙҙән фәлсәфә ҡорҙоң да ҡуйҙың. – Урал, үпкәләгәндәй итеп, ирендәрен бөрөштөрҙө. Шул уҡ ваҡытта һоҡланыуҙан күҙҙәре осҡонланып яна ине.

– Юҡ, улым. Фәлсәфәне ҡороп бөтмәнем әле. Сөнки фәлсәфәнең башланғыс нөктәһе һәм шуның йомғағы – йәғни һығымтаһы була. Ә мин һиңә фекерҙең тик урта бер өлөшөн генә әйттем.

– Ә ни һуң уның башы?

– Башы булыр бер һорау: нимә ул, мәҫәлән, көс? Көстө мин өс төргә бүлер инем. Йән, тән һәм аҡыл көсө. Кеше инә ҡарынында саҡта уҡ йәнләнә. Йәғни уның йоҙроҡтай ғына тәненә йән инә һәм әлеге тәнде хәрәкәтләндерә башлай. Ҡарындағы бала ҡыбырлай. Әсәйҙәр уны, бала тибешә, ти. Мәле еткәс, йән көсө нығына һәм, тәнде хәрәкәтләндереп, яҡты донъяға тыуырға өндәй. Әсәй кеше бушана. Ошонан башлап йән көсө күбеһенсә йоҡомһорай, инде тән көсө арта башлай. Тән ҙурая, ит-һөйәгенә көс ҡуна. Сәңгелдәктә ятҡан баланы күҙ алдына килтер әле. Аяғын-ҡулын туҡтауһыҙ тыпырсындыра, көс йыя. Шул саҡта битеңдә баланың аяғына яҡын килтер әле, тешеңде һындырғансы йә күҙеңде сығарғансы тибеүе ихтимал. Ә ҡулда быңдай көс бик һуң ғына буласаҡ. Һинең күҙ төбөң күгәреп йөрөгәне булманымы һуң?

– Булды... – Уралдың ауыҙы йырылды. – Дүртенсе класта уҡығанда микән, дүрт-биш малай мине күмәкләп туҡманы. Ике күҙ ҙә күм-күк йөрөгәйне.

– Ни эшләп туҡманылар инде?

– Дәрестә, һәр һорауға ла яуапты белгәс, ҡул күтәрә лә ултыра торғайным. Быларға ошо оҡшаманы. Йәнәһе, мин – шәп, улар – насар. Шуға мине аҡылға ултыртырға булғандар...

– Ултырҙыңмы һуң?

– Ултырҙым. Ҡулды һирәгерәк күтәрә башланым. Әммә уларҙан шөрләгән өсөн түгел. Ә, быларҙан ҡайһылайтып ҡон ҡайтарырға икән, тип уйлай торғайным.

– Уйлап таптыңмы?

– Таптым. Тәүҙә спорт секцияһына йөрөп, ҡул-аяҡты нығыттым һәм сыныҡтым. Шунан тегеләрҙең һәр береһен тотоп туҡманым.

– Абау, ҡайһылай ҡанһыҙһың. – Ирҙәрҙең әңгәмәһен тыңлап ултырған Зөлхизә тороп уҡ китте.

– Килен, һин яңылышаһың. – Сәсәндең тауышы ҡырҡыу ғына сыҡты, ҡатын туҡтап ҡалды.

– Ир кеше йә ир булаһы кеше иң алдан үҙен һаҡларға, һаҡлай белергә, шунан яҡындарын яҡларға тейеш. Әйт әле, Урал һине берәрһенән йәберләттерәме?

– Юҡсы...

– Тимәк, ул үҙен һаҡлап, һине яҡлап йөрөтә.

– Миңә лә, уға ла берәүҙең дә бәйләнгәне юҡ әле.

– Сөнки Урал һине лә, үҙен дә кемдер бәйләнерлек хәлгә төшөрмәй һаҡлай. Көс ҡулланыуҙың иң яҡшы өлгөһө тап бына шул инде ул. Көстәрҙе сәкәштерергә юл ҡуйырға ярамай. Бына был – аҡыл көсө.

Зөлхизә шым ғына ашъяҡҡа сығып китте. Сәскә күптән шунда ине. Шымтайып ҡына ингән йәш ҡатынды йылмайып ҡаршыланы.

– Үпкәләмә һин минең иргә. Ҡайһы берҙә ҡатыраҡ әйтеп ҡуя ул. Әммә нахаҡҡа рәнйетмәҫ.

– Апай, шул тиклем күп белгән кеше менән йәшәү ҡыйын түгелме һуң?

Сәскәнең ниңәлер теҙ быуындары ҡалтырап китте һәм янындағы ултырғысҡа ултыра төштө, күҙҙәре ҙурайҙы, бер һүҙ ҙә өндәшә алмай байтаҡ ултырҙы. Шунан ғына:

– Ирек күп беләме ни? – ти алды.

– Аһ, белмәйенсә ни. Боронғоно үҙе ҡатнашҡан кеүек һөйләп тик ултыра. Бөгөнгөнө һис уйламаҫтай яҡтан килтереп һуҡтыра.

– Әлләсе... Миңә ҡалһа, ул күп белергә тейеш, тип тик йөрөйөм. Сәсән кеше бит. Ә тормошта уның күп йә аҙ белгәне һиҙелмәй ҙә ул. Һин дә мин һөйләшеп, күбеһенсә шаяртып өндәшеп тик йөрөй. Донъябыҙ бөтөн, аш-һыуыбыҙ өҫтәлдә, тигән кеүек.

– Тимәк, үҙе әйткән аҡыл көсө ныҡ инде унда.

– Бәлки. Һин үҙеңдекенең дә шулай булырын теләр инеңме?

– Теләр инеңме, тип? Аҡыл, минең белеүемсә, һай йә тәрән була. Әлбиттә, мин дә аҡыллы кеше менән йәшәр инем.

– Бирһен Хоҙай...

– Бирерме икән һуң Хоҙай? Ғөмүмән, бармы һуң ул Хоҙай?

– Ай-һай, килен, бигерәк тәрәнгә төшә башланың. Кем булып эшләйһең һуң һин, белемең нindәй?

– Белемем бик күп түгел. Педучилище бөттөм, балалар баҡсаһында эшләйем. Балалар менән эшләгәнгә күрә һорайым да инде. Иртәнсәк атай, әсәйҙәр балаларын килтерә лә йә: «Иди с богом», – тип, йә: «Аллаға тапшырҙыҡ», – тип китәләр. Уларҙың балаһын Бог та, Алла ла түгел, беҙ ҡарайбыҙ. Шуға аптырайым. Хоҙай бармы икән һуң? Булһа, беҙҙең эшкә берәй ярыҡтан ҡарап торамы икән?

– Ошондайыраҡ һорауҙы мин дә байтаҡ йылдар элек Ирек ағайыңа биргәйнем. Ҡапыл ғына яуап та ҡайтарманы, көтәрелеп тә бәрелмәне. Йылмайып ҡына ҡуйҙы, өндәшмәне. Бәлки, тиҙ генә яуабын да тапмағандыр. Бәлки, был үҙе лә уйланһын әле, тигәндер. Көндәр, айҙар ғына түгел, йылдар үтте. Ул хаҡта мин дә һүҙ ҡуҙғатманым, Ирек тә өндәшмәне. Бер ваҡыт ул минең алға китап һалды.

– Ошоно уҡы әле, – ти.

Ҡараһам, «Урал батыр».

– Уҡығаным бар уны, – тимен.

– Ә һин йәнә уҡы. Ентекләп уҡы. – Ул элек тә күп һөйләшмәҫ ине, әле лә шулай.

Зөлхизә ауыҙ ситенән генә көлөп ҡуйҙы, әммә яуаплап торманы, һорамайынса әйбер алғанда тотолған ҡыҙ бала ише, ҡарашын йәшерҙе, әммә һиҙелер-һиҙелмәҫ йылмайыуы йөҙөндә ҡалды.

– Күп һөйләй ул, тарихҡа төшөп китһә. Тыңлаусыһы булһа – һөйләй. Уның телмәре күберәк ҡысҡырып фекер йөрөтөүгә оҡшай. Үҙ фекерен, үҙе уйлағанды кемгәлер һөйләп, шуларҙың дөрөҫлөгөн тикшерә кеүек ул. Шуға күрә ундай хәбәре өсөн көймә һин уға. Шуның ҡарауы, бүтән саҡта аҙ һөйләшә ағайың. Күберәген ым-ишара, бер-ике һүҙ менән аңлата ла ҡуя.

Зөлхизә өндәшмәне, эстән генә әңгәмәсеһенә һоҡланды. Ирен ҡайһылай яҡлай, тип аптыраны. Әйтерһең, инә ҡарсыға себештәрен һаҡлай. Ә Сәскә уй ебен һаман һүтте:

– «Урал батыр»ҙы өр-яңынан уҡып сыҡтым. Шунан Ирек алдына китапты һалдым да өндәшмәй генә торам.

– Таптыңмы? – ти был.

– Нимәне?
– Хоҙай тураһындағы һорауыңа яуапты.
– Юҡ. «Урал батыр»ҙа Хоҙай ҙа, Алла ла, Бог та юҡ бит.
– Юҡ шул. Тимәк, «Урал батыр» Хоҙайҙар ҙа, Алла ла, Бог та, Иуда ла, Будда ла барлыҡҡа килмәҫ борон сығарылған. Юҡһа, береһе булмаһа, икенсеһе телгә алыныр ине. Азия халыҡтарының яртыһынан күберәге табынған Буддалар 6-7 мең йыл самаһы әүәл уйлап табылған, тиҙәр. Буддалар бит – кеше ҡиәфәтле ярым хоҙайҙар. Улар, йәнәһе, йәберһәтелгән кешеләрҙе яҡлар өсөн ҡара көстәргә ҡаршы баҫҡандар. Иң ныҡ көскә лә ҡаршы тора алырлыҡ булғас, әлбиттә, улар ҙур кәүҙәле, тәрән аҡыллы инде. Ә ҡәҙимге кешеләр ул заманда ла, әле лә Буддаға аһ-зарын һөйләй, үтенесен белдерә, ярлыҡау һорай. Будда уға һис шикһеҙ ярҙамлаша. Сөнки ул бит үҙе лә кеше затынан, шуға кеше хәлен яҡшы белә һәм уның донъяһын еңеләйтергә тырыша. Ә кеше Буддаға ярҙамы өсөн күстәнәс бирә, ҡорбан килтерә, доғаларын арнай. Тәүҙә Будда берәү булған, унан һуң улар күбәйгән. Сөнки кеше күмәк, тормоштоң тармағы ла аҙ түгел. Бер Будданың бар ергә лә өлгөрә алмауы бар. Шуның өсөн һәр эштең үҙ Буддаһын ҡуйғандар. Һауа торошон күҙәтеүсеһе – үҙенә башҡа, диңгеҙ йә урман эшенеке – үҙенә айырым, өй һәм йорт ҡаралтыһын һаҡлаусы – үҙе бер һәм ҡапҡа төбөндә һаҡта ултыра. Өҫтәүенә, Буддаларҙың берәүҙәре аждаһаға, икенселәре бүрегә, өсөнсөләре торнаға оҡшаған...
Ошоларҙы теҙеп әйтте лә ағайың минән: «Мин ни эшләп һиңә Буддаларҙы ентекләп һөйләй тип беләһең? Беҙҙең халыҡ тормошо менән берәр уртаҡлығын тоймайһыңмы?» – тип һорай.
– Ә ниңә улай ти? Апай, һин дә сәсәнме әллә?
Сәскә көлдө.
– Юҡ. Ҡайҙа ти ул миңә. Мин барлығы химиясы. Университеттан химиясы итеп сығарҙылар. Шунан һуң химия институтында эшләйем. Әммә тарих, боронғолар тураһында уҡыштырам. Иректең йоғонтоһо инде. Элекке менән минең ҡыҙыҡһынғанды белгәнгә күрә һорай ул Буддалар тураһында.
– Эйе, – мәйтәм,– оҡшашлыҡ бар. «Урал батыр»ҙа Һәүбән, Аҡбуҙат, Айһылыу ярым кеше, ярым Хоҙай рәүешендә. Етмәһә, Ибн Фаҙлан, башҡорттар 12 хоҙайға табына, шуның береһе – торна, тип яҙып ҡалдырған.
– Ай, минең матурымды! Үҙҙәрен ғалим тип йөрөткән бәндәләр күрә алмаған яҡынлыҡты шартлатып әйтте лә бирҙе, – тип ебәрҙе Ирек.
– Арттан этеүсе булһа, менәбеҙ инде Айға, – тип мин дә кәзекләгән булам.
– Будда һындарына ышаныу бөгөнгө көндән 6-7 мең йыл әүәл барлыҡҡа килгән, тип һанай тарихсылар. Әгәр Будда ышаныуҙарына ауаздаш фекер итеү башҡорттоң «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек ҡобайырҙарында сағыла икән, тимәк, был ҡобайырҙарҙың ижад ителеү осоро ла шул уҡ Буддалар йәшенә яҡын тигән һүҙ.
– 6-7 мең йылмы?
– Бәлки, аҙыраҡтыр, бәлки, күберәктер. Әммә бер сама. Уның ошолайлығын дәлилләгән тағы бер нәмә бар.
– Нимә?
– Тау. Башҡортостанда Торатау тигән тау барлығын һәммәһе лә белә. Геологтар уның ошо урында ҡалҡҡан дәүерен, 20 миллион йылдар әүәл, ти. 20 миллион йыл элек эзбиздән торған тау өйөлгән һәм беҙҙең көнгә тиклем килеп етеп, Тора исемен йөрөтә икән, тимәк, тау бик күп йылдар ошо исемдә йөрөй. 7 мең йылмы уның исеменә, күберәкме, – әйтеүе ауыр. Әммә 1 мең йыл икәнлегенә яҙма тарих шаһит. Бая һин әйткән ғәрәптәр, был тирәгә килеп-китеп йөрөгән

фарсы, грек, мадъяр сәйәхәтселәренең яҙмаларында бар был исем. Торатау элек-электән кешеләрҙең күмәкләп йыйылыр, Хоҙайҙарына табыныр урыны булған. Бәлки, тауҙың үҙенә лә Хоҙай һымаҡ күреп табынғандарҙыр. Сөнки бейеклек һәр ваҡыт дәһшәт, көс, ғәйрәт сығанағы бит. Египет пирамидалары юҡҡа ғына оло-оло тауҙар рәүешендә һалынмаған. Торатауға кешеләрҙең табыныуы тураһында һөйләгән бер факт та бар. Сыуаш халҡының Башҡортостанда йәшәгәндәре элегерәк: «Ай, Тура, Тура!» – тип һөйләнә-һөйләнә суҡына торғайны. Христианса ул: «Ай, Господи! Ай, Христос!» – тип суҡынырға тейеш бит. Юҡ, былар: «Ай, Тура!» – ти. Бында ике ышаныу бергә ҡушылған. Борон сыуаш һәм бүтән халыҡтарҙа Тора (Тура) Хоҙайы булған. Сыуаштар суҡындырылғас, бер үк кешеләргә ике Хоҙай ҙа һеҙә башлаған.

– Һинеңсә, Торатау сыуаштарҙыҡы инде?

– Минеңсә түгел, һинеңсә... – Ирек, асыуланып, урынынан тороп уҡ китте. – Анһат ҡына ер-тау өләшергә тораһың.

– Үҙең бит, сыуаш Хоҙайының тауы, тинең.

– Тиһәм ни! Ул саҡта, Торатау исеме, Тора Хоҙайы барлыҡҡа килгәндә, кешеләр сыуашҡа, башҡортҡа, мариға, сирмешкә бүленмәгәндер әле. Был исемдең тарихи тамыры бик тәрәндә ята. Башҡорттар һуңыраҡ, кешеләр милләттәргә бүлгеләнгәс, Тора Хоҙайын барыбер күңелендә һаҡлап ҡалдырған. Шулай булмай, Тора исемен бер түгел, әллә нисәмә тауға бирәме ни? Торатауҙар әлеге Ишембай, Өфө, Һүлейә ҡалалары янында бар һәм улар бөтәһе лә изге һанала.

– Сәскә апай, һауыт-һабаны ла йыуып бөттөм, әммә Хоҙай бармы-юҡмы – барыбер төшөнмәнем.

– Сөнки һин һөйләп бөткәнде көтмәнең. Һүҙҙең аҙағына сыҡманыҡ бит әле.

– Шулай уҡ оҙонмо ни һүҙ?

– Меңәр йыл тураһында бит һүҙебеҙ, шуға оҙонораҡ та тойолалыр. Әммә кем һүҙ мәғәнәһен күңеленә һеңдерә, ул, Хоҙай ҡарай ярыҡтан, тимәй инде, ә үҙе Хоҙайҙың йөҙөнә ҡарай башлай.

Зөлхизә шып туҡтаны. Уҫал да икән Сәскә, әңгәмәләшен белекһеҙлектә ғәйепләне лә ҡуйҙы. Зөлхизә шартлатып сығып китергә лә булып ҡуйғайны, тыйылды. Үҙе ғәйепле. Кешеләр меңәр йылдар буйы изге тип һанаған нәмәләрҙе үҙе мысҡыл итте. Тейешле яуабын алғас, түҙәһең инде. Шулай ҙа Зөлхизә тырт-мырт килеп, өндәшмәй торҙо бер аҙ. Әммә күпме йөрөйһөң инде турһайып, ахырҙа һүҙ башланы.

– Торатауҙың Буддаға ла ҡатнашы бармы инде?

– Ана шуны әйтә алмай торам. «Ниндәйҙер ҡатнашы бар, ти» ти бит Ирек. Туранан-турамы, әллә берәр төрлө тап килеүҙәнме, уныһын ул да өҙөп кенә әйтергә баҙманы. Буддаларҙың береһенең исеме Тура икән. Беҙҙең, йәғни ислам Хоҙайы менән бәйләнешлеме-юҡмы, бәлки, киләсәктә асыҡларҙар. Быға башҡорт донъяһы менән Буддаға табыныусыларҙың мөнәсәбәтен юллаусы ла булманы. Кем белә, бәлки, ысынлап та, уртаҡ тамырҙар барҙыр.

Зөлхизә һаман үҙенекен итте.

– Тимәк хоҙайҙарҙы кешеләр уйлап сығарған, улар кешенән айырымланып йәшәрлек йән дә, көс тә түгел инде?

– Эйе, ғалимдарҙың күбеһе шулай тип һанай. Киреһен раҫларға тырышыусылар ҙа байтаҡ, әммә тәүгеләре күмәгерәк. Улар, бер нәмә лә юҡтан яралмай һәм юҡҡа сыҡмай, тиҙәр. Мин бит химиясы, бер генә химик элементтың да эҙһеҙ юғалмауын беләм.

# *Ҡыҙ менән егет*

Сәсәндең өйөнән сығып киткәс, Урал менән Зөлхизә өйҙәренә ҡайтҡансы тиерлек һөйләшмәнеләр. Өйҙәренә тип, уртаҡ торлаҡтары, әлбиттә, юҡ. Зөлхизә элек заводтыҡы булған дөйөм ятаҡта йәшәй. Балалар баҡсаһында эшләүенең ғилләһе лә шунда. «Баҡса тәрбиәселәренә ятаҡтан урын бирелә» тигән иғланға юлығып барып сыҡты унда. Юҡһа, мәктәптә уҡыта алыр, аҡсаһы ла күберәк булыр ине. Урал да ятаҡта көн күрә. Мәскәүҙән саҡыртып алғас, университет ятаҡтан бүлмә бирҙе. Бәләкәй генә инде үҙе, әммә айырым бүлмә. «Йәшәп тор шунда, һуңынан күҙ күрер, – тине ректор. – Беҙ бөтәбеҙ ҙә ятаҡтан башланыҡ». Әммә ул заманда донъя икенсе ине. Яҡшы белем алған һәм шуны йәштәргә һирпә алған кешеләргә дәүләт иҫәбенә фатиры ла, бүтәне лә бүленә тора ине. Хәҙер донъяһы бүтән. Имеш, баҙар иҡтисады. Бөтә нәмә һатыуға һәм алыуға ҡоролған. Дәүләт үҙ иҫәбенә бирәүгә лә бер нәмә лә бирмәй. Хәлеңдән килһә, һатып ал. Шуға Урал ятаҡтан ҡасан нисек ҡотолорон һис күҙ алдына килтерә алмай. Ғүмере ятаҡта уҙҙы инде, тиһәң дә ярай. Атай йортонан ҡалаға интернат-мәктәпкә китте. Ятаҡ тормошо ошонда башланды, Мәскәүҙә уҡығанда дауам итте һәм бына Өфөлә – ятып серем итерлек карауат һәм бер бәләкәй генә өҫтәл һыйған ятаҡ бүлмәһе. Эй, яҙмыш, булырмы икән беҙҙең халыҡҡа ла бер йүнлерәк тормош? Шуға Сәсәндең өйөн, хужалығын күреп, саҡ ҡына көнләшә биреберәк тә ҡуйҙы. Әммә күңеленә инеп барған ҡортто ҡыуырға тырышты. Сәсәндеке бар, сөнки ул булдырыу йүнен күргән. Уның мөмкинлектәре лә бүтәндәрҙекенән һис артыҡ түгел. Әммә ул бөтмөрөрәк, булдырыу юлын эҙләй һәм таба. Алла бирһә, минең донъям да күкрәп сәскә атыр бер заман, тип йөрәк тапҡырына ояларға самалаған ҡара уйҙы ҡыуҙы. Ул һәр кире эштең дә тәүҙә күңелдә тамырланыуын белә бит. Атаһы Ишдәүләт ҡат-ҡат иҫкәртә торғайны шуны. Алдынғы булам тиһәң, маҡсат ит тә шуға бар, ә кеше донъяһын насарландырыу иҫәбенә үҙеңдекен яҡшыртыу тураһында уйлап та ҡарама, тиер ине атаһы.

Ятаҡ, ятаҡ... Бер уйлаһаң, уға ла әллә ниндәй гүзәл бағышлауҙар яҙырлыҡ. Ятаҡтың ҡыҫынҡы бүлмәләренә күпме юғары белем, ни ҡәҙәр фән асыштары һыйған. Шул ятаҡ күпме кешене урамда йәшәүҙән ҡотҡарып, яңылыш юлдан аралаған. Ятаҡта күпме матур ғаилә моронлаған. Әммә шул уҡ ятаҡта бихисап яҙмыш тайғаҡ юлға төшкән һәм яңы ғына гөрләтеп туй үткәргән ни ҡәҙәр ғаилә тарҡалып юҡҡа сыҡҡан... Эй, ятаҡ!

Урал менән Зөлхизәнең танышыуы ла шул ятаҡ арҡаһында булды. Урал күптән инде иртәнге сәғәттә йүгереп, аяҡ-ҡулын болғап тән яҙҙырырға күнеккән. Ул үҙ ятағының тупһаһына килеп сығыуы була, ҡаршылағы биш ҡатлы ятаҡтан бер ҡыҙ килә лә сыға. Тәүҙә улар быға иғтибар итмәнеләр. Ишектән инеп-сығып йөрөүсе кеше аҙмы ни! Әммә әлеге хәл өстән дә артҡас, икеһе лә бер-береһенә текләберәк ҡараны. Тәпәшәктән саҡ ҡына бейегерәк, ҡара сәсле, һомғол ғына буйлы ҡыҙ. Егетең дә ярарлыҡ. Ҡыҙҙан саҡ ҡына өлкән икән, кәүҙәгә лә бейегерәк, ап-аҡ тештәре менән ҙурыраҡ тойолған күҙҙәре ҡыҙҙарҙың һушын ала ла ҡуя инде. Ялпағыраҡ йөҙө менән ҡоңғортораҡ сәсенә ҡарап, беҙ бер яҡтан, буғай, тип фекер төйнәне ҡыҙ.

Сираттағы көн иртәһендә йәнә осраштылар. Ҡыҙ баҫҡыстан төшәйем тип аяғын ғына күтәргәйне, ятаҡ тәҙрәләренең береһе асылды ла ҡатын-ҡыҙ тауышы һөрәнләне:

– Зөлхизә! Аҫҡысыңды онотҡанһың, мә, ырғытам.

Аҫҡыс төшкән урынға егет алдан барып етте. Аҫҡысты эйелеп алды ла ҡыҙға һондо:

– Исемегеҙ бигерәк матур икән, Зөлхизә. Ә мине Урал тиҙәр.

– Бик яҡшы. – Зөлхизә боролдо ла үҙ юлына китте. Урал бер аҙ тапанып торҙо ла йүгерҙе. Икеһе лә эстән генә ҡабатланы: Зөлхизә, Урал. Исемдәр оноторлоҡ түгел ине. Урал – үҙе яңғырауыҡлы, үҙе ғорур, үҙе күркәм исем. Егете кеүек. Зөлхизәне йышыраҡ ҡабатлаһаң, үҙенән-үҙе йыр ағыла башлай. Башҡорттоң иң мәшһүр йырҙарының береһе лә юҡҡа ғына «Зөлхизә» тип аталмаған бит.

Төн үтә лә таң ата, таң иртәнде уята. Ҡыҙ менән егеттең һағынып көтөп алған мәленә әүерелде ул.

– Зөлхизә, һаумы? Төнөң тыныс үттеме?

– Рәхмәт, Урал. Һәйбәт.

– Бөгөн театрға барайыҡ тигәйнем.

– Әлләсе, уның кеүек ерҙәргә бигүк йөрөгәнем дә юҡ минең.

– Бик матур спектакль, тиҙәр. Премьера.

– Балаларҙы ваҡытында алып бөтһәләр... Ҡайһы бер ата-әсә бигерәк һуң килә.

– Мин дә һине баҡсанан барып алырмын. Һуңлап ҡуймаҫ өсөн.

– Ярар һуң.

Бер аҙҙан йәнә саҡырыу яңғыраны.

– Зөлхизә, һине тыуған көнөң менән ҡотлайым һәм бөгөн кис ресторанға саҡырам.

– Ресторан шул ҡәҙәр ҡиммәт, тиҙәр, бәлки, бармаҫбыҙ?

– Ә мин ҡотлау сараһын аҡсалата ғына бирермен.

– Улай тимәйем дә инде...

Оҙаҡламай йәнә һүҙ булды.

– Урал, һине байрам менән ҡотлайым. Теләһәң, бер бәләкәй генә табын ҡорормон тигәйнем. Кискә. Минең бүлмәләштәр кеме ҡайҙа китеп бөтә.

Кисә бик оҡшаны Уралға. Өҫтәлдә ике шәм. Уртала – бишбармаҡ һәм һөйәкләп ит. Хатта аҡбаш ярты ла ултыра.

– Байрам табынын өйҙән башҡа ерҙә күргәнем юҡ минең. Атайым байрамға һис шикһеҙ бишбармаҡ бешертә, ә араҡыны әсәйем йәшереп ҡуйған еренән сығарып ултырта ине... – Зөлхизә ҡыҙарынды-бүртенде.

Уралдың түбәһе күккә тейҙе.

– Бишбармаҡ! Мәскәүҙәрҙә йөрөп тәмен дә онотоп бөткәнмен инде. Ай, үҙебеҙҙең аш-һыу, уға еткән ризыҡ бармы ни!

Шул төндө ҡыҙ менән егет беренсе ҡат үбеште. Икеһенә лә оҡшаны был. Йәнә-йәнә... Шунан кеме ҡайҙа таралышҡан бүлмәләштәр һөрлөгөшөп бер юлы ҡайттылар. Саҡ ҡына ла кәмемәгән тиерлек араҡы бик ярап ҡалды. «Беҙ бит эшсе синыф, – тине береһе. – Эсмәгән булып кәнфитләнеп ултырмайбыҙ».

Бөгөн килеп ҡаланан ситтә йәшәгән берәүгә ҡунаҡҡа әйҙәгәйне лә Урал Зөлхизәне. Икеһе лә үҙ уйҙарына батып, томһойошоп ҡайтып киләләр. «Кейәүгә сыҡ миңә, тиһә Урал, ҡайһылайтырмын икән һуң? Сәсән менән Сәскә икеһе бер һүҙҙе һөйләп, бер-береһен ярты ауыҙҙан аңлап йәшәйҙәр. Шуға тормоштары аҡҡан һыу кеүек түгелмәй ҙә, сайпылмай ҙа китеп тик бара. Ә мин Уралдың математикаһын саҡ ҡына ла төшөнмәйем бит, исмаһам. Математиканан ҡотолор өсөн педучилищеға барып индем. Уралдың ни һөйләгәнен аңламай, икебеҙ ике мөйөшкә ҡарап йәшәрбеҙме икән ни?»

Уралдың башын Сәсән әйткән һорау сүкене. Бик оҫта һәм сәмләндергес сәпәне ләһә һорауын. Ер ярылһа, тишегенә төш тә кит. «Ни эшләптер математиктар кешелектә тәүҙә нимә булған: өн – һүҙме, әллә өн – һанмы – шул турала уйланмайҙар. Логиканың атаһы математика, тип тылҡырға оҫта улар. Әммә логик

хәрәкәткә тиклем ниндәйҙер этәргес булғандыр бит? Нимә һуң ул? Шул этәргес көстө тамамланған йә мәңге бөтмәй торған математик формулаға һалып булмаймы икән ни?»

Һорауҙың хәтәрен ҡуйҙы Сәсән. Иң ҡыҙығы шунда: ошо һорауға яуап кешелектең киләсәккә юлын билдәләүе бар. Әгәр һандың башы булһа, аҙағы ла килергә тейеш. Кешелектең башланмышы ҡайҙа һәм ҡасан? Математиктар шуны иҫәпләп сығара алһа, тормоштоң аҙағы тураһында ла әйтерҙәр ине. Ул сағында йә кешелекте ҡотҡарыу юлын табырға, йә һәләкәт тоҫмалы барыбер килә, бер ни ҙә ҡылып булмай, тип яҙмышҡа буйһонорға ҡалыр ине. Бәлки, юҡтыр башланмыш, ул саҡта аҙаҡ та янамай. Математиктар, һанағыҙ һәм иң ихтимал дөрөҫлөктө кешелеккә әйтегеҙ.

Бер һорау мең һорау тыуҙыра. Урал шуларға яуап эҙләргә тырыша. Зөлхизә менән ятаҡҡа килеп еткәс, ҡыҙға әллә хуш тип әйтте, әллә – юҡ, үҙ ишегенә инде лә китте. Иртәгәһенә тән яҙырға ла сыҡманы, университетҡа барҙы ла китапҡа сумды, китаптарҙан башын күтәрҙе лә Интернетҡа сумды. Төн менән көн алмашынғанын да тойманы, тамағына ашаһа – ашаны, ашамаһа – юҡ. Бер заман математикаһынан айнып, Зөлхизәне эҙләп бүлмә ишеген ҡаҡҡайны.

– Ул бында йәшәмәй. Эштән сығып китте, – тинеләр.

– Ҡайҙа китте?

– Уныһын үҙе лә белмәгәндер. Ирһеҙ ҡатын иҫәр-иҫмәҫ торған елгә тиң. Һауа шарты ҡатмарлы бит, еләҫ елдән ҡойон да, дауыл да яһай. Осто ла китте Зөлхизә.

Бәлки, яҡшыға ла булғандыр был хәл. Күрәһең, Зөлхизәнең яҙмышы Уралдыҡынан айырым биткә яҙылған.

## *Нәҫел башы*

Һәр кемдең үҙ музыкаһы була. Уның ҡолағына ғына ятҡан өндәрҙән тора ул. Йә һуҙынҡы, йә тартынҡы көй үҙ аһәңе менән яңғырай. Ҡолаҡҡа ҡаты кеше доң-доң һуғылған дөмбөр тауышынан кинәнес алһа, сос ҡолаҡ шым һәм һиҙелер-һиҙелмәҫ аҡҡан һыу йә иркәләп иҫкән ел кеүек музыканы тыңлап кинәнә. Сәсән һуңғы ваҡытта көйҙө үҙенсә ҡора башланы әле. Үҙенең эш бүлмәһенә ике магнитофон ҡуйҙы. Береһенән һиндейҙарҙың прерияларын хәтерләткән йә үҙәктәргә үткәрерлек ҡурай моңо ағыла. Икенсеһенән «Урал батыр»ҙы бер бала уҡый. Тауышы үтә яңғырауыҡ та, тоноҡ та түгел. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен тойоп, төрлөсә баҫым ҡуйып уҡый. Моң менән ҡуша ҡобайыр Сәсәнде әллә ҡайҙарға алып китә.

...Икһеҙ-сикһеҙ һыу даръяһы буйлап кәмә килә. Бар тараф тик дүрт төҫтән тора. Зәңгәрһыу күк көмбәҙе, ҡыҙғылт ҡояш, зәңгәр диңгеҙ һәм уның уртаһында ҡара нөктә – кәмә. Кәмәнең ишкәге лә, елкәне лә юҡ. Кәмәләге ике кеше – Йәнбирҙе менән Йәнбикә – кәмәне ҡайҙалыр йүнәлтеү тураһында уйлап та бирмәйҙәр. Сөнки улар быны белмәйҙәр. Элек анһат ине. Тауҙар, үҙәндәр, йылғалар, ағастар, кейектәр менән кешеләр... Улар көн дә иртән торғас, кемдең ни менән шөғөлләнерен, кемдең ҡайҙа барырын белә ине. Шунан ҡотоп ҡупты, бар донъяны, кешеләрҙе, кейектәрҙе туфан баҫты. Йәнбирҙенең кәмәһе бар ине. Йәнбикә менән шуға ултырып ҡотолдолар, батмай ҡалдылар. Кәмә уларҙы сикһеҙ һыу өҫтөндә йөрөтә. Ҡайҙалыр ағыҙамы, әллә инде бер урында торалармы – уныһын да белмәйҙәр. Иртән күктә ҡояш сыға, төнөн ай ҡалҡа, йондоҙҙар күренә. Башҡа бер ни ҙә юҡ. Ризыҡланғандары һыу булды. Ул саҡта диңгеҙҙә тоҙ юҡ ине, тора-бара, ҡояшта ҡыҙына-ҡыҙына тоҙланды. Йәнбирҙе менән Йәнбикә балыҡ тоторға өйрәнде. Кәмәлә Йәнбирҙенең ер тормошонан ҡалған һөңгөһө ята. Тау-

урманда шуның менән кейеккә һунар итә торғайны. Бында балыҡтарҙы сәнсеп алырға бик яраны. Көнө менән әллә күпме балыҡ тотоп ташлағыланы, ә ҡайһы көндө берәү ҙә эләкмәне, кәмә янына балыҡ килмәй ҙә ҡуя. Шундай көндәрҙә ас булдылар тәүге сәғәттә. Шунан Йәнбикә ағас бысаҡ менән балыҡты ярып, эсен таҙартып ҡояшта киптерә һәм ризыҡһыҙ көнгә һаҡлай башланы. Кешеләр ерҙә саҡта аулаған кейекте ярып йөрәген ала, ҡанын эсә торғайны. Балыҡты ла шулайтырғамы? Әммә уның йөрәге юҡ, ҡаны бик аҙ булып сыҡты. Йәнбикә балыҡтың тиреһен тунарға, шунан ҡорама ҡororға өйрәнде. Ҡораманан иң алда ҡояш эҫеһенән һаҡланырлыҡ япма яһанылар, шунан – арт, ал һанға көпләмә. Тәүге осорҙа, ҡояш ҡыҙыуынан ҡасып, һыуҙа йөҙөп тик йөрөй торғайнылар. Әммә торараҡ эре балыҡтар килеп сыҡты, ир менән ҡатынға һөжүм дә иткеләнеләр. Бәхеткә күрә, артыҡ зыяны теймәне. Шулай ҙа бынан һуң кешеләр һыуға һирәгерәк төшөр һәм береһе һыуҙа саҡта икенсеһе ян-яҡты яҡшылап күҙәтер булды. Ҙур балыҡтың фиғелен өйрәнеп алғайнылар инде. Тик бер көндө иманһыҙ ҙур балыҡ пәйҙә булды. Өҫкө ҡанаты, кәмә һымаҡ, һыуҙы телеп килә. Кешеләрҙең кәмәһенә яҡын уҡ килеп, ауыҙын асып ебәрҙе теге мәлғүн. Кәмәне тешләй була шулай итте лә,– яҙа киттеме, нисек кенә булмаһын, – Йәнбирҙе тегегә һөңгөһөн һелтәне. Балыҡтың тап күҙенә ҡаҙалды осо. Балыҡ, тулҡын күтәреп, һыуға сумды һәм башҡа күренмәне. Ҡото осто кешеләрҙең, былай һөжүмләһәләр, оҙаҡҡа алып бармаҫ былар кәмәне, тип ҡурҡтылар. Өҫтәүенә, Йәнбирҙенең бүтән һөңгөһө лә ҡалманы.

Иртәгәһенә хәүефләнеп уяндылар. Теге балыҡ йәнә килерме? Уныһы булмаһа, башҡаһы һөжүмләрме? Аждаһалай бер ҙур балыҡ йәшәгәс, шундайҙар тағы ла барҙыр инде. Көткәс, юш килә инде ул. Ҡояш байтаҡ күтәрелгәс, диңгеҙ ситендәрәк ҡара нөктә күренде. Кәмәләге ике кеше лә бер юлы шәйләне быны. Үҙара ҡараштылар. Күҙҙәрҙә – ҡурҡыу ғына, өмөт атҡылары күренмәй. Аңланылар: һыу аждаһаһы килә. Ни хәл итһендәр. Бахырҙарға көтөүҙән башҡа сара ҡалманы. Әммә нөктә бик аҡрын яҡынайҙы, әллә инде ул йөҙөргә лә уйламай тик ята, әллә инде кәмәнең килгәнен үҙе көтә. Көн үтте – яҡынламаны нөктә. Ир менән ҡатын, ҡурҡа-ҡурҡа кәмә төбөндә бер-береһенә һыйынышып, серемгә китте. Күҙҙәрен асыу менән теге нөктәне эҙләнеләр. Әммә таң һарыһында ҡояштың тәүге нурҙары менән диңгеҙ йылтырауығы бергә ҡушылғандай ине, шәйләй алманылар. Ҡояш офоҡтан айырылғас иһә, күк ситендә ниндәйҙер бығаса күреп өйрәнелмәгән төҫтәге һыҙат барлыҡҡа килде. Диңгеҙ зәңгәренән байтаҡҡа ҡара ине был. Әммә кисәге балыҡтың ҡанаты ла түгел. Уныһы өсмөйөшләнеп, ослайып тора ине. Ә был яҫы һәм оҙон, офоҡтоң буйынан-буйына һуҙылған. Нимә булыр был? Шул ҡәҙәр ҙур балыҡмы? Һыу аждаһаһының иң ҙур ғифритеме? Аңламаны кешеләр, бары тик көттөләр. Көн үтте. Тәүҙә яҡынайған кеүек тойолған яҫы һыҙат кискә ҡарай йәнә алыҫайҙы. Ҡояш байыу менән күҙҙән үк юғалып ҡуйҙы.

Йәнбирҙе менән Йәнбикә төнөн йоҡламаҫҡа булдылар. Береһе серем итһә лә, икенсеһе уяу булырға тейеш. Ай ҡалҡты, тулы ине ай. Йым-йым йондоҙҙар күренде. Һыу өҫтөнә ай юлы ятты. Офоҡҡа табан бара ла ул, юғала шул. Кәмәгә бәрелгән тулҡын ғына шып-шып тауыш сығара. Бер үк күренеш, бер үк тауыш кешеләрҙе барыбер уятты. Ҡапыл тертләп Йәнбирҙе уянды. Таң еле тәненә ҡағылған икән. Күҙе асылыу менән ҡарашы офоҡҡа йүнәлде. Тик бер ни ҙә аңламаны. Офоҡ юҡ ине. Бер күккә, бер һыуға баҡты. Кәмә мороно яғында һыу ҙа юҡ. Тик кескәй генә ағым һыуҙы сайпылтып килтерә лә кире алып китә. Башты күтәрһәң, ҡаршыла ҡап-ҡара әллә нәмә.

Йәнбирҙе ҡатынын уятты.

– Тор, диңгеҙ беҙҙе ташлап китә.

Һикереп баҫты ҡатын, хәүеф тулы йөрәге шартлай яҙҙы.

– Ҡайҙа китә?

Ҡараңғылы-яҡтыла ян-яғында ни икәнен дә һаман аңлап бөтмәгән Йәнбирҙе кәмәнән ситкә һикерҙе. Аяғы һыуға батманы. Шунда төшөндө ул барыһын да.

– Ер! Ер бит был! Кәмә беҙҙе ергә терәгән!

– Ер!? Ерҙе лә күрер көнөбөҙ бармы ни? – Йәнбикә лә һөрәнләне.

...Әлеге яҙылғанды Сәсәнгә магнитофон да һөйләмәне, бер ҡайҙан да уҡыманы ла ул быны. Күҙ алдына килтерҙе. «Урал батыр»ҙағы Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең һыуҙағы тормошон һәм ерҙе табыуҙарын үҙе уйлап сығарҙы. Ғәмәлдә лә шулай булғандыр. Сөнки «Урал батыр» ир менән ҡатындың мәңге кеше аяҡ баҫмаған ҡоро ергә ҡотоптан ҡасып кәмәлә килеүе әйтелә. Әммә ҡайҙан килгәндәр – уныһы юҡ. Ҡайҙа килгәндәр? Быныһы билдәле: Уралтауға. Дөрөҫөрәге, уның көньяҡ армыттарына. Был турала ҡобайыр үҙе һөйләй. Урал батырҙың Яйыҡ улы – Яйыҡ йылғаһын, Ағиҙеле – Ағиҙелде, Һаҡмары – Һаҡмарҙы, Нөгөшө Нөгөштө ерҙән сығарҙы, ти. Тимәк, Йәнбикә менән Йәнбирҙе ҡотоптан Уралға ҡасып килә һәм ошо ерҙе төйәк итә. «Урал батыр»ҙағы бүтән ваҡиғалар тап ошонда бара. Уралдың үҙенең исемен йөрөткән һырт та, ағаһы исемендәге Шүлгән мәмерйәһе лә бында. Урал аждаһалар кәүҙәһен өйгән Ямантау иң бейек түбә һанала. Тере шишмә генә сылтырап аҡмай. Мәңгелек ғүмер бирер һыуҙы, үҙе эсмәйенсә, Урал яланғас таш һәм ҡаянан торған тауға һирпкән, бөгөн дә шул шифанан үҫкән үлән, ҡыуаҡ, ағас, сәскә һәм башҡалар ожмах баҡсаһы үҫтерә.

Йәнбирҙе менән Йәнбикәнән нәҫел алған башҡорт ҡотоп киткән көндән бирле ошонда йәшәй. Ҡасан, нисәнсе йылда булған һуң ул ҡотоп киткән көн? Ғөмүмән, ҡасандыр һыу аҫтында булғанмы һуң бындағы тауҙар? Эйе, ҡотоп бында килгән. Иң бейек түбәләре генә, бәлки, бөгөн Ямантау, Уралтау, Елмерҙәк тип аталған һырттар һыу аҫтында булмағандыр. Геологтар раҫлауынса, әлеге әйткән тауҙар ҡасандыр вулкан урғылыуҙан яралған, уларҙың түбәләрендә ҡасандыр ут булып аҡҡан магма әле лә ҡатып ҡалған көйөнсә ята. Тау түбәләрендәге магмаға һыу етмәгән, юҡһа ул ирееп ваҡланыр, тишек-тошоғона диңгеҙ йәнлектәренең һөлдәләре тулыр ине. Былары юҡ. Ә саҡ ҡына түбәндәрәк, тау битләүҙәрендә лә, тигеҙ, уйпат ерҙәрҙә лә, диңгеҙ төбөнә хас сифат башлана.

Тимәк, Уралтау армыттарының ҡайһы бер түбәләре генә диңгеҙҙән һерәйеп сығып торған ҡотоп ваҡытында. Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең кәмәһе шул түбәләрҙең береһенә килеп төртөлгән. Нисәнсе йылда булған был? ???-се йылдарҙа. Ғалимдар шулай раҫлай. Ҡайҙан беләләр, ниндәй ысул ҡулланалар? Быныһы менән Сәсән үтә ҡыҙыҡһынманы. Уныһы ерҙең торошон, ҡасан, нисек, нимәнән барлыҡҡа килгәнен өйрәнеүсе фән әһелдәренең сере. Улар, Уралға ҡотоп шул йылдарҙа килгән, ти икән, тимәк, ошоға ышанырға ҡала. Сөнки уны шөһбәгә алыр өсөн бүтәнде раҫлаусы юҡ. Шик бит сағыштырырлыҡ ике дәлил саҡта ғына тыуа. Берәү, тәүгеһе дөрөҫ, тиһә, икенсеһе, бүтәнде белгәнгә күрә, әйтелгәнде кире ҡаға ала. Дәлил берәү икән, тимәк, шул дөрөҫ.

Сәсән әле генә яҙғанын кире уҡып сыҡты ла уйға ҡалды. Үҙ ҡулы менән ул «Башҡорт нәҫеленең башы – Йәнбирҙе менән Йәнбикә» тип яҙҙы. Шул уҡ ваҡытта мейеһен шик ҡорто кимерергә тотондо. Ҡотоптан ҡасып Уралға килгән тәүге кешеләрҙе, башҡорт нәҫеленең атаһы менән әсәһе, тип әйтеү дөрөҫкә тап килеп бөтмәйҙер бит. Сөнки тәүге кешеләрҙең ниндәй милләткә ҡарағанын берәү ҙә белмәй. Ҡобайырҙа ла был хаҡта бер һүҙ ҙә әйтелмәй. Йәнбирҙе менән Йәнбикә йәшәгән осорҙа милләткә бүленеш юҡ. Милләт түгел, халыҡ та, хатта ырыу ҙа юҡ. Шуға күрә яҙылғанды уҡыған тәүге кеше үк, был Сәсән ни һөйләй,

аҡылы камил түгелдер, тип әйтәсәк һәм хаҡлы буласаҡ. Йәнбирҙе менән Йәнбикәне башҡорттарҙың ата-әсәһе тип атарға ярамай. Хатта улар тураһында бәйән иткән «Урал батыр» ҡобайыры башҡорт халыҡ ижадының иң гәүһәр бер емеше булһа ла.

Әммә мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Йәбирҙе менән Йәнбикә – Урал армыттарында артабан йәшәп алып киткән һәммә кешегә лә нәҫел атаһы менән нәҫел әсәһе. Шул иҫәптән – башҡорттарға ла. Әммә Урал армыттарында йәшәп, аҙаҡтан төрлө тарафҡа таралған халыҡтар араһында «Урал батыр» ише ерҙә тормоштоң барлыҡҡа килеүе тураһында һөйләгән ҡобайыр тик башҡортта ғына бар.

Ғөмүмән, ҡобайыр йә бүтәнсә исемләнгән халыҡ ижады емешен ижад итеп, бик күп йылдар түкмәй-сәсмәй беҙҙең көндәргә еткереүсе халыҡ һирәк. Ҡобайырҙарҙы (мифтары) булғандарының араһында ла ерҙәге тормоштоң барлыҡҡа килеүен һүрәтләгәндәре бик аҙ. Бындай ҡобайырҙы, мифтарҙың иң боронғоһо, тиҙәр. Ә ҡобайырҙы сығарып, бөгөнгөсә һаҡлай алғандарын, иң боронғо халыҡтар, тиҙәр.

Шулай икән... Йәнбирҙе менән Йәнбикә башҡорттарҙың нәҫел башы була ла ҡуя. Улар ҡотоптан һуң Урал армыттарында йәшәгән бөтөн халыҡтың да атаәсәһе, шул иҫәптән – башҡорттарҙыҡы ла.

Сәсән шулай уйланы ла маһая биреберәк ҡуйҙы. Урыны ла бар шул. Күп халыҡтың атай, әсәһе саф башҡортса исем йөрөтә бит: Йәнбирҙе менән Йәнбикә. Бүтән телдә шул уҡ исемдәр бүтәнсә яңғырар ине.

## *Нисә йәш һиңә, Урал?*

Урал Зөлхизәһен онотто. Тегенеһе лә үҙенең барлығын бер төрлө лә иҫенә төшөртмәне. Ҡайҙалыр китте лә – тамам. Өфөлә күренгәне лә булманы.

Егет иһә үҙ шөғөлөнә башкөллөй сумды, унан сығарып алырҙай көс юҡ һымаҡ ине. Әммә күпме генә баш ватмаһын, Сәсән биргән һорауға йүнле-башлы яуап таба алманы. Ни булған элек: өнмө, һанмы? Шул һорауға яуапты математик формула аша сағылдырып буламы?

Уралдың ғалимлығы, ғилми ысулдарҙы белеүе, әлбиттә, беренсе сиратта бығаса билдәле сығанаҡтарҙы эҙләүгә этәрҙе. Математика буйынса яңы һәм иҫке китаптарҙы ҡарап сыҡты. Әммә һорауына яуап таба алманы. Математика һандарҙы һәм төшөнсәләрҙе билдәләү мәсьәләһен бөтөнләй тикшермәй. Әйтерһең, һандар ҡасандыр, кемдер тарафынан математикасыларға мәңгелеккә бирелгән бер бүләк тиерһең. Бүләкте алған да оноҡандар. Улар үҙҙәрен иң ҡатмарлы күренештәрҙе һандар логикаһы аша аңлатыуҙы ғына иң мөһим эш итеп күрә. Ер менән күк, Ер менән Ҡояш һәм планеталар, Ер менән йондоҙҙар, Ер һәм мәңгелек – ошо бәйләнештәрҙе табырға тырышалар был китаптарҙа. Йә булмаһа, иң бәләкәй нәмәнән дә бәләкәйерәк нәмәнең барлығын, юҡлығын раҫларға ынтылалар. Тик кешелектең башында математика булғанмы һәм ул нимә тикшергән? – был һорауға яуап эҙләп мәшәҡәтләнмәйҙәр.

Уралға бүтән өлкә китаптарын ҡутарыуҙан башҡа әмәл ҡалманы. Ниндәйҙер дәрәжәлә бығаса таныш булғанға күрә, тарих китаптарын барлай һәм, берәмтекләп ныҡлап уҡымағанда ла, битләп булһа ла сығырға тотондо. Кешелектең башынан алып бөгөнгө көнгә ҡәҙәр булған йә булыуы ихтимал тарихты һынландырыусы әҙәбиәт бик күп булып сыҡты. Тарихи факттар, тарих фараздары, тарихты аңлатыу, тарих бәхәстәре, тарих һәм бүтән фәндәр, тарих нигеҙендә киләсәкте күҙаллау. Китаптарҙың күбеһе урыҫ телендә, һирәк кенә башҡортса йә татарсалары килеп осрай. Улары өҫтән-мөҫтән генә яҙылған китаптар.

Күберәге мәктәп балаларының ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү кимәлендә генә. Инглиз телендә бер нисә китапҡа юлыҡты Урал. Былары – китапханаға йә айырым кешеләргә бүләк ителгән нөсхәләр. Бөтәһе лә башҡорт тарихына ҡағыла. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөтөнөһө лә бер дәүер тирәһендә – Башҡортостандың Русия аҫтында ҡалыу осорон һүрәтләй.

Тарихҡа ҡағылышлы байлыҡ ни тиклем генә ҙур булмаһын, үҙенең һорауына яуап бирерҙәй китап тапманы Урал.

Сиратҡа фәндәрҙең фәне тип аталған философия баҫты. Бында ла ғилемдең ҙур бер һандығы ята булып сыҡты. Күп ине философия әҙәбиәте. Мәскәүҙә саҡта философияны уҡырға, имтихандар ҙа тапшырырға тура килгәнлектән, күп нәмә хәтерҙә ине. Шуға ул боронғо дәүерҙәр философияһын эҙләне. Бында ла етерлек ине китап. Боронғо шумерҙар, аккидтар, Египет, Месопотамия, шунан Греция, Италия, Франция, Германия, Бөйөк Британия, Үҙәк Европа, Көнсығыш дәүләттәре философияһы... Шунан философияның үҫеш баҫҡыстары: мифология, мәжүсилек, дин һәм ғилми философия. Быларҙың һәммәһе менән дә ниндәйҙер дәрәжәлә таныш ине Урал. Философия фәнендә ул эҙләгән һорауға яуап булмаясаҡ. Сөнки философия үҙен йәмғиәттең тәүтормош дәүере тамамланғас барлыҡҡа килгән фекер йөрөтөү ысулы тип һанай. Өн менән һан уғаса тыуған бит инде. Тимәк, Уралдың һорауына яуап бирелгәс кенә тыуған философия.

Өндәр һәм һүҙҙәр... Уларҙы, әлбиттә, филология өйрәнә. Филологияның серҙәрен ҡутара башлаһаң... Бының өсөн өр-яңынан вуз бөтөргә, барыһын да өр-яңынан башларға кәрәк. Ә ғүмерҙе кире ҡайтарып булмай, ул былай ҙа тәүлек һайын 24 сәғәт тиҙлек менән ҡалған ғүмеренде ҡыҫҡарта. «Филология ҡаҙаныштарын Сәсән олатай, моғайын, үҙе беләләр. Унан ғына һорармын да ҡуйырмын».

Һуңғы арала күпме китап уҡыны, ни ҡәҙәр фәндең ҡаҙаныштары менән танышты, әммә бер нәмәгә иғтибар итергә мәжбүр булды: һәр фән дә үҙ әһелдәренә һылтана, үҙ фараздарын раҫлар өсөн төрлө илдәр, төрлө халыҡтар тормошонан миҫалдар килтерә, һылтанмалар яһай, аңлатмалар бирә. Ни эшләп шул китаптарҙа башҡорттар тураһында ләм-мим һүҙ юҡ һуң? Улар был ер йөҙөндә йәшәгәнме, улар һан фәненең ни икәнен белмәгәнме? Улар фекер төйнәй белмәгәнме, уларҙың мифтары юҡ, бында мәжүсилек булмағанмы, бында дин үҫешмәгәнме? Башҡорттар тарих хәл ителгән ваҡиғаларҙа ҡатнашмағанмы, тарихи һуғыштар уларҙы урап уҙғанмы, башҡорт кем булған борон? Ғөмүмән ул, донъя фәне ҡарашынан сыҡһаң, булғанмы, бармы, булырмы?

Яуапһыҙ был һорау бер башҡортҡа ғына ҡағылмай. Шул уҡ хәлдә татар, сыуаш, мари, мордва, яҡут, тыва, чукча – Рәсәйҙә ваҡ халыҡ тип йөрөтөлгәндәрҙең барыһы ла. «Ауыҙына ҡарап торған өлкән ағайың бар – шул еткән» тигән принцип һалынғайны Урал битләгән китаптарҙа. Әлеге халыҡтар тарихтан, философиянан, математиканан, астрономиянан һәм башҡа фәндәрҙән ситтә ҡалмаһын, уларҙың ер байлығы, һүҙ байлығы, тел һәм фекер ҡеүәһе дөйөм фән ҡаҙанышының уртаһында булһын өсөн ни эшләр кәрәк һуң? «Беҙҙең турала тегеләр яҙмаған» тип илап, үсегеп ултырып булмай бит инде. Тимәк, һәр халыҡ үҙ ҡаҙанышын үҙе яҙырға һәм дөйөм ҡаҙнаға һалырға тейеш. Бәлки, шул халыҡтарҙың фән әһелдәре бергә күрешеп, дөйөм фәнде күтәрерҙәй ул һәм ҡыҙҙар билдәләп, шуларҙың хеҙмәтен бар донъя дәрәжәһенә күтәрергә кәрәктер.

Әгәр шул эшләнмәһә, күпме институттар, университеттар, ғилми учреждениелар тотоуҙан ни файҙа? Әгәр улар беренсе сиратта үҙ халҡына файҙа итә алмай, үҙ халҡын күтәрә белмәй икән, уларҙы аҫырауҙы, һалым түләүсе әлеге халыҡтың елкәһен кимертеүҙе туҡтатырға кәрәк.

Урал алдындағы өҫтәлгә йоҙроҡлап һуҡҡанын шәйләмәй ҙә ҡалды. Тырым-тырағай ҡағыҙҙар, күптән һыуынып бөткән сәйле, ҡараһына ҡатҡан сынаяҡ, шөкәрәгә әүерелгән бер һыныҡ икмәк дер ҡалтырап төштө. Үҙ фиғеленә Урал үҙе көлөп ҡуйҙы. «Икмәк менән сәйҙе ҡурҡыттым, тик бүтән берәү ҙә ишетмәне. Ошо рәүешле генә фекер әйтеп, талап ҡуйһаҡ, эшемде ҡырабыҙ инде».

Бик күп китап аҡтарып, Интернет сайттарын тикшереп, үҙенә кәрәкле йүнлебашлы мәғлүмәт тапмаһа ла, Урал ҡайһы бер ҡыҙыҡлы ғына нәмәләргә юлыҡты. Әйтәйек, һуңғы йылдарҙа башҡорттар араһында ҡан (генетика) тарихын тикшереү булған. Ҡан тарихы, ҡандың күсәгилешлелеге тип борон-борондан атай йә әсәй яғынан нәҫел сифаттарының быуындан быуынға тапшырылыуын әйтәләр. Иң ҡыҙығы шунда: нәҫел сифаты, күпме генә йылдар үтһә лә, үҙгәрмәй. Икенсе төрлө әйткәндә, атай орлоғо аша бирелгән сифат туҙмай ҙа, тарҡалмай ҙа. Шуға ҡарап (бөгөнгө кешенең сифатынан ҡарап) мең йыл элек йәшәгән олатаһын билдәләп була.

Башҡорттар араһында игрек хромосомдары буйынса яһалған тикшереүҙәр бик ҡыҙыҡлы асышҡа килтергән. БыҒаса башҡорттар яңы эраның баштарынан башлап Уралға күсенеп килеүсе төрки кешеләре тип йөрөтәлә ине. Һуңғы тикшеренеүҙәр был фекерҙең ғәмәлгә бөтөнләй тап килмәүен күрһәткән. R1B хромосомдар төркөмө буйынса 35 процентҡа яҡын башҡорттоң әлеге Европала йәшәгән кешеләр менән туғанлығы күренә. Бындай башҡорттар (60 процент тирәһе) бигерәк тә Пермь өлкәһендә һәм Баймаҡ районында йәшәүселәр араһында күп. Шул уҡ ваҡытта Баймаҡҡа күрше генә Әбйәлил районында бик аҙ (6 проценттан артмай).

R1A хромосомын йөрөтөүселәрҙе һинд арийҙар, йәғни боронғо ирандарҙың нәҫеле һанайҙар. Бындайҙар башҡорттар араһында 26 процент.

«Уралға башҡорттар Себер яғынан күсенгән» тигән фекер ғәмәлгә бик аҙ тура килә булып сыҡҡан. N-Tat (икенсе төрлө Сыңғыҙхан) хромосомдарын йөрөтөүселәр Себер яғы менән бәйле. Бындайҙар башҡорттар араһында ни бары 19 процент.

Әсәйҙәр яғынан туғанлыҡты тикшереү ҙә бик ҡыҙыҡ мәғлүмәттәр бирә. Башҡорт ҡатындарының 60 проценты – бөгөнгө Европа кешеләренә ҡәрҙәш, 40 проценты аҙнасылар булып сыҡҡан.

Ғәжәп бит! Башҡорттар ни сәбәптән, ни бәйләнештән француздарға, инглиздарға ҡәрҙәш булып сыға һуң? Яҙма тарих барлыҡҡа килгәне бирле бындай бәйләнеште раҫлаған бер генә мәғлүмәт тә билдәле түгел. Башҡорттар күмәкләп Көнбайыш Европаға күсеп, шунан Уралға кире ҡайтып йөрөмәгәндер бит. Европа илдәренән Уралға күмәкләп күсенеүселәр тураһында ла билдәле түгел.

Бәйләнештәр, күрәһең, тарихтың төпкөлөндәрәк яталыр. Урал тапҡан тағы бер мәғлүмәт ошо мәсьәләгә саҡ ҡына яҡтылыҡ бирә кеүек.

Башҡортостандағы Шүлгәнташ мәмерйәһе бар донъяға билдәле. Бигерәк тә уның стеналарында боронғо палеолит кешеләре төшөргән һүрәттәр табылғас, Шүлгәнташтың даны сикһеҙгә әүерелде. Йөҙҙән ашыу эреле-ваҡлы һүрәт бар, тиҙәр унда. Һүрәттәрҙә палеолит дәүерендә (15 мең йыллап әүәл) ошо тарафтарҙа көн иткән кейек-ҡош, кешеләр, төрлө геометрик фигуралар төшөрөлгән.

Бындай һүрәттәр Ер йөҙөнөң бүтән урындарында ла бар. Әйтәйек, Франциялағы Ляско мәмерейәһе стеналарын да беҙҙәге кеүек һүрәттәр биҙәй. Тик улар Шүлтәнташтыҡына ҡарағанда күпкә оло һанала. Франциялағы стенала ла Шүлгәнташтағы кеүек үк кейектәр һәм кеше, геометрик фигуралар һүрәтләнгән. Ике мәмерйә һүрәттәре бер-береһен ҡабатлай һымаҡ. Әммә айырымлыҡтар ҙа бар. Беренсеһе: Шүлгәнташта һүрәттәр тоноғораҡ, буяуы йәйерәберәк

киткән. Францияла буяу сағыу. Көнбайышта һүрәттәр тырым-тырағай, ҡайҙа етте шунда төшөрөлгән, ә Башҡортостанда уларҙың байтағы ниндәйҙер хәл-ваҡиғаны һынландыра, йәғни сюжетлы. Әйтәйек, ҡош башлы кеше ерҙә ята, уны үгеҙ һөҙә, был күренеште бер ҡош ҡарап ултыра. Шүлгәнташтың икенсе залында ҡанатлы ат үҙ артынан мал-тыуар әйҙәй, тегеләре һыуҙан алып сығып бара. Шунда уҡ йәнә бер һүрәттә әлеге мал-тыуар, ҡанатлы ат үҙе лә кире сабып һыуға төшөп бара.

Тағы ла бер мөһим үҙенсәлек: Шүлгәнташтың рәссамы (бәлки, рәссамдарылыр) һүрәттәрҙең күбеһен Шаве ысулында төшөргән. Әлбиттә, һүрәтте эшләгәндә улар Шавены ла, уның ысулын да белмәгән. Шаве – ул боронғо һүрәттәрҙе өйрәнеүсе XX быуат кешеһе. Уның ысулы тип боронғо рәссамдың кейектеме, кешенеме ҡабырғаһынан төшөрөп, башын һүрәтте ҡараусыға бороп күрһәтеүҙе әйтәләр. Шүлгәнташтағы һүрәттәрҙең байтағы шулай, йәғни арыҫлан төшөрөлгән икән, ул ҡабырғанан күрһәтелә. Кәүҙәһе, алғы, артҡы берәр аяғы, ҡойроғо асыҡ күренә, ә теге яҡ ҡабырға, әлбиттә, һүрәттә юҡ, ҡалған ике аяғының тубыҡтан түбән өлөшө генә күҙгә ташлана. Шуның ҡарауы, арыҫландың башы уға алдан ҡарағандағы һымаҡ тулыһынса бирелә: ике ҡолаҡ, ике күҙ, танау, мыйыҡтар, ауыҙ һәм эйәк.

Һүрәттәрҙе ошолай төшөрөү, – әлбиттә, оҫталыҡтың яңы баҫҡысы.

Башҡортостанда һәм Францияла көн күргән тәү тормош кешеләре ниндәйҙер бәйләнештә булдымы икән? Ихтимал, Франция кешеләре күсенә-күсенә Башҡортостанға килеп еткәндер. Әммә киреһенсә түгел. Сөнки Францияла ғы һүрәттәрҙең йәше быңдағыларҙан байтаҡҡа ҡартыраҡ.

Бөгөнгө башҡорттарҙағы нәҫел ебенең французлдарға барып тоташыуының сере лә, бәлки, ошонда яталыр. Ун мең тирәһе йыл буйы ундан ашыу мең километрҙы үтеп була бит. Ә боронғо кешеләрҙең күсенеп йөрөүе тарих өсөн яңылыҡ түгел.

Ошо фараз файҙаһына һөйләгән йәнә бер дәлил бар. XX быуаттың 60-сы йылдарында башҡорттарҙың йөҙ төҙөлөшөн тикшергәндәр. Шунда уның байтағы (40 процент тирәһе) европеид, йәнә шул саҡлыһы ҡатнаш (европеид һәм азиат), ҡалғаны азиат йөҙлө тип билдәләйҙәр.

Шунда уҡ йәнә бер әҙләнеү уҙғаралар. XX быуаттың 60-сы йылдарынан йөҙ йыл самаһы элек йәшәгән башҡорттарҙың һүрәттәрен яһайҙар һәм уларҙың кем икәнен яҙып ҡалдыралар. Егерменсе быуат тикшеренеүселәре шул кешеләрҙең йөҙ йыл үткәс йәшәгән нәҫел-нәсәбен таба һәм фотоға төшөрә. Йөҙ йыл – тарих өсөн күҙ асып йомған ғына ара бит инде. Кешелек өсөн дә күп түгел. Ни бары дүрт быуын. Әммә шуныһы ғәжәп: шул йөҙ йыл эсендә ҡайһы берәүҙәрҙең нәҫеле танымаҫлыҡ булып үҙгәрә. Азиат йөҙлө кешенең дүртенсе быуыны европеидҡа әүерелә. Шул уҡ ваҡытта европеид үҙгәрешһеҙ ҡала, һәм ҡайһы бер азиаттар ҙа үҙгәрмәй.

Был дәлил башҡорттар араһында R1B хромосомының ныҡ һаҡланыуы һәм бүтән йоғонтоларға бирешмәүе тураһында һөйләй. Бүтән төрлө әйтһәң, тәү тормош осоронда әлеге Уралда көн күргән кешеләрҙең бер өлөшө ысынлап та көнбайыштан килгән булыуы ихтимал.

Әммә был фаразға ҡаршы сығырҙай бик көслө йәнә бер дәлил бар. Быныһы космогоник энергетика ағышына бәйләнгән. Билдәле булыуынса, Ер шары көнбайыштан көнсығышҡа табан өйөрөлә һәм, Ҡояш бер урында торғанға күрә, ул ерҙә йәшәүсе кешеләргә көнсығыштан ҡалҡып, көнбайышта байый булып тойола. Ә космогоник энергия Ергә Ҡояштан ағыла: көнсығыштан көнбайышҡа табан. Шуға күрә Ерҙәге космос энергияһына бәйле барлыҡ хәрәкәт көнсығыштан

көнбайышҡа табан бара. Әйтәйек, Японияла көн тыуғанда, Англияла әле йоҡлайҙар. Йәғни хәрәкәт, эш, хеҙмәт, көс һалыу, ижад итеү Япониянан башлана, Англияға барып еткәнсе тегендә бик күп нәмә башҡарып өлгөрөлгән булып сыға.

Хәрәкәттең бер төрө – уй, аҡыл көсө лә дөйөм ҡағиҙәгә буйһона һәм йыһан энергияһы ыңғайына йөрөй. Аҡыл көсө, мәле еткәс, кешеләрҙең тән көсөнә әүерелә һәм кешеләрҙе хәрәкәтләндерә башлай. Иң ҙур, көслө хәрәкәтләнеү – ул кешеләрҙең күсенеүе. Тарихтан билдәле булыуынса, халыҡтар бер нисә тапҡыр күмәкләп күсенгән, һәм улар бөтәһе лә бер йүнәлештә – көнсығыштан көнбайышҡа, йәғни йыһан энергияһы ағымы ыңғайына уҙған. Бындай күсенеүҙәр Азия һәм Европа ҡитғаларында ғына түгел, Африка, Австралия өсөн дә берҙәй үк хас.

Кире күсенеү ынтылыштары ла булған. Былары бөтөнөһө лә юҡҡа сыҡҡан. Әйтәйек, көнбайыштан башланған тәре йөрөтөүселәр походы, Наполеон етәкселегендәге баҫҡынсылыҡ, Беренсе, Икенсе донъя һуғыштары... Барыһы ла көнбайышта башланған хәрәкәттең ахыры юҡҡа сығыу икәнлеген күрһәтә. Йәғни йыһан энергияһы ағымына ҡаршы көсәнергә ярамай, барыбер еңелеү менән тамамланасаҡ.

Ошо мөһим дәлил тәү тормош кешеләренең әлеге Франциянан бөгөнгө Башҡортостанға күсенеүен шик аҫтына алырға мәжбүр итә.

Бәлки... бәлки, ун мең йыл буйы барған бик аҡрын хәрәкәт энергияға ҡаршы көс булып та тойолмағандыр?..

Урал урынынан тороп, уйҙарының осона сыға алмайынса, ишекле-түрле йөрөргә тотондо. «Ишекле-түрле» тип әйтеүе лә ҡалһын инде: ишеккә табан ике аҙым, кире яҡҡа ике аҙым. Әммә ярһып, ташып барған күңел кисерештәрен саҡ ҡына баҫырға, бер епкә теҙергә ошо ла етә. Барыбер күҙ алдына килгән күренеш һүнмәй, сағыуыраҡ ҡына була бара.

...Шүлгәнташ мәмерйәһенең урта өлөшөндә сытырлап ут яна. Ялҡындан ҡупҡан яҡтылыҡ, ҡараңғылыҡты ярып, стеналар буйлап үрмәләй. Стена янында баш осона янған сыра тотоп берәү тора. Эргәһендә ҙур ташҡа баҫҡан икенсе кеше стена янында ниҙер эшләй. Ә уртала утты түңәрәкләп кешеләр ултырышҡан. Тик береһе ята, икенсеһе янында тубыҡланып ултыра. Ятҡаны тамағын ҡырып-ҡырып ала ла тамаҡ төбөнән өн сығара. Өн көсәйә, бер тулҡынға әүерелә һәм һәр кешенең күңеленә ятыш бер көйгә әүерелә. Өҙләү.

Ятҡаны, тауышын әкренәйтә барып, шымды. Шул саҡ эргәһендә тубыҡланып ултырғаны телгә килде:

«Өйрәк уға бынау һүҙҙәре әйткән, ти:

*Егет, мине ебәр ҙә*
*Бер ҡарамай алъа кит,*
*Бөтә төҫтән өйөрләп*
*Йылҡы сығыр, шуны көт.*
*Һауымы еткән һыйырҙар*
*Мөзөлдәп сығыр быҙауһыҙ,*
*Алпанлап баҫыр ҡуйҙары*
*Мөңрәп сығыр ҡуҙыһыҙ;*
*Күл шаулатып, күл ярып,*
*Ерҙә дауыл ҡуптарып,*
*Аҡбуҙ сығыр – мал ҡото,*
*Бөтә малдан һуң ҡалып...*

...Өйрәктән был һүҙҙе ишеткәс, Һәүбән ышанған да өйрәкте ебәргән. Үҙе, артына ҡарамай, өйрәк өйрәткәнсә, алға атлап киткән, ти. Бер аҙ киткәс тә, йылҡы сырҡыраған, ҡуй-һарыҡ мөңрәгән, һыйыр баҡырған тауыштар ишетелә башлаған. Бына бер саҡ ел-дауыл ҡубып киткән. Һәүбән алға атлай ҙа алмай башлаған, аптыраған, ни эшләргә лә белмәгән. Ахыры түҙмәгән, артына әйләнеп ҡараған. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: ер ҡаплап, мал сыҡҡан. Ә теге Аҡбуҙаттың күлдән саҡ муйыны ғына күренгән мәле икән. Һәүбәндең артына ҡарағанын күргәс тә, Аҡбуҙат күлгә кире сумған. Аҡбуҙаттың кире сумғанын күргәс, теге малдар, бер-береһен тапарҙай булып, өркөшөп, береһе лә ҡалмай, Аҡбуҙат артынан күлгә сумышып бөткәндәр ҙә ҡуйғандар, ти...»

Урал үҙе лә һиҙмәй ҡалды шикелле – һулҡылдап иланы ла ебәрҙе. Күҙ йәше, тамағына төйөлгән төйөр аша үҙе һөйләнде:

– Минең нәҫел бабам «Аҡбуҙат» ҡобайырын әйтә. Янында ҡәрҙәштәрем. Һәр ҡайһыһын берәм-берәм үбер инем, тик арабыҙҙа ун биш мең йыл ята...

Урал үҙ алдына үҙе хыялланып тигәндәй, илап, көйләп ултырҙы ла, кире үҙ донъяһына ҡайта була, күҙҙәрен асып, алдындағы өҫтәлгә, унда ятҡан яҙыулы-һыҙыулы ҡағыҙҙарға ҡарап ултырҙы ла йәнә күҙҙәрен йомдо. Әле генә ҡарашы алдынан юғалған мәмерйә күренеше кире килде. Ҡобайыр әйтеүсенең тауышы баяғынан тоноғораҡ ишетелде. Шуның ҡарауы, стеналағы ташҡа нимәлер сыймаҡлаған рәссамдың һүрәте ап-асыҡ күҙ алдына баҫты. Ҡанатлы ат килә, уға эркелеп бүтән мал-тыуар эйәргән. Шуның янында уҡ икенсе һүрәт: ҡанатлы ат һыуға төшөп бара, башҡа мал да, кире боролоп, уның артынан йүнәлгән.

Урал белә: әле ул күҙаллаған һүрәттәр ғәмәлдә бар – Шүлгәнташ мәмерйәһенең ташына төшөрөлгән рәсемдәр. Шүлгәнташта һүрәттәр күп, йөҙҙән ашыу. Шуларҙың ҡайһы берҙәре башҡорт халҡының хәтерендә булып, ошо көнгәсә килеп еткән «Урал батыр», «Аҡбуҙат» ҡобайырҙарының иң баҙыҡ күренештәрен кәүҙәләндерә. Әйтәйек, ҙур мөгөҙлө дәү үгеҙ, уның янында кеше һәм ҡош һыны. Әгәр «Урал батыр» ҡобайырын белмәһәң, тәү тормош рәссамы күҙе ни күргән – шуны төшөргән, тип әйтергә булыр ине. Әммә әлеге күренеш «Урал батыр»ҙан алынғаны күренеп тора.

*...Байтаҡ йылдар уҙъан һуң,*
*Һомай Уралын һағынъан:*
*Уның юлы буйынан*
*Осоп йөрөп, талпынъан,*
*Тауъа килеп, ҡаяла*
*Уралды уйлап, моң сәскән,*
*Аҡҡош булып түл йәйеп,*
*Аҡҡош тыуын үрсеткән...*
*Тыныс ил тип ишеткәс,*
*Ҡатил үгеҙе, тоҡомон*
*Үҙе башлап эйәртеп,*
*Данлы Урал буйында,*
*Йәмле Урал ҡуйынында*
*Бергә ъүмер һөрәм тип, –*
*Урал буйына килгән, ти,*
*Кешегә буй биргән, ти.*

...Ҡобайырҙарҙағы ошондай күренештәрҙе сағылдырған һүрәттәр байтаҡ Шүлгәнташ мәмерйәһендә. Былар барыһы ла ҡасандыр ошо мәмерйәлә, уның

тирә-яғында йәшәгән кешеләрҙең бөгөнгө башҡорт халҡын барлыҡҡа килтереүҙә, нәҫел биреүҙә туранан-тура ҡатнашҡанлығы хаҡында һөйләй. Мәмерйәләге һүрәт күренештәрен асыҡтан-асыҡ күҙ алдына баҫтырған ауыҙ-тел ижады, башҡорт халҡыныҡынан тыш, бүтән ҡәүемдәрҙә юҡ. Урал тауы армыттарынан сығып таралған кешеләрҙең бөгөнгө варисҭары уғыр-фин халыҡтары, тиҙәр. Әммә уларҙың берећендә лә әлеге һүрәттәр күренештәренә тап килгән ауыҙ-тел ижады билдәле түгел. Дөрөҫ, боронғо ирандарҙың балсыҡ таҡталарға яҙып ҡалдырылған «Авеста»лағы Гилгәмеш батырҙың яу, тормош ваҡиғалары Урал батырҙыҡына бик ауаздаш. Әйтәйек, Ҡатил үгеҙе менән көрәш, дейеүҙәр менән һуғыш. Әммә мал эйәртеп һыуҙан сыҡҡан һәм кире төшкән ҡанатлы Аҡбуҙат унда юҡ.

Ошонан сығып ҡына ла, башҡорттар Уралда бик борондан йәшәй, улар ҡайҙандыр күсенеп тә килмәгән һәм китмәгән дә, улар ошонда тыуған, ошонда көн күрә, тиергә мөмкиндер...

Урал йәнә уйға батып, башын ҡулына терәп байтаҡ ултырҙы. Көн кисләгәйне, тәҙрәнән төшкән яҡтылыҡ һүрәнләнде, бүлмәлә күҙ бәйләнде. Тороп утты яндырырға кәрәк тә бит, әммә Урал урынынан ҡымшанмай ултыра бирә. Ут тоҡандырһа, меңәр йылдар менән бөгөнгөнө тоташтырған уй ептәре ҡапыл шартлап өҙөлөр ҙә кире ялғанмаҫ кеүек...

Әммә уй – уйға, фекер – фекергә, һүҙ һүҙгә ялғана. Бының өсөн тик бер нисә тәүшарт кәрәк. Әлбиттә, беренсе нәүбәттә теләк булырға тейеш. Теләк юҡ икән, бүтән шарттар алтынға бәрәбәр осраҡта ла бер ни ҙә килеп сыҡмаясаҡ. Әйткәнде раҫлар өсөн миҫал эҙләйем тиһәң, иң алдан әлеге лә баяғы «Урал батыр» телгә килә. Хәтерләйек: Йәнбирҙе ҡушҡас, Йәншишмәне табырға, үлемдең үҙен юҡ итергә Урал менән Шүлгән юлға сыға. Атаһы ҡушҡанды үтәү теләге Уралда шул тиклем көслө – ул бер ниндәй кәртәгә лә ҡарамай, маҡсатына дөрөп-һөрөп тигәндәй бара. Ә Шүлгәндә ундай теләк юҡ. Юлы таҡыр һәм Йәншишмәгә түтә булһа ла, үлемһеҙлек һыуын табыу теләге бөтөнләй юҡ унда. Уның теләге – батыр булып күренеү, бүтәндәрҙән өҫтөнлөк алыу. Шуға күрә Үлемдең боғаҙынан быуырға мөмкинлеге бар саҡта ла уға ҡул һуҙмай.

Башҡасараҡ әйтһәк, Йәнбирҙе менән Йәнбикә бығаса кеше йәшәмәгән ҡоро ерҙе тапҡан, Урал батыр дейеү кеүек ғифриттәрҙе ҡырған һәм кейеккә, ҡошҡортҡа, кешегә байман тормош килтергән дәүерҙә маҡсатҡа өлгәшер өсөн иң тәү шарт – теләк булған. Ҡалғандары – ярҙамсылар. Менге өсөн арыҫлан да, дошмандарҙы дер ҡалтыратып дауыл сығарырға һәләтле Аҡбуҙат та, һис тутыҡмаҫ һәм үтмәҫләнмәҫ булат ҡылыс та, шуларҙы Уралға бүләк итеүсе Һомай ҙа – барыһы ла батырға ярҙамлашыусылар ғына. Ә төп шарт – уның теләге. Урал батыр заманынан һуң бер нисә мең йыл уҙғас, ошондай уҡ теләк менән ҡуша тәүшарт булып йә Аһура Мазданың, йә Будданың, йә Тәңренең, йә Богтың, йә Аллаһа Тәғәләнең ҡөҙрәте торор ине. Тимәк, Урал батыр заманы – әле диндең тыумаған, илаһтың берлегенә кешеләр ышана башламаған осор ул. Бындай дәүерҙе ғалимдар таш быуат йә тәүтормош ваҡыты тип атай. Дингә ышаныу, бер йә бер нисә илаһҡа табыныу кешеләр ырыу-ҡәбиләгә берләшә башлағас барлыҡҡа килә, тип һанала.

Әҫәр геройының тик теләккә генә таянып эш итеүе ҡобайырҙың таш быуат дәүерендә барлыҡҡа килеүен раҫлай. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге сюжетлы һүрәттәр ҙә, шул күренештәрҙе шифыр рәүешендә һөйләп бирә белеү ҙә бер үк заманда тыуған, тимәк. «Урал батыр»ға нисә йәш? Ошонан сығып, үҙегеҙ самалағыҙ.

Кешелек тарихында ырыу-ҡәбилә дәүере ҡасан башлана һуң? Был һорауға бер генә тарихсы ла, математик йә физик та өҙөп кенә яуап бирә алмаҫ. Сөнки

ырыу һәм ҡәбиләләрҙең барлыҡҡа килеүе өсөн кәрәкле шарт – кешеләрҙең үҙ тормошо өсөн кәрәкле эш һәм яу ҡоралдарын күпләп етештерә башлауы зарур. Йәғни металл таба – баҡыр сүкей һәм шунан төрлө кәрәк-яраҡ яһарға өйрәнгән ваҡыт Ер шарының төрлө мөйөшөндә төрлө дәүерҙә булған. Урал тауы итәктәрендә был осорҙа бөгөнгө көндән кәмендә 4-5 мең йыл элек, тиҙәр. Сөнки тап шул мәлдә Арҡайым һәм уның һымаҡ бүтән ҡәлғәләрҙә тормош гөрләгән, бындағы кешеләр мейестәрҙә баҡыр иреткән. 4-5 мең йыл әүәл, бәлки, кешеләр ырыу-ҡәбилә бүленешенең иң юғары нөктәһенә етеп, ер биләүселектең башында торғандыр. Бәлки, ер биләүселек халыҡ тормошона ныҡлап уҡ инә лә башлағандыр?..

## *Араларҙың йыраҡлығын...*

Йыр бар бит әле: «Почтальон» тиҙәр. Кемдең шиғырына кем музыка сығарған – Урал быныһын белмәй, йырҙы ла урыҡ-һурыҡ ҡына көйләй үҙе. Әммә шунда: «Араларҙың йыраҡлығын кем генә белә? Почтальон, почтальон», – тиелгәне хәтерендә.

Араларҙы яҡынайтып, почтальон Уралға ла килде. Үҙ уйҙарына сумып бүлмәһендә ултыра ине, ишек шаҡынылар.

– Инегеҙ, асыҡ, – тип ҡысҡырҙы Урал.

– Урал Ищдәүләтович, һеҙҙе түбәнгә, вахтер янына, саҡыралар. Почтальон хат килтергән, бүтән кешегә бирмәй. Үҙенә генә тапшырырға тейешмен, ти.

Урал аҫҡы ҡатҡа йүгереп төштө. Ысынлап та күп мисәт һуғылған оҙонса конверт ине. «Ошонда ҡул ҡуйығыҙ» тигән урынға сыймаҡлап алды уны. Бүлмәһенә ингәнсе үк асып уҡырға ла тотондо. Хат инглиз телендә яҙылғайны. Урал был телде яҡшы уҡ һупалай, шуға хатты уҡыуҙың ауырлығы булманы. Тик ундағы хәбәр генә көтөлмәгәнсә ине.

«Меһмет ибн Абдалла мин. Ғәрәп Әмирлектәрендә Абу Дабыла йәшәйем. Һеҙҙең турала беҙгә Мәскәүҙә йәшәп, Әмирлеккә эш сәфәре менән килгән Якубовский әфәнде һөйләне. Бик көслө математик тип атаны ул һеҙҙе. Ислам өммәтенән икәнлегегеҙҙе лә әйтте.

Беҙгә һеҙҙең кеүек белгестәр кәрәк. Әгәр мөмкин тип тапһағыҙ, ошо хаҡта һөйләшеү өсөн Әмирлеккә килеп ҡайтһағыҙ ине. Барлыҡ сығымдарҙы ла үҙ өҫтөбөҙгә алабыҙ. Тәүге осорҙа тотонор һәм самолетҡа билет алыр өсөн банкта ун мең долларға һеҙҙең исемгә иҫәп астыҡ. Үҙегеҙҙең сәфәргә сығыу-сыҡмауығыҙ тураһында Интернетта хәбәр ҡалдырһағыҙ ине».

Хат яҙыусы үҙенең адресын ҡуйған.

Быны уҡығас, Урал тәүҙә көлөмһөрәне. Конвертҡа һалынған хат алмағанына күп йылдар уҙғайны инде. Мәскәүҙә уҡый башлағас, атаһы бер-ике хат яҙҙы ла туҡтаны. Кеҫә телефондары күбәйгәс, хат яҙып ултырыусы ҡалманы, тип уйлағайны, бына берәү бар икән, тип йылмайҙы. Ғәрәп, әлбиттә, Интернеттан ғына хәбәр һалыр ине – Уралдың адресын белмәй.

«Якубовскийға рәхмәт, – тип уйланы Урал, – һаман онотмай ҡарт йәһүд». Университетта уҡыткайны ул егетте. Башҡортостанға ҡайтыуын бер ҙә хупламағайны. «Һиңә үҫергә, фәнде алға этәрергә кәрәк. Ә һин төпкөлгә китәһең. Унда һиңә эш өсөн кем шарт тыуҙырһын? Кемгә кәрәк һин унда? Әйҙә, үҙемә ярҙамсы итеп алам», – тип тә ҡараны. Ризалашманы Урал. Өфөгә вәғәҙә биреп өлгөргәйне шул. Әйткән һүҙҙе ҡайһылайтып кире алаһың, тип уйланы.

Ә хәҙер ни эшләргә? «Бармайым» тип хәбәр итергәме Меһмет ибн Абдаллаға? Кире ҡағыуы ҡыйын түгел дә ул... Урал уйға батты, көн дә, төн дә тиерлек Абу

Дабы тәҡдиме башынан сыҡманы, әммә йүнле-башлы ҡарарға килә алманы. Аптырағас, Сәсәнгә шылтыратты:

– Олатай, рөхсәт итһәң, кәңәшләшә торған һүҙ бар ине.

– Ярар, – тине унныһы. – Мин әле ҡалала йөрөйөм. Берәр сәғәттән ятағыңа инермен, сәйеңде ҡуя тор.

Уралды донъя күрмәгән, ауыҙы бешмәгән йәш егет тип тә булмай, әммә әлеге әйткән бер сәғәт эсендә үҙен малайҙарса тотто. Сәсәнде нисек ҡаршылар, ҡайҙа ултыртыр? Ни йүнле-башлы сынаяғы ла юҡ, исмаһам. Үҙе стакандан йә бокалдан эсеп күнеккәс ни. Сәсән ингәс, һүҙҙе ниҙән башлар? Ошо ваҡ-төйәк башын бутап бер булды. Әйтерһең, Сәсән ятаҡ тормошон күрмәгән. Әлбиттә, был хәл Сәсән алдында уңайһыҙланыуҙан түгел, ә әйтергә йыйынған мәсьәләнең мөһимлегенән ине. Тик быны Урал үҙе аңлап етмәне. Шуның ҡарауы, Сәсән шунда уҡ төшөндө. Бүлмәгә инеп, арзан ғына ябыулы карауатҡа, тегендә лә, бында ла өйөлгән китаптарға һәм ҡағыҙҙарҙан бушатылған өҫтәлдең ситендә генә ултырған сәйнүккә, ике стакан менән май һыланған, өҫтөнә колбаса һалынған икмәк киҫәктәренә һәм йөҙө тартылып, ҡарайып киткән, тағы ла ҙурайып, өңөрәйеп торған күҙҙәргә ҡараны ла:

– Күңелеңде өйкәгән һүҙҙәреңде әйт, егет, – тине.

– Өйкәгән тип... улай уҡ түгел дә...

– Шулай ҙа...

– Өн менән һандың математик формулаһын сығара алмайым.

– Ә ни эшләп өн менән һан? Беҙ һинең менән һан тураһында ғына һөйләшкәйнек тә инде.

– Һан ғына түгел шул. Һан бит өндәрҙән тора. Тимәк, тәүҙә өн тыуған.

– Моғайын.

– Ә ҡасан һан барлыҡҡа килгән? Быныһын бер ниндәй дөйөмләштерелгән формулаға ла һыйҙыра алмайым да ҡуям.

– Шуға ҡайғырып ҡаҡ һөйәккә ҡалдыңмы?

– Уға ғына түгел инде... Оят бит, һиңә, формула табам, тинем дә бер ни ҙә килтереп сығара алмайым.

– Быңың сәбәбе ябай, улым. Шулай тип әйтһәм, үпкәләмәҫһеңме?

– Юҡ. Атайыма аҡыл биргән кеше миңә, һис шикһеҙ, олатай инде.

– Улым, ниндәйҙер билдәһеҙлекте билдәләр өсөн уның һәр төрлө сифаттарын белергә кәрәк. Шунһыҙ нәмә сер йомғағы булыуҙан туҡтамай. Ә быға тормош тәжрибәһе лә, белем дә, донъяны киңерәк күрә алыу һәләте лә кәрәк. Һандың һанлығын билдәләү өсөн, күрәһең, математика ғына етмәй.

– Шулайҙыр тип уйлап, байтаҡ ҡына бүтән фәнгә ҡағылышлы китаптарҙы ла ҡараным. Философияға ла барып еттем. Әммә тәүге кешеләрҙә һан менән өн мөнәсәбәте тураһында берәү ҙә яҙмаған.

– Бик яҡшы, тимәк һин тәүге ғалим булаһың.

– Һиңә шаяртыуы еңел...

– Шаяртыу түгел, ә ысынбарлыҡты әйтәм. Тик ысынбарлыҡтың тап ошолай икәнлеген күрһәтә белергә кәрәк. Юҡһа уға ышанмаясаҡтар. Беҙҙең донъяла ялған төшөнсә күп ул. Сөнки ялғанлыҡтың йөҙөн асып, ысынбарлыҡты күрһәтеүсе һирәк.

«Был ағай үҙенең яратҡан менгеһенә ултырҙы, инде туҡтатып булмаҫ», – тип уйланы Урал, Сәсәндең фәлсәфәгә төшөүен самалап. Һүҙҙе икенсегә борор өсөн өҫтәлдә ятҡан хатты алып бирҙе.

– Был нимә, улым? Мин бит башҡорт һәм урыҫ телендә булмаған яҙыуға һуҡырмын.

– Инглизсә ул.
– Ни яҙылған?
– Мине Ғәрәп Әмирәттәренә саҡыралар. Шул турала кәңәшләшәйем тигәйнем.
Сәсән хатта яҙылғандарҙы һәм яҙылмағандарҙы ла бик төпсөнөп һорашты, шунан ҡырҡа ғына әйтте:
– Бар. Берәр аҙнаға ял ал да барып ҡайт. Унда ниндәй шарттар вәғәҙә итеүҙәренә ҡарарһың. Ыңғай булһа, ризалаш.
Урал был тиклем ҡәтғи ҡарар көтмәгәйне. Шуға аптырабыраҡ ҡалды. Быны һиҙгән Сәсән:
– Яҡшы шарттарҙа эшләү, үҙенең кемлеген танытыу мөмкинлеге беҙҙең халыҡҡа һирәк эләгә. Ҡулыңа ҡунырға торған ҡошсоҡто ысҡындырма. Насип итһә, һинең арттан беҙҙең бүтән егеттәр ҙә эйәрер. Атай, әсәйең менән кәңәшләш тә тәүәккәллә. Улар, моғайын, ҡаршы төшмәç.

## *Башҡорттар*

Сәсән Уралға: «Эй, дусҡайым, ҡасан ғына ҡайҙа ғына китһәң дә, барыбер кире әйләнеп ҡайтаһың. Сөнки һин башҡортһоң», – тип әйтергә уҡталғайны ла, тыйылды. Йәш кеше йәшәһен, күререн күрһен, ә ҡайтыу сәбәбе тураһында, насип булһа, бер иркенләп һөйләшербеҙ әле, тип кенә ҡуйҙы эстән.
Сәсәндең башҡорттар, уларҙың тарихы, булмышы һәм киләсәге тураһында уйлағаны ла, яҙғаны ла күп ине. Шул фекерҙәренә йәнә боролдо.
Кешегә тарих ни өсөн кәрәк? Был һорауға яуапты төрлө кеше төрлөсә бирә. Әммә түбәндәге фекерҙе һис кем инҡар итмәç, моғайын: борон һәм яңыраҡ булып үткән ваҡиғаларҙы өйрәнеү әҙәмгә үҙенең кемлеген белеү һәм бүтәндәр алдында боронғо нәçелдең ҡаҙаныштарын күрһәтеү өсөн кәрәк. Тап ошоноң менән ул бүтән йән эйәләренән айырыла, ә тарихын белгән һәм баһалай алған зат үçеш кимәле йәһәтенән юғарыраҡ тип һанала.
Шуға күрә кешелек үҙен белә-белгәндән бирле үткән юлын яҙа. Тарих яҙыу, әлбиттә, аҡ хағыҙға хәреф теҙеү генә түгел. Тарихи факттарҙы ҡалдырыу һәм уны өйрәнеү юлдары күп төрлө. Башҡорт йырында: «Тарих яҙыр инем ташына», – тиелә бит. Был да – шул саҡта йәшәгән быуындың киләсәккә сәләме.
Асылыкүл ярындағы ташта ярымшар кеүек шып-шыма итеп яһалған ике соҡор бар. Бик борон уны, бынан биш мең йылдар самаһы элек, утҡа табыныусылар эшләгән, ти ғалимдар. Шуныһы ғәжәп: таш шул тиклем ҙур теүәллек һәм оçталыҡ менән соҡолған, әйтерһең, бөгөнгө махсус тишкес ҡоралдар файҙаланылған. Ул заманда ошондай соҡорҙарҙы яһаусыларҙың бөгөнгө нәçелдәре кем? Бына беҙ үҙебеҙҙең алға тарих тураһында һораүҙар бирҙек тә яуап эҙләргә, йәғни тарих яҙырға тотондоҡ. Башҡаса әйтһәк, тарих – ул боронғоларҙың бөгөнгөләргә әйткән һүҙе һәм бөгөнгөләрҙең шуны уҡыуы.
Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тарих сәләме күп осраҡта бик ҡойто, урыҡ-һурыҡ ҡына була, сөнки тереләрҙең һәр ҡайһыһы: «Туҡта, бөгөнгө хәлдәрҙе теҙеп яҙайым, тарих итеп уҡырҙар», – тип уйламай. Был бигерәк тә боронғо кешеләргә ҡағыла. Шуны ла әйтәйек: Урал армыттарында миллион, йөҙәр мең йыл әүәл ни булғанын фаразларға мөмкин, әммә аныҡ итеп әйтеп булмай, сөнки боронғоларҙың тарихи сәләме юҡҡа тиң. Йөҙ мең түгел, биш-ун мең йылдар борон был төбәктә ниҙәр булғанын һөйләүсе дәлилдәр ҙә аҙ. Ни хәл итәһең, бары менән байрам, шуға шөкөр итеп, үҙебеҙҙең мең йылдар элек кем булғаныбыҙҙы, дәрәçәрәге, беҙҙең боронғо бабайҙарыбыҙҙың кемлеген белергә тырышайыҡ.

Яҙма тарих, әлбиттә, грек Геродотҡа тиклем үк булған. Мәҫәлән, уны «Авеста» башлаған тип һанайҙар. Әлбиттә, уға тиклем дә яҙыу булған һәм тарих яҙыусылар ҙа йәшәгән. Әммә Геродоттың тарихы сағыштырмаса тулы, ентекле һәм ҡитғаларҙың байтаҡ халыҡтарын тасуирлай. Шуға уны тарихтың атаһы тиҙәр. Геродотта башҡорт тураһында бер һүҙ ҙә юҡ. Уның ҡарауы, бөгөн башҡорт милләтенең тармаҡтары булған мәсәғүт менән юрматы иҫкә алына. Геродотҡа тиклем яҙылған «Авеста»ла бөрйән әйтелә. Сармат, савромат рәүешендә юрматылар байтаҡ ҡына яҙма тарихҡа ингән. Башҡорт ырыуҙарының ҡайһы берҙәре, әйтәйек, ҡыпсаҡ, ҡатай, түңгәүер, үҫәргән Көнсығыш һәм Көнбайыш яҙма тарихында Христос тыуғанға тиклем үк бар.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо һүҙҙәрҙе башҡортҡа ҡарата әйтеп булмай. Яҙма тарихта башҡорт атамаһы халыҡ исеме булараҡ IX быуаттың беренсе яртыһында Сәлләм Тәржемәндең сәйәхәтнамәһендә тәү тапҡыр теркәлә, шулай уҡ Масудиҙың (X б.) һәм Ғәрдәзиҙең XI быуаттағы яҙмаларында телгә алына. Әл-Бәлхи менән Ибн-Рустаның IX – X быуаттар араһында, 922 йылда Ибн-Фаҙландың, XIII – XIV быуаттарҙа Плано Карпиниҙың, Вилгелм Рубруктың, Рәшид әт-диндең мәғлүмәттәре барлыҡҡа килә. XV – XVI быуаттарҙа башҡорттар тураһында телгә алыуҙар урыҫ сығанаҡтарында, башлыса йылъяҙмаларҙа, даими төҫ ала.

Һорау тыуа: ни өсөн башҡорттоң эсенә ингән ҡайһы бер ырыуҙар боронғораҡ тарихта яҙылған, ә «башҡорт» үҙе юҡ? Быны белер өсөн беҙгә меңәр йыл элек булған йә булыуы ихтимал ваҡиғаларға әйләнеп бағырға һәм башҡорт исеменең ни аңлатҡанын асыҡларға тырышырға тура киләсәк.

## *Аңлатмалар күп булған*

XVIII – XX быуаттар эсендә халыҡ исеме булараҡ башҡортто күп телдәрҙә 160-ҡа яҡын төрлө яҙылышта уҡырға һәм 40-ҡа яҡын төрлө аңлатмаһын табырға мөмкин, тип яҙа ғалим Н. В. Бикбулатов. «Уларҙың барыһы ла тиерлек был һүҙҙең ҡатмарлы, төрки сығышлы булыуына ҡайтып ҡала. Терминдың беренсе өлөшө «баш», «башлыҡ», «айырым», «башҡа», «буҙ», ә 2-се өлөшө «ҡорт», «бал ҡорто», «бүре», «йәшәү урыны», «ил-йорт» йәки «урҙа» тип аңлатыла. Башҡорт этнонимын «Башкус йылғаһы кешеләре» (Таулы Алтай) йәки «уғырҙарҙың (уғыҙҙарҙың) бажалары» мәғәнәһендә аңлатыусы фараздар айырым урын алып тора. Һуңғы ваҡытҡа тиклем ике гипотеза киң таралыу тапты:

1) «баш» («башлыҡ») + «ҡорт» («бүре») – «баш бүре», «бүре – өйөр башлығы», «өйөр етәксеһе», «нәҫел башы»;

2) «баш» («башлыҡ», «башлап барыусы») + «ҡор» («кешеләр төркөмө», «ҡәбилә») + «т» (иран йәки монгол телдәренән алынған күплекте, йыйылманы аңлатыусы ялғау) – «баш ҡәбилә», «халыҡ».

Беренсе гипотеза башҡорттарҙың бүрене тотем булараҡ ихтирам итеүенә һәм халыҡ риүәйәттәренә таянһа, икенсеһе – үҙенең абруйлы күренеүе менән кешеләрҙең иғтибарын йәлеп итеүе.

Хәҙер «башҡорт» һүҙен «бүре – өйөр башлығы», «бүре – өйөр етәксеһе» тип аңлау ҡарашы таралыу тапты, ләкин, был һүҙ тәүҙә конкрет кешенең, уның етәкселегендәге хәрби-сәйәси союзға берләшкән (дәүләт ҡоролошоноң тәүге формаһы) ҡәбиләләр етәксеһененең исеме булған, ә һуңынан был берләшмәнең дөйөм исеменә әүерелгән, тигән фекер алға һөрөлә. Был фекергә төрлө ҡараш бар: берәүҙәр элекке гипотезаларҙың барыһы ла тиерлек бөтөн халыҡҡа түгел, ә

нигеҙҙə бер айырым кешегə («баш ҡортсо», «баш бүре») ҡайтып ҡала һəм уларҙың нисек этнос атамаһына əүрелеүен аңлатмай, тиһə. Икенселəр, башҡорт этносы составына ингəн ҡəбилəлəрҙең һəр береһенең үҙ исеме (бөрйəн, ҡыпсаҡ, ғəйнə, тамъян, үҫəргəн, юрматы һ.б.) була, уларҙың ағзалары тотороҡло ырыу-ҡəбилəне (субэтник) дөйөм исем менəн атаһын өсөн, был ҡəбилəлəрҙе берлəштергəн һəм уларҙың тормошонда реаль əһəмиəт уйнаған берлəшмə барлыҡҡа килергə тейеш булған, ти. Ҡəбилəлəрҙең хəрби-сəйəси берекмəһен шулай атап була.

Тарихта яҡынса IX быуаттың беренсе яртыһында йəшəгəн ғəскəр башлығы Башгирд исеме һаҡланған: уға булғарҙарға ҡаршы (Ғəрдəзи) бергəлəп яу сабырға хазар хаҡаны тəҡдим иткəн. Ошо ваҡыттан алып Башҡорт этнонимы сығанаҡтарҙа даими осрай. Был – өсөнсө фараз. Дүртенселəре əйтеүенсə, антропонимдың ойошоп килеүсе халыҡ атамаһына əүрелеүе – этноним барлыҡҡа килеүҙең, айырыуса төрки халыҡтарында, ҡануни юлы (сағыштырығыҙ: Үзбəк – үзбəктəр, Нуғай – нуғайҙар, Осман – төрөк-османдар һ.б.). «Башҡорт» һүҙе ярайһы уҡ тиҙ арала, IX быуатта уҡ, халыҡтың экзоэтнонимына ла, эндоэтнонимына ла əйлəнеп киткəн булырға тейеш. «Башкир» формаһы этнонимдың һуңғы осор урыҫ адаптацияһы булып тора һəм тик XVIII быуатта ҡулланыла башлай: ҡырғыҙҙар һəм көнсығыш төркиҙəр «башҡыр» формаһын, моғайын, урыҫтарҙан алғандыр», – ошолай тип яҙҙы Н. В. Бикбулатов «Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия»ла. («Башҡорт энциклопедияһы» дəүлəт ғилми нəшриəте, Өфө, 1997 й.)

Əлеге раҫлау, IX быуатҡа тиклем «Башҡорт» тигəн исем дə, башҡорт исемен йөрөткəн халыҡ та булмаған, тигəн фекерҙе тəҡрарлай. Үрҙə əйтелгəнде ҡыҫҡа ғына итеп йыйһаҡ, IX быуат тирəһендə Башҡорт атлы бер кеше йəшəгəн һəм тора-бара ошо кешенең исеме халыҡ исеме булып киткəн, тигəн һығымта сыға.

Был раҫлау менəн килешеүе ҡыйын, сөнки кеше исеме халыҡ атамаһы булып китһен өсөн бик оҙайлы – кəмендə бер нисə йөҙ йыл – ваҡыт кəрəк. Үрҙə иҫкə алынған үзбəк, нуғай, османдар менəн тап шулай булған. Əйтəйек, Үзбəк хандың исеме тəүҙə уның яҡын-тирəһендəге кешелəргə – «үзбəк кешеһе» рəүешендə тағылған, шунан һуң тиҫтəлəрсə йылдар дауамында ошо «үзбəк кеше»лəренең даирəһе киңəйгəндəн-киңəйгəн һəм быуаттар үткəс кенə вилайəт һəм уның халҡы атамаһы булып киткəн. Ə Башҡорт хан IX быуатта йəшəгəн, һəм уның исеме шул дəүерҙə үк яҙма тарихҡа халыҡ исеме рəүешендə инеп ҡалдымы икəн ни?

Был раҫлау тағы бер шик тыуҙыра. Халыҡтың исеме, бигерəк тə был исемде ул үҙе танып ҡабул итһə, уның төп милли һыҙаттарын сағылдырырға һəм шул һыҙаттарҙы ышандырырлыҡ дəлилдəр менəн аңлатырға тейеш. Əйтəйек, бөгөнгө башҡорттарҙың күбеһенə хас хəрби батырлыҡ, тоғролоҡ, бер ҡатлылыҡ, иленə, еренə бирелгəнлек, ныҡышмаллыҡ, алдай белмəү, хəйлəһеҙлек, тура һүҙлелек, сауҙа-коммерция менəн шөғөллəнə белмəү, тыныс тормошта бер-берендə яҡламау, кешенең хəтерен, үҙенең мəнфəғəтен уйлап тормаҫтан дөрөҫөн əйтеү кеүек бүтəн миллəттəрҙəн айырып торған һыҙаттарҙы кеше исеме аша халыҡ атамаһы булып китеү күренеше аңлата аламы һуң? Минеңсə, юҡ.

Өҫтəүенə, кеше исеме булараҡ Башҡорт ни мəғəнəлə булған? Был да ошоға тиклем билдəһеҙ көйөнсə ҡала. Ə бит балаға исем биргəн саҡта, атамаға мəғəнə һалына. Мəғəнəһеҙ бер генə исем дə юҡ. Тик Башҡорт ниндəй мəғəнəгə эйə булғандыр – əлеге версияның авторҙары был аңлатманы ниңəлер бирмəй.

Шулай уҡ «баш бүре» йə «баш ҡортсо» версияларында ла халыҡ атамаһы үҙенең асылын асмай.

# «Башҡорт» һүҙе ҡасан барлыҡҡа килгән?

Иң ҡатмарлы һорауҙарҙың береһе ошолор, сөнки телдә ҡайһы һүҙҙең алдараҡ, ә ҡайһыһының һуңыраҡ барлыҡҡа килеүен раҫлар өсөн кире ҡаға алмаҫлыҡ дәлилдәр кәрәк. Ә һүҙ яһалыуын раҫлар документ, әлбиттә, ниндәй ҙә булһа яҙма ҡомартҡы йә топоним булараҡ ҡасан шул урынға бирелеүе хаҡында халыҡ хәтерендә ҡалған ҡомартҡы инә. Һуңғыһына бәйет, риүәйәт, йырҙар, хатта әкиәттәр инергә мөмкин. Ауыҙ-тел ижадына ҡараған әҫәрҙәрҙең йәшен билдәләү саралары байтаҡ. Шул иҫәптән әҫәргә ингән исемдәрҙең ҡасан барлыҡҡа килеүен төҫмөрләү аша ла билдәләнелә.

«Башҡорт» һүҙе иң кәмендә бөгөнгө көндән биш меңләп йыл әүәл барлыҡҡа килгән, тип һанай заманыбыҙҙың иң үткен аҡыллы ғалимдарының береһе Салауат Ғәләмов. Был мәҡәләлә уға һылтанма йыш буласаҡ. Шуға алдан уҡ ҡайһы китаптарынан мәғлүмәт алыныуы хаҡында әйтеп китәйек. Былар: «Башкорды от Гильгамыша до Заратустры». Уфа, «Китап», 2005 г.; «Башкорды». Уфа, 1999 г.; «Башкордская философия. Этика. Уфа, «Китап». 2005 г. Артабан Салауат Ғәләмовҡа һылтанма яһағанда ошо китаптар күҙ уңында тотолор һәм һәр осраҡта китаптың биттәрен ҡуйыу кәрәк тип һанаманым, сөнки был төп фекерҙән ситләштерә.

Салауат Ғәләмов, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәргә таянып (барыһын да килтереп торһаҡ, бик оҙонға китер), «Башҡорт» һүҙе, дөрөҫөрәге, атамаһы бөгөнгө Фарсы ҡултығы тирәһендәге ер-һыу атамаһынан таралған, ти һәм раҫлау итеп Bashkard өлкәһенең барлығын күрһәтә. Өлкәгә исем иран теленең көньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшкән Башкард халҡының исеменән алып ҡушылған, тип һанай ул. Башкард халҡының был яҡҡа күсенеп ултырыу ваҡыты тип тап 4-5 мең йылдар әүәлге дәүерҙе һанайҙар. Ошонда тағы ла бер фекерҙе айырып билдәләйек: Башкард кешеләре Фарсы ҡултығы буйына төньяҡтан, әлеге Урал тауы армыттарынан, күсенеп барған, тип һанала. Ул заманда күсеүселәр үҙҙәренең ырыуын, йәғни йәмғиәтен Башкард һанамаған, сөнки был атама бөтән мәғәнәлә йөрөгән һәм ырыу исеме булараҡ күпкә һуңғараҡ барлыҡҡа килгән. 4-5 мең йыл элек уларҙың йәмғиәтенең исеме **Арийазанти** тип аталған. Бөгөнгө тел ҡанундарынан сығып ҡараһаҡ, был һүҙ **Арый заты** булып яңғырар ине. Нәҫел-нәсәпте аңлатҡан **зат** һүҙенең тамыры ана ҡайҙа барып тоташа. Әзербайжандарҙың «заты»ға тамамланған фамилиялары ла шунан килә.

Ул заманда әлеге һинд-европа, һинд-иран халыҡтарының барыһы ла үҙҙәрен **Арый** һанаған. Һуңғараҡ төрлө телдә был һүҙ төрлөсә яңғыраш алған, әммә тамыр «р» шул көйө ҡалған. Мәҫәлән, башҡортса «ырыу», ырыуҙың ағзаһы – «ир». Бөгөн ир булып йөрөгән кеше борон арый булыр ине.

Боронғо арыйҙарҙың телен С. Ғәләмов бөгөнгө һинд-европа телдәренең башы һанай. Әлеге иран теле, шул иҫәптән үрҙә күрһәткән Башкард кешеләре теле лә, тамыры менән шунда барып тоташа. Күреүебеҙсә, борон уртаҡ булған телебеҙ йылдар, быуаттар, мең йылдар һуҙымында танымаҫлыҡ булып үҙгәргән. Ошо үҙгәреш ҡанундарының береһе **р**-ҙың **л**-ға күсеүе арҡаһында боронғо Арийандар тора-бара Алан булып киткән. Хәҙерге аландар шулай атала. Улар 4 - 5 мең йылдар әүәл генә түгел, һуңғы мең йыллыҡта, аныҡырағы, XIII быуатҡа, татар-монгол баҫҡынсылығына тиклем, әлеге Көньяҡ Уралда һәм Төньяҡ Кавказда көн күргән. Был турала иран тарихсыһы Рәшид әд-дин (1237 – 1318) бына нимә яҙа: «Дәште ҡыпсаҡҡа (Дәште Саваран) Алтайҙан (Чин-Мачин) татар-монголдар килеп, **аландар** һәм **ҡыпсаҡтарҙы** осратҡас, һуңғыларына: «Һеҙҙең менән беҙ бит бер халыҡ, ә аландар – беҙгә ят, ҡушылығыҙ беҙгә», – тип мөрәжәғәт итә. XIII быуаттан һуң әлеге аландар Алғы Азияға юллана һәм Татван

Өлкәһендә Ван күле буйында йәшәй. Үҙҙәрен улар хәҙер **ҡорт** һанай, башҡалары иһә **ҡордалан**. Ҡортистандан бик йыраҡ Башҡортостанда боронғо аландарҙың бер осмоты һаман бар. Улар – Йылан ырыуы башҡорттары.

## *Күсенеү ҡануны*

Йылан менән аландар кеүек хәл һәр ваҡыт булған, йәғни бер ырыуҙың ҙурмы – бәләкәйме өлөшө күсенеп киткән. Күсенеү һәр саҡ Яйыҡ, Ағиҙел ағышы буйлап барған, йәғни кешеләр көньяҡ-көнбайышҡа күсенгән, ә күсенмәгәне элекке йәшәгән урынында ҡалған. Яңы ергә күсенеүселәр үҙҙәрен элекке исеме менән йөрөткән (баяғы арийан – аландар һымаҡ), ә боронғо тыуған илдә ҡалғандарына «төньяҡтағы туғандар» рәүешендә исем биргәндәр. Көнсығыштан көньяҡ-көнбайышҡа табан барған кешеләр өсөн артта ҡалған ил төньяҡта һымаҡ күренгәндер инде. Христиан эраһының 24 – 79-сы йылдарында йәшәгән Рим ғалимы Өлкән Плиний Ҡара диңгеҙҙең Азия яҡлап яр буйының урта тирәһендә аттакор тип аталған халыҡтың йәшәгәнен күрһәтә. «Ғөрөф-ғәҙәттәре, торған ерҙәре йәһәтенән улар Рифей тауҙарындағы гиперборейҙарға оҡшаған», – ти. Рифей тауҙары тип борон Урал тауҙарын әйткәндәр. Салауат Ғәлләмовса, аттакор исемле халыҡ туранан-тура яңы эраға тиклем II мең йыллыкта баяғы Рифей тауҙарында йәшәгән арыйҙарға барып тоташа. Уттару Куру боронғо һинд-иран телендә Төньяҡ Куру тигәнде аңлатҡан икән. Тимәк, Төньяҡ Куру Рифей тауҙарынан диңгеҙ буйына күсенгән. Былар төньяҡтағы булғас, ҡайҙа һуң көньяҡтағылары? Һуңғылары иһә аттакорҙар Ҡара диңгеҙгә килгәнгә тиклем үк әлеге Һиндостан яғына күсенеп китә.

Рифей тауҙарын ҡалдырып китеүселәр Һиндостанға ғына түгел, боронғо Месопотамияға ла күсә һәм шул ваҡыттарҙа шау-гөр килеп торған Шумер һәм Аккад дәүләттәрен дә күтәрә. Йәғни халыҡ тулҡын-тулҡын булып төньяҡ-көнсығыштан көньяҡ-көнбайышҡа бара. Тарихҡа күҙ һалығыҙ әле, көнбайыштан көнсығышҡа күсенгән берәр халыҡты табырһығыҙмы икән? Юҡ. Әгәр бындай хәл булһа, ул уңышһыҙ тамамланған. Мәҫәлән, ирандарҙың бер өлөшө Хазар диңгеҙе буйына, Алғы Азияға күскәндән һуң Уралға кире ҡайтмаҡсы була. Әммә был эштең аҙағы ҡыҙғаныс бөтә. Ҡайтырға тырышыусыларҙың күбеһе юлда һәләк була, Уралға аҙ ғына кеше әйләнеп ҡайта ала.

Ошондай уҡ яҙмыш кире күсенергә тырышҡан ҡалмаҡтарға ла әҙерләнгән була. Ҡалмаҡтар (ойроттар) XVII быуат аҙағында – XVIII быуат башында әлеге Ҡытайҙан, иркен ер эҙләп, Рәсәйгә күсенә. Әлбиттә, бында уларға бирәү ҙә ер бушатып көтөп тормаған. Ғөмүмән, бер ваҡытта ла, теләһә ниндәй тарафта ла буш ер булмаған. Кемдер «буш ергә күсенгән» тип хәбәр һөйләһә, ышанмағыҙ. Кеше ер йөҙөндә йәшәй башлағаны бирле буш ерҙең булғаны юҡ. Ҡайҙалыр кешеләрҙең күберәк, ҡайҙалыр аҙыраҡ йәшәүе ихтимал, әммә ер буш булмай. Ҡалмаҡтар әлеге Ҡалмағстан майҙанына ҡырғыҙҙар, кесе ҡырғыҙҙар (хәҙер ҡаҙаҡтар) йәшәгән ер аша ынтыла. Ҡырғыҙҙар, тегеләр ерҙе баҫып алырға килә тип, һуғыш менән ҡаршылай. Күп кеше ҡырыла, бигерәк тә көтөлмәгән һөжүмдән ҡырғыҙҙар нык юғалтыу кисерә. Һуғышҡа әҙерләнеп сыҡҡан ҡалмаҡтарҙың кешеһе аҙыраҡ үлә. Рәсәй батшаһы Петр беренсе ҡалмаҡтарҙы әлеге Ҡалмағстан урынына һыйындыра. Петр үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып шулай эшләй. Һуғышсан ойроттарҙы баш бирмәҫ башҡа халыҡтарҙы, бигерәк тә башҡорттарҙы, буйһондороуҙа файҙаланмаҡсы була ул. Мәкерле ниәтен ниндәйҙер рәүештә тормошҡа ашыра Петр. Баш күтәргән башҡорттарҙы быуыу өсөн бер нисә мәртәбә ҡалмаҡтар файҙаланыла. Үҙҙәренең юлында бер генә лә тере йән, имен ауыл ҡалдырмай һуйып, үртәп сыға улар. Арҡаға ҡаҙалған бысаҡ һымаҡ була

был. Башҡорттар еңелә, баш күтәреү баҫтырыла. Әммә ҡалмаҡтар яңы урында шат тормош таба алмай. Ер ҙә аҙ, тәбиғәт шарттары ла ҡулай түгел. Өҫтәүенә, быларҙан зыян күреп өлгөргән ҡырғыҙҙар менән башҡорттар әленән-әле ҡарымта ҡайтара. Аптырағас, ҡалмаҡтар кире Ҡытайға ҡайтмаҡсы була. Әммә бөтәһе лә түгел. Халыҡтың бер өлөшө, хандың ҡарары менән ризалашмайынса, Рәсәйҙә ҡала. Быларҙың күсенергә йыйынғанын белеп ҡалған кесе ҡырғыҙҙар юл буйына бик ныҡ ыҙалата, өҫтәүенә, малға ғына түгел, кешегә лә ризыҡ етмәй, йоғошло сир ҙә һағалап тора. Элекке тыуған иленә ойроттарҙың бик аҙы ғына ҡайтып етә. Бында ла уларҙың элекке ерен алып ҡуйғандар бит инде. Мандый алмай былар. Элек ҡеүәтле һаналған халыҡ тарих күҙлегенән төшөп ҡала.

## *Уралдағы Иран дәүләтенең тәртибе*

Төньяҡтан көньяҡҡа, көнсығыштан көнбайышҡа табан бара тарихи тормош. Көньяҡҡа китеүселәр боронғо тыуған иле тураһында, беҙҙең боронғо еребеҙ төньяҡта, унда ун ай ҡыш, ике ай йәй, тип тә һөйләр булған. Көньяҡҡа күсеүселәр яңы урындағы илдәрен элеккесә исемләп, илебеҙ Иран, тигән. Алыҫта ҡалған боронғо төйәктәре Төньяҡ Иран (бөгөнгө Башҡортостандағы Ирәндек тауы — Иран тауы) исемләнгән. Шул замандағыса әйтһәң, Тәри Иран. Башҡорт әйтелешендә ул Туран булып яңғырар. Бына ҡайҙан килә Туран исеме.

Туран һәм Иран илдәрен төҙөгән кешеләр, әлбиттә, һәр яҡлап уйланылған йәмғиәт, уға идара итеү ойошмалары, йәмғиәтте тәьмин итер иҡтисад, иҡтисадҡа ярашлы сәйәсәт, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе йәмғиәт тормошона яраҡлаштыра алырлыҡ идеология һ.б. барлыҡҡа килтергән. Был турала беҙгә Арҡайым тип аталған археологик ҡала һөйләй. Әгәр төҙөк йәмғиәт ҡоролошо, уға етәкселек итерлек дәүләт, дәүләтте тотоп торорлоҡ көс булмаһа, әлбиттә, йыһанды ерҙә һынландыра алырлыҡ, һәр өйҙә тиерлек металлургия ҡорамалдары, сауҙа, һыу индереү һәм сығарыу, дошмандарҙың һөжүменән һаҡланыу системаһы эшләп торған ҡала төҙөй алмаҫтар ине. Туран – Иран дәүләте дәүерендә төҙөлгән ил.

Арҡайым дәүерендә дәүләт ҡоролошо түбәндәгесә күҙалланыла:

1) Дәүләт илдәргә бүленә. Илдәр ҡалалар һәм ауылдарҙы берләштерә. Бер ил – бер ырыу. Дәүләттең исеме – Иран, аҙаҡҡараҡ Туран. Ырыуҙары: Иран заманында – куру; Туранда – бөрйән, юрматы, түнгәүер, мәсәғүт, ғәйнә. Илдәргә – ырыуҙарға ҡаған етәкселек итә, аҙаҡтаныраҡ ул тархан тип аталасаҡ. Дәүләт башында ҡағандар араһынан һайлап ҡуйылған хан тора. Хан һәм ҡағандар – йәмғиәттең айырым бер өлөшө, ҡатламы. Ул башҡа ҡатламдар менән аралашырға тейеш булмаған. Ҡағандан ғына ҡаған тыуа, ҡаған ҡатынды тик үҙ ҡатламынан ғына алырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта ағайҙың һеңлегә өйләнергә хоҡуғы юҡ. Өйләнешеү өсөн ете быуын айырымланыу шарт булған. Әгәр ҙә ете быуын айырымланыу мөмкинлеге табылмаһа (ҡаған нәҫелдәре бер-береһенә яҡын бит), бик һирәк осраҡта ҡыҙҙы рабан ҡатламынан алырға рөхсәт ителгән.

2) Дәүләтте дәүләт иткән нәмәләр күп, әммә төп шарттың береһе булып йәмғиәттәге бар кеше өсөн дә уртаҡ һәм бар кеше лә үҙ һанаған дөйөм уй-ниәт ята. Ошо уй-ниәт, ышаныу тирәһендә кешеләр берләшә, уйҙары-күңелдәре уртаҡ һәм ныҡ, ҡаҡшамаҫ булып ойоша. Юҡҡа ғынамы ни һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә милли идея тураһында һөйләйҙәр...

Боронғо дәүләттәрҙең барыһында ла күк, йыһан менән бәйле йә кешене уратып алған бүтән ғәйәт ҙур, әммә аңлата алмаҫлыҡ көстәргә ышаныу булған. Ауыл, ҡала, ырыу кешеләре – иген урғанда йә сәскәндә Уңыш килтерер Хоҙайға, баҡыр иретеүселәр – Тау эйәһенә, һуғышҡа барыусылар – Еңеү Хоҙайына (сыңрау торнаға), йылғанан һыу алып аш йүнәтеүселәр – Һыу эйәһенә, ағас ҡырҡырға

урманға ингән кешеләр Урман батшаһына табынған, уларҙың мәрхәмәтлелеген теләгән хоҙайҙарға ҡорбан биргән. Ҡытай, Япон, Тибет, Уралдағы Иран, Рим, Египет, Вавилон дәүләттәренең барыһында ла әлеге ышаныуҙар дөйөм идея булып, күмәкләп табыныу, күмәкләп мәрхәмәт һорау өсөн файҙаланылған. Әлбиттә, хоҙайҙарҙың күп булыуы ниндәйҙер ҡыйынлыҡтар тыуҙырған. Бер үк кешеләргә йыш ҡына төрлө эш алдынан төрлө хоҙайға ҡорбан килтереү байтаҡ ҡына сығым да, ваҡыт та, көс тә талап итә бит әле. Өҫтәүенә, ҡайһы берҙә ҡорбанға кешеләр ҙә бирелгән. Хоҙай теләгән иң яҡшы ҡорбан тип йәш бала, етеп килгән ҡыҙ йә егет һаналған. Ҡайһы ғына атай, әсәй, хоҙайҙарға нисек кенә ныҡ ышанмаһын, үҙ балаһын ҡорбан иттерергә теләһен һуң? Ошо хәлдәр яйлап ҡына ризаһыҙлыҡ, дөйөм идеяға ышанмау тыуҙыра башлай. Ана шул саҡта дөйөм идеяның сафлығын, теүәл үтәлешен һаҡлап тороусылар барлыҡҡа килә. Уралдағы Иран дәүләтендә бындай кешеләрҙе раған тип йөрөткәндәрҙер, бәлки. Был – минең фараз. Һүҙ «ра» һәм «ған» өлөштәренән тора. «Ра» – арыйҙар ҡояшты шулай тип атаған. «Ған» – ҡанундар сығарыусы, шуның үтәлешен тикшереп тороусы иң өлкән кеше була. Илдәрҙә – ырыуҙарҙа, уларҙан тыш һәр ҡалала, ауылда рағандың вәкилдәре рабағалар эшләгән, тип уйларға кәрәк. Бөгөнгө христиан, йәһүд йә ислам динен тотоусыларҙа ла шулай. Улар әлеге тәртипте уйлап сығармаған, ә боронғоларҙан алған. Раған, дәүләттең ханы һымаҡ уҡ, рабағалар араһынан һайлап ҡуйылған. Рабағалар шулай уҡ йәмғиәттең айырым бер ҡатламын тәшкил иткән. Улар ҙа айырымланған тормош кисерә, рабаға балаһы тик рабаға балаһына ғына өйләнә, уларҙың йорттарында көнкүреш тә үҙҙәренсә, йәғни көн ҡоролошо баҡыр иретеүсенеке һымаҡ түгел. Раған менән рабағалар хоҙайҙарға табыныу дөрөҫләгән генә түгел, бөтән ғөрөф-ғәҙәттәрҙең еренә еткерелеп үтәлешен дә күҙәтә тора, ҡайҙа ниндәй етешһеҙлек, боҙоҡлоҡ йә яңылыҡ бар – шунда уҡ бер-береһенә хәбәр еткерәләр һәм яңылышты төҙәтеү өсөн тиҙ арала ҡәтғи сара күрәләр.

3) Сара күреү өсөн үҙҙәренең генә көсө етмәһә, ярҙам һорап ханға, ҡағанға (тарханға) мөрәжәғәт итә. Тегеләре рағандың һүҙен һүҙ иттерер өсөн дәүләттең иң ҡеүәтле ҡоралын – ғәскәрҙе егә.

Уралдағы Иранда ғәскәр ике өлөштән торғандыр, тип уйлайым. Беренсеһе – хан, ҡағандар янында даими хеҙмәттә торған, һуғыш эшенә яҡшы өйрәтелгән һәм тәүлектең теләһә ниндәй ваҡытында фарман үтәргә әҙер. Икенсеһе – яу күнекмәләренә өйрәтелгән, кәрәкле һуғыш ҡоралдары әҙер торған, әммә даими хеҙмәттә булмайынса, сиратлап ҡарауыл эшен башҡарған, кәрәк саҡта – дөйөм фарман яңғырағанда – яу сафына күтәрелергә һәр саҡ әҙер ғәскәр. Ғәскәри халыҡ та, ҡаған һәм рабағалар һымаҡ, йәмғиәттең айырым өлөшөн тәшкил иткән. Беренсе ғәскәр үҙ эсендә, икенсеһе үҙ эсендә ҡандың сафлығын һаҡлаған: йәмғиәттең өҫкә йә аҫҡы ҡатламынан ҡыҙ алмаған, ҡыҙ бирмәгән. Ғәскәрҙең дөйөм сардары итеп беренсе ғәскәрҙең башлығы ҡуйылған, уның фарманы барыһы өсөн дә бойороҡ. Һуғыш барған саҡта был сардарға тик хан ғына буйһонмаған. Ғәскәрҙең ҡоралы түбәндәгесә: беренсеһе – атлы-һыбайлы ғәскәр. Һәр һуғышсының тәғәйен аты бар. Атты улар үҙҙәре лә үрсеткән, ул заманда Уралда өйөрләп йөрөгән ҡырағай аттарҙы – тарпандарҙы ҡулға ла өйрәткән. Беренсе ғәскәрҙең төп сардары арбала йөрөгән. Уның дилбегәсеһе була. Аттар парлап, икешәр, өсәр, дүртәр парлап та егелгән. Арба ханда, ҡағандарҙа һәм рағанда ла булған. Бүтәндәр йәйәү йөрөгән. Икенсе ғәскәр – йәйәүле. Ике ғәскәр ҙә ҡылыс, һөңгө, хәнйәр, ҡалҡан менән ҡоралланған. Һуңға табан һыбайлылар тимер күлдәктәр кейә башлаған. Йәмғиәттең тәүге өс ҡатламы ла бүтәндәрҙән йыйылған һалым иҫәбенә йәшәй. С. Ғәлләмовтың билдәләүенсә, ҡайһы бер йылда һалымдың өстән бер өлөшө ғәскәргә тотонолған.

4) Йәмғиәттең аҫҡы ҡатламына ҡалала йәшәүсе төрлө һөнәр эйәләре ингән.

Улар баҡыр иреткән, иген иккән, һауыт-һаба яһаған, ҡорал сүкегән, арба эшләгән, сауҙа иткән, мал ҡарауҙан тыш, башҡа бик күп эш башҡарған һәм «бүтәндәр» тигән исем йөрөткән.

5) Йәмғиәттең тағы бер өлөшө – мал бағыусылар. Улар ауылдарҙа көн күргән. Көтөүлектәр ауылдар араһында билдәләнгән була, иген сәселгән ер махсус межалана. Малбағарҙар, нигеҙҙә, ер өйҙәрҙә йәшәй, йәйге тормошо яланда мал янында үтә. Улар, йәмғиәтте ит, һөт менән тәьмин итеүҙән тыш, кейем өсөн тире лә етештерә. Туҡыма уйлап сығарылғанға ҡәҙәр кешенең өҫтөндә тире һәм ағастан һыҙырылған йүкәнән һуғылған кейем була.

Арый дәүләтенең тышҡы сиген һәм илдәр араһындағы бүленештәрҙе, ауыл, ҡалаларҙа эске тәртипте йәйәүле ғәскәр һаҡлай. Беренсе ғәскәр иң мөһим йомоштарҙы ғына башҡара, хан, ҡағандар, раған менән рабағалар һәм сардарҙарҙың тыныс йәшәүен тәьмин итә.

## Йәмғиәт ҡатламдарының исемдәре

Арыйҙар дәүләтендә ҡаты тәртип һәм уға буйһоноу ошо дәүләтте тотоп торған һәм үҫешен тәьмин иткән иң мөһим шарттарҙың береһе булған, тип фаразлана. Ҡаты тәртип тигәндән, боронғо ҡол биләүсе дәүләттәрҙәге һымаҡ тәртип күҙ уңында тотолмай. Әлбиттә, тән язаһы менән бәйле ниндәйҙер көс ҡулланыу булғандыр, әммә бында нығ өҫтөнлөк иткәне – кешенең һәр эшкә инанысы ята. Әйтәйек, бүтәндәр ҡатламына ҡараған иген игеүсе ошо эште беренсе сиратта үҙенә һәм уны ҡурсалаған хоҙайға кәрәк тип белә, баҡыр иретеүсе мейесенән сыҡҡан металл уның үҙенең һәм яҡындарының яҡшы тормошон тау эйәһе менән ҡуша тәьмин итә тип белгән. Ә дәүләт уны ошо эшкә хуплап, кәрәкле шарттарҙы тыуҙырып торған.

Бындай тормош бер көн, бер ай, бер йыл ғына бармаған, әлбиттә. Моғайын, быуат-быуаттар буйына һуҙылғандыр. Ошондай оҙайлы дәүерҙә, һис шикһеҙ, дәүләт ҡоролошоноң һәр өлөшө үҙ исемен ала һәм улар кешенең хәтерендә һаҡлана. Телдән телгә, ҡолаҡтан ҡолаҡҡа тапшырылған тарих, әлбиттә, киңерәк, ентеклерәк була, әммә уның ғүмере оҙон түгел. Шуға күрә хәҙер, арыйҙар дәүләтенән меңәр йыл үткәндән һуң, ул саҡта нимә һөйләнгәнен күҙ алдына килтереүе лә ауыр. Яҙма тарихтың ғүмере оҙон һәм ул беҙҙең көндәргә килеп етә алған. Мин бында «Авеста», «Регведа» яҙыуҙарын, Геродоттан башлап бүтән тарихсыларҙың яҙма тарихын күҙ уңында тотам. Тик яҙма тарихтың һүҙе һаран. Унда, нигеҙҙә, йәмғиәттең иң өҫкө ҡатламын һүрәтләү менән сикләнәләр. Парадат нәҫеле менән дә шул уҡ хәлде күҙәтергә мөмкин. Кем артынан кем хан, батша булған – яҙма тарих биргән бар мәғлүмәт шул. Күрәһең, уны яҙыусылар, тарих өсөн ошо етә, тип уйлағандарҙыр. Ысынлап та, дәүләт өсөн иң мөһим мәғлүмәт: кемдең нисәнсе йылдарҙа батша йә хан булыуы һәм шул йылдарҙа ниндәй һуғыштар үтеүе, кемдең кемде еңеүе (әйткәндәй, еңеүсе һәм еңелеүсе итеп боронғо тарихта айырым шәхес атала. Уның ғәскәре лә, дәүләте лә булмаған, бер үҙе генә һуғышҡан кеүек килеп сыға), бик һирәк кенә бүтән өлкәләрҙәге ҡаҙаныштар тел осона ғына эләгеп ҡала.

Арыйҙар дәүләтенең хандар теҙмәһе бар, йәмғиәттең бүтән өлкәләрендәге ваҡиғалар иҫкә алынмай тиерлек. Шуға күрә дәүләт һәм йәмғиәт ҡоролошо тураһындағы мәғлүмәттәрҙе беҙгә төрлө урынға сәселгән, өҙөк-йыртыҡ хәбәрҙәрҙән йыйырға тура килә.

Арыйҙар йәмғиәтенең өсөнсө ҡатламы – хәрбиҙәр, тинек. Хандың, ҡағандарҙың, рабаға менән рағандарҙың тыныс тормошон тәьмин иткән, теләһә ниндәй ваҡытта ла хәрби бурысты үтәргә әҙер торған һыбайлы ғәскәр һәм дәүләт сиген, илдәр араһындағы сиктәрҙең, ҡалалар, ауылдарҙың әйләнәһендә ҡарауыл

хеҙмəтен үтəгəн һəм, тышҡы дошман менəн ыҙғыш ҡупҡанда күмəклəп сафҡа баҫҡан йəйəүле ғəскəр. Беренсеһе **башҡорт** тип исемлəнгəн, икенсеһе – **ҡорт** тип.

**Башҡорт** һүҙе өс өлөштəн тора: «**Баш**», «**ҡор**» һəм «**т**». «**Ҡорт**» ике өлөштəн тора: «**ҡор**» һəм «**т**». Беренсе һəм икенсе осраҡта ла һүҙ яһалышы бер үк ысул менəн барған. «**Ҡор**» һүҙе боронғо һинд-европа телдəрендə ҡоралды кеше, хəрби кеше тигəн мəғəнəлə йөрөгəн. Быныӊ шулай икəнен күрер өсөн дəлилдəргə мөрəжəғəт итəйек.

1) **К, ҡ** өндəре тəүтелебеҙҙə кеше мəғəнəһен белдергəндер, тип фаразларға тулы нигеҙ бар, сөнки кеше һүҙенеӊ беренсе өнө **к**, төрлө яӊғыраште булһа ла, əлегə тиклем шул уҡ мəғəнəне белдерə. Мəҫəлəн, **kis** – ҡатын (Мəхмүт Ҡашғари һүҙлеге), **kisi** – кеше (Күл Тегин хөрмəтенə мəрмəргə яҙылған тарих. Христиан эраһыныӊ 732-се йылы. Хəҙерге Монгол Республикаһында табылған).

2) **Ҡор** һүҙе элек **кеше** мəғəнəһен төшөндөргəн. Мəҫəлəн, ҡорҙоӊ бер мəғəнəһе – йыйылып ултырған кешелəр рəүешендə, йəғни кешелəр йыйыны. **Ҡор башы** тигəндəн беҙ **күп кешегə** етəкселек итеүсене аӊлайбыҙ.

3) **К, ҡ** менəн башланған һəм «**кеше**» мəғəнəһен биреүсе һүҙҙəрҙе бүтəн телдəрҙə лə табабыҙ. Мəҫəлəн, **ҡол** төрки телдəрҙə «**раб**» мəғəнəһен бирə. **Koldus** венгр телендə «**хəйерсе**» булыр. **Кэмпер** үзбəктəрҙə «**əбей**»ҙе аӊлата. **Человек** (**ч** менəн **к** сиратлаша) урыҫ телендə – «**кеше**», украин телендə– «**ир**». **Cadet** – инглиздарҙа «**курсант**», **cad** инглизса «**тупаҫ кеше**», **caddy** – «**гольф уйнағанда хеҙмəтлəндереүсе кеше**», **caliph** – шулай уҡ инглизса «**хəлиф**», **candid** – шул ук телдə «**намыҫлы**» кеше, **canny** – «**хəйлəкəр**» кеше һ.б.

**Ҡор** һүҙенеӊ тəүге өнө кешене белдерə икəн, артабанғылары ниндəй мəғəнə төшөндөрə һуӊ? **Ор-ур** – «һуғыу, киҫеү, ҡырҡыу, һуҡҡыс, киҫкес, ҡырҡҡыс, ҡорал» мəғəнəһендə борон да йөрөгəн, əле лə был тамыр һүҙ шул уҡ мəғəнəне белдерə. Миҫалға, үҙебеҙҙеӊ телдə **ор** – «**һуҡ, ват**» бойороҡ ҡылымы бар, шулай уҡ **ор** «**əрлə**» мəғəнəһен дə бирə. Урыҫ телендəге **ура** ораны шулай уҡ «һуҡ, ват, емер»ҙе төшөндөрə. **Carhage** – инглизса «һуйыу», **carve** – «ҡырҡыу», «ит ҡырҡыу бысағы» тигəнде белдерə.

Башҡа төрлө итеп əйтһəк, **ор** – «**ҡорал**», «**киҫеү, ҡырҡыу, ватыу ҡоралы**» булыр ине. Əле лə беҙ ҡорал тигəндəн тап хəрби ҡоралды, киҫеү, ҡырҡыу, ватыу, үлтереү ҡоралын күҙ алдына килтерəбеҙ. Уйын ҡоралы, эш ҡоралы һүҙбəйлəнештəре тик тулы рəүештə генə, йəғни ике һүҙ бергə булғанда ғына «ҡорал»дан башҡа мəғəнəгə эйə.

Шулай итеп, **ҡор – ҡур** һүҙе бик борон «**ҡоралды кеше**» тигəн мəғəнəгə эйə булған тип əйтə алабыҙ.

**Ҡор – ҡоралды кеше** икəн, **т** ҡушылғас, күплек мəғəнəһенə эйə була. Боронғо һинд-иран телендə **т** күплек билдəһе булған. Ҡорт телендə əле лə шул уҡ мəғəнəлə файҙаланыла. Башҡортса ла бар ул ошо мəғəнəлəге өн. **Ат-тар** һүҙендəге **т** ялғауы шул бит инде.

Башҡорт һүҙен төрки тел нигеҙендə аӊлатыусылар **т** өнөн иран телдəренəн ингəн күплек, йыйыу ялғауы тип дөрөҫ күрһəтə, тик улар һүҙҙеӊ тəүге өлөшөн төрки нигеҙле, һуӊғыһын иран сығышлы тип уйлай. Бер һүҙҙе ике телле өлөшкə бүлеү дөрөҫ үк түгел.

**Ҡорт** һүҙе «**ҡоралды кешелəр**» мəғəнəһенə эйə, тимəк. Бүтəнсə əйтһəк, «**ғəскəр**» була.

**Башҡорт** һүҙендəге «баш» өлөшөн быҒаса аӊлатыусылар һəр саҡ «төп, иӊ төп, иӊ алғы, иӊ алдағы, иӊ мөһим» мəғəнəлəре менəн бəйлəй. «Баш бүре», «баш ҡортсо» варианттарыныӊ бөтəһендə лə шулай булды. Тик улар боронғо иран һəм əлеге ҡорт телдəрендə баш «яҡшы» мəғəнəһенə эйə икəнен иҫəпкə алмаған. Ə бит тап **ҡорт** һүҙе «**ғəскəр**» рəүешендə барлыҡҡа килгəн заманда **баш** «**яҡшы**»

мәғәнәһен төшөндөргән. Йәғни, бер үк телдә бер үк дәүерҙә өс өлөштән торған һүҙ тыуған – **башҡорт – «яҡшы ҡоралланған кешеләр»**, йә иһә – «**яҡшы ғәскәр**». Бөгөнгөсә аңлатһаҡ, «**гвардия**» булыр ине.

## *Атлы башҡорт*

*Башҡорт исемен йөрөтөү юғары дәрәжәләрҙең береһе булған, йәғни ир кеше ғүмерлек хәрби хеҙмәткә алынған. Хәрби башҡорттарҙың араһында, әлбиттә, уларҙың етәксеһе, сардары булған. Уның Ал башҡорт (йәғни алдағы башҡорт) тип аталыуы бар. Сит ил тарихсылары ошо сардарҙарҙы хан тип атаған да инде, йәғни башҡорттарҙың сардары – уларҙың ханы.*

Гвардия әле лә иң мөһим бурыстарҙы еренә еткереп үтәрҙәй өлгөлө ғәскәр өлөшө һанала, борон да ул шулай булғандыр. Башҡорттар гвардияһы ханды, уның ырыуҙарҙағы, ҡала, ауылдарҙағы вәкилдәре – ҡағандарҙы, дин башлығы Рағанды һаҡлаған, иң ауыр һәм иң яуаплы хәрби йомоштарҙы башҡарған. Әлбиттә, бының өсөн тейешле ҡорал һәм ҡорамал да кәрәккән. Беренсе сиратта уларға ат бирелергә тейеш. Ҡырағай атты ҡулға өйрәтеү урыны тураһында фараздар бик күп. Әммә, күпселек ғалимдарҙың таныуынса, был эш дала һәм урман-дала яҡтарында, ҡырағай ат күпләп үрсегән ерҙә, булған. Әлеге Башҡортостан – ошоға иң ҡулай төбәктәрҙең береһе. Бында ҡырағай йылҡы яңы эраның XVIII–XIX быуатына тиклем осраған һәм уның махсус атамаһы булған – тарпан. Ҡулға өйрәтелгән тарпандарҙан яу һәм хужалыҡ өсөн берҙәй үк яраҡлы махсус тоҡом барлыҡҡа килтерелгән – бөгөн ул башҡорт аты тип атала. Башҡорт атын яуға әҙер тотоу ҡыйбатҡа төшкән. Яҙманың башында әйтелгәнсә, һалымдың өстән бер өлөшө тиерлек хәрби ҡатламды аҫрауға киткән. Шуға күрә башҡорт гвардияһы күп була алмай. Дәүләткә яу килгәндә, эске ҡарауыл хеҙмәтен үтәүгә дөйөм ғәскәрҙең икенсе өлөшө файҙаланылғандыр, күрәһең. Былары ҡорттар булғандыр. Башҡорт гвардия булһа, ҡорт ғәскәр тигәнде төшөндөрә. Былары – йәйәүле ғәскәр. Ул шулай уҡ һәр ырыуҙа, ҡалала һәм ауылда тотолған. Башҡорттан айырмалы рәүештә, ҡорт хужалыҡ эшен башҡарған, хәрби хеҙмәтте сиратлап үтәгән, дәүләткә яу килгәндә генә бөтәһе лә ҡорал алған.

Шулай итеп, арый йәмғиәтендә хәрби ҡатлам башҡорттан һәм ҡорттан торған. Улар айырым ырыу булмайынса, һәр ырыуҙың бер өлөшөн тәшкил иткәндер, тип уйланыла. Шул фараз нигеҙендә генә Христос эраһының IX быуатына тиклем яҙма тарихта башҡорт атамаһының күренмәүе аңлашыла. Тарихҡа ырыу, дәүләт, хан исемдәре индерелгән. Ә йәмғиәттең өлөшө – ҡатламы айырып яҙылмаған. Шуға күрә Геродотта, башҡа тарихсылар әҫәрҙәрендә мәсәғүт, юрматы, ғәйнә, бөрйән бар, ә башҡорт – юҡ. IX быуат тирәһендә ул власҡа үҙе килә, башҡорт дәүләтен барлыҡҡа килтерә. Йәғни власты гвардия үҙ ҡулына ала һәм тарихҡа халыҡ исеме рәүешендә инә башлай.

Шул уҡ һүҙҙе ҡорттарға ҡарата ла әйтергә кәрәк. Үрҙә билдәләнеүенсә, Христос тыуғанға ҡәҙәр ике меңләп йыл әүәл арыйҙар Көньяҡ Уралдан Урта Азияға, Алғы Азияға, әлеге Иранға, Һиндостанға күсенә башлай. Салауат Ғәләмов яҙғанса, куру ырыуы, мәҫәлән, шулай күсенә. Куру эсендә, әлбиттә, башҡорт та, ҡорт та китә. Алғы Азияла төпләнгән куруҙың етәкселек даирәһенә бер заман башҡорт һәм ҡорт күтәрелә. Шунан улар ҙа айырылып (ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай), үҙҙәренең дәүләттәрен барлыҡҡа килтерә. Фарсы ҡултығында диңгеҙ буйындағы башкардтар (baskard) ошо рәүештә барлыҡҡа килгән халыҡ, тип фаразларға була. Уларҙың янында ҡорттарҙың күпләп йәшәүе лә шул фаразды раҫлай. Өҫтәүенә, уларҙың теле лә яҡын – иран теле, тик һөйләштәре башҡа.

Башҡорт исемле халыктың диңгеҙ буйына ла, Урал армыттарына ла, Алтай

яҡтарына ла (унда Башҡорт тауҙары бар) һибелеүе тап ошоноң менән аңлатыла. Бер исем йөрөткән халыҡ (ырыу), ғәҙәттә, бер тирәлә йәшәй, ә башҡорт исемен йөрөтөүселәрҙең төйәктәре меңәр саҡрым арауыҡта ята. Өҫтәүенә, бер үк исем йөрөткән, әммә төрлө урында йәшәгән бөгөнгө башҡорттар төрлө телдә һөйләшә, йәғни был халыҡтарҙың исеме бер (ҡатлам исеме), тик сығышы (ырыуы) бүтән.

## *Казактар кемдәр һуң?*

Башҡорт менән ҡорт арыйҙарҙың хәрби ҡатламы булһа, ошо күренеш тик уларға ғына хасмы, әллә бүтән дәүләттәрҙә лә шуға оҡшаш хәлдәр билдәлеме? Эйе, билдәле. Әйтергә кәрәк, Ер шарының ҡайһы ғына ҡитғаһында булмаһын, унда йәшәүсе кешеләр күбеһенсә берҙәй үк үҫеш юлы кисергән, бәлки, дәүерҙәре генә төрлөләр. Шуға күрә башҡорт яҙмышына оҡшашлыҡты бүтән тарафта ла эҙләргә һәм күрергә мөмкин. Әйтәйек, ҡол биләүсе Египет дәүләтенең һаҡсы-күҙәтсе мәмлүктәре етәкселегендә түңкәрелеш яһала, һәм улар үҙ батшалығын ҡора. Шул батшаларҙың береһе Саджар әл-Башҡурди булған, йәғни Египет ғәскәре сардарҙарының береһе батша дәрәжәһенә күтәрелә һәм ул үҙенең тамырын тап элекке башҡорт гвардияһы менән бәйләй.

Башҡорт исемле хандың ғәрәп тарихсыһы Әбү Хәмид әл Ғәрнәзиҙә сәйәхәте ваҡытында (1150 – 1153 й.й.) үҙ иленә һыйындырғаны билдәле. Урыҫтарҙың Ипат 1159-сы йылъяҙмаһында 20 меңлек ғәскәр сардары һәм урыҫ кенәзе Святослав Владимировичтың үгәй атаһы рәүешендә Башҡорт ханы иҫкә алына. Иран тарихсыһы Ғәрнәзи Башҡорт исемле хан хазарҙарҙың иң юғары дәрәжәле кешеһе булыуы тураһында яҙа.

Ошо ғына миҫалдар ҙа башҡорт атамаһын дәрәжәле кешеләр үҙҙәренә исем итеп алыуы тураһында һөйләй. Барыбыҙҙың белеүенсә, кешегә исем ике тапҡыр бирелеүе ихтимал. Беренсеһен ата-әсәһе бала тыуғас ҡуша, икенсеһен йә лаҡап, йә дәрәжә рәүешендә власть, ҡайһы берҙә халыҡ бирә. Башҡорт исемен йөрөтөү юғары дәрәжәләрҙең береһе булған, йәғни ир кеше ғүмерлек хәрби хеҙмәткә алынған. Хәрби башҡорттарҙың араһында, әлбиттә, уларҙың етәксеһе, сардары булған. Уның Ал башҡорт (йәғни алдағы башҡорт) тип аталыуы бар. Сит ил тарихсылары ошо сардарҙарҙы хан тип атаған да инде, йәғни башҡорттарҙың сардары – уларҙың ханы.

Шуға күрә хан, батша дәрәжәһендәге башҡорттарҙың бер үк дәүерҙә төрлө ерҙә байтаҡ булыуҙарына ғәжәпләнергә ярамай, сөнки башҡорт хәрби ҡатламы һәр ырыуҙа булған һәм уның һәр ерҙә сардары бар. Ҡайһы берәүҙәре хан (батша) тәхетенә ултырғас та сардарлыҡ дәрәжәһен ташламаған. Быға Египет батшаһы Саджар әл-Башҡурди миҫал.

Ошо әйтелгәндәр менән мин, йәмғиәттең хәрби ҡатламы йылдар үтә килә өҫтөнлөклө рәүешкә күтәрелә алған, йәғни үҙ исемен ырыуға, халыҡҡа, дәүләткә лә биргән һәм хәрби ҡатлам иң юғары дәрәжәгә лә өлгәшкән, тигән фекергә киләм. Был аңлашыла: кемдең ҡулында ҡорал, һуғыш тәжрибәһенә кем ныҡыраҡ өйрәнгән – шул көскә эйә. Бер урынға тупланған көс ҡасандыр үҙен күрһәтә. Хәрби көс тик әҙерлекле көс булып үҙ батшаһына тоғролоҡ һаҡлаһын өсөн аҡыллы ил башлыҡтары, хәрби уйындарҙы туҡтауһыҙ үткәреү менән бергә, әленән-әле ҙурмы-бәләкәйме һуғыш ҡуптарып торған. Икенсе төрлө әйтһәң, беләкте ярып килгән көстө, күтәрелгән йоҙроҡто ниндәйҙер файҙалы эшкә йүнәлтергә кәрәк, юғиһә ул үҙеңдең башыңа төшөүе ихтимал.

Тарихта бындай хәлдәр байтаҡ булған. Хәрби көстө тотона белмәгән батшаны шул уҡ хәрби көс атып бәрә лә үҙенең сардарын батша итә. Миҫал: Христос эраһының III – IX быуаттарында Хазар ҡағанының гвардияһы булып Аор исемле

иран-сармат ырыуы торғанлығы билдәле. Аор хәрби ҡатлам ғына түгел, ырыу ҙа. Хазар ханлығын яуларға бер генә аҙым ҡалған. Әйткәндәй, аор ырыуының боронғо атай-олатайҙары арсы исемен йөрөткән, йәғни арый кешеләре.

Шул уҡ III – IX быуаттарҙа Ҡабыр ырыуы Карпат уйһыулығы өсөн көрәштә мадьярҙарҙың һуғышын етәкләй. Ошо йәһәттән Рәсәй тарихында ныҡ эҙ ҡалдырған – казактар. Минеңсә, һүҙҙең сығышы «һайҙаҡ»тан. Һайҙаҡ – һыбайлы кеше. Казак та шул уҡ. Улар йәмғиәттә ярым хәрби, ярым крәҫтиән тормошо менән көн иткән ҡатлам рәүешендә барлыҡҡа килә. Тәүҙә улар Тын, Днепр буйындағы ерҙәрҙе һаҡлап йәшәһә, һуңғараҡ был бурыс Ырымбур, Урал, Себер казактарына ла йөкмәтелә. Еңел юлға баҫа батшалыҡ. Ер һөрөп, мал үрсетеп йәшәгән кешеләргә хәрбилекте лә йөкмәтә лә, аҙ-маҙ аҡса түләп, ил сиген һаҡларға ҡуша. Бының өсөн махсус ғәскәр тотһа – әйтәйек, Кавказдағы, Польша, Литва сигендәге кеүек – сығымдар унар тапҡыр күберәк булыр ине.

Казактар ҙа тик ятмай. Ил сиген тотоу менән бер рәттән, хужалыҡтарын ипләй (иҡтисад үҫә), үҙҙәрен шул ерҙең хужаһы итеп тоя башлайҙар һәм ҡайһы бер урында батша вәкилдәренә лә баш бирмәҫкә маташалар, йәғни ҡораллы хәрби көс үҙенең ҡеүәтен тоя һәм власты тулыһынса үҙ ҡулына алмаҡ була. С. Разин, Е. Пугачев етәкселегендәге казактар күтәрелеше ана шул инде. Казактар бер заман йә Рәсәйҙең тәхетенә менер, йә Рәсәйҙе бүлеп алып, Казак республикаһы төҙөр ине, өлгөрмәй ҡалдылар: 1917 йылғы түңкәрелеш ҡулдарына һуҡты.

Казактар тел, милләт, тормош берлеге кеүек һыҙаттар буйынса берләшмәне бит. Улар араһында бик күп милләт кешеһе бар ине: урыҫ, украин, татар, башҡорт, ҡалмаҡ, ҡаҙаҡ һ.б. Уларҙы хәрби ҡорал, хәрби бурыс һәм казактарға бирелгән өҫтөнлөк берләштерҙе. Тағы ла бер аҙҙан дәүләткә лә берләшерҙәр ине... Бәлки, булыр ҙа. Казак хәрәкәте яңынан ҡуба бит. Краснодар Казак республикаһы булмаҫ, тип кем әйтә ала?

Башҡорттар ҙа үҙҙәренең дәүләтен ҡорауға шул уҡ юл менән килә. Әммә уларҙың юлы оҙон, дәүере оҙайлы, ваҡиғалары күпкә ҡатмарлы. Шуға күрә уларҙың башҡортлоғо, йәғни ғәскәрилеге ҡанына һеңгән. Башҡорттоң милли характерын, уға ғына хас ыңғай йә кире һыҙаттарҙың асылын хәрбилек тамырынан эҙләргә кәрәк.

## *Үлһә үлер, бахыр булмаҫ*

Халыҡтың исеме уның есеменә тап килергә тейеш, тигәйнек, йәғни халыҡтың (милләттең) атамаһын әйтеү менән уның бер вәкиленең һыны күҙ алдына баҫа. Урыҫ кешеһе өсөн башҡорт, беренсе сиратта, – айбарланып дошманына ташланырға әҙер һәм ошо эшкә яуҙаштарын саҡырып ҡулын күккә сөйгән һыбайлы Салауат, әлбиттә. Ә Салауатты ошо рәүешле ҡорос һында кәүҙәләндереү – башҡорттоң меңәр йылдар буйына ҡанына һеңгән һыҙаттарын сағылдырыу тигән һүҙ. Сосланбәк Тавасиев батырыбыҙ һынына милләтте һыйҙырған. Мәҫәлән, ир тип әйтеү менән беҙ ҡасандыр ар (арый) булған, бик күп ҡатмарлы юл үткән осетинды (уларҙың телендә ир) күҙаллайбыҙ.

Башҡорт исеме «баш бүре», «баш ҡортсо» йә «баш ҡор» (табын) мәғәнәһендә, тиһәләр, уның милли характеры аңлашылмай. Әйтәйек, башҡорттоң хәрби батырлыҡҡа һәр саҡ әҙер икәнлеген күптәр белә. Урыҫтың яҙма тарихына инә башлағас, был һыҙат йыш телгә алына. Әйтәйек, Петр I батша етәкселегендәге шведҡа, төрөккә ҡаршы һуғыштарҙа айбар булып танылa, 1812–1814 йылдарҙа Наполеонға ҡаршы сыҡҡан «төньяҡ амурҙары» ғына ла ни тора. Граждандар һуғышы осоронда Муса Мортазиндың бер полкы, нисәмә дивизияға ҡаршы сығып, йөҙәрләгән саҡрымда фронтты бер үҙе тота. Петроград тирәһендә поляктарға ҡаршы һуғышта башҡорттар үҙҙәрен ҡурҡыу белмәҫ яугир итеп таныта. Икенсе

Бөтә донъя һуғышында инде башҡорттар күрһәткән батырлыҡҡа тиңләшерлек халыҡ табылмай.

Башҡорттоң хәрби батырлыҡҡа һәр саҡ әҙер тороуын Рәсәй армияһындағы һәр бер офицер белә һәм үҙенең ҡул аҫтында башҡорттарҙың хеҙмәт итеүен бик теләй.

Батырлыҡ – кешелек барлыҡҡа килгәне бирле аҡрынлап йыйылған, әммә үҙгәрмәй торған сифаттарҙың береһе ул. Батырлыҡтың киреһе ҡурҡаҡлыҡ – кеше характерының бер нисә һыҙаты ҡушылыуҙан барлыҡҡа килгән һымаҡ, батырлыҡ та яңғыҙ түгел һәм ул күп халыҡтарҙың телендә лә яҡынса берҙәй үк яңғырай һәм бер тирә мәғәнәгә эйә. Мәҫәлән: башҡортса – **батыр**, русса – **богатырь**, инглизса – **patriot**.

Батырлыҡтың йәнәш сифаты тоғролоҡ, һис шикһеҙ, һәр башҡортҡа хас. Иленә, еренә, сардарына, антына тоғро булмаған хәрби кешене, ғөмүмән, күҙ алдына килтереп булмай. Ә меңәр йыл буйы ғәскәри хеҙмәт алып барған башҡорттоң тоғролоғона берәү ҙә шик белдерә алмайҙыр.

Хәрби кешеләр араһында тоғролоҡ менән ҡуша тура һүҙлелек юғары баһалана. Был сифат та – башҡорттоң милли һыҙаттарының береһе. Ғәскәри кешенең тура һүҙле булмауы мөмкин түгел, сөнки яу ҡупҡанда ла йә һәр саҡ яуға әҙер тороу вазифаһын башҡарғанда ла уратып-суратып һөйләргә, һүҙ болғатырға, кинәйәләргә ваҡыт та, форсат та, мохтажлыҡ та юҡ. Шуға башҡорт тура һүҙле булырға күнеккән. Тура һүҙҙең әҙемтәһе яҡшылыҡ йә яманлыҡ булырын ул уйлап тормай, «күҙеңде сығарғансы» тураһын ярып әйтә. Тура һүҙлек гел генә һәйбәт тә бөтмәй, әммә ни эшләһен башҡорт, ҡанына һеңгән шул.

Алдай белмәү, ялғанлай алмау ҙа башҡорттоң милли сифаттарынан. Тура һүҙле булыу алдашмауҙы ла талап итә, сөнки тура һүҙ ҡыҫҡа була, ялған күп һүҙ һөйә. Хәрби кеше күп һөйләй алмай, яу ҡанундары унан шуны талап итә. Яуҙа ялғанлау үҙеңдең һәм һинең менән иңгә-иң дошманға ҡаршы торған ҡоралдаштарыңдың ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыу тигән һүҙ бит. Шуға күрә – дөрөҫлөк татлымы, әсеме – барыбер шуны ғына һөйләй башҡорт. Бәлки, тормошта ҡайһы берҙә ялғанлау ҙа, хәйләләү ҙә кәрәктер, төрлө хәл-ваҡиғалар була бит, әммә башҡорт быны эшләй алмай. Хәҡиҡәт үҙенең башын киҫеүгә килтерһә лә, шуны әйтәсәк ул.

Хәрби кеше өсөн ҡанун дәрәжәһенә күтәрелгән бер талап бар: үҙеңдекеләр алдында ялағайланма, дошман алдында бахырланма. Ошо сифат та халыҡтың ҡанына һеңгән. Дөрөҫ, дәрәжәне һанлау, юғары дәрәжә алдында үҙеңде түбәнсел тотоу ғәҙәте лә нык һеңгән уға. Әммә дәрәжәне хөрмәтләү менән ялағайланыу араһында айырма ҙур. Хәрби кеше дәрәжәне ололарға тейеш. Ҡәҙимге һыбай башҡорт төркөм етәксеһенә, быныһы өлкәнерәк командирға (әйткәндәй, был һүҙ бик күп халыҡ өсөн уртаҡ: урыҫса – командир, инглизса – commades), тегеһе ҡала, ырыу сардарына, һуңғыһы Ал башҡортҡа бер һүҙһеҙ буйһона һәм хөрмәтләй. Хәрби тәртип шуны талап итә. Ғәскәр кешеһе бойороҡто үтәмәһә ни булырын күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел. Шуға ла башҡорттар, айырыуса ирҙәр араһында, дәрәжәле кешене хөрмәтләү – иң нык тойғоларҙың береһе. Ҡатын-ҡыҙҙа был ул тиклем үк түгел, сөнки ҡатын тик иренә генә буйһона, ә ҡәҙимге башҡорт һәр сардарҙы тыңларға бурыслы. Был сифатты хәҙер ҙә, башҡорт хәрби хеҙмәттә тормаһа ла, күҙәтергә мөмкин. Кисә генә дәрәжә яғынан тиң булған икәүҙең береһе бөгөн дәрәжә йәһәтенән үрләһә, икенсеһе һис үпкәләүһеҙ, кәмһенеүһеҙ тегенең һүҙен һүҙ итә.

Әйткәнебеҙсә, икенсенең һүҙен өҫтөн күрә белеүҙең ялағайлыҡ менән һис тә уртаҡлығы юҡ. Шуға башҡорттар ялағайланыусыға сирҡанып, ә бахырға ерәнеп ҡарай. Дошман алдында бахырланыуҙы ул – иң түбән сифат, ә бахырҙы иң эшкинмәгән кеше тип белә. Шуға башҡорт үлһә үлер, әммә бахырланмаҫ. Бахырланыу – хәрби кеше өсөн иң ҙур хурлыҡ.

# Ҡорал – уйынсыҡ түгел

Байтаҡ йылдар әүәл, мин әле малай саҡта, ауылдың тиҫтәгә яҡын ире (шул иҫәптән минең атай) ылау-ылау булып район үҙәгенә судҡа барҙы. Үҙебеҙҙең ауыл кешеһе уғрылыҡта ғәйепләнә, ә ауылдаштары уны ғәйепләй ине. Ошондайыраҡ хәл күрше ауылда ла булды. Берәү урлашҡан, ә ауылдаштары судта уны яҡлап сығыш яһаған. Ошо ҡапма-ҡаршы күренеште ғүмер буйы онота алманым һәм уға аңлатма эҙләнем. Баҡһаң, уның тамыры йөҙәр йылдар тәрәнлегендә ята икән. Хәрби башҡорттарға көн дә: «Үҙ-ара ыҙғышмағыҙ, әгәр кем дә кем ғәйеп эш тапһа, был турала командирға еткерегеҙ, ә үҙегеҙ хөкөм ойоштормағыҙ», – тип тәҡрарлағандар. Ошо һабаҡ та уларҙың ҡанына һеңгән һәм, күрше-күләнендә саҡ ҡына ғәйеп күренһә, етәкселәргә әләкләй һалалар. Һүҙ йөрөтөргә өйрәтеүҙең сәбәбе ябай. Әгәр яугирҙар үҙ-ара мөнәсәбәт асыҡлай башлаһа, икеһененең береһе һис шикһеҙ үлә йә йәрәхәтләнә, сөнки икеһенең дә ҡулында ҡорал. Ҡоралы көйө үҙ-ара ыҙғышырға ярамай. Ҡорал – уйынсыҡ түгел. Ана ҡайҙа ята әләкләшеүҙең тамыры.

Ә күрше ауылда (сыуаш ауылы) бындай ғәҙәт юҡ. Шуға береһе урлашһа, икенсеһе күрмәмешкә һалыша, сөнки иртәгә үҙенең урлашыуы бар. Ә башҡортта уғрылыҡ, кеше әйберенә тейеү ғәҙәткә түгел, уйға ла инеп сыҡмай торғайны. Уҙған быуаттың урталарында ғына әле ишек йоҙаҡлау хурлыҡ һаналды.

Башҡорттоң хәрби хеҙмәт менән бәйле бүтәндәрҙән айырылып торған һыҙаттары байтаҡ. Шуларҙың йәнә бер нисәһен һанайыҡ. Бер ҡатлылыҡ, ныҡышмаллыҡ, мәҫәлән.

Бер ҡатлылыҡты икенсе төрлө тәүге ишеткән мәғлүмәткә тулыһынса ышаныу тип аңларға мөмкин. Уның тамыры ла шул уҡ ғәскәрилектә ята, сөнки яугирҙарға мәғлүмәт һәр саҡ бойороҡ рәүешендә килгән, ә бойороҡтоң дөрөҫлөккә тап килмәүе мөмкин түгел, шуға уны тикшереп тороу бер башҡорттоң да башына инмәй.

Ныҡышмаллыҡ та – меңәр йыл буйы тәрбиәләнгән сифат. Бойороҡ бирелгән икән, яугир уны теләһә ниндәй шарттарҙа ла үтәргә бурыслы. Милли дәрәжәгә күтәрелгән был һыҙатты күп яҙыусы билдәләй. «Башкирия в русской литературе» йыйынтығына ингән һәр икенсе әҫәрҙә тиерлек шуны күрәбеҙ.

Холоҡ, ғәҙәт һыҙаттарын билдәләүсе йөҙәр йыл буйы тәрбиәләнгән йәмғиәт тәртиптәре, һәр кем буйһонорға тейеш ҡанундар бар. Уларҙың бөтәһе лә (боронғолары) башҡорттарҙың хәрбилеге менән бәйле.

Мәҫәлән, йәмғиәткә етәкселек иткән һәр вазифалы кешенең дә һайланып ҡуйылыуы һәм һайланғас уға бар йәмәғәтселектең дә һис ҡаршылыҡһыҙ буйһоноуы. Башҡорттар хәрби ҡатлам булып барлыҡҡа килгән мәлдә уларҙың һәр сардары үҙҙәре араһынан һайлап ҡуйылған. Шуға улар әле лә һайлауға бик ҙур әһәмиәт бирә, ә һайланмайынса билдәләнеп ҡуйылған вазифа биләүсегә ышанмайыраҡ ҡарай.

Һайлау тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы бер мөһим мәсьәләгә туҡталып китәйек. Урта быуаттарҙағы башҡорт йәмғиәтендә, үҙҙәренә баш итеп хан ҡуйырға кәрәк булһа, ситкә мөрәжәғәт иткәндәр. Йыш ҡына ханды ҡарағалпаҡтан алып ҡайталар. Ҡараһаҡал, Морат хандар менән шулай булған. Күсем нәҫелдәренән хандың килерен көткәндәр бер ваҡыт. Әммә үҙҙәре араһынан – әйтәйек, ырыу башлыҡтары, тархандар, батырҙар араһынан хан ҡуйыу осрағы юҡ.

Бының аңлатмаһы ла хәрбилеккә барып тоташа. Бик борондан башҡорттар (хәрбиҙәр) араһынан тик сардарҙар ғына һайланған, ә хандар менән ҡағандар – хан нәҫеленән, рабағалар динселәр ҡатламынан ғына ҡуйылған. Ҡанундарға

һис ҡаршылыҡһыҙ буйһонған башҡорттар ханды үҙҙәре араһынан эҙләүҙе баштарына ла индермәгән.

Боронғо йәмғиәттәге тәртип башҡорттар араһында меңәр йыл буйы һаҡлана һәм шул сифаттар хәҙер ҙә халыҡтың милли сифатын билдәләй. Элекке арыйҙар йәмғиәтендә башҡорттар тик хәрби эште башҡарған. Сауҙа, йүнселлек, тегебыл кәрәк-яраҡты етештереүҙе ойоштороу башҡортҡа хас булмаған.

Ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү тәртибенең дә тап ошо хәрби ҡатлам, һуңынан аҫабалыҡҡа барып тоташыуы бик әһәмиәтле. Кәләшлеккә ҡыҙ һораҡкан саҡта егет яғы уның ете быуынын өйрәнгән. Башҡортта бүтән ҡәүемдән ҡыҙ алыу тыйылған. Быныһы – боронғо йәмғиәт ҡатламының талабы. Хан балаһы кәләште – тик хандар, ҡағандар, раған улы – тик дин әһелдәре ҡыҙынан, башҡорт балаһы тик башҡорттан алырға, ҡанды бутамаҫҡа бурыслы. Бүтәндәр генә теләһә нәмә эшләһә лә яраған. Шуға күрә бер ырыуҙыҡылар икенсеһенекенән кәләш әйттергән, әммә ҡыҙ нәҫеленең «үҙҙәренеке» булыуын ентекле тикшергән. Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романында бер күренеш тап ошоға арнала.

## *Һығымта*

Сәсән үҙ алдына: «Христос эраһының IX быуатына тиклем ни өсөн яҙма тарихта башҡорт исеме осрамай, шул уҡ ваҡытта был атама ике ҡитғаның төрлө төбәгендә яңғырай һуң?» – тип һорау ҡуйғайны. Аҙмы-күпме рәүештә яуап тапты, буғай. Тимәк:

1) Башҡорт исеме бынан мең йылдар элек, әлеге Урал армыттарында арыйҙар көн күргән дәүерҙә, уларҙың дәүләте Иран менән Туранға бүленмәҫ элек, йәғни кәмендә бынан 4 – 5 мең йыл элек, ырыу, ер-урын, һыу, кейек исеме түгел, ә арыйҙар йәмғиәтенең хәрбиҙәр ҡатламын атау һүҙе булып барлыҡҡа килгән. Ул өс өлөштән – **баш-ҡор-т** бүлемдәренән тора һәм «яҡшы ғәскәр» төшөнсәһен бирә. Башҡорт һүҙендә «баш бүре», «баш ҡорт-со», баш+ҡор» (табын) мәғәнәләре юҡ.

2) Башҡорт хәрби ҡатламы яйлап үҙ йәмғиәтендә иң йоғонтоло дәрәжәне һәм власты ҡулына алған һәм IX быуатта инде Уралда йәшәгән ырыуҙарҙың берләшмәһен тәшкил иткән.

3) Бөгөнгө башҡорттарҙың милли һыҙаттары халыҡтың исеме аша асыла, йәғни исеме – есеменә, есеме – исеменә тап килә. 922 йылда ғәрәп Ибн-Фаҙлан осраҡкан башҡорттар ысынлап та ҡурҡыу белмәҫ, уҫал, ғәйәр һәм ҡыйыу кешеләр булған.

Хәрби зат, ғәскәри ҡатлам бурысы уларҙан шуны талап иткән. Ибн-Фаҙлан ысын башҡорттарға юлыҡҡан, тиергә кәрәк.

4) Башҡорт атамаһын Европа һәм Азия ҡитғаларының төрлө төбәктәрендә (Иранда, Уралда, Алтайҙа) кеше исеме булараҡ бик борондан осратырға мөмкин. Батша, хандар Башҡорт исемен йөрөткән. Тимәк, ул – оло дәрәжә, юғары бәҫ, абруй биргән исем.

5) Башҡорт булыу борон-борондан данлы, шанлы, ныҡ яуаплы һәм мәртәбәле һаналған. Башҡортлоҡ ҙур хоҡуҡтар (ер хужаһы) менән ҡуша оло бурыс (йорт, ырыу, ил, дәүләт һаҡлау) йөкмәтә. Әле лә ҡайһы берәүҙәрҙең башҡорт булып китергә ынтылыуының тәрән мәғәнәһе бар.

6) Башҡорт ғәскәри кеше булып тыуған һәм әле лә, ҡулында ҡорал йөрөтмәһә лә, хәрбиҙәр сафында ҡала.

*(Аҙағы киләһе һанда)*



**Фәрит ӘХМӘТОВ**

## *Хоҙай ҡушҡан*

*Еремдең бер гөлсәскәһе генә*
*Ситән буйындағы әрем дә.*
*Ул да, минең кеүек, гел наҙланып*
*Башын эйә килгән һәр көнгә.*

*Көн бик ҡырын ҡарап ҡуя быға,*
*Әйтерһең, ул башҡа төрлөрәк.*
*Хатта бер аҙ миңә ғәжәпләнә,*
*Күрә бер аҙ мине тилерәк.*

*Әммә мөхәббәтем ҡояшлыраҡ,*
*Хыяллыраҡ инде, баллыраҡ.*
*Һөйгәндәрҙе һөйәм, һөймәгәнгә*
*Әрем кеүек торам ялбырап.*

*Шағир тигән исем таҡтым шул мин,*
*Үҙ Хоҙайым шулай ҡушҡандыр.*
*Кем йөрәге ниндәй ҡоштан булған,*
*Минең йөрәк былбыл ҡоштандыр.*

*Фәрит Әхмәтов (1949) Стәрлебаш районының Мортаҙа ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар колхозда эшләй, әле хаҡлы ялда, Ҡуғанаҡбаш ауылында йәшәй. «Дилбегә» тигән шиғри йыйынтыҡ авторы.*

*Донъям, һиңә мең-мең рәхмәт инде,*
*Шәп иткәнһең мине яралтып.*
*Кем һуң һине тупаҫ, гәмһеҙҙәрҙән*
*Йөрөр ине икән таҙартып.*

## Мин аҫаба

*Үҙ телемдең татын тоямын мин,*
*Телем моңло, телем таҫыллы.*
*Ер йөҙөндә башҡа ишетмәнем*
*Һинән бөйөк, һинән аҫылды.*

*Атлап киләм гүмер юлдарымдан,*
*Рухыма көс табып телемдән.*
*Йәнем менән бергә туған телем*
*Яралған ул бер үк телемдән.*

*Телем барҙа бөйөк халҡым да бар,*
*Мин матурмын, мин бит батыр ҙа.*
*Йөрәгемдең ҡайнар ялҡыны ла –*
*Халҡым менән бергә балҡырға.*

*Үҙ телемдә мине ишетәләр,*
*Эйәмен мин тейеш баһаға.*
*Туған телдә һайрай һандуғасым,*
*Шуға ла мин – ерле аҫаба.*

## Ҡул болғайым ҡоштарға

*Ҡар күҙе юҡ, ҡоштар ҡышҡа әҙер,*
*Күгәрсендәр уйнай һауала.*
*Күк бик түбән төшкән болот менән,*
*Ҡояш нуры фәҡәт дауаға.*

*Көҙгө көндәр гәмһеҙ, йәнһеҙ төҫлө,*
*Матурлыҡты иҙә, йәлләмәй –*
*Берсә теләр-теләмәйсә генә*
*Теҙген ысҡындырған мәлдә йәй.*

*Көҙ көнө бит күңел һарғайғандай,*
*Ҡараштарға һағыш талғанда.*
*Ҡоштар менән осҡан күңелдәрҙә*
*Урын ҡалмай икән ялғанға.*

*Бер көҙөнән ғүмер уҙып бара,*
*Ынтыламы шашып ҡыштарға?*
*Һауаларға ҡарап ҡул болғайым*
*Сәләм әйтеп осҡан ҡоштарға.*

## Уйҙарымдан тамды

*Ҡыҙ сәскәләй, егет саҡма*
*Сағыр саптар бит Ул.*
*Зөбәржәт ҡашлы алтын йөҙөк*
*Кеүек саҡтар бит ул.*

*Ҡайғы белмәç уйҙарымды*
*Баллы кәрәҙ итеп,*
*Бал ҡорттары үрә төçлө,*
*Йәшлегемә китеп.*

*Йәшлегемдең татлы балы*
*Йөрәгемдә ҡалды.*
*Ултырған бал тәме булып*
*Уйҙарымдан тамды.*

*Хәтеремә яҙып ҡуйҙым*
*Йәшлегемде баллап.*
*Ҡалған ғүмер әллә ҡайҙа,*
*Ялғап булмай, ялғап.*

## Түҙ

*Бик сығынсы яҙмыш, йөрәк һыҙлай,*
*Әллә һағыш, әллә моң тулған.*
*Тороп ҡалмаç микән минән улар,*
*Бер көсәнеп алға ынтылһам?*

*Түҙ, йөрәгем, бәлки, бөгөн таңда*
*Ҡарап яҙмыш һиңә бер көлөр.*
*Йә ул кистә күрер, айлы кистә*
*Ай нурҙары кеүек бөркөлөр.*

*Бер минутҡа күтәр ауырлыҡты,*
*Тик бер аҙға тапсы сабырлыҡ.*
*Йәшәү өсөн уны бар өмөттән,*
*Бар ҡайғылар аша табырлыҡ.*

*Ғүмер бирәү, йәшәү бирәү генә,*
*Яҙмыш та бит бирәү – тағын юҡ.*

## *Ағастарға ҡарап*

*Яңы күлдәк кейгән ҡунаҡ һымаҡ,*
*Яҙын япраҡ яра ағастар.*
*Ағастар ҙа кешеләргә оҡшаш,*
*Уларҙа ла моңло тараф бар.*

*Ишеттермәй генә ғүмер шауын,*
*Яҙ ҡояшы буйға үҫтерә.*
*Йәй һауаһы ҡосоп нығыта ла*
*Көҙ ялҡыны яңы көс бирә.*

*Бер осорҙа бәүелтә лә тына*
*Ғүмер сәхрәһенең елдәре.*
*Ағастарға ҡарап ултырамын:*
*Уларҙың да шундай бер мәле.*

## *Ашыҡтым*

*Ашыҡтым шул, ғүмер буйы көттөм*
*Минуттарымдың тиҙ үткәнен.*
*Йүгерҙем мин ваҡыттарға ҡаршы,*
*Үткәнен дә уның көтмәнем.*

*Иртән торһам, кис булғанын көттөм,*
*Таңдарыма, белһәң, ярһыуым.*
*Түҙемһеҙлек менән яуҙырҙым ҡар,*
*Эй сабырһыҙ көттөм ҡар һыуын.*

*Ғүмер үттем, ғүмер иттем, тимен,*
*Үткәнен һис уның һиҙмәнем.*
*Әллә ваҡыттарҙы һиҙмәнем мин,*
*Әллә һинме, ғүмерем, түҙмәнең..*

*Ҡай таңдарҙа тороп ҡалдың минән,*
*Аҙаштыңмы әллә кистәрҙә?*
*Төшөп ҡалдыңмы һин, юғалдыңмы*
*Ут, һыуҙарым аша кискәндә?*

*Таба алмам инде, ерләһәм дә.*
*Аҡты ғүмер, күпме яр сыҡтым.*
*Көтөп алып сыҡтым, көсөм һалып,*
*Миңә булған ғүмер-ярсыҡтың.*



**Таңсулпан РӘСҮЛ**

## *Өй икмәге*

*Бала саҡҡа ҡайттым бөгөн ҡабат,*
*Ҡабат ҡайттым инде, ҙурайғас;*
*Тыуған өйөм хәтирәһе менән*
*Өй икмәген тәмләп ашағас.*

*Таныш еҫе – өй икмәге еҫе,*
*Күҙ алдында баҫыу-ҡырҙарым.*
*Мәтрүшкәнең башын һыйпап елде*
*Елдәремдең шаян йырҙары.*

*Гөбөрҙәтеп күнәктәргә төшкән*
*Йылы һөттөң тоям тәмдәрен.*
*Аҡ томандар аша ҡарағайҙар*
*Һорай кеүек һағыныу хәлдәрем.*

*Ҡаяларҙың һынмаҫ рухы ла бар,*
*Шишмәләрҙең сылтыр йәне лә –*
*Бөтәһе лә һыйған уртымдағы*
*Әсәй бешергән икмәк тәмендә.*

---

*Таңсулпан Рәсүл (Баймырҙина Таңсулпан Рәсүл ҡыҙы, 1989) Бөрйән районының Иҫке Мөсәт ауылынан. Баймаҡ ауыл хужалығы техникумын тамамлаған. Әлеге ваҡытта М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетында уҡый.*

## Үпкәләмә!

*Ә мин әйтһәм, уйлап тормай әйтәм,*
*Йәшен тиҙлеге яра мейене.*
*Сөнки ул һүҙ алдан йөрәгемдә*
*Тормош булып ҡайнап ирене.*

*Шуға әйтәм – ни бар йөрәгемдә –*
*Һәр кешегә төбәп, уҡ һымаҡ.*
*Мин әйткәнгә, зинһар, үпкәләмә,*
*Дөрөҫлөгө ҡалҡыр һуңыраҡ.*

*Намыҫлылар, гәҙел, эскерһеҙҙәр*
*Килешерҙәр тура һүҙ менән.*
*Агас телле, моңһоҙ дуҫтар ғына*
*Дошман яһап ҡуя тиҙ минән.*

***

*Кәмһетелгәндәр беҙ: тыуғас та*
*Аҡ биләүгә төрөп һалғандар,*
*Тик шатлыҡтан торһон тормошоң, тип,*
*Араҡыһын эсеп-йығандар.*

*Әйтерһең дә, кендек өҙгән ерҙән*
*Ал ҡан түгел, араҡы атылған.*
*Йолаһы шул – тәпәй йыуабыҙ тип,*
*Сабый хаҡы ыуға мансылған.*

## Яйһыҙ яҙмыш

*Әсәй, ниңә мине тыуғас та*
*Аҡ биләүгә төрөп һалғандар?*
*Иламайса тыуған балаға*
*Яйһыҙ яҙмыш ниңә яҙғандар?*

*Аҡ биләүҙең йәнле эскәйендә*
*Өлөшһөҙ бер сабый ятҡанын,*
*Әле килеп, әсәй, күрәһеңдер*
*Тормош мине һуғып-ҡаҡҡанын.*

*Белһәң ине тағы аяҙ көндә*
*Ҡара буран мине йотҡанын;*
*Мин табынған изге кешеләрҙең*
*Зәһәр йылан кеүек саҡҡанын.*

*Беләһеңдер, тимен, мин тыуғас та,*
*Ҡайғы еле килеп ҡаҡҡанын,*
*Шул ҡайғыны еңер өсөн бөгөн*
*Ете ҡатлы тирҙәр ҡатҡанын.*

*Бөтөнләйгә фәрештәләр әллә*
*Ташлап китте микән – белмәйем.*
*Иламайса тыуған өсөн микән,*
*Хәҙер килеп өнһөҙ сеңләйем.*

*Күрәһеңдер кемдер яңлышҡанға*
*Икенсенең йәше аҡҡанын.*
*Аҡ биләүле сабый булғым килә,*
*Фәрештәләр ҡабат һаҡлаһын.*

## Иланым мин

*Иламаным бөгөн хәбәр килгәс,*
*Һөйгән йәрең башҡа, тигәнгә.*
*Иламаным йәлләп урамдарҙа*
*Хәйерсене тәүгә күргәнгә.*

*Иламаным һуйыл сыбыҡ килеп*
*Һыҙырып алғас сибек тәнемде.*
*Ни күрһәм дә, йөрәк таштай ҡатҡан,*
*Һыҡтанманым йәлләп үҙемде.*

*Иламаным, сәбәп булғанда ла,*
*Яҙмыш-ҡарғыш зәһәр көлгәндә.*
*Ятып ҡына илар саҡтарҙа ла,*
*Йәшәүҙәрҙән хатта биҙгәндә.*
*... Әммә иланым мин өнһөҙ генә*
*Атаҡайым төшкә ингәндә.*

## ҺҮҘ ҺӘМ НУР ҮЛСӘМЕ

Байрамдарҙа атылған салютҡа битараф ҡалып булмай. Төрлө төҫтә балҡып һибелгән осҡон көлтәһе иғтибарҙы йәлеп итмәҫлек тә түгел шул. Тик улар күҙ асып йомғансы һүнә, юҡҡа сыға. Кеше күңеленән һибелгән яҡтылыҡ нурҙарын йәнһеҙ саҡҡылар менән сағыштырыу мөмкинме һуң? Беҙҙең һәр беребеҙҙең йәненә, асылына Хаҡ Тәғәлә һүнмәҫ йәшәү нуры бүләк иткән, тик уны күңел күҙе генә күрә ала. Шулай ҙа был нур көлтәһен тоймаған кеше юҡтыр, сөнки тормош, йәшәү, ниндәй генә ҡатмарлыҡтар тыумаһын, – яҡтылыҡҡа ынтылыу. Әлеге сағыштырыу шағирә Тамара Искәндәриәнең «Ҡулдар» тигән шиғырын уҡығас күҙ алдына килде:

*Ситтә түгел, сиктәһең бит,*
*Нурлы балам, нур көлтәһе.*
*Тамырлы ла ҡулдарыңда*
*Һиңә бөйөк ғәм илтәһе.*

Тамара тигән исемдә лә «тамыр» мәғәнәһе бар, әҙибә үҙе «тимер» һүҙенә яҡынлығы барлығын да әйтә. Һәр хәлдә, ул исеменең бүтән дин тотҡан халыҡтарҙан алынғанлығын кире ҡаға. Шулай тип әйтергә ерлек бар. Ҡартатаһы Әйүп мулла исем атағанда ейәнсәре ҡолағына: «Тәмәрә!» – тип ҡысҡыра. Ҡөрьәнде асып, «Бәҡара» сүрәһенең 158-се аятына күҙ һалһаҡ, унда ла «тәмәра» һүҙе барлығын күрербеҙ, ул бәләкәй хажды, йәғни ғөмрә ҡылыуҙы аңлата. Тамара Искәндәриә – бик мәғәнәле исем эйәһе. Ә һүҙҙәрҙе мәғәнәле итеү оҫталығы әҙибәгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән оло бер бүләктер.

### Һыу инәһе

Тамара Искәндәриәнең ижады тураһындағы һүҙемде «Һыу инәһе» тип аталған поэмаһынан башлағым килә.

*Яр буйы.*
*Һыуҙа таш ҡойона,*
*Һәр яңы тулҡынға һыйына.*
*Әллә күк уйының янсығы,*
*Әллә күк түйының ярсығы,*
*Әллә, тим, Йыһандың илсеһе,*
*Әллә сал быуаттың инсеһе?*

Күктән уҡтай атылып, янып төшкән исемһеҙ есем тураһында бара һүҙ. Ерһыу уны белмәй. Ул һыу яҡтылығына – диңгеҙме ул, әллә йылғамы – бәреп инә һәм бынан ары һыу ҙа ҡояш һәм ай нурында иркәләнеүсе, ел-дауылда тулҡындар менән шаярыусы сығанаҡ ҡына булып ҡалмаясаҡ. Таш хәләтендәге ошо ят есем тыштан, өҫтән бәүелсәк-сайпылсаҡ булып күренгән, ә төптән, тәрәндән инде мәңге һил ҡалған тормошҡа ҡырҡа үҙгәреш индерәсәк. Ут-тамсы унда быға саҡлы таныш булмаған хистәрҙе уятасаҡ. Бында автор тәү ата төшөнсәһен бына шулай бик үҙенсәлекле итеп сағылдыра. Меңәр-меңәр йылдар үҙ барлығына ғына кинәнгән дарья күңел тыныслығын юя. Дөрләп-янып түбәнгә атылған был есемдең кемлеге йәки нимәлеге мөһим түгел, ләкин уның ер таштарынан да ҡатыраҡ булыуы мәғлүм.

Ташҡа әүерелгән яҙмыш. Кем булған ул элек: йондоҙмо, нурмы? Ни өсөн көйрәлеү-көйәләнеү, ҡыйралыу-сарпаҡланыу

дәрәжәһе-дәүмәленән дә үтеп киткән? Ә, бәлки, беҙ төшөнә алмаҫ ҡатылыҡтар өсөн дә хистәр тулҡыны ят түгелдер? Автор тасуирлаған һаран юлдарҙа уның фажиғәһен дә, иңрәүҙәрен дә, үткәндәге тетрәнеүҙәрен дә, хатта ки һыҙланыулы бөйөклөгөн дә тойорбоҙ.

*Ул өнһөҙ.*
*Ете ҡат күктәрҙә*
*Яныуы, көйрәүе – иҫендә,*
*Шәмәхә тәнендә семәрҙәр*
*Шуъалыр ут-ялҡын төҫөндә,*
*Иҫендә…*

Йыһанға һыймаған метеорит хәҙер инде тулҡындар эсендә үҙ тыныслығын тапҡан. Бында уның бер кеме лә юҡ. Гәрсә тойғоларҙы, тулҡындарҙы, ялҡындарҙы инҡар итеүсе ташбаҡа уны үҙенең әшнәһе итергә тырыша. Сөнки уның да бит йөрәге, хатта үҙе инеп йәшеренгән донъяһы – таштан.

*Һин дә Таш,*
*Мин дә таш.*
*Был донъя*
*Алдатҡыс бер биҙәктер тоташ…*

Бәлки, Таш тигәнебеҙ, Йыһан уғы булып, мөхәббәт осҡонон ергә килтереүселер? Бәлки, яуапһыҙ һөйөүҙән йә иһә хыянаттан көлгә түгел, ә ташҡа әүерелгән бәғерҙер… Һәр хәлдә, был есем һыуҙы әлегәсә татымаған яңы бер кисереш менән тулҡынландыра.

Башҡорт халыҡ ижадында киң танылыу алған Һыу инәһе – ҡатмарлы образдарҙың береһе. Ул, берсә, хис-тойғоһо булмаған яуызлыҡ сығанағы – кешеләрҙе упҡынға батырыусы, берсә, киҫкен, хәл иткес бер мәлдә тылсым көсө менән ярҙам ҡулы һуҙыусы булып та тасуирлана. Боронғо инаныуҙар, мәжүсилек дәүеренә барып тоташҡан ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларындағы был сағыу образға, хәлбүки, ижад кешеләре һис ҡасан да битараф була алмаған. Рәүеше бүтәнсәрәк булһа ла, ул бит һәр ҡатынҡыҙҙың тиңдәше булып ҡала. Асып бөтөп булмаҫ бер серлелеге менән йәлеп итәлер. Ә бына ул үҙе ҡабул итәме кешелек донъяһын – беҙ быныһын тәғәйен асыҡ белмәйбеҙ. Шуныһы бәхәсһеҙ: һыу батшалығы әҙәм балаһы толҡаланыр, төйәкләнер урын түгел. Тик йөрәк тибеше, ярһыу хистәре тулҡындар булып шаулап бәргеләнгән, урғылған Һыу инәһе быны аңлар хәлдәме? Оло мөхәббәтте йөрөтөүсе алтын тәңкәле өнһөҙ ҡыҙҙың ошо кисерештәрен «Һыу инәһе» поэмаһы аша һеҙ ҙә асыҡ тойорһоғоҙ.

*Тәңкәләрҙе таъайым мин тәнемә.*
*Күмеләйем йылъаларҙың ләменә.*
*Ай яҡтыһын баҫма итеп ҡарармын,*
*Ай нурында һыулы сәсем тарармын.*

Сөңгөлдәргә сумып-сымып ала Һыу инәһе. Әллә ниндәй тәрәнлектә яңғырайсаҡ уның иңрәү-һөрәне. Хәйер, тәрәнлектә яңғырау юҡтыр ҙа! Тәрәнлек ауаҙды, киреһенсә, йота, һәм Һыу инәһенең дә саҡырыуы бары тик шыбырлау, һаҡ мөңгөрләү булып, үҙ ҡолағын ғына иркәләр…

*Ингән һайын һалҡынырак һыуҙар,*
*Ингән һайын тәрән…*

Һыу киңлеген үҙенеке итергә теләй Йыһандың бер ут ташы. Эйе, тулҡындар батшалығында ул бөтәһе лә була алыр ине: хаким да, иң һөйөклө йәр ҙә, йәлләд тә, тылсым эйәһе лә. Ләкин тәүге ҡат ер йөҙөнә, һыу өҫтөнә баҡҡан һәм шаҡ ҡатҡан таш үҙ көсөнә ышанмай, шикләнә, сөнки был донъя уныҡы түгел. Ҡайнар һәм саф хистәрен Һыу инәһе аҡ быу итеп күккә олғаштыра. Аҡ быу – күңел юғарылығы. Мөхәббәт кешене яңы үрҙәргә алып менеү көсөнә эйә. Һыу инәһенең саф хистәре күктәрҙе тетрәтер ут көлтәһенә әйләнер.

*Ете күктәр аръяғында*
*Ҡабат йәшен булып тыу.*
*Ете донъя серен сисеп,*
*Ҡабат йәшем булып тыу!*

Күҙ йәштәре – тере тамсылар. Бәлки, улар хәҙер йондоҙ сағыулығы менән

яналыр. Сөнки улар Һыу инәһен Йыһан менән ҡауыштырыр көскә эйә.

*Һыу өҫтө – ялтыр тулҡын,*
*Һыу аҫты – ҡара упҡын.*
*Ялтыр тулҡынында йөҙәм,*
*Упҡыны йәнде өҙә.*

Һыу донъяһы – әҙәм балаһы өсөн асылып бөтмәҫ сер, уның йәшәү сығанағы ла – һыу. Кеше йылға-күлен, диңгеҙен данлаған, уларға шиғри юлдарын арнаған, уларҙан тыш ижады юҡ. Ә Һыу инәһе үҙе йәшәгән, көн иткән бишеген нисек данлай икән? Диңгеҙенә арнап моңло йырҙар сығарамы? Бәлки, уның йөрәк йыры фәҡәт ер кешеһенә генә арналғандыр? Тамсынан көл тамғанда бүтән төрлө бер уй килмәй күңелгә… Эйе, иғтибарлы уҡыусы поэмалағы был юлдарға иғтибар итмәй ҡалмаҫ. Берәй ғашиҡ йән һыуҙы усына алғанда ла ошо юлдарҙы иҫенә төшөрөр:

*Һыуҙа ла көл була,*
*Күр ҙә тор,*
*Һәр тамсының көлө ҡойолор.*

Хәҡиҡәт шунда: көлгә әйләнер өсөн иң башта ялҡын кәрәк. Һыу инәһенең мөхәббәт хисе шундай ялҡынды хәтерләтә, һәм ул таштарҙы иретмәҫ тимә…

Ер улын көткән Һыу инәһенең яҙмышы, – әлбиттә, өнһөҙлөк. Унда өмөткә урын да юҡ. Ләкин ҡойроҡло, тәңкәле ярым балыҡ булһа ла, ул да бит йән эйәһе. Был алтын тәңкәле зат әҙәм затына ҡарағанда ла көслөрәк яналыр. Һәр хәлдә, шағирә уны тап шулай тасуирлай. Һыу инәһе тигән боронғо исемгә яңы «һулыш» бирә автор. Һыуҙың, тулҡындарҙың ғына түгел, ә тере йәндең инәһе булғыһы килгәнлегенә ишара яһалғандай… Инә һүҙенең төп асылы шунда ла баһа.

Мөхәббәт өсөн тел кәрәкмәй. Һыу инәһе ер улының күңеленә өндәшә. Быны Тамара шулай уҡ уңышлы хәл итә. Ир кеше тулҡындарҙың ярһыуынан ишетә был рух дауын һәм шулай тип яуап бирә:

*Һин бит башҡа үлсәмдәрҙә –*
*Саҡыраһың сик арҡылы.*
*Үтә генә күренһә лә,*
*Уны үтер юҡ аҡылым.*

Һыу инәһенең бойороҡ-фармандарында диңгеҙҙәрҙе буйһондорорлоҡ бөйөк көс бар. Әммә уның мәңгелек йәшәү урыны – даръя ир кеше өсөн тормош сығанағы була алмай. Ә балыҡ ҡойроҡло Һыу инәһенә иһә ҡоро ергә баҫырға тәҡдирләнмәгән. Кемдең фажиғәһе күберәк бында? Һыу инәһенеңме? Ир кешенеңме? Бәлки, фажиғә тип атау артыҡтыр ҙа, ул, киреһенсә, именлек сараһылыр? Ваҡыт үҙ ағышында барһын өсөн. Даръя даръя булып ҡалһын өсөн. Инде бүтән йондоҙҙар янып, тулҡындар ҡосағына атылһын өсөн. Моғайын, бер төрлө генә яуап юҡтыр. Булыуы ла мөмкин түгел. Өҙөп кенә яуап бирә алмаҫлыҡ күпме һорауҙар тыуа… Сикһеҙ Йыһан менән серләшеүсе һәр йөрәктең мөхәббәткә ҡағылышлы үҙ яуабы барҙыр, моғайын. Бына шундай уйҙарға һала поэма.

Ни тиклем упҡынға тәрәнерәк убылаһың, ул шул тиклем үк Йыһан сикһеҙлегенә әйләнә барыр. Йондоҙҙар араһына ни тиклем юғары күтәреләһең, шул тиклем үк төпһөҙ ҡоҙоҡҡа төшә барғаныңды аңлarһың. Кеше тәбиғәте аңламаҫ үлсәмдәр аша үткәндә ғәҙәти төшөнсәләр үҙгәрешкә дусар ителә. Ҡайһы үлсәм юғарылыҡ? Быны аңлар өсөн ҡатын – Һыу инәһе ялҡынында дөрләп ҡарарға кәрәктер…

Йыһан ғына түгел, тарихтың да сиге күренмәй! Өҙлөкһөҙ ваҡиғалар алмашына, бихисап яҙмыштар үтә. Диңгеҙ ярында ғашиҡ йәндәрҙең осрашыуы, хушлашыуы. Осрашасағы, хушлашасағы… «Ваҡыттың тулҡыны – шул көйө тын аға...» Шуға ла автор тарихты төпһөҙ ҡоҙоҡ менән сағыштыра.

*…Күр ҙә тор,*
*Был тарих –*
*Төбөнә төшөп етмәҫ*
*Ҡойолор.*

## Сикһеҙлеккә бағыу

Тамара Искәндәриәнең «Көн менән төн сиге» китабы «Яҡты аят» һәм «Аҫыл тажым» тип аталған ике бүлектән тора. Тәүге киҫәге изгеләрҙең дә изгеһе, ғәзиздәрҙең дә ғәзизе – әсәһенә арнауҙан башлана. Иң төп һорау, иң оло бурыс нимәгә ҡайтып ҡала? Ниндәй генә бөйөк эштәр атҡарма, ниндәй генә үрҙәргә күтәрелмә – бөтәһе лә көл дәүмәлендә ҡалыр, әгәр ҙә әсәң ризалығын алмаһаң. Тетрәндергес юлдар.

*Мәңгелектең бөйөк әйләнеше*
*Бер килтереп ҡуйыр әңгәмә:*
*Кешелеккә минән ни фәтүә?*
*Ҡәҙер күрһәттемме әсәмә?*
*Ҡәҙер*
*Күрһәттеңме*
*Әсәңә?*

«БаҒ» шәлкеме («Бағдадҡа бағыу» поэмаһы, шиғырҙар) бөгөнгөнө алыҫ дәүерҙәргә алып барып ялғай. Тәү ҡарамаҡҡа «бағана» тигән ябай һүҙ бер ниндәй ҙә тәьҫорат уятмай. Гәрсә тамырын барлап китһәк, боронғолоҡ менән осрашмай ҡалмабыҙ. «Бағыу, бағлау» һүҙе киңерәк мәғәнәне үҙ эсенә алғанын күрербеҙ. Мәжүсиҙәр таш һындарға – бағаналарға илаһ итеп күңелдәрен бағлаһа, беҙҙең замандашыбыҙ бағананан нимә эҙләй? Уның да йөҙөндә өмөт һәм борсолоу сағыла ла баһа! Бына «Бағана» шиғырындағы юлдар.

*Йөҙөнә яҙылған*
*күмһегән*
*хәстәре.*
*Һауаны сатната,*
*йәшендәй,*
*сәстәре.*
*Кеше эш эҙләй…*

Быны «Өмөт бағанаһы» тип атау дөрөҫ тә булыр ине, буғай. Хәҙер инде «Бағаналар» тигән шиғырға иғтибар итәйек. Бағаналар бөтөнләй икенсе рәүештә күҙалланасаҡ.

*Теҙелешеп,*
*Теҙелешеп баҫҡан*
*Бағаналар.*
*Гүйә, улар күккә табан ҡанат*
*Ҡағыналар…*

Әлеге шиғырҙа иһә меңәр-меңәр сымдар тағып ерҙе ураткан бағаналар үҙҙәре лә мәғлүмәт дауылы булып ҡанатланып оса. Артабан инде был образ тағы ла киңәйәсәк. «Алтын бағана» тип әйтеү менән, үҙебеҙ белгән, ихтирам иткән шәхестәр күҙ алдына килеп баҫа. Бағана «Шиғриәт һәм сәйәсәт» тигән шиғырҙа хәҙер инде рух һаҡсыһы кимәленә күтәрелә. Туранан-тура әйтелмәһә лә, алтын бағаналарыбыҙ хаҡында һүҙ барғанын аңлайбыҙ.

*Башҡорттоң шағиры –*
*Сәйәсмән.*
*Илаһи серҙәрҙе асыусы,*
*Рухиәт терәгеп ныҡытыр*
*Бағана булып ул баҫыусы.*

Автор үҙенең төп фекеренә уҡыусыһын шиғырҙан шиғырға бына ошо рәүешле алып килә. Башҡорт теленең бөтә нескәлектәрен белгән шағирә, ошо тере океанда рәхәтләнеп йөҙә-сума, тәрәнлектәргә төшөп китә, яңынан ҡалҡып сыға, ынйы-мәрйендәрен теҙеп, һүҙҙәрҙән аҫыл тажын ҡоя. Дөрөҫ, һүҙ маһиры өсөн тел – боронғолоҡ менән ялғаусы моң урманлығы.

*Ҡойолоп төшөп ағас баштарынан,*
*Илгәҙәк нур уйнай ҡарашымда.*
*Аяҡ аҫтым – ҡыу япраҡтар ғына,*
*Йәш үҫенте барса тарафымда.*

(«Башҡорт теле»)

«Милләтемә», «Илгә һөйөү», «Илем», «Халыҡ тойғоһо», «Шиғриәт һәм сәйәсәт», «Ҡурай», «Боронғо ҡобайыр», «Ирәмәл», «Уралда», «Торатау» шиғырҙарында Тыуған ер менән ғорурланыуҙан, һоҡланыуҙан йәки һыҙланыуҙан бар ителгән образдарын, үҙ асыштарын уҡыусыһына еткереүе менән ҡиммәт. Шағирә үҙенең беҙ белгән һәм беҙ быҒаса белмәгән күңел донъяһын асып

күрһәтте. Ундағы төҫтәр һәм семәрҙәрҙе тел менән һөйләтеп аңлатыу мөмкин түгел. Был биҙәктәрҙе күңел күҙе менән күрергә, тойорға һәм был төҫтәрҙә ысынтылап ҡойонорға мөмкин. Иң нәфис, иң нескә тойғолар аҡ ебәк һүҙҙәр менән ҡаймалана. Гүйә, һиллек менән бөйөклөктөң ҡауышыуы.

*Мәңгелектәр һеҙҙән ҡалып торһон,*
*Һәүетемсә генә һөйләшәйек.*
*Робағи үә ғәзәл телдәрендә*
*Һеҙҙең менән,*
*Хайәм,*
*Туҡай,*
*Шәйех.*
*...Үрләйемсе мин дә һеҙҙең менән*
*Тур башына текә ҡаяларҙың,*
*Тупраҡһыҙ ҙа тамыр йәйә алған*
*Көс-ҡеүәтен күреп ҡарағайҙың...*

Бөйөк шағирҙарға арналған «Ҡайсын, Рәсүл, Давид һәм Мостай», «Туҡай», «Шәйехзада» тигән шиғырҙарында ла беҙ әҙибәнең күңел гәүһәрҙәре менән танышырбыҙ. Мәңгелек менән серләшеүсе һүҙ оҫталарының халыҡ тормошондағы роле тураһында ла уйланмай ҡалмабыҙ. Мәҙәниәт үҫешендә оло эҙ ҡалдырған шәхестәр – һәр ижадсы өсөн тулҡынландырғыс тема. Зәйнәб Биишеваның «Өйрәнсек менән Һөнәрсе» тигән билдәле әҫәрен иҫкә төшөрөү ҙә етә. Искәндәриә «Көршәк» тип аталған шиғырында тарихта һиҙелерлек эҙ ҡалдырған шәхестәрҙең уртаҡ һыҙатын күрһәтеүгә өлгәшә:

*Йөрәгемде асып, бағамын мин*
*Күрәсәккә.*
*Биҙәр уны – күрәсәкте*
*Моңом,*
*Йөрәк йырым,*
*Уттан-һыуҙан мине алып сығыр*
*Зиһен нурым.*

## Өндәр сымылдығында

Өндәр аһәңлеген ишеткегеҙ киләме? Был моң һәм тембр ҡолаҡты иркәләй, йөрәккә шифа булып тама. Китаптың ике бүлегендә лә ошондай үҙенсәлекле моң менән күңелегеҙҙе һуғарырһығыҙ. «Бөләңгерт тә алһыу ине болот…» тип башланған исемһеҙ шиғыр күңелде ебәк болоттар менән иркәләп ойоҡһотоп ебәргәндәй. Эйе, «л» өнөнөң билдәле бер тәртиптә сиратлашып килеүе һиллек һәм йомшаҡ ел булып яғыла күңелгә.

*Һай, фанилыҡ, һинең төҫөң булып*
*Бөләңгерттә*
*Ҡалды*
*Көлһыу*
*Болот.*

«Усаҡ» шиғырында «я» («йа») өнө аша бейеклеккә ашабыҙ, ә «ҡ» өнө менән кире ҡолап төшәбеҙ.

*Ялҡҡанымды*
*Яҡты*
*Ялҡынынңдан,*
*Ҡурҡҡанымды*
*Ҡурғаш*
*Ҡуҙыңдан*
*Мин аңлармын.*
*Йәшел баҡсам өсөн*
*Йәшен хәүеф*
*Һинең тынында.*

Икенсе бер исемһеҙ шиғырҙа «я» өнөнә «р» өҫтәлеүе борсолоу-хәүефте тәрәнәйтә. Хәйер, «р» аҙаҡҡа тиклем барасаҡ.

*Ярала ла тағы*
*Яралана,*
*Ярһыу йөрәгемде*
*Зар ала.*
*Тарһындыңмы минең яратыуҙы?*
*Кемдер*
*Тора*
*Беҙҙең*
*Арала.*

«Йыртҡыс ҡатын»да ла шул уҡ күренеш менән осрашабыҙ:

*Ярлыҡамаҫ, яр ҙа һалмаҫ*
*Арманһыҙ йыртҡыс ҡатын.*

Йәки ошо уҡ шиғырҙың аҙаҡҡы юлдарына күҙ һалайыҡ, «т»һәм «р» туҡтауһыҙ

сиратлашыуы тормош хәрәкәтен барлыҡҡа килтерә:

*Ир-ат баштарынан атлар*
*Тынъыһыҙ йыртҡыс ҡатын.*

Йыртҡыстың һалҡынлығын тояһығыҙмы? Күңел бит һиҫкәнә, таш бәғерлелектән хатта ҡайҙалыр ҡасырға, боҫорға иткәндәй... Бында әллә ваҡыт, әллә сәғәт теленең туҡтауһыҙ текелдәүе ишетелә, һәм замандың битарафлығын түгел, ә, бәлки, әҙәм баштары аша йөрөгән ҡатын тәкәтһеҙлегенән арыуын тойғандай булаһың.

Күңел сазын сыңлатыр өндәр сылбырының шиғриәт тигән матур донъяның балҡытҡыс йондоҙҙары икәненә йәнә лә бер мәртәбә инанабыҙ:

*Япраҡтарын ярҕан аҕастарҕа*
*Яҙҕы ямҕырҙарҙың шифаһы бар.*
*Өнһөҙ балыҡ һымаҡ мөхәббәттең*
*Сөңгөлдәрҙән йөҙөп сыҕаһы бар.*

Тәүге ике юл «я» («йа») менән башланып, беҙҙе асыҡ донъяға, ауанлыҡҡа-иркенлеккә саҡыра, бәхәсһеҙ, яҙғы япраҡтарҙы һәр кем күрәсәк. Аҙаҡҡы ике юлда иһә «ө» өнө нескә хистәр серлелегенә ишара итә, ауыҙ асып һөрән һалғанды ул ҡабул итмәй, йөҙөп сығыр һөйөү, тик уны һәр кем дә күрмәҫ-тоймаҫ. Һөйөү ауазын йөрәгең менән ишетерһең... Көт.

Өндәр сымылдығы тере һүҙҙәрҙе бар итә. Ижад әһеле ана шул һүҙҙәрҙән замандашы күңеленә үтеп инерҙәй юлдар тыуҙыра. «Шиғыр юлы» тигән шиғырында ул һүҙҙәрҙең тәүге серен бүләк иткән бала саҡ уйындарына алып ҡайта. Бындай уйындар – ижад ҡанатын үҫтерер тәүге ҡаурыйҙар. Артабан тамырҙары беленеп торған ҡул суғы:

*Ике ҡулым һуҙам өҫкә,*
*Ҡыланыу юҡ ишарамда:*
*Меңәр саҡрым – күҙ арамда,*
*Меңәр йылдар – һүҙ арамда.*

(«Ҡулдар»)

Ижад күңел азатлығын талап итә. Ҡағиҙәләр, талаптар ҡоллоғона әйләнһә, шиғри һүҙ тыумайынса уҡ үләсәк. «Шағир» тигән шиғырҙа (ул *Хисмәткә* тигән арнау менән асыла) ла Искәндәриә һүҙ тылсымдарының асылын асып күрһәтә.

*Бар булмышы – үҙһүҙлелек,*
*самаһыҙлыҡ.*
*Ботаҡтары, олоно ла – кәкре-бөкрө.*
*Барса аҕас тәртип һаҡлап үҫкән ерҙә*
*Ҡаҕиҙәгә ҡарай һымаҡ ул төкөрөп.*

Юлдашевтар – шағирҙар ғаиләһе. Бер кешенең генә түгел, икәүҙең асылын сағылдырмаймы икән был юлдар? «Ҡәләмемә» тип аталған шиғырҙа ла ижад ғазабы, тере һүҙҙең нисек аҡ ҡағыҙға ятыуы һүрәтләнә.

*Мин тойҕандың йөҙҙән берен*
*Тапһаң һин тойоу әмәлен,*
*Тиер инем: «Аһ, һин, дуҫым!*
*Аһ, һин, зиннәтле ҡәләмем!»*

Тимәк, тамғаларҙы теркәүсе ҡәләм хис-тойғоларҙы бирмәй. Ул ҡорал, бәлки, яҙыусының «ағас теле». Ижадсы өсөн иң төп ҡорал да, аҫыл тажы ла – һүҙ.

*Аҡыл ҡомарына ҡеүәт*
*Һүҙем –*
*Аҫыл ҡомартҡым.*
*Килмәй уны бишкә төргөм,*
*Килмәй уны шымартҡым.*

(«Һүҙ»)

Һүҙгә, телгә һөйөү әсә ҡарынында уҡ ярала. Әсә йөрәк аҫтында ятҡан балаһына уй-хыялдарын, ниәттәрен хистәр аша еткерә, һүҙ-тел матурлығын да иң беренсе булып ул аңлата башлай. Хатта күкрәк һөтө менән дә бирә, тиһәк, арттырыу булмаҫ. Шуға ла китаптың тәүге бүлеген – «Яҡты аят»ты әҙибә үҙенең әсәһенә арнаған шиғырҙары менән аса. Ошо изге төшөнсә артабан байытыласаҡ, сөнки бала саҡ, Тыуған ер, тыуған ауыл, ғәзиз төйәк – барыһы ла уҡыусыны «әсә» тигән һүҙҙең асылына яҡынайтып алып киләсәк. Ул артабан шағирәнең әсәлек бурысына барып ялғана.

Үҙ улдарына аталған «Уландарым» – ана шуның бер бейеклеге. Минеңсә, тап ошо шиғыр «Аҙнабикә» поэмаһы алдынан торорға тейеш ине һымаҡ. Был – логик килеү юлы. Был шиғырҙа «Ни өсөн Салауаттың әсәһе образына мөрәжәғәт иттең?» тигән һорауға асыҡ яуап ята. Эйе, беренсе бүлек «Аҙнабикә» поэмаһы менән тамамлана.

## Ил инәһе

Беҙ «Һыу инәһе» поэмаһында Һыу инәһенең йөрәк ҡағыуын ишеттек, уның кисерештәре аша донъяға баҡтыҡ. Хәҙер иһә «Ил инәһе» төшөнсәһенә яҡыныраҡ килербеҙ. Был юғары исем менән, ғәҙәттә, тарихта ҙур роль уйнаған, йә иһә донъяға данлы ил улдарын, шәхестәрҙе биргән әсәләрҙе атап йөрөтәләр.

Ер әйләнешендә һәр саҡ булған, буласаҡ елберҙәк тамсы аша асыла поэманың тәүге бите. Ул, бәлки, таңды сәләмләүсе ысыҡ тамсыһылыр, ә, бәлки, әсәнең ҡайғы-һағыштарын йә шатлыҡҡыуаныстарын үҙ эсенә алған күҙ йәшелер. Тамсы бит бөтәһен дә һыйҙыра. Уны китап итеп асып уҡып та булыр ине...

*Буйһондора уны ҡуласа:*
*Тупраҡҡайҙың телен ул аса,*
*Шытым биреп, күкрәп үҫер йәнгә*
*Ул беренсе булып юл аса.*

Йәшәү тамсыһы, тормош башланғысы тураһында һүҙ. Тамсы – тереклектең мәңгелек юлсыһы. Эйе, поэманың тәүге юлдарынан уҡ беҙ мәңгелек төшөнсәһе хаҡында һүҙ барғанын аңларбыҙ.

Салауат батырҙың буласаҡ әсәһе Аҙнабикә Ләмәҙ йылғаһы буйында үҫә. Был һылыу, аҡыллы, уҡымышлы ҡыҙҙы Юлайға кейәүгә биреүҙәре, автор билдәләүенсә, – тәҡдир-ҡуласаның яңы батырлыҡҡа юл асыуы. Буйға уҙғандан һуң, ул ҡарындағы сабыйҙың ғәжәп емеш көҫәгәнен тоя.

*Ниндәй ғәжәп емеш һуң ул?*
*Ниндәй тәм ул –*
*Йәшәү тәмеме?*
*Инәй бауырына ҡан һауҙырған –*
*Тыуыр йәндең ғәме, сәмеме?*

Автор был емеш хаҡында бына ошоларҙан тыш тәғәйен асыҡ бер нәмә лә әйтмәй. Ләкин уҡыусыға уйланырға нигеҙ ҡалдыра. Хәлбүки, мин дә уйланмайынса ҡалманым. Был донъяла булмаған ғәжәп емеш, тинем мин, Аллаһы Тәғәләнең гүзәл бер ниғмәтелер. Тыуасаҡ йәндең фажиғәле, әммә бөйөк юлдан үтәсәге һәм йәннәт әһеле буласағы тураһындағы ым-ишараһылыр.

Зирәк Аҙнабикәлә шул саҡ күрәҙәлек итеп ҡарау теләге уяна. Ябай әҙәм балаһына алда буласаҡты күреү мөмкин түгел. Ләкин әсәгә ул асыла. Киләсәккә күҙ һалғандан һуң, улының кем буласағын, ниндәй яҙмышҡа дусар ителәсәген аңлай. Кисерештәрҙән ҡара көйөп сыға, ләкин серен йөрәк төпкөлөнә йәшерә. Йән иңрәүе, күңел көйрәүе аша ул юғары бер хәҡиҡәтте аса: Аллаһы Тәғәлә һыҙған яҙмыш халҡының киләсәген бар итәсәк, сабыйҙарҙың теле туған телендә асыласаҡ, ер-һыу, ғәзиз Ватан именлектә буласаҡ. Киләсәккә барыу юлы, уның мәғәнәһе, уның бейеклеге – бары тик Хаҡ Тәғәләгә генә мәғлүм нәмәләр. Улын барырға тейешле юлынан тыйһа, сикләһә, ҡурсып-бәпләһә, уны тәғәйенләнешенән айырырға тарышһа һәм хатта ки айырһа – ошо булыр инеме ни ысын һөйөү? Былай ҙа бит үҙ юлдарын, тәғәйенләнешен юғалтҡан, аҙашҡан күпме ир-уландар йөрөй. Әсәнең улына булған һөйөүе – халыҡтарҙың яҙмышын яҙыусы Раббыға тәүәккәлләүҙә. Салауаттың йөрәгенә Аллаһы Тәғәлә бик һирәктәргә генә биргән оло һөйөү һәм ҡеүәт һала – халыҡҡа һәм киләсәккә һөйөү. Ә Аҙнабикәнең йөрәгенә – улына булған һөйөүҙе. Тәҡдирҙе ҡабул иткән йәш әсә улын оло юлға сығарыр өсөн, һынауҙарҙы лайыҡлы үтһен өсөн бөтөн

көсөн, аҡылын, йөрәген бирәсәк. Улы ла әсәнең өмөтөн аҡлаясаҡ.

Поэманың композицион төҙөлөшө лә үҙенсәлекле. Аҙнабикә бик күп дәүер алға китеп, киләсәккә баға, ундағы үҙгәрештәргә хайран ҡала. Һәр саҡ «Салауат» тигән исемде ишетеп ғәжәп итә, уның кемлеге әле башына барып етмәй. Былар барыһы ла уҡыусының күҙ алдынан тиҙ йөрөшлө кинотаҫма рәүешендә бара. Һәм бына Юлайҙың йәш кәләше, «Салауат» һүҙен дәүерҙәр аша илтеүсе бер тыйылған доға, код итеп файҙаланып, үҙе йәшәп ятҡан осорға яҡынлаша. Яҡынлашҡан һайын, хәүефшом арта бара. Һәм йөрәкте йыртырҙай хәҡиҡәттең үҙенә барып етә… Был – уның заманы, уның көрәсәге! Хәҙер әсәгә фани донъяға бирелгән ысын ваҡыт эсенә инеп, бөтәһен дә ҡабаттан кисерергә, йәғни йәшәргә тура киләсәк: ҡарындағы сабыйҙың тыуаһын, малай булып атта сабаһын, егет булып үҙ һүҙен әйтәһен, юлбашсы булып илде ҡуҙғатаһын… Әсәгә улы артмаҡлаясаҡ йөктө ғүмере буйы йөрәгендә күтәрәһе генә ҡала.

Тамара Искәндәриә «Көн менән төн сиге» китабында Клеопатра, Жанна дʼАрк, Джоконда, Шәһрезада, Һомайғош – тарихта йәки ижади әҫәрҙәрҙә билдәле булған ҡатын-ҡыҙ образдарына ла мөрәжәғәт итә. Һүҙ сәнғәте оҫтаһының был исемдәргә иғтибар бүлеүе тәбиғи. Уларҙың һәр береһе шағирәнең күңелен ғазаплаған теге йәки был һорауға «яуап бирә». Ләкин Аҙнабикә юғарылығын берәү менән дә сағыштырып булмай. Йәнә лә Аҙнабикәне Искәндәриә шикелле тәрән итеп аса алған тағы ла кемделер атауы ҡыйын. Поэмала Аҙнабикә – әсәләрҙең дә әсәһе, батырҙарҙың да батыры.

Беҙ «Һыу инәһе»ндә диңгеҙ-океандарҙы ҡайнатыр Һыу инәһе һөйөүенә баҡтыҡ. Гәрсә, уның ярһыу тулҡынлы хистәре үҙен раҫлау һәм раҫлатыу ғыналыр. Аҙнабикәлә халыҡтар, илдәр, ҡитғалар яҙмышын үҙгәртер көскә эйә әсә һөйөүен күрҙек. Ил инәһенең һөйөүе – тормошто раҫлау. Был – тиңһеҙ һөйөү.

## «Аҫыл тажым»

Ҡыҙыҡ күргәнебеҙ өсөн тиктән генә берәү ҙә башыбыҙға таж кейҙермәйәсәк. Сөнки ул – билдәле бер юл үтеү, дәрәжәгә өлгәшеү, ҡаҙаныш нәтижәһенең символы. Шулай ҙа һәр кемдең хыялында йөрөткән тажы барҙыр. Һәм уны үҙенең башының осона ҡасан ҡуйырға тейешлеген дә тик үҙе генә беләлер. Шағирә һөйөүҙе ана шундай «аҫыл таж» тип атай. Китабының икенсе бүлеге лә ошо исем менән асыла. Һөйөү – бик киң мәғәнәгә эйә төшөнсә. Шулай ҙа, тинем мин, һәр кемдең тик үҙенә генә хас, тик уны таныта торған аҫыл тажы барҙыр бит? Тамара тигән шағирәнең аҫыл тажын берәү ҙә уйлап сығара алмай, тамырлы ҡулдары менән уны йылдар буйы тик үҙе яһай, үҙе төҙөй: һүҙ гәүһәрҙәренән, хис-тойғоноң ынйы-мәрйендәренән, аҡыл-зиһендең яҡуттарынан. Һәр биҙәк үҙенсәлекле, улар бер-береһен ҡабатламай, киреһенсә, яңы сағыулыҡ ҡына өҫтәй, мәғәнәүи тәрәнлекте генә байыта. Мин бөгөн Тамара Искәндәриәнең аҫыл тажы – ижады, шиғриәте – тураһында ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлаштым. Ҡалғанын уҡыусыһы әйтер.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

# КАМИЛЛЫҠҠА ТАБАН

Һуңғы йылдарҙа әҙәбиәт диңгеҙендә ярайһы уҡ ирәбе генә үҙ елкәндәрен киргән ижадсылар араһында Мөнир Ҡунафин исеме лә бар. «Ғүмер уртаһы» тигән шиғри йыйынтығы менән үҙ уҡыусыларын һөйөндөргәйне, хикәйәләрҙән торған «Тәңре өрөк ҡапҡанда» (2012) китабын ҡулға алып, ижади даирәһенең киңәйеүен күрҙек. Тағы ла Мөнирҙең драма әҫәре Ғафури районында сәхнәгә ҡуйылыуы хаҡында ла хәбәрҙармын. Оҙаҡ йылдар шиғриәт толпарында елдергән егеттең проза өлкәһендә тәүге өлгөләре ваҡытлы матбуғатта донъя күрә башлағас, күренекле прозаик Р. Солтангәрәевтың һүҙҙәре иҫкә төштө: «Тәжрибә туплағас, тормошто аңлағас килә ул ижадсы прозаға». Бәлки, Мөнирҙең дә шул сәғәте һуҡҡандыр.

Мөнир Ҡунафиндың китапҡа исем биргән хикәйәһе «Ағиҙел»дә баҫылғас, академик Ғ. Хөсәйеновтың «Ҡыуандырҙы әҫәре» тигән йөкмәткеле тәнҡит мәҡәләһе донъя күрҙе. Әҫәргә юғары баһа бирелгәйне.

Йыйынтыҡта яҙыусының 9 хикәйәһе тупланған. Йөкмәткеһе, күләме йәһәтенән хикәйәләр төрлө-төрлө. Автор әҫәрҙәре аша беҙҙең заманға, дәүер мәсьәләләренә ҡараш ташлай, бөгөнгө көн бейеклегенән үткәндәргә һаҡ ҡына бағып, йәмғиәт үҫешенең төрлө саҡтарын кеше күңеле менән баһаларға ынтыла. Тематик яҡтан хикәйәләр берберенһенә яҡын түгел, тик һәр береһендә авторҙың образдарға тәрән психологизм менән ҡарауы ярылып ята.

«Ҡартайған ҡояш аҫтында» хикәйәһе традицион композицияға ҡоролған. Башҡорт прозаһында ретроспектив алым һәр яҙыусы ижадында ла ҙур урынды биләй. Тик Мөнир Ҡунафин ябай уй-хәтирәләр ебен тағатмай, ә драматизм менән һуғарылған ваҡиғалар аша психологик портрет тыуҙыра, заман проблемаларын художестволы яҫылыҡта бик уңышлы үҫтерә.

Яҙыусы художестволы донъяны төрлө ҡатламдан, төрлө төҫтәрҙән, ғәжәйеп күп мәғәнәле ҡараштарҙан туҡый. Шуға ла хикәйәнең эске моңо менән уҡыусыны арбап ала ла әҙәби мөхиттә уның геройҙары менән янып йәшәргә мәжбүр итә: уйландыра, һыҙландыра, үҙ булмышыңа ситтән түгел, ә күңел күҙе аша бағырға мөмкинлек бирә. Хикәйәнең геройы Зәйнулланы автор катарсис мәлендә һүрәтләй. Нимә сәбәпсе була? Әлбиттә, беҙ уйлаған мөһим ваҡиғалар ҙа, тантаналар ҙа, үҙенә ҡағылышлы ҡайғылы мәлдәр ҙә түгел, ә ауылдашы, хыялый Әкрәмдең үлеме... Ләкин туғантыумасаһы ла булмаған Әкрәмдең үлеме нимәһе менән тетрәндерә һуң геройҙы? Тап ошо һорауға яуап эҙләү хикәйә туҡымаһын ойоштора ла. Композицион яҡтан аң ағымына ҡоролған хикәйәлә автор күп кенә мәсьәләләргә ҡағыла.

Зәйнулланың хәтирәләр ебен башта уҡ үҫмер сағындағы бер ваҡиға биләп ала. Көтөү көткәндә Ҡабаҡтауы башында ҡыҙынып ятҡанда сәйер ҙә, аптыраҡтыс та һөйләшеү Әкрәм иҫәрҙең

донъяһына бағырға мәжбүр итә. Әкрәм: «Тик донъяны ҡояш янғанда йондоҙҙарға менеп ҡарарға кәрәк...

– Ә төнөн ярамаймы?

– Юҡ, төнөн ярамай, ҡараңғыла кешенең күңеле ябыҡ була».

Иҫәрҙәр генә йондоҙҙарға менеп, аҫҡа ҡарай йәки ер аҫтында йәшәй алалар. Ә «ерҙә ныҡ баҫып торғандар» йәшәү дәүерендә «икмәк өҫтөндәге май кеүек йөҙәбеҙ». Беҙҙең донъябыҙ теүәл, түңәрәк кеүек тә, ә йондоҙҙарға менер хыял ҡанаты бөтөнләй юҡ. Нимә ҡамасаулай? Донъяны артыҡ ябайлаштырып, рациональ ҡараш булдырыумы? Аяҡтар ерҙә булғас, ер мәшәҡәттәренән ары уйлай алмайбыҙмы? Һорау артынан һорау... Уҡыусыны ошо һорауҙар борсоуға һалһа, артабан ваҡиғалар тетрәндерә, һоҡландыра, теҙләндерә.

Әкрәм хыялыйҙың йәшәйеше үҙенең ғәҙәтилеге менән айырылмаһа ла, һәр ым-ишараһында тәрән фәлсәфә. Уның шулай булыуына кендек инәйе Ғәшүрә үҙен ғәйепле һанай. Әкрәмдең тормошо, көнитмеше юл өҫтөндә үтә. Ул береһенә лә артыҡ тамаҡ, артыҡ йән дә булмай, ә, киреһенсә, уны көтөп алған Хоҙай бәндәһе тип һанайҙар. Ләкин тормошта үҙ урынын яҡшы белгән хыялый. Шуға ла Зәйнулланың өләсәһе: «Үҙ урыны ҡайҙа икәнен белә. Мин, әле ошо йәшемә етеп, фани донъяла урынымды белмәйем: ишек төбөндәме, мендәр өҫтөндәме? Күптәр, бик күптәр белмәй».

Урын, вазифа, яуаплылыҡ кеүек төшөнсәләр хаҡында фекер йөрөткәндә ошондай күренешкә иғтибар итергә кәрәктер. Сөнки хыялый үҙ урынын белә, ә бөгөн «үтә аҡыллылар» урындарын белмәй, ни ҡылана? Тап шундайҙар кеше баштары аша юғарыға үрмәләй.

Әкрәм аҡылға зәғиф булһа ла, эшкә ауан булып үҫә. Шуға ла ауыл өмәләрендә, ауыр эштәрҙә һәр саҡ ул. Уны саҡырған саҡта: «Ишеткәнһеңдер, буштың атаһы үлгән, тиҙәр бит, ике баш ҡорот биреп, фатихалап ҡына бисәңде эргәмә ятҡырһаң, барырға була», – тип йомош менән барғандарҙы ҡаршылай. Әйтелгән һүҙҙең мәғәнәһен аңламаһа ла, гел ҡабатлар булған. Ләкин тап ошо һүҙҙәре арҡаһында мәҙәк һәм ҡыҙғаныс хәлдәргә лә тарый. Мәҫәлән, Әнүәр һәм Мөхәррәм менән була шундай ваҡиға. Ошо һүҙҙәр аша икеһе лә «үҙ өлөшөн алһа», артабан береһе иҫәрҙе ҡурсалаусы, икенсеһе теге донъяға оҙатыусы була.

Әнүәр ауыл дауаханаһының аттарын ҡарарға Әкрәмде эйәләштереп, йәшәү мәғәнәһен асһа, Мөхәррәм «уның аяҡтарын яларға вәғәҙәләһә лә», һүҙендә тормай – иҫәрҙәр йортона оҙата. Тап ике йыл эсендә ул шәм һымаҡ һүнә лә ҡуя. Әкрәмде интернатта туҡмап үлтерәләр. Нимә өсөн? Журнал биттәренә ат һүрәттәре төшөрә һәм – бер кемгә лә күрһәтмәй ҙә, бирмәй ҙә. Шуны алабыҙ тип, башҡалар туҡмайҙар. Әкрәмдең күңелендә, йөрәгендә ат образы йәшәй, уны бер кем дә йолҡоп ала алмай. Бына ҡайҙа ул юғарылыҡ, тоғролоҡ! Ә тирәйүн уға иҫәр тип баға. Бәлки, Әкрәм түгел, беҙ, үҙебеҙ, яртыаҡылдарҙыр? Беҙҙең өсөн тыуған ер, ат, йә булмаһа күктәге йондоҙҙар ҙа үтә лә ябай, сер төшөнсәһен юғалтҡан. Ана шул ғәҙәтилек битарафлыҡты тыуҙырмаймы икән? Хикәйәнең төп геройы Зәйнулланан, выждан ғазабы кисерттереп, ошо һорауҙарға яуап таптыра ла автор.

Мөнирҙең хикәйәһендә бер генә ваҡиға ла, бер генә деталь дә артыҡ түгел. Мәҫәлән, Әкрәмде үгеҙ һөҙөп үлтерҙе, тип аҡлана етәкселек. Мөхәррәм Әкрәм мәйетен алып ҡайтырға машина бирмәй маташа. Нәҫел үгеҙен алып ҡайтырға кәрәк, тип аҡлана. Аҙаҡ ошо уҡ үгеҙ, Мөхәррәмде һөҙөп, ҡурҡыныс ҡиәфәттә үлтерә. Ғөмүмән, хикәйәнең эске моңон персонаждарҙың диалогтары, портрет-характеристикалары, үҙ-ара мөнәсәбәттәре барлыҡҡа килтерә. «Оҙон кәүҙәһен көйәнтәләй бөгөп, хужа артынан эйәрә» тип Әкрәмде һүрәтләй.

Авторҙың шиғри күңеле әленән-әле был мондоң үҙенсәлекле йүнәлешен билдәләй: «Ә хыялдың төрлөһө була, татлыһы ла, ҡатлыһы ла, кеше ышанмаҫлыҡ ҡатыһы ла; Әкрәмдең керһеҙ, серһеҙ килеш кенә Зәйнулла тип өндәшкәне бына әле лә ҡолаҡ төбөндә яңғыраған кеүек; кешенең йәненә, хәленә инер көйөн дә, көнөн дә тапмайбыҙ». Тап ошо шиғри стиль фекер тығыҙлығын һәм тәрәнлеген барлыҡҡа килтерә лә.

Яҙыусының «Тәңре өрөк ҡапҡанда» хикәйәһендә сюжет мифологик алымдар менән ҡатмарландырыла. Әйткәндәй, мифология башҡорт прозаһында ярайһы уҡ уңышлы ҡулланыла. М. Кәрим, Ә. Әминев, Ә. Хәкимдәрҙең сәсмә әҫәрҙәрендә айырым урынды алып тора.

Был хикәйәһендә лә яҙыусы сюжет эҙләп баш ҡатырмай, ә ғәҙәти «тормош һурпаһы»нан бынамын тигән ваҡиғалар сылбырын һайлап ала. Мифологик башланғыс исеменә үк сығарылһа ла, төп ваҡиғалар беҙҙең көндәрҙә бара. Мөнир ваҡиғалар артынан сапмай, ә геройҙарҙың күңел донъяһына баға ла тормошҡа, йәшәйешкә, персонаждарҙың ҡарашынан сығып фекер йөрөтә. Шуға ла автор һәм геройҙар араһында дидактика юҡ, ә тулыһынса гармония өҫтөнлөк итә. Аҡыл һатмай. Кисерә. Ә кисерештәр хатта ир кешене лә күҙ йәштәренә мансырға һәләтле. Тәүгеһендә Мөхәррәмдең катарсисын күҙәтһәк, быныһында ир кешенең тетрәнеүҙәре йөрәкте телеп үтә лә, хәҡиҡәткә баш эймәй, тура барырға рухи көс өҫтәй. Тап шуның өсөн дә «Мөхәббәт – ул күңел торошомо, әллә аҡыл емешеме?» тигән һорауға яуап эҙләгәндә хикәйә геройҙары Мәргән менән Фәйрүзә тормошона күҙ һалырға кәрәктер. Әлбиттә, әҙер яуап юҡ, шулай ҙа...

«Тәңре өрөк ҡапҡанда» әҫәренең художество туҡымаһы бер нисә яҫылыҡты биләгән. Төп сюжет һыҙығы өлкән йәштәге Мәргән менән Фәйрүзә тирәләй ойоша ла, хәтирәләр ебе ретроспектив сюжет ебен тармаҡландыра. Авторҙың был ятҡан алымында ике төрлө ағымды күреү генә түгел, герой ҡылыҡтарын асырға, төп мәсьәлә буйынса уҡыусы ҡарашын киңәйтергә мөмкинлек бирә. Ғүмер ахырына еткән Мәргән менән Фәйрүзә – яҙмыш иркәләүенә генә түгел, ә бәргеләүенә лә түҙәр заттар. Армиянан сатан ҡайтҡан Мәргәнде һөйгән ҡыҙы көтмәгән, кейәүгә сыҡҡан. Төҫкә-башҡа һөймәлелек менән алдырмаған Фәйрүзә – ҡарт ҡыҙ иҫәбендә. Һайлап, һайланырға урын юҡ. Яҙмыш ҡушыуынанмы, әллә сараһыҙлыҡтанмы – ошо икәү ҡауыша. Тик тормоштары һәр көн бер-береһенә шатлыҡ, ҡыуаныс өләшеүҙән туҡылған көндәрҙән төҙөлә. Парадокс. Тап ошо әйбер хикәйәнең динамик хәрәкәтен, хис-тойғоларҙың тәрәнлеген тәьмин итә лә. Йылғаның ярһыу тулҡындары кеүек һүрәтләү алымдары ла берсә киҫкенләшә, берсә тынып ҡалғандай. Мәҫәлән: «Һин юҡта тәме лә, өҫтәлемдең йәме лә юҡ ине, ай, бөгөн килеште, эсеп туйып булмай ҙаһа». Йәки портретта ла был алым йыш ҡулланыла: «Сәсе генә ағарҙы ла, бер аҙ йөҙөн сырыштар баҫты инде. Сырайы йәштәрсә, тоҡанырҙай һаман да; һөйөү илендә бөкөрө – ғәрип ҡыҙ булды Фәйрүзә; һипкеленән бигерәк, Фәйрүзә ирҙәрҙеке кеүек устарынан ояла торғайны; ошо көршәк ҡапҡасындай устарынды күреп үҙ иттем мин һине, килен; йәмһеҙ, ләкин һөймәлекле ине; йәмһеҙ булһаң да, тәмлеһең шул...»

Ғүмер ахырына еткән Мәргән менән Фәйрүзә тормош һикәлтәләре аша бәхетле мәлдәрен иҫләп, әжәл килерен тойомлап, бер-береһен ҡурсалайҙар. Хикәйәнең төйөнләнеүе лә «Минән ҡалһа, нишләр был бахырҡай?» тип башланып китә. Артабан Фәйрүзә, Мәргәнде уйлап, ниҙәр генә эшләмәй: күршеһе Зөләйхаты ла димләп ҡарай. Хатта көлкөлө хәлгә лә ҡала. Әммә әжәл тәүҙә Фәйрүзәгә түгел, Мәргәнгә килә. Бында

ла яҙыусы тура ғына һынландырмай. Үлем түшәгендәге Мәргән тәүге мөхәббәтен саҡыртып килтертә, үкенер өсөн түгел: Сәбиләнең ҡулдарын оҙаҡ һыйпағас; «Һин Сати булманың!» – тигән ҡаты ҡарарын сығара. Көслө образ, көслө шәхес Мәргән. Фәйрүзәһе «Ғәрипкәйем» тип өндәшһә лә, ихтыяр көсө хаттин ашҡан. Тәүге ҡауышыу төнөнән һуң Ҡушҡайын яланында «мөғжизә артынан сапҡан малайҙай, Мәргән үҙен аямай, һикрәнләп, торналар артынан йүгерҙе лә йүгерҙе, нимәгәлер эләгеп йығылып та китте, тороп тағы баҫты, йыраҡлашып өлгөргән ҡоштарға оҙаҡ ҡул болғап торҙо».

Йәки бесәнгә китеп барғанда, юлда туҡтай ҙа: «Сәңды услап алып, шашыпшашып башына ҡойған, битен ыуған Мәргән:

– Ана, китеп бара, минең аяҡтарым китеп бара, икеһе лә иҫән, икеһе лә теүәлдәр!... Ой, Фәйрүзә, ҡалай һантый мин, үҙемде сатан, ғәрип тип йөрөйөм тағы, мин бит аяҡлы ғына түгел, ҡанатлы ла хәҙер, – тигән һығымтаға килә. Тап ана шул ҡанатлы ир – Мәргән менән донъя көтөү насип була Фәйрүзәгә. Зөләйхаға өләсәһе һөйләгән Тәңре хаҡындағы хикәйәттәге осраҡ та улар тураһында.

Әжәл Мәргәнде алып киткәс, Фәйрүзә лә ике аҙнанан мәрхүмә була. Бәхетле йәндәр. Бәхетте күктән көтмәй, аяҡтарына ерҙә ныҡ баҫып, үҙҙәренсә уны әүәләгәндәр. Аҙым һайын, көндәлек тормош менән бер-береһен тулыландырып бәхетле ғүмер кисергән Фәйрүзә менән Мәргән. Ә беҙ, ер кешеләре, күп осраҡта бәхет тип ынтылабыҙ ҙа яндағыны, яҡындарҙы күрмәй, белмәй ғүмер кисерәбеҙ, һуңынан тағы ла үкенәбеҙ. Хикәйә нимәгә өйрәтә һуң? Ысынлап та, ғәҙәти тормошто ла илаһи аҙымдар, күңел күтәренкелеге, үҙ булмышыңа хужаларса ҡарап йәшәп була бит. Тап шул саҡта Тәңре өрөк ҡаба, ә беҙ бер-беребеҙгә һыйынып, бер-береләҙҙе һанлап, күтәреп бәхетле йәшәй алабыҙ, тип инандыра әҫәр. Ышандыра. Күңел ҡылдарын тирбәтеп, зиһенгә өрләңы фекер өҫтәй әлеге хикәйә.

«Артта – Мәскәү» хикәйәһе күләм яғынан үтә лә ҙур. Хикәйә биш бүлектән тора. Әҫәрҙең исеме – Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ҡанатлы фразаға әйләнеп, һәр һалдаттың ихтыяр көсөн, рух ныҡлығын, тәрән патриотизмын тоҡандырған һүҙҙәр. Тәү ҡарашҡа ябай, әммә тәрән мәғәнә һалынған. Ә хикәйәлә ул бер нисә мәғәнәлә ҡулланыла. Тағы ла һүрәтләү алымы булараҡ үҙенсәлекле фигура – парадокс әҫәрҙең исемендә үк төп мәғәнәне биләй.

Хикәйә композицион яҡтан йыйнаҡ. Ваҡыт арауығы киң даирәне алып торһа ла, үҙәк проблемаға бәйле динамик ваҡиғалар үҙ-ара тығыҙ бәйле үҫтерелә. Мөнирҙең был хикәйәһендә лә – төп геройҙар өлкән быуын кешеләре. Автор уларҙың донъяға ҡарашын үҙенсәлекле картиналарҙа образлы итеп сағылдыра. Шуға ла Дәүләтҡол, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, бәлтерәп бөткән ҡарт түгел, аяғында ныҡлы баҫып торған ир-азамат. Ә тормош тәжрибәһе – бер нисә быуынға етерлек аҡыл емеше. Ғәҙәти ауыл ере, һәүетемсә тормош. Тап ошо һиллекте боҙорға, бигерәк тә оло йәштәге Дәүләтҡол менән Фатима тормошоноң үҙгәрешенә Суҡкойроҡ исемле һыйырҙарының юғалыуы сәбәпсе була. Әҫәрҙең тәүге һөйләме – «Барыһы ла Суҡкойроҡ юғалыуҙан башланды» тигән юлдар сюжеттың төйөнләнеүен тәшкил итә. Ауыл ерендә мал юғалыу – ғәҙәти күренеш. Ләкин автор был картина менән буласаҡ ваҡиғаларға «шаршау» аса, сәбәп кенә итә. Өс көн буйы өйҙә һыйырының ҡайтырын көтә лә дүртенсе көн Дәүләтҡол эҙләргә сыға. Ошонда башлана ла инде мажаралы мәшхәр. Донъяның аҫтын-өҫкә килтереп, һил тормошто юҡҡа сығара. Сәбәпһеҙгә түгел... Сәбәп бар һәм ул – бер. Ауыл халҡы күҙ терәп торған Татрыкүл

дә, Сейәлетау ҙа яттар ҡулында. Яттар – мәскәүлеләр. Тыуған еренең ожмах мөйөшөнә аяҡ баҫа алмай биҙәүләтлеләр.

Ул ғына түгел, Дәүләтҡол Суҡҡойроғон таба алмай, ә Вәлитдин Татрыкүл янында һыйырҙың башын һәм тиреһен күреп ҡала. Суҡҡойрок икәнен таныйҙар, уның маңлайында атылған эҙҙәр бар. Аҡылдан шашыр сиккә еткән әҫәр геройы: «Малға түгел, илеңә, йөрәгеңә аталар бит. Нисек түҙеп ятмаҡ кәрәк?» – тип ярһый. Дөрөҫлөк талап итеп, күлдең «яңы хужалары»на бара, ләкин эттән таланып ҡайта. Район түрәләренә бара, унда ла ғәҙеллектең һуңғы хәрефе лә ҡалмаған. Дәүләтҡолдоң: «Ҡыҙыҡ, – тип әсенеп уйлап ҡалды ҡарт. – Нишләп башҡорттан бер түрә лә юҡ һуң ул, ә? Тәртип һағында – әрмән, район башлығы – татар, сереп байыған урыҫтар, аптыраған. Таяныр башҡорт түрәһе, яҡлар ҡалҡандар ҡайҙа һуң ул?» – тигән уйҙарында хаҡлыҡ бар. Мәсьәләне хәл итмәй, боролоп ҡайтырға мәжбүр. Ә кем һуң был тиклем бәйһеҙлеккә юл ҡуйыр? Кем уйлай? Кем ҡыбырлай? Бармы ундайҙар? Дәүләтҡол Бөйөк Ватан һуғышында үлем менән йәшәү араһында йөрөгәндә, кем өсөн ҡан ҡойҙо? Яҙыусы һуғыш осоронда ваҡиғаларҙы ябай ретроспектива итеп кенә килтермәй, ә бөгөнгө бәхетһеҙлектең инештәрен шунда эҙләй түгелме? Әлбиттә, яуҙашы Шәрипкә һәм уның әсәһе Фәсәхәт образына бәйле сюжет һыҙыҡтарында ла үҙенсәлекле фекер бар. Фәсәхәт «һуңғы һартай» булып, тыуған ергә тоғролоҡ символына әйләнеп һәләк була. Шәрип, әсәһе ихтыярынан тыш, тыуған ауылын ташлап китә. Ләкин әсә рәнйеше ситтә бәхет таптырмай, Шәрип кире әйләнеп ҡайта. Хәҙер улы Исмәғил ауыл Советында етәксе булып эшләп, ерҙәрҙе һата. Өләсәһе ошо ер өсөн йәнен бирһә, Исмәғил, уйлап та бирмәй, кеҫә ҡалынайта. Парадокс, ләкин тормош ысынбарлығы. Исмәғил Дәүләтҡолдо сығырып әрләгәндән һуң, ҡарттың башының һыҙлауы, зыңлауы аяҡтан йығыр сиккә етә. Һыҙланыуҙар бөгөнгө ысынбарлыҡтан яҙҙыра, уға хәҙер һыйыр ҙа, әбейе Фатима ла мөһим түгел. Аңы яңылышамы, зиһененә зыян килгәнме, ләкин йән өҙгөс зыңлау туҡтамай, көнөн-төнөн бабайҙың башын һыҙлата, уйҙарының аҫтын өҫкә килтерә. Әҫәр геройы был зыңлауҙың сәбәптәрен эҙләп ҡарай, «Урыҫ сиркәүендә ҡыңғырау һуғалармы, тимерлектә сүкейҙәрме?» – тип тә уйлай. Был зыңғырлауҙың сәбәптәрен өй башында ултырғанда белеп ҡала. Был зыңғырлау күктән ергә тарала. Күктең иләк кеүек тишектәренән тама. Күкте ярғандан һуң ошо тауыш сыға. Сәбәбен белгәс, Дәүләтҡолдоң башы ауыртыуы бөтә, зыңлау илаһи моңға әйләнә. Бар донъяны ошо моң сорнаған: зың-зың – йәйен сәскәләр шулай һөйләшә, ҡышын табан аҫтында ҡар шулай илай, биҙрәгә һөт тамсылары ла шулай зыңлап һикерешә. Бының тормош көйө икәнлеген аңлай Дәүләтҡол.

Дәүләтҡол моң тараҡҡан күккә баҡҡан саҡта, уның янына иҫәр Сафуан килә. Ул да, борсолоп: «Ҡотһоҙ ергә Алла баҡмай ул. Ауылдың һурпаһы менән тоҙон алып киттеләр бит. Шуға Алла килмәй. Ҡарама һин ул күккә, барыбер килмәйәсәк. Күреп тор, күкте лә урлаясаҡтар улар».

Дәүләтҡол да, һиҫкәнеп: «Һуң, иҫәргә лә, аҡыллыға ла иркен булмағас, кемгә йәшәүе хөрриәт икән? Һөмһөҙҙәргә, донъяны алдынғаһы тәрилкә үлсәмендә генә күргәндәргә ни кинәнесе фани доньяларҙың? Күк күкрәтеп Алла килер ҙә ул, тик ул да хәлгә инмәһә? Һатылмаған, алданмаған ҡалдымы берәй нәмә?» Тап ошо ваҡиғанан һуң хикәйәнең сюжеты тағы ла икенсе юҫыҡта үҫтерелә. Дүртенсе бүлек – тулыһынса ретроспектив алым аша – Бөйөк Ватан һуғышына арналған. Һуғыштың данлы еңеүҙәре

түгел, ә ҡанлы, аяныс картиналары объектив ысынбарлыҡҡа яҡын. Ерәндергес Исхаҡ образы уйландыра ла, хафаландыра ла. Был бүлек Исхаҡты атыуҙары менән тамамлана. Тап ошо мәлдә хаҡлыҡ һәм ғәҙелһеҙлек, хыянат һәм мәрхәмәтһеҙлек тубы күкте яра. Һуңынан генерал сығыш яһай: «Артта Мәскәү! За нами Москва! Беҙҙең артта Тыуған ил! Беҙҙең артта Сталин!» Ошо һүҙҙәр меңәрләгән түгел, ә миллионлаған кешенең иң төпкө аңына һеңә. Дауләтҡолдоң ҡолағында әле лә яңғырай. Туҡталмаған. Тик хәҙер бөтөнләй икенсе юҫыҡта. Мәскәүлеләр майлы ҡалъя ғына өмөт итеп, бар ерҙе һуғышһыҙ ҙа баҫып ала. Алыу ғына түгел, ерҙе ҡоротоп, һөлөгән һура. Ә бар халыҡ, белә-күрә, күҙен йома, ҡолағын баҫа. Йәмғиәттә хәҙер күҙле һуҡырҙар ҙа, һаңғырауҙар, йә булмаһа «тәрилкә тотоп йүгереүселәр» генә хөкөм һөрә. Ә ҡарт һалдат нисек түҙергә тейеш? Баҫып килгән мәскәүлеләрҙән күкте булһа ла ҡотҡарырға, ерҙе ҡотҡара алмаҒас, тип уйлауы – шәп фекер. Шуға ла хикәйәнең бишенсе бүлегендә Дәүләтҡол иҫәр Сафуан менән шуға әҙерләнә. Ҡотҡарырҙармы һуң?

Автор үҙенсәлекле композицион алымдар аша әҫәрҙең йөкмәткеһен байыта, проблеманы тағы ла киҫкенләштерә. Ерҙе һатыусы Исмәғилде атырға сығып, байтаҡ «серле» ваҡиғаларҙы асыҡлай хикәйә геройы. Һуғыш осоронда Исхаҡҡа тейгән үлем тәүҙә Дәүләтҡолға төбәлгән, ләкин Шәрип аралап ҡалған. Дөрөҫлөк йылдар аша әйләнеп ҡайта. «Исмәғилде генә атып, мәсьәләнән ҡотолоп буламы?» – тип Дәүләтҡол күкте ата. Күктең күкрәгенә ата ла, урламаһындар, исмаһам, тип уйлай. Ләкин үлемдән ҡотолған Исмәғил Дәүләтҡолдо төрмәгә ултыртырға йыйына. Бында ла парадокс. Армен Варгизович эште урынында ғына бөтөрөп, ҡурсаларға уйлай. Бында ла ғәҙелһеҙлек, тип Дәүләтҡолдоң башы зыңлай башлай. Уның «Мин үҙ ауылымда ла төрмәлә, ауҙа кеүекмен. Һис тә айырма юҡ, йөрөр ерем, тын алыр хоҡуғым юҡ. Төрмәгә ябығыҙ, гурыд байҙарын ҡыумайынса тороп ҡайтмайым» тигән һүҙҙәре һауаны ярып үтә. Хикәйәнең был бүлеге Дәүләтҡолдоң дауаханаға эләгеүе менән тамамлана. Һуңғы бүлек уҡыусыны тетрәндерә. Сюжеттың кульминацияһы хәтәр уйланылған. Битараф күңелде урталай яра. Автор хикәйәнең аҙағында, «Һуңғы һүҙ» тип атап, эпилог бирә. Бында ла Биҙәүләт тормошоноң ике төрлө яҙмышы бирелә. Аныҡ ҡына яуап юҡ. Парадокс. Яҙыусы уҡыусы фекерен ҡалыптарға һалмай, уйларға урын ҡалдыра. Яуап беҙҙең үҙебеҙҙең уйҙарҙа, йәшәйешебеҙҙә. Автор «Артта – Мәскәү» хикәйәһе аша ойоған күңелдәргә илерткес ҡуҙ һалып, ҡараштарҙы бер аҙ алға ташларға мәжбүр итте. Уйлаһаң, иңдәрҙә тауу тип инандырғандар, арттан ҡаҙаласаҡ хәнйәр ҙә була шул ысынбарлыҡта.

Ә яҙыусының «Кайнозой» хикәйәһендә заман проблемаһы, яныбыҙҙа ғына йәшәгән кешеләр. Ләкин автор уларҙың тормошона бөтөнләй икенсе яҡтан, беҙ күрмәгән, беҙ белмәгән һәм аңламаған яҡтан бағырға ниәтләй. Хикәйәлә сюжет һыҙыҡтарының динамик хәрәкәте түгел, ә аң ағымы үҙенсәлекле художестволы туҡыманы барлыҡҡа килтерә. Хатта әҫәрҙең геройы Азат та бөтөнләй хәрәкәтһеҙ, имән башына менгән дә аҫтағы уратып алған бүреләрҙән ҡурҡып ҡатып ҡалған. Ә барлыҡ ваҡиғалар – Азаттың уйҙары, хәтирәләре. Яҙыусы, бер яҡтан ҡарағанда, заман һаҙлығына батҡан, эскесе Азатты әҫәр геройы итеп ала ла күберәк ошо хәлгә еткергән сәбәптәр хаҡында уйлай һәм уйландыра. Беҙ күберәк замандаштарыбыҙға ғәйеп ташларға күнеккәнебеҙ ҙә, буғай. Ә Мөнир Ҡунафин улай эшләмәй, үҙ геройының күңел донъяһына

бағa, аңларға тырыша. Шуға ла хикәйәлә психологизм өҫтөнлөк итә. Донъяһы түңкәрелгән Азат, арҡан алып, урманға китә. Урманда әжәл уны ике сүрәттә көтөп торған: үҙе әҙерләгән аҫылыныр өсөн арҡан һәм өс ас бүре. Ҡайһыһына ҡаба? Әлбиттә, автор әҙер юлды һайламай, бөтөнләй икенсе юҫыкты самалай. Элмәкле арҡандың да, бүреләрҙең да ҡоло булмай, ә булмышы үлем алдынан булһа ла ғәҙеллек, ирек даулай. Бар ул хөрриәт, даланлы күңелең генә булһын! Ә был күңел Азатта ғына! Быға инде бала саҡтан уҡыған, мөккибән киткән китаптары ярҙам итә. Классик әҙәбиәтте генә түгел, ә тарихи әҫәрҙәрҙе лә һыу кеүек эскән Азат замандаштарынан айырыла. Ҡушаматты ла Кайнозой тип  күп белгәне өсөн тағалар. Холоҡфиғеле менән беҙҙең заманда йәшәһә лә, булмышы менән бөтөнләй икенсе осор – Кайнозой эраһы кешеһе Азат. Шуға ла уны аңлар, фекерҙәрен уртаҡлашыр кешеһе лә юҡ. Ул ғына ла түгел, ҡатыны Әминә күршеһе Фаяз менән хыянат итә. Бар ҡайғыһын баҫыусы – эскелек. Ләкин ул ҡотолоу сараһымы? Юҡ, әлбиттә. Быны яҡшы аңлай Кайнозой. Шуға ла үҙ-үҙенә ҡул һалырға була. Ҡул һала алмай үҙенә Азат-Кайнозой. Көсһөҙлөкмө? Бәлки... Азаттың «Минең бисә үҙе император. Шуға ла күрше Фаяз дуҫ менән миңә хыянат итә. Уның законы үҙ ҡулында» тигән уйҙары уйландыра. Көслө ир юҡҡа сыкты, донъя ҡатын иңенә ҡала. Ирҙәргә урын юҡ: ғаиләлә, йәмғиәттә. Үлем менән йәшәү араһында, имән башында ғына үҙ-үҙе булып ҡала Азат. Шуға ла яратҡан яҙыусылары Гоголь, Ғүмәр Хәйәм, Сергей Есенин яндарына килә. Һөйләшә, аңлаша. Имән башында – йәшәү, аҫта – бүреләр, үлем. Ә ысынбарлыҡта ла ирҙәр ағас башында түгелме? Хәрәкәтһеҙ, ләкин имән башында. Тик уйҙар ғына хәрәкәт итә. Аяҡ та, ҡул да эш эшләрлек түгел, саҡ ҡына яңылыштыңмы, аҫта – үлем. Ә был ҡотолоу сараһы түгел. Шуға ла автор геройын көткән әжәленән түгел, ә бөтөнләй икенселәй һәләк итә. Туңып үлә Кайнозой. Хәрәкәт итмәүҙән, тик ултырыуҙан туңып осоп төшә. Бүреләр ҙә киткән. Имән генә ҡотҡармай шул. Рим императорының «Донъя үлһә үлһен, тик хаҡлыҡ тантана итһен!» тигән һүҙҙәрен имән башында ғына уйлап тормошҡа ашырып булмай шул. Ҡотолоу сараһы... Бәлки, хәрәкәттә, бәлки... Уйланырға урын бар. Кайнозой -Азат юлы ҡотолоу түгел, ә сараһыҙлыҡтан ғына. Ә сараһыҙлыҡ – ниәт итмәүҙән башлана ла. Яҙыусы тап ошо хаҡта бәйән итә.

Мөнирҙең «Ауылға Аллаһ килә» хикәйәһенең композицияһында гипербола алымы уңышлы урынды алып тора. Автор сюжет ваҡиғаһы артынан ҡыумай, ғәҙәти көнкүрештәге күренештәрҙең үҙенсәлекле яҡтарын уйната. Тап ошо сара әҫәрҙең художестволы кимәлен генә түгел, заман мәсьәләһен дә ҡырҡыу күтәреп сығырға мөмкинлек бирә. Хикәйәнең сәйер атамаһы төп герой Бәрей Әхәттең төшөнә бәйле. Бесән тамамланғас, Әхәттең төшөнә Хоҙай керә лә  йома көн уларҙың ауылына киләсәген белдерә. Тағы ла туҡал һыйырын һуйып көтөргә кәрәклеге хаҡында ла белгертә. Хәтәр төш. Ярар – төш, төш кенә лә, ләкин Аллаһ үҙе гел кереп тормай бит! Кем кем, ә Әхәт быға ныҡлы әҙерләнергә була. Әммә бер үҙе генә атҡара аламы һуң? Ярҙам һорап мулла Мансурға, ауыл Советы рәйесе Зәкиргә бара. Сәфәр уңышһыҙ: уға береһе лә ышанмай. Алйыған Әсмә ҡарсыҡтан башҡа,  хәбәренә ҡолаҡ һалыусы ла булмай. Ләкин юлда осраған класташы Исмәғил Әхәт һүҙҙәренә диҡҡәт итә. Юҡҡа түгел, ауыртҡан башты төҙәтмәҫме тип, бисәһе Сәғирәне бер баҫыу өсөн Мансурға һатып байрам иткәс, башы сатнап ауырта. Иблис ҡотҡоһо менән килгән Исмәғилдең

һүҙен йыға алмай Әхәт. Ул ғынамы, бер нисә көнгә «перм»гә китә. Уянһа – шәмбе. Баш сатнап ауырта. Аллаһ килгәнме, уны ҡаршылағандармы? Әхәттең был һорауҙары һауала эленеп ҡала. Бары Әсмә ҡарсыҡҡа ғына әжәл килгән. Уның: «Ата-бабаларҙан ҡалған ваҡыт тәгәрмәсен беҙ көсөбөҙҙән килгәнсе тирмән ташы кеүек әйләндерҙек әле, ә һеҙ ваҡыт арбаһын ташлап ҡастығыҙ. Шуға туҡтаған ул, туҡтатмаҫҡа ине һеҙгә. Сит бауырҙар ерҙе баҫып алған, ә һеҙ эсеп йоҡлайһығыҙ... Ер ҙә әйләнеүҙән туҡтар әле», – тигән һүҙҙәре һиҫкәндерерлек. Ә бит көткән Аллаһты ла ҡаршы алмай, эсеп ята бит Әхәт.

Әхәтте Әсмә ҡарсыҡтың үлеме тетрәндерә, шуға ла туҡал һыйырын һуйып, йыназаһын үткәрә. Гонаһтары бер аҙ кәмеп, ваҡыт тирмәнен дә алға этәрә. Ҡылған гонаһтарҙы аңлау – үҙе үк изгелеккә юл түгелме? Хикәйәлә ошоға ишара итә лә инде төп герой Әхәттең эшмәкәрлеге. Әҫәрҙә М. Кәримдең «Ваҡыт туҡталмаһын» шиғырынан эпиграф килтерелә. Юҡҡа түгел. Беҙҙең заман берсә толпарҙа алға елгән кеүек, берсә бер урында тапаныу... Икенсеһе күберәктер әле. Хыялый Әсмә ҡарсыҡтың һүҙҙәрендә хаҡлыҡ башҡаларға ҡарағанда ла юғары. Әллә беҙҙең зиһенебеҙҙә туҡтағанмы, әллә «йәшел йылан» уны бөтөнләй арбағанмы? Бәлки...

Йыйынтыҡта «Урамда 2020 йыл ине», «Ағыулы бәшмәк» тигән еңелсә юморға ҡоролған хикәйәләр ҙә бар. Автор был әҫәрҙәрендә тормошсан, көлкөлө ваҡиғаларҙан үҙенсәлекле сюжет үҫтергән. Юморҙы барлыҡҡа килтереүсе художестволы деталь – авторҙың табышы. Был иһә – шәп табыш. Тәүгеһендә тараҡан образы менән яҙыусы ваҡыт бәйләнешен, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәрен үҙенсәлекле ирония аша бирергә өлгәшә. Ә «Ағыулы бәшмәк» хикәйәһе лә ҡатмарлы ваҡиғаларҙы үҙ эсенә алмай. XX быуаттың 60-сы йылдарында Мөнирҙең яҡташы Әнүр Вахитовтың «Хәмит күпере» хикәйәте ижад ителеп, уҡыусыларҙың күңелен яулап ала. Артабан дәреслектәргә лә кереп китә. Тап хикәйәттәге кеүек, исем атамаһына (йәғни исем һәм фамилияның баш хәрефтәренә) бәйле ваҡиға. Ләкин яҙыусы традицион яҡты түгел, ә үҙенең күреү нөктәһе аша «Ағыулы бәшмәк»тә яңы фекерҙе алға һөрә. «Алтынбаев Биктимер», «аңра бәрән», «ағыулы бәшмәк», йәки «АБ» – ошо өс төшөнсәне йәтеш кенә уйната. Уймаҡ хикәйә авторҙың ҡапма-ҡаршы ҡуйыу алымынан «үтә лә затлы, үтә лә ныҡлы бәһлеүән булмаһа ла, исем заты шәп уның – Алтынбаев Биктимер» тип башлап ебәрә. Ошо алым хикәйәнең композицияһында төп урынды алып тора. Автор фекерҙе дөрөҫ үҫтерә.

Ә бына «Аҡ буран асылы» хикәйәһенең композицияһы бөтөнләй башҡаса. Яҙыусы әҫәрендә әйләнмәле сюжет һәм тартмалы композицияны бик уңышлы ҡуллана. Был алым башҡорт һүҙ сәнғәтенә урта быуаттарҙа уҡ көнсығыш әҙәбиәтенән килеп инә, тип билдәләй Роберт Байымов. Шул осорҙан башлап, был ысул байый, художестволы даирәһен киңәйтә. Мифологик ҡараш менән һуғарылған сюжеттың нигеҙендә геройҙы уратып алған донъя. Ябай ҙа, ғәҙәти ҙә тормоштоң үтә лә ҡатмарлы, уйҙар етмәҫлек яҡтары бар. Хикәйә геройы инәһе һөйләгән Әхмәт аша ошо хәҡиҡәткә төшөнөргә, уның сиктәрен билдәләргә ынтыла. Әҫәрҙең сюжет ептәре бер-береһен буран образы аша тулыландыра бара. Яҙыусы «Әҙәм тигән йәнде нисек әрәм итмәҫкә?» тигән һорау менән бар ғаләмгә баға ла донъяуи күренештәр аша һорауына яуап эҙләй. Тәүгеһе – мөхәббәт менән нәфрәт диуарындағы Ыңйы менән йылға арьяғындағы йәшәгән ҡоҙамдың улының яҙмышы (егеттең исеме алынмаған). Авторҙың «Һил генә тирбәлгән донъя китә икән бер көн шартлап, ихлас

көлгән ҡояшты ҡуя икән ғаләм саңы ҡаплап...» тигән киң мәғәнәле һүҙҙәренән һуң һағайып китәһең. Ытырғаныс ваҡиға: көнсөллөк сиренә дусар булып, ир Ынйыҡайҙы сәнсеп үлтерә лә үҙе кәкре ереккә аҫылына. Ике йән ике тарафҡа олғаша.

Икенсе сюжет һыҙығында Нәфисә менән Татлыбикә яҙмышы. Шулай уҡ ҡапма-ҡаршы характер алымдарын бер яҫылыҡта оҫта ювелир кеүек уйната. Бәхетһеҙ һәм бәхетле кешеләрҙең яҙмыштарын билдәләүсе – эскелек. Тап ул килтергән фажиғә лә аҡ буран тарафынан үлсәнә ала.

Ә сираттағы сюжетта Булатбай-Папан менән Хәҙисә әбей яҙмыштары. Ваҡытлыса төшөнкөлөк билдәһе түгел, ә бер яҙмыштың мөһөрө – атай һүҙен ишетмәгән Булатбай йәнен бала өсөн бирә. Ә Нәфисә был бәхетһеҙлегенән ҡотолғайны. Ә Булатбайҙың Хәҙисәһен дә был бәлә аямай, уттан алып һыуға һала. Балаһыҙлыҡ – бөгөнгө көндөн аяуһыҙ ысынбарлығы ла, проблемаһы ла. Тап ошо проблема аша йәштәргә кинәйә менән булһа ла әйтер һүҙе үткер, аныҡ, теүәл яҙыусының. «Улдары булып та, үҙ йәне, үҙ ҡаны, үҙ дауамы булған сабыйҙарына битараф йәшәгән атайҙар әҙме ни?» тип риторик һорауҙар бушҡа яңғырамай бит!

Хикәйә бер нисә сюжеттан ҡоршалһа ла, үҙенең бөтөнлөгө, фекер үҫә килеше һәм иркенлеге, яҙыусы төрлө алымдар аша образдарҙы оҫта туплауы менән айырылып тора. Аҡ буран – шәп образ! Ниндәйҙер кимәлдә билдәле яҙыусы Сыңғыҙ Айытматовтың прозаһындағы яҡшы башланғысты ла иҫкә төшөрҙө әле. Аҡ буран. Ҡара ерҙе, булмышыбыҙҙы сафландырыусы тәбиғәт күренеше. Тик беҙ, бөгөнгө кешеләр, аҡ буран булмышын аңлайбыҙмы, әллә, аңыбыҙ үҫкән һайын, тәбиғәтте күрер, аңлар күңел күҙебеҙ томаланғанмы? Әллә?..

Мөнир Ҡунафиндың хикәйәләрен уҡып сыҡҡас, бихисап һорауҙар, күренештәр, яҙмыштар уйға һалды. Уның хикәйәләре формаһы, йөкмәткеһе менән дә төрлөһө төрлөсә. Ҡайһы бер хикәйәләрендә бер нисә әҫәргә торошло ваҡиғаларҙы тығыҙлап тултырыу ҙа бар. Был иһә сюжетты тарҡата, фекер төйөнөн юҡҡа сығара. Шуға ла артабан М.Ҡунафинды хикәйә сюжеты хаҡында уйланырға, табыштарҙы эҙләргә саҡырыр инем. Яҙыусы ҡәләменән сыҡҡан һәр һүҙ беҙҙе битараф ҡалдырмай. Килешмәгән саҡтарҙа ла, үҙ хәҡиҡәтебеҙ менән образдарҙы йәнәш ҡуйып бәхәсләшәбеҙ. Ни эшләйһең? Автор ҙа бит: «Күҙгә күренгән камиллыҡ ҡына изге түгел әле, күңелгә һалынғаны ҡәҙерле – шуны бел. Урамың киң булһын да, ҡапҡаң шар асыҡ булһын, аҡ бурандар уйнар ул. Шунда белерһең Тәңре хаҡын, буран асылын». – тип юҡҡа әйтмәй. Камиллыҡ – кешелектең, һүҙ сәнғәтенең иң юғары талабы. «Тәңре өрөк ҡапканда» исемле хикәйәләр йыйынтығындағы һәр әҫәрҙә, үҙенсәлекле фекерләүендә уны эҙләү, уға һуҡмаҡтар һалыуҙы күрҙем мин. Иншалла, дауамдары булһын!

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**БДУ доценты.**

## ЙОСОФ ҺӘМ ЗӨЛӘЙХА МӨХӘББӘТЕ

*(Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы донъя күреүгә – 800 йыл)*

Ҡулымда – ҡәләм. Күңелем – сал тарихта. Ҡом сәхрәләре. Күк йондоҙҙар менән сигелгән. Моңһоу ай йөҙә. Офоҡ алға мансылған. Таң ата. Сабах елдәре иҫә. Күктәге матурлыҡ-шәфҡәтлелекте ергә таратыусы ел был. Ул матурлыҡ фәрештәләр ҡанатына тейәлеп тә килә, имеш. Ел уларҙы өлөшләп-өлөшләп тарата. Бик кәрәк урындарға. Ел, мәрхәмәтле-мәрәүәтле кеше һынына әүерелеп, изге хәбәр ташыусы сихри-тылсымлы көскә әйләнә. Ел йөрәге менән күк йөрәген бәйләп, йондоҙҙарҙан яҡтылыҡ, ҡояштан эҫелек, айҙан моңһоулыҡ, таңдарҙан алһыулыҡ алып, Ҡәнған һәм Мысыр илдәре бәндәләренә хәйер-хаҡ биреп, бәхет-сәғәҙәт өләшеп, хозурлыҡ балҡытып иҫте ул бер ваҡыт, ғаләм киңлектәрен айҡап-байҡап, ҡанатына бик боронғоларҙан ҡалған риүәйәт-легенда, йыр-моң, йәшәү рәүеше сифаттары тейәп, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың изге еренә – Ҡыпсаҡ иленә иҫеп килеп етә ул. Унда Ҡол Ғәлиҙең ҡолағына өрә, йөрәгенә керә, күңеленә поэтик орлоҡ ялҡындары һибә. Шағирҙың күңел һандығында ел, шиғри символға әүерелеп, ҡәләм осонан ҡағыҙға тел гәүһәрҙәре булып түгелә. Улы ҡайғыһынан күңеле йәрәхәтләнеп, йөрәге әрнеп, күҙҙәре һуҡырайған пәйғәмбәр Яҡуп сабах еленә (иртәнге йомшаҡ, латиф ел) мөрәжәғәт итә:

*Акрын искел, сабах йиле, нә утәрсән,*
*Хакыйкать Йосыфымнан ис дотар сән.*
*Йәрәхәтем уңалдырмага сән йитәрсән,*
*Сән искәли шат-хөррәм улдым имди.*

Сабах еле Яҡупҡа улы Йософтоң донъяла барлығы, кешелекле, кеселекле, шәфҡәтле-мөрәүәтле булыуы, ил, халыҡ мәнфәғәте менән йәшәүе тураһындағы изге хәбәрҙе алып килә. Ел Яҡупҡа шифалы йылы ағым булып иҫә. Уның сәстәренән, ҡайғынан һуҡырайған күҙҙәренән һыйпай. Яҡуптың йәрәхәт-яралары төҙәлә, йөрәк һыҙлауҙары баҫыла, күҙҙәре күрә башлай. Шулай итеп, халыҡ йырҙарында, риүәйәттәрҙә, әкиәттәрҙә төрлө сифаттарҙа ҡулланылып килгән ел образы йәнләндерелеп йәки кеше ҡиәфәтенә кереп, «Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһында ҙур поэтик мәғәнәгә, образ тыуҙырыусы көслө сараға, эстетик-эмоциональ хосусиәткә әүерелә.

Кеше – тәбиғәт балаһы. Уның йөрәге тәбиғәт йөрәге менән бәйле. Шуғалыр, бәлки, әҙәм балаһы ҡайғы-хәсрәтен, шатлыҡ-ҡыуанысын ҡояшҡа, айға, йондоҙҙарға, алһыу таңдарға һөйләй. Уларға табынып, бәхет теләй. Ә инде шул тәбиғәт хозурлыҡтарына ҡағына-ҡағына иҫкән елгә уның мөхәббәте айырыуса ҙур. Ул уны кеше итеп, йәнле итеп күрергә ғәҙәтләнгән. Хәҙерге ваҡытта ҡайһы бер шағирҙарҙың ел образы аша кешенең ғаләмгә (космосҡа) булған мөнәсәбәтен күрһәтергә тырышыуҙары ла шуға бәйләнгәндер (мәҫәлән, М. Ғәлиҙең «Ҡояш еле» тигән поэмаһы). Ҡол Ғәлиҙең поэтик еле һаман иҫә әле, ул яңынан-яңы эстетик-

эмоциональ төҫ, мәғәнә төрлөлөгө, һүрәтләү-тасуирлау яңылығы менән бөтәйә бара. Теге йәки был осорҙағы шағирҙың поэтик телен тикшергәндә, ғәҙәттә, үҙенә саҡлы булған ниндәй, ҡайһы ҡәләм оҫтаһының традицияһын дауам итеүенә баҫым яһала. Әгәр, «Ҡиссаи Йософ» – беренсе яҙма әҫәр, ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған беренсе поэтик ядкәр, иң олуғ мираҫ, тип һөйләйбеҙ икән, был мәсьәләнең тамырын юллап тораһы ла юҡ кеүек. Ҡол Ғәлиҙең нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы булыуы бәхәсһеҙ. Поэзия туҡымаһында һүҙ гәүһәрҙәре, аш өҫтөндәге һөҙлөк кеүек, үҙен һиҙҙертеп-күрһәтеп тора. Ләкин шиғриәтте гел генә күҙ яуын алырҙай «сатнап торған» матур биҙәктәр менән нағышлау ҙа килешмәй. «Баллы һүҙ баш әйләндерә», – ти халыҡ. Йәки: «Ҡыҙыл һүҙҙең күсәре тиҙ һына».

Теоретиктар, әҙәби әҫәрҙең тел-стиль үҙенсәлеген тикшергәндә, ҡәләм оҫтаһының халыҡ тарафынан ижад ителгән традицион образдарҙан ни дәрәжәлә уңышлы файҙаланыуын асыҡларға тырыша. Быныһы, билгеле, кеше үҫтергән гөл-баҡсаға һоҡланып ҡарап тороу кеүегерәк. Әгәр ул гөл-баҡса үҙ ҡулыңа ҡалып, һин уны яңынан-яңы сәскә-гөлдәр менән балҡытып ебәрәһең икән, бына шунда инде ысын мәғәнәһендә нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы була алыуың. Ҡол Ғәли – шул маһирлыҡты күрһәтеүсе шағир. Уның йәнләндереү-һынландырыусы, йәнһеҙ әйбер-предметтарҙы илаһи бөйөк көскә әүерелдерә белеүе, уларҙы матурлыҡ-шәфҡәтлелек фәрештәһе итә алыуы ғына түгел, шул әйберҙәрҙәге төрлө төҫтәрҙе, сифат билгеләрен асыҡлаусы һүҙ биҙәгестәре (эпитеттары) лә ғәжәп үҙенсәлекле. Халыҡ, мәҫәлән, бик боронғо замандарҙа уҡ, бәғзе берәүҙең ҡаһарманлыҡ сифатын күрһәтергә кәрәк булһа, «йөрәкле» тигән эпитет ҡулланған: «йөрәкле кеше». Ҡол Ғәлиҙе был ғына ҡәнәғәтләндермәй. Йософтоң физик һәм рухи көсөн, бөйөклөгөн, илаһилығын күрһәтеү өсөн ул әкиәт-легенда, төрлө риүәйәттәрҙәге тылсымлы-сихри көскә эйә булған ҡаһармандарҙың аҫыл сифаттарын эҙләй, уларҙы дөйөмләштереп, синтезлап, поэзия «даны»нда классик өлгө-үрнәк булып ҡалырҙай эпитет яһай: *алып йөрәкле* Йософ. Уның кешелеклелек тәбиғәте, эске донъяһындағы аҫыл сифаты, башҡа күркәм яҡтары «сәғәҙәтле», «мәрәүәтле», «бар кешенән бик ҡеүәтле», «һәйбәтле», «ҡырҡ ирҙән ҡеүәте артыҡ» кеүек эпитеттар, гиперболалар ярҙамында тасуирлана. Бына бер өҙөк:

*Дүртенсе – сәғәҙәтле һәм мөрәүәтле,*
*Бишенсе – алып йөрәкле һәм һәйбәтле,*
*Алтынсы – бар кешенән бик ҡеүәтле,*
*Ҡырҡ ирҙән ҡеүәте артыҡ имди.*

Һүҙбиҙәгестәр шағирға аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, йәнле картина тыуҙырыу, образлылыҡҡа ирешеү, герой-ҡаһармандың эске һәм тышҡы сифатын асыҡлауға ярҙам итә. Әгәр ир-егет батырлығы *алып йөрәкле* тигән һүҙ теҙмәһе аша сағылдырылһа, ҡатын-ҡыҙ матурлығы Ҡол Ғәлиҙә *гәүһәр* эпитеты менән тасуирлана. *Гәүһәр йәш* тигәндә был һүҙ тышҡы матурлыҡты тасуирлау өсөн генә ҡулланылмаған. Ул мөхәббәт утында янған йөрәктең көслө, ҡайнар, ялҡынлы хис-тойғоларын тышҡы донъяға алып сыҡҡан.

Хәҙерге ваҡытта әҙәби әҫәрҙең телен тикшереүсе телсе-филологтар һүҙ сәнғәте оҫталары тарафынан ҡулланылған эпитеттарҙың төрлө моделдәрен күрһәтеүсәндәр. Әгәр әйбер-предметтағы эске һәм тышҡы сифаттарҙы бер генә үҙенсәлек буйынса асыҡларға кәрәк булһа, яңғыҙ эпитет та етә; характерлы билдәләрҙе төрлө яҡлап тасуирлағанда тиң киҫәк формаһында килгән бер нисә йәки ҡатмарлы эпитеттар ярҙам итә. Эпитеттарҙың сифат, сифат ҡылым, исем һ.б. һүҙ төркөмдәре менән яһалыу күренештәре лә күҙ уңында тотола. Был төрҙәрҙең һәммәһе лә Ҡол Ғәлиҙә бар. Улар шағирҙың поэтик олонон биҙәп

торалар. Яңғыҙ эпитеттар: *әсе* һыу, *зифа* ҡыҙ, *нескә* бил, *яҡты* йөҙ, *нурлы* йөҙ, *татлы* тәғәм, *ләззәтле* шарап; тиң кисәк булып килгәндәре: *сәгәҙәтле, мерәүәтле, һәйбәтле* Йософ; йәйенке йәки ҡатмарлылары: *ҡаты ҡайғылы* ҡыҫынҡылыҡ, *ҡыҙыл алтын* беләҙек, *ҡыҙыл алтын* ҡадәх (һауыт), *алып йөрәкле* Йософ һ.б.

Ҡол Ғәлиҙәге *әсе* һыу (асы һыу) Башҡортостандағы Илеш районының Тыпый ауылында бар. Әсе ҡоҙоҡ һыуы унда кер йыйыу өсөн файҙаланыла. Шуға бәйле рәүештә әсе (асы) һабын барлыҡҡа килә. Урал тауҙары ҡуйынындағы бер ауылда әсе (асы) һыулы йылғаһы булған бер ауыл бар. Шул һыу исеме менән унда бер шифахана төҙөлә. Әсе һыу башҡа төрки халыҡтарҙа (үзбәк, әзербайжан, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, хаҡас, шорр, тыва һ.б.) юҡ. Айырым һүҙ буйынса ғына фекер йөрөтһәк тә, бөгөнгө телебеҙҙең Ҡол Ғәли теле менән бәйләнеше барлығы асыҡлана.

Бик боронғо ата-бабаларыбыҙ: «Сағыштырыу – танып-белеүҙең инәһе»,– тигәндәр. Мең әйберҙә мең төрлө үҙенсәлек. Уларҙың матурлығы, гүзәллеге, күркәмлеге, эске һәм тышҡы сифаттары, күҙгә ташланып тормаған ғәжәп йәшерен серҙәре бер-береһенә оҡшатып-сағыштырылып танып-беленә. Ҡол Ғәли сағыштырыу объекты сифатында күберәк *яҡут ташы, гәүһәр, мәрйен, ынйы* кеүек ҡиммәтле, поэтик яңғырашлы, матур эстәлекле әйбер-предметтар һайлаусан. Шулар аша ул керпектәренә гәүһәр йәш ҡунған Зөләйханың ҡайнар мөхәббәтен, йөрәк ялҡынын, күңел тетрәнеүен сағылдыра, Йософтоң эске һәм тышҡы илаһилығын, йән эретерлек күркәм сифаттарын, аҫыл һынын кәүҙәләндерә. Зөләйха ана нисек ҙурлай Йософто:

*Якутә биңзәр сәнең яңактарың,*
*Яшь алмадин ләтыйфьрак ияктәрең.*
*Бал-шәкәрдин датлырак дудактарың,*
*Ике ләбең күңелеми өртер имди.*

Йәки:

*Яңа бетмеш тал сыбык тик бармактарың,*
*Кяфурдан артыграк сөфрактарың.*
*Лөз-лөз энжедин теделмиш тырнактарың,*
*Әлләрең хәрирдан йомшак имди.*

Халыҡ телгә етди ҡараған. Уның төҙөклөгө, сәнғәтлелеге, мәғәнәлелеге өсөн даими рәүештә көрәшеп йәшәгән. Боронғо ата-бабаларыбыҙ «тел ярышы» мәжлесе үткәрә торған булғандар. Мәжлестә тел бәйгеһендә ҡатнашыусыларға ниндәй ҙә булһа бер тема бирелә. Уларҙың һөйләме эстәлекле лә, сәнғәтле лә булһын. Телдең фекер көҙгөһө икәнлеген кеше ана шунда күрһәтә ала. Аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, бер китаплыҡ фекерҙе бер һөйләм менән биреү, оҫталыҡтың ҡыҫҡалыҡта икәнлеген раҫлау өсөн халыҡ телдең алтын хазинаһы булып ҡалырлыҡ ғәжәп күп мәҡәл-әйтемдәр ижад иткән. Улар Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһында ла күптәр. Ләкин шағир, юғарыла әйткәнсә, кеше үҫтергән гөл-баҡсалағы әҙер сәскәләрҙе гөнә өҙөп йөрөмәгән кеүек, мәҡәл-әйтемдәрҙе лә үҙгәртмәйсә генә ҡулланмай. Теоретиктар теле менән әйтһәк, һәр нәмәгә ижади яҡын килә белә. Халыҡтағы «Сабыр иткән – мораҙына еткән», «Сабыр төбө – һары алтын» кеүек әйтемдәр нигеҙендә ул бөтөн бер строфа төҙөй:

*Йосыф әйтер: «Я Зөләйха! Бәне күргел,*
*Баек, Мисыр газизе бәнвән белгел;*
*Әгәр бәне эҫтәр ирсәң, Мисра кәлгел, –*
*Баек мәне Мисыр эчрә булгыл имди.*

*Сабыр берлә эшләгел ушбу эши,*
*Сабыр берлә эшләнер эшләр башы,*
*Морадына тиз йитәр сабырлы кеше, –*
*Бу эш эчрә күрекле сабыр кылгыл имди».*

«Сабырлыҡ – һары алтын», «Сабыр иткән – мораҙына еткән» кеүек әйтем- мәҡәлдәр нигеҙендә Ҡол Ғәлиҙән һуң ижад иткән шағирҙар ҙа күп-күп строфалар төҙөнеләр. Бына М. Ҡолойҙан бер миҫал:

*Сабыр берлә гөлдәр асылыр, китәр ҡыштар,*
*Йомыртҡанан сығар, күккә осор ҡоштар;*
*Сабыр берлә гәүһәр булыр ынйыы таштар,*
*Сабырһыҙҙан ҡайнайыу бән бешһә булмаҫ.*

Юғарыла әйтелгәнсә, тел-һүрәтләү саралары, төрлө поэтик биҙәктәр әҫәрҙең идея-эстәлеге һәм ул сағылдырған осорға ҡарап та ҡулланыла. Ғ.Туҡай, мәҫәлән, «Фәлсәфәүи һүҙҙәр» тигән әҫәрендә был мәҡәл-әйтемдәр эстәлегенең киреһен бирә: «Сабырлыҡ төбө – һары алтын» тигән булалар. «Шура» идараһының 75-әр тин баһа ҡуйып, «Баҫмаған шиғырҙар мәжмуғаһы» вә «тиле ярышы» кеүек сүптәр таратыуына милләт сабыр итһә лә, сабыр төбөнән һары алтын түгел, һары бәрәңге лә сыҡмай әле».

Теге йәки был осорҙа һүҙ сәнғәтенең, сәнғәтле һөйләмдең торошон шул ваҡыттарҙа ижад иткән ҡәләм оҫталарының әҫәрҙәре теле ярҙамында белеп була. Әлбиттә, телдең ижадсыһы – халыҡ. Телдең бөтөн ынйыы-мәрйендәре халыҡтың күңел сәхифәләренә яҙыла бара. Ләкин боронғо ата-бабаларыбыҙҙың күңел сәхифәләрен беҙ уҡый алмайбыҙ бит. Уларҙы һүҙ сәнғәте оҫталарының ҡәләмдәре аша ҡағыҙға түгелгән тел гәүһәрҙәре ярҙамында ғына билгеләй алабыҙ. Тимәк, XIII быуаттағы һүҙ сәнғәтенең торошон күҙ алдына килтереү өсөн «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының теленә лингвистик анализ яһарға кәрәк. Әммә уның һүҙлек составы тураһында төрлө, хатта ҡаршылыҡлы фекерҙәр йәшәп килә. Немец профессоры Карл Броккельмандың раҫлауынса, «Ҡиссаи Йософ» – боронғо ғосманлы төрөктәрҙең әҫәре. Ә инде төрки телдәрҙе өйрәнеүсе тел ғалимы Н. А. Баскаков уны боронғо ғосман теленә яҡын булған сәлжүк теле ҡомартҡыһы тип иҫәпләй. Ә. Нәжип уғыҙ-ҡыпсаҡ телдәре аралашҡан урында яҙылыуы тураһында әйтә. Ш.Мәржәни болғар яҙма иҫтәлектәре тип ҡарай. Б. Йәғәфәров Иҙел-Кама Болғар дәүләтендә яҙылыуын раҫлай. Башҡорт әҙәбиәтселәре Ҡол Ғәлиҙең башҡорт сығышлы булыуын, әҫәрҙәрендә лә боронғо башҡорт лексикаһы менән эш итеүен дәлилле күрһәтә.

Был ҡараштарҙың барыһында ла дөрөҫлөк юҡ түгел. Броккельман әйткәнсә, унда боронғо ғосманлы төрөктәрҙең тел үҙенсәлектәре лә, Баскаков фекеренсә, сәлжүк элементтары ла бар.

Билгеле, поэманың һүҙлек составы шул осорҙағы һүҙлек хазинаһы менән генә сикләнә алмай. Сөнки уның боронғо төрки тел менән дә бәйләнеше бар. Шуға күрә унда коюя (ҡойоға), үкеш (күп), дараюбән (тарайыу), килүбән (килеп) кеүек боронғо төрки һүҙҙәрҙең булыуы тәбиғи хәл. Ләкин күпселеге – хәҙерге ғөмүм ҡулланылыштағы һүҙҙәр: йөҙ, ҡара, үҙе, ата, юҡ, ярлы, һис, һүҙ, һатыу, бығау, ҡуйын, ҡол һ.б.

Мәғлүм, был осорҙа төрки телдәргә ғәрәп-фарсы һүҙҙәре ташҡыны «һөжүм итә». Хатта төрки телдәргә кәмһетеп ҡарау күренеше башлана. XI быуат филологы М. Ҡашғари төрки телдәрҙәге һүҙҙәрҙе морфемаларға (мәғәнәүи киҫәктәргә) бүлеп, уларҙың шаҡтай үҫкән, алға киткән, ғәрәп теленән кәм, ярлы булмаған тел икәнлеген иҫбат итә. Ҡол Ғәли поэмала ғәрәп һүҙҙәренең аңлашылмағанын

ҡулланмаҫҡа тырышыуы тураһында әйтә: «гарәп, гажәм делендә кылдым бәян; уҡымага, дыңламаға улды асан».

Өс стиль теорияһы беҙҙең эраға саҡлы йәшәгән Аристотель тарафынан өйрәнелә. Юғары стилгә «ялтырауыҡлы» һүҙҙәр керә. Түбән стилде халыҡ һөйләме тәшкил итә. Урта стиль шуларҙың икеһен берләштерә. Мин бында һис тә, Ҡол Ғәли был теорияларҙы белгән, тип әйтмәйем. Әммә лингвистик анализ яһау шағирҙың шул принцип менән эш итеүен күрһәтә. Мәғәнәне тәрәнәйтеү, образлылыҡты көсәйтеү, эмоциональлекте арттырыу маҡсатында, ул боронғо төрки теленән килгән формаларҙы мул ҡуллана. Ә инде ғәрәп теленән алған поэтизмдары (шәфҡәтлелек, мәрәүәтлек, сәғәҙәтлек  һ.б.) – хәҙерге әҙәби тел өсөн матур биҙәктәр! Ҡол Ғәли түбән стилгә лә мөрәжәғәт итә. Халыҡта, мәҫәлән, әҙәби телдәге  «Үлсәп ҡара әле» тиәһе урынға «Тартып ҡара әле» тип әйтеү хәҙер ҙә бар. «Ҡиссаи Йософ»та: «Тарттырҙылар, Йосыф илә тиң кәлмәде». Яй үлсәгәс, алтын Йософ ауырлығы була алмай. Аслан (һис тә), ойоу (йоҡлау), тәғәм (ризыҡ) һ.б. ябай һөйләм лексикаһы шағирҙың халыҡ теленә ҙур иғтибар итеүен раҫлай.

Шағир ҡулланған ҡыпсаҡ теле һүҙҙәре хәҙерге ваҡытта айырым диалекттарҙа йәшәй. Халь, мәҫәлән, мишәрҙәрҙә бар. Ҡиссаи Йософта; «Ушбу халь һич сәңа лаек дәгел». Поэмалағы *гыл-гел* (Бәян белгел: мән сәнәңвән, сән бенемсән) ҡушымталары менән яһалған ҡылымдар (барғыл, килгел, ҡайтҡыл) хәҙерге ваҡытта ҡырғыҙ телендә актив ҡулланыла.

Поэманың һүҙлек хазинаһы ғәжәп бай. Унда тамыр һүҙҙәр ҙә (мал, йөҙ, оло), яһалма булғандары ла (ҡарауыш, ғоманһыҙ, эшләмәҫлек), ҡушма төрҙәре лә (ун бер, һәргиз – һәр ваҡыт, үлдән – шул ваҡыт) бар.

Улар ярҙамында аналитик фекерҙәрҙе синтезлап биреп була. *Мал үтерлек, аҡса, ҡулда булған нәмәләр* һәм *хазина* (ҡаҙна, дәүләт, байлыҡ) – ғәрәп теленән кергән һүҙҙәр. Йософтоң баһаһын күрһәтеү маҡсаты менән, шағир уларҙы парлаштыра: «Беӊ дәва йөк, мал-хәзинә йөкләттерде». Ғөмүмән алғанда, Ҡол Ғәли парлы һүҙҙәрҙең ғәйәт матур үрнәктәрен бирҙе: *ғәзиз-солтан, ынйы-мәрйен, туҙан-тупраҡ, мал-мөлкәт, миһырбанлы-шәфҡәтле* һ.б. Һәр береһенә тәрән мәғәнә һалынған. Шағир батшаны бер урында *ғәзиз,* икенсе урында *солтан* тип атай. Өсөнсө бер осраҡта ул уларҙы парлай: *ғәзиз-солтан:* («Байыҡ, Мысыр ғәзизе-солтан булыр»). *Ғәзиз* – ҡәҙерле, хөрмәтле, ҡиммәтле, изге тигән төшөнсәләрҙе аңлата: «Был игенде *ғәзиз* белеп һәр кем игәр» (М. Ҡолой); *батша, хаким* мәғәнәһендә лә ҡулланыла. *Солтан* иһә *батша, хөкөмдар* тигәндә аңлата. Ҡол Ғәлиҙең батшаны *ғәзиз* һәм *солтан* һүҙҙәрен парлап ҡулланыуы уның һүҙҙәренең эске мәғәнәһенә ныҡ иғтибар итеүен раҫлай.

Поэмалағы фонетик төрлөлөктәр ҙә күп нәмә тураһында һөйләй. Шағир, мәҫәлән, һүҙҙең боронғо формаһы *сүне* лә ҡуллана: «Хатыннар Зөләйханы гаепләп сүләмәки баянында». Был форма хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда йәшәгән татарҙар телендә һаҡланып ҡалған (әҙәби телдә – *һөйләнем,* Башҡортостан татарҙары телендә – *сүләдем).* Ҡол Ғәлиҙә башҡа төрҙәре лә бар: «Һәр береһе бер дөрлө сүз сүзләр имди».

Телсе ғалимдәр хәҙерге телдәге *яҡшы* һүҙенең тамыры *як, яг, ях, яҡ* булыуы тураһында әйтәләр. «Ҡиссаи Йософ»та ла уның *яг* формаһы бар: «Бидгать эштән бәңа зиндан ягрәк имди». Мадъяр телендә лә яҡшы төшөнсәһен аңлатыу өсөн уның *я* һәм *як* формаһы ҡулланыла.

Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының һүҙлек хазинаһын, фонетик төрлөлөктәрен тикшереү тел тарихының күп үҙенсәлектәрен асыҡлауға ярҙам итә. Төрлө грамматик сараларҙың (мәҫәлән, килеш ялғауҙарының) боронғо төрки телдән килгәндәре булыу, шул осор өсөн

характерлы ла табылыу, хәҙерге әҙәби телдәгеләрҙең барыһы ла ҡулланылыу – бөгөнгө әҙәби телебеҙҙең шишмә башы ысындан да ошо әҫәрҙән башланыуға миҫал.

Ҡайһы бер һүҙҙәр шул осорҙа һөнәрселектең күп төрлө булыуын раҫлап торалар. *Йондоҙсо* һүҙе, мәҫәлән, астрономия менән шөғөлләнгәнлекте аңлата. *Шәмсе, ҡылыссы, ҡапсы, икмәксе, тирмәнсе, кунсе, тегеүсе* кеүек һүҙҙәр ҙә илдең йөҙөн, халыҡтың тормош-көнкүрешен, йәшәү рәүешен теге йәки был дәрәжәлә күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Йәки: *арпа сәсеү, арпа икмәге ашау, ҡоро һәм йәшел бойҙай һабаҡтары, ашлыҡ амбарҙары, арыҡ һәм һимеҙ һыйыр, күҙгә һөрмә тартыу, беләҙектәр бүләк итеү* кеүек һүҙбәйләнештәргә иғтибар итегеҙ.

Ғәрәп теленән ҡабул ителеп, йәмғиәт, дәүләт төҙөлөшө, идара эштәренә (*ғаилә, нәҫел, ҡәбилә, әмир, гауам, шаһит, хөкөм, хаким*), уҡыу-уҡытыу эштәренә (*китап, ҡәләм, мөғәллим, мөҙәрис, мәҙрәсә*), фәнгә ҡараған һүҙҙәр (*әҙип, әҙәбиәт, тәбиғәт*), дини эстәлекле һүҙҙәр (*аллаһ, дин, иман, ғибәҙәт, фарыз, сөннәт, хаж, ҡорбан, йәннәт*) башҡорт теленең һүҙлек хазинаһында хаҡлы урын алдылар.

Ҡол Ғәли мәғәнәләш һүҙҙәр (синонимдар) менән эш итеүҙең дә матур үрнәктәрен күрһәтте. Матурлыҡ төшөнсәһе унда *нәфис, зиннәтле, хуп, зифа, гүзәл, һылыу, матур, күркәм, күрекле* кеүек һүҙҙәр менән тәҡбир ителә.

Һәр милли телдең үҙенә генә хас фразеологик әйтемдәре була. Улар тормош-көнкүрешкә, йәшәү рәүешенә, иҡтисади-сәйәси хәлдәргә, мәҙәниәткә һ.б. төшөнсәләргә бәйле рәүештә барлыҡҡа килә. Тел биҙәктәренең алтын хазинаһын тәшкил иткән ул берәмектәр, теоретиктар теле менән әйтһәк, ҡатып ҡалған форма булып иҫәпләнәләр. Ләкин һүҙ сәнғәте оҫталары, әгәр стиль, әҫәрҙең идея-эстәлеге талап итһә, уларҙы үҙгәртәләр ҙә. Был үҙенсәлек «Ҡиссаи Йософ»-та ла бар. «Дәрт бар, дарман юҡ» тигән фразеологик әйтемде, мәҫәлән, «Татар теленең фразеологик һүҙлеге» исемле хеҙмәтендә (1989, 238-се б.) Н. Иҫәнбәт былай билдәләй: «Теләк, ынтылыш бар, эшкә ашырырлыҡ көс-ҡеүәт юҡ, хәл юҡ, сара юҡ тимәктән әйтәм. Бынан мең йыллап элек үк беҙҙә таралған боронғо әйтемдәрҙән». Беҙ юғарыла Ҡол Ғәлиҙең халыҡ ижад иткән мәҡәл-әйтемдәрҙе, төрлө һүрәтләү сараларын идея-эстетик маҡсатҡа нисек үҙгәртеүен, эшкәртеүен, үҙенсә ҡулланыуын күргәйнек. «Ҡатып ҡалған» тел сараларын да шағир «ватып-тарҡатып», поэзия туҡымаһына үҙенсә яраҡлаштыра. Әлеге фразеологик әйтемде ул «Бу дәрдә һич бер дәрман белүмәзвән» тип ала.

Ҡол Ғәлиҙәге *нәфсем эстәр, гакылым кәлмәз, гакылы шашды, йөзе балкыды, шатлык ягъды, мөшкел хәлгә дөшде, каты гыйшык, һуш киту, акыл шашу, күңел тулу, нур өстендә нур, хәтерне алу, йөз сулу ант эчү, күз салу, хәйран калу, күңел тулу* һ.б. шуның кеүек фразеологик әйтемдәр шағирҙың тел ынйыларына мөкиббән булыуын раҫлайҙар.

Был мәҡәләлә һүҙ сәнғәтебеҙҙең шишмә башы булған «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының хәҙерге әҙәби телгә мөнәсәбәтен теге йәки был күләмдә асыҡларға тырышылды. Һүҙҙе боронғо Ҡәнған һәм Мысыр далаларында иҫеп йөрөгән таңғы ел образынан башлағайнык. Һүҙ аҙағындараҡ йәнә шуға әйләнеп ҡайтҡы килә. Дәрдемәнд илен ташлап, сит илгә китергә уйлаҒас, бына ниндәй хистәр кисерә:

*Тәгәрәп уйнап,*
*Буй үҫкән*
*Тыуған илем, иҫән бул!*
*Сәс туҙғытып*
*Яй иҫкән,*

*Таңъы елем, иҫән бул!*
*Йүгереп-йүгереп туҡтаъан...*
*Яулыҡ болъап һыҡтаъан,*
*Нәҙекәй билем, иҫән бул!*

«Сабах еле», «саба еле» хәҙер «таңғы ел»гә әүерелде. Әммә ул – ҡәҙерле ел! Дәрдемәндтә ул Ватан төшөнсәһе менән бәйле. Иҫә ул таң елдәре. Уны ҡолас йәйеп, хозурланып, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың рухын, йөрәк тибешен, иманын алып килеүсе бөйөк, сихри, тылсымлы көс итеп ҡаршыларға кәрәк. «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының теле тураһында мәҡәләләр яҙылманы түгел. Ул төрлө хеҙмәттәрҙә иҫкә алына.

Шулай ҙа «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының теле ныҡлап, тәрән, фәнни, лингвистик анализ яһауға, ҙур күләмле хеҙмәт яҙыуға мохтаж. Ундағы фонетик төрлөлөктәр, морфологик саралар, һүҙлек хазинаһы, мәҡәл-әйтемдәр, фразеологик берәмектәр, һүрәтләү-тасуирлау биҙәктәре... – барыһы ла боронғо төрки теле менән дә, хәҙерге әҙәби теле менән дә бәйләнешле. Уны боронғо төрки теле менән хәҙерге әҙәби телде тоташтырыусы поэтик күпер тип тә атарға мөмкиндер. Был – бер. Икенсенән, әгәр поэманы әҙәби телебеҙҙең шишмә башы тип йөрөтәбеҙ икән, быны лингвистик планда ныҡлап раҫлап була. Өсөнсөнән, поэманың теле шул осорҙағы ҡәүемдәрҙең теле ни дәрәжәлә икәнлекте иҫбатларға ла ярҙам итә. Поэманың теле бай, тибеҙ. Ни өсөн? Шағир һүҙ сәнғәте оҫтаһы булғанға ғынамы? Уның өсөн генә түгел, әлбиттә. Шул осорҙағы ата-бабаларыбыҙҙың теле ярлы булһа, шағир әҫәрен бындай бай тел менән ижад итә алмаҫ ине. Был бай тел ата-бабаларыбыҙҙың образлы фекер йөрөтөү дәрәжәһе шаҡтай үҫкән, танып белеү офоҡтары ныҡ киңәйгән, уй-аҡыл рәүештәре тәрәнәйгән булыуын раҫлап тора.

Ҡәнған һәм Мысыр илдәренә, Ҡыпсаҡ далаларына илаһи иманлыҡ, шәфәғәтлелек, шәүкәтлелек таратып иҫкән Сабах (саба, таң) еле һүҙ-һүрәт, һүҙ-фекер, һүҙ-тойғоға әүерелеп, изге хәбәр ташыуын дауам итә. Тыуған яҡтан иҫкән ел Салауат Юлаевҡа ла хәбәр килтерә («Тыуған яҡтан ел иҫһә, ул миңә хәбәр килтерә, Тыуған-үҫкән еремдән, өҙөлөп һөйгән илемдән»). Мостай Кәримдә ел ҡанаты быуат-быуаттар буйына ил эсендәге ваҡиға-күренештәрҙе һыйпап-һыйпап иҫә («Нисәмә диңгеҙ аръяғынан ниндәй елдәр иҫмәгән, Ниндәй йәшен уйнамаған, ниндәй ҡырау төшмәгән»). Рәшит Назаровтың ел образын бәхет менән бәйләүе лә уңышлы («Ҡоштар һайрай миңә – ҡапыл йырлап ҡуям, Елдәр менән бергә eләм, eләм, eләм; Ер бәхете шундай – мин бәхетле, Ҡояш көлә миңә, мин дә көләм»). «Етер ваҡыт: бәпкә үлән ҡалҡыр... Ел-ҡурайға... Ҡурай сер-моң таратыр...» – ти Фәнил Күзбәков. Бәпкә үләне ил хозурлығы, донъя матурлығы, күңел күркәмлеге, йәшәү ғиззәтлеге ине. Ләкин ҡоротт0ҡ беҙ уны. Шағирҙың бәпкә үлән ҡалҡыуға ышаныуы, арттырып әйтһәк, Алла илаһилығы менән бәйле. Бының өсөн Ел ҡөҙрәте лә кәрәк икән әле. Ел менән ҡурай моңондағы серҙә миллилек шәүкәтлелеге лә бар. Сөнки ҡурай моңо – башҡорт халҡы ғорурлығы. Әлбиттә, был ғорурлыҡты заман еле нығытып тора. Уның тамырҙары – сал тарихта. Бөгөнгө иҡтисади, сәйәси, мәҙәни хәлдәр менән бәйле. Иманлы елдәр иҫтерһен Хоҙай. Амин!

**Суфиян ПОВАРИСОВ,**
**Башҡорт дәүләт университеты профессоры,**
**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.**

# ТӨРКИ ҺӘМ БАШҠОРТ ТЕЛ ҒИЛЕМЕНӘ НИГЕҘ ҺАЛЫУСЫ

*(Николай Константинович Дмитриевтың тыуыуына – 115 йыл)*



Донъя фәненең күренекле вәкиле, атаҡлы тюрколог, башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусыларҙың береһе профессор Николай Константинович Дмитриевтың (1898–1956) тыуыуына 115 йыл тулды. Профессор Н. К. Дмитриевтың ғилми һәм педагогик эшмәкәрлегенең һәм уның фундаменталь хеҙмәттәренең әһәмиәте донъя фәне, айырыуса тюркология, шул иҫәптән башҡорт филологияһы өсөн баһалап бөткөһөҙ ҙур. Уның исеме В. В. Радлов, П. М. Мелиоранский, В. А. Гордлевский, М. А. Казембек, А. Н. Самойлович, Н. А. Ашмарин, С. Е. Малов кеүек тюркология корифейҙары менән бер рәттән тора, ә хеҙмәттәре классик көнсығыш фәненең алтын фондына ингән әҫәрҙәрҙән һанала.

Н. К. Дмитриев 1898 йылдың 10 августа Мәскәүҙә прогрессив ҡарашлы хеҙмәткәр ғаиләһендә тыуған. 1916 йылда гимназияны алтын миҙал менән тамамлай. Гимназияла уҡыған сағында ул классик телдәрҙе яҡшы өйрәнә. 1920 йылда Мәскәү дәүләт университетының классик телдәр бүлеген тамамлай. Университет менән бер рәттән, Лазарев көнсығыш телдәре институтында ла уҡый. Бында ул бер үк ваҡытта өс бүлектең – төрөк, иран һәм ғәрәп бүлектәренең студенты була. Шул уҡ йылдарҙа ул башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, башҡа төрки телдәрен өйрәнә. Ғөмүмән, Н.К. Дмитриев 30-ҙан ашыу тел белгән, үҙенең ғилми хеҙмәттәрен бер нисә телдә, шул иҫәптән инглиз, немец, француз, итальян телдәрендә, иркен яҙған.

Н.К. Дмитриевтың хеҙмәт юлы 1921 йылда Ижтимағи фәндәр институтының көнсығыш бүлеге ғилми хеҙмәткәре сифатында башлана. Был институтта эшләү осоронда славян һәм төрки телдәренең үҙ-ара мөнәсәбәттәре хаҡында бер нисә хеҙмәт яҙа. 1925 йылда «Серб фольклорында төрөк теленең элементтары» темаһына яҙылған кандидатлык диссертацияһын яҡлай. 1925 йылда Ленинград университетына эшкә күсә. Университетта эшләү менән бергә, ул Ленинград көнсығыш институтында 1938 йылға тиклем профессор һәм төрөк теле кафедраһы мөдире була. Н.К. Дмитриев был йылдарҙа Мәскәүҙәге юғары уҡыу йорттары һәм ғилми тикшеренеү институттары менән тығыҙ бәйләнештә тора. Мәскәү университетында тюркология буйынса лекциялар уҡый. 1943 – 1954 йылдарҙа Н.К. Дмитриев СССР Фәндәр

академияһының Тел ғилеме институтында төрки телдәре секторы мөдире булып эшләй. Ул бик күп фәнни ойошмаларҙа, учреждениеларҙа актив эш алып бара. Фәндәр академияһының милли республикаларҙағы ғилми институттарында консультант вазифаһын башҡара, РСФСР милли театрҙары комиссияһының рәйесе, РСФСР Мәғариф министрлығының милли уҡыу йорттары ғилми советы рәйесе, күп юғары уҡыу йорттарында һәм ғилми-тикшеренеү институттарында ғилми совет ағзаһы була.

Н. К. Дмитриев милли республикалар өсөн ғилми кадрҙар әҙерләүҙә ҙур эш башҡара. Төрки телдәре буйынса тәүге ғилми хеҙмәткәрҙәрҙең күбеһе аспирантура курсын Н.К. Дмитриев етәкселегендә үтә.

Башҡорт филология фәнен барлыҡҡа килтереүҙә һәм артабан үҫтереүҙә Н. К. Дмитриевтың хеҙмәте айырыуса ҙур. Башҡорт тел ғилеме һәм әҙәбиәт теорияһы буйынса бик күп фән эшмәкәрҙәре Н.К. Дмитриев етәкселегендә әҙерләнә. Филология фәндәре докторҙары, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәрҙәре, профессорҙар Ж. Ғ. Кейекбаев, Ә. Н. Харисов, Ҡ. З. Әхмәров, Ә. Ә. Юлдашев, Т. М. Ғарипов, Н. Х. Ишбулатов, Ғ. Б. Хөсәйенов һәм башҡа күп ғалимдар үҙҙәренең тәүге ғилми аҙымдарын Н.К. Дмитриев етәкселегендә башҡарҙы. Н. К. Дмитриевтың ғилми һәм педагогик эшмәкәрлеге юғары баһаланды: ул СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, РСФСР Педагогия фәндәре академияһының академигы итеп һайлана.

Н. К. Дмитриев Төркмән ССР-ы, Башҡорт АССР-ы, Сыуаш АССР-ының атҡаҙанған фән эшмәкәре ине. Фәнгә индергән ҙур ҡаҙаныштары өсөн ул Ленин, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, «Почет Билдәһе» ордендары һәм миҙалдар менән бүләкләнде.

Николай Константинович Дмитриевтың ғилми эшмәкәрлегендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, шулай уҡ халыҡ ижады мәсьәләләре үҙәк урынды алып тора. Был проблемалар менән ул студент сағында уҡ ҡыҙыҡһына башлай. 1924 йылда Ғ. Вилданов һәм Ғәбитов тарафынан Мәскәүҙә сығарылған «Боронғоларҙың һүҙҙәре» исемле мәҡәлдәр йыйынтығына рецензия яҙған. Шул уҡ йылда Д. Юлтыйҙың «Ҡомарткыларым» исемле шиғырҙар йыйынтығына рецензия яҙып, уның ижадына ыңғай баһа бирә. 1926 йылда Шәйехзада Бабичтың 7 шиғырын («Зөһрәгә», «Уның өсөн», «Мөхәббәт», «Халҡым өсөн» һ.б.) рус теленә тәү тапҡыр тәржемә итеп, Мәскәүҙә баҫтырып сығара. Китаптың башында Ш. Бабич ижадына ҡыҫҡа, әммә йөкмәткеле һәм тапҡыр баһалама бирә. Был мәҡәләләр Н.К. Дмитриевтың тәүге ғилми хеҙмәттәре була.

Уның башҡорт теленең төрлө аспекттарына туранан-тура ҡағылған хеҙмәттәре 1927 йылда баҫыла башлай. Ошо йылда башҡорт теле хаҡындағы мәҡәләһе «Совет энциклопедияһы»нда баҫылып сыға (Башкирский язык. БСЭ, т.5, М., 1927, 137 – 139-сы биттәр).

1927 йылда Парижда уның француз телендә «Башҡорт теленең фонетикаһы буйынса этюдтар» исемле мәҡәләһе донъя күрә. Шул уҡ йылда башҡорт теле хаҡындағы бер мәҡәләһе Римдә итальян телендә баҫылып сыға. 1928 йылда «Белем» журналында «Башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләһенә ҡарата» исемле мәҡәләһе менән сығыш яһай. Мәҡәләлә башҡорт теленең Октябрь революцияһына тиклем ғилми нигеҙҙә бөтөнләй өйрәнелмәүе

хаҡында әйтелә. Артабан мәҡәләлә башҡорт телен тикшереүҙең методологик һәм методик нигеҙҙәре яҡтыртыла. Мәҡәләлә, беренсе сиратта, хәҙерге башҡорт теленең тасуири һәм тарихи грамматикаһын яҙыу бурысы ҡуйыла. Диалект һәм һөйләш үҙенсәлектәрен яҙып алыу методикаһы күрһәтелә. Халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыу мәсьәләһе лә күтәрелә. Н.К. Дмитриев фекеренсә, тел ғилеме менән шөғөлләнеүселәр фольклор әҫәрҙәренең теленә таянып эш итергә тейеш. Ғөмүмән, был мәҡәләлә киләсәктә башҡорт телен, башҡорт фольклорын өйрәнеүҙең киң программаһы бирелә. Унда ҡуйылған бурыстар хәҙерге көндә лә үҙ баһаһын юғалтмаған.

1928 йылда СССР Фәндәр академияһы һәм Башҡортостан хөкүмәте, Башҡорт республикаһын комплекслы өйрәнеү маҡсатында, С. И. Руденко етәкселегендә экспедиция ойоштора. Был экспедицияға Башҡортостанды һәм уның халҡын бик күп ғилми аспектта тикшереү бурысы йөкмәтелә. Экспедицияның лингвистик-фольклор төркөмөнә Н. К. Дмитриев етәкселек итә. Был төркөмгә йәнә О. Шацкая, М. Билалов, З. Шакиров, Р. Дәүләтшин, С. Мирасовтар ингән. Улар, Учалы һәм Белорет районының күпселек ауылдарында булып, халыҡтың һөйләш үҙенсәлектәрен һәм халыҡ ижады әҫәрҙәрен өйрәнә. Экспедицияла 20 табаҡ самаһы диалектологик һәм фольклор материалы туплана. Был материал араһында тәү тапҡыр яҙып алынған халыҡ йырҙары, әкиәттәре, мәҡәлдәре һәм йомаҡтары бик күп. Мәҫәлән, экспедиция ағзалары халыҡтан 800 йыр яҙып алған. Был экспедицияның эшмәкәрлеге хаҡында «Белем» журналының 1929 йылғы 10-сы һанында ғилми отчет бирелә. «Фәндәр академияһының лингвистик-фольклор бүлексәһенең эше тураһында ҡыҫҡаса иҫәп биреү» тип аталған был мәҡәләлә экспедицияның маҡсаттары һәм йомғаҡтары хаҡында әйтелә. Экспедиция хаҡында тулы отчет Н.К. Дмитриев тарафынан 1929 йылдың майында төҙөлә һәм 1939 йылда баҫылып сыға. 1940 йылдарҙа Н.К. Дмитриев башҡорт теленең төрлө мәсьәләләренә арналған тиҫтәләгән мәҡәләләр баҫтыра. Улар араһында «Башҡорт телендә ғәрәп элементтары» (1930) «Башҡорт телендә парлы һүҙбәйләнештәр» (1930) «Башҡорт теле һәм фольклоры буйынса библиография» (1936) хеҙмәттәре айырыуса әһәмиәтле.

50-се йылдарҙа Н. К. Дмитриев башҡорт теленең морфологик төҙөлөшөнә арналған бер нисә хеҙмәт яҙа. Улар араһында «Башҡорт телендә рәүеш грамматик категорияһы», «Башҡорт теленең күрһәтеү алмаштары» һ.б. ҙур мәҡәләләрен күрһәтергә мөмкин. Шуны әйтергә кәрәк: был хеҙмәттәрҙә күрһәтелгән проблемалар тәү тапҡыр яҡтыртыла. Әммә 50-се йылдарҙағы иң күренекле хеҙмәте булып уның «Башҡорт теле грамматикаһы» тора. Был капиталь хеҙмәт тәүҙә рус телендә 1948 йылда Мәскәүҙә 22 табаҡ күләмендә баҫылып сыға, ә 1950 йылда Өфөлә Ж. Кейекбаев, Ә. Харисов тәржемәһендә һәм Ҡ. Әхмәров редакцияһында башҡорт телендә донъя күрә. Был хеҙмәт фән донъяһында башҡорт телен тәү тапҡыр ғилми нигеҙҙә системаға һалған теоретик хеҙмәт була. Ысынлап та, хеҙмәттә башҡорт теленең бик күп факттары яңыса, оригиналь рәүештә яҡтыртыла һәм хәл ителә. Шундай мәсьәләләрҙән башҡорт теленең фонетик системаһын алырға мөмкин. Н. К. Дмитриев тюркологияла тәү тапҡыр башҡорт теленең ҙ, ҫ, һ, ҡ, ғ тибындағы специфик фонемаларының тәбиғәтен асып бирҙе. Уларҙың тарихи үҫешен

башҡа төрки телдәренең фонемалары менән сағыштырып тикшерә. Башҡорт теле өндәренә физиологик, акустик, фонологик характеристика беренсе тапҡыр тулы бирелә был хеҙмәттә. Шулай уҡ китапта сингармонизм күренеше дөрөҫ яҡтыртылыш таба. Хеҙмәттең «Морфология» бүлегендә һүҙҙең грамматик үҫеше, хәбәрлек һәм эйәлек категориялары, билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы, модаль һүҙҙәр, ярҙамлык һүҙҙәр һәм аффикстар, алмаш һәм рәүештәр, ҡылымдың күп грамматик категориялары, эйәрсән һөйләм төрҙәре һәм башҡа проблемалар башҡорт тел ғилемендә генә түгел, бәлки, тюркологияла беренсе тапҡыр хәл ителә.

«Башҡорт теле грамматикаһы» хеҙмәтенең әһәмиәте шунда: Н. К. Дмитриев үҙенең фәнни грамматикаһы менән башҡорт телен донъя фәне кимәленә алып сыҡты. Хеҙмәттә тәү тапҡыр башҡорт теленең фонетик һәм грамматик төҙөлөшө системалы рәүештә яҡтыртыла. Шулай уҡ был хеҙмәт башҡорт тел ғилеменең артабан үҫешенә нигеҙ булды. Әйтергә кәрәк, «Башҡорт теле грамматикаһы»нда дөйөм тюркология һәм башҡа төрки телдәрен дә тикшереү өсөн мөһим булған теоретик мәсьәләләр күтәрелде. Шуға күрә был хеҙмәт, йылдар һынауын үтеп, тюркологтар араһында хәҙерге көндә лә ҙур абруй менән файҙалана.

Н.К. Дмитриев башҡорт төрки тел ғилеменең бөтә тармаҡтарына нигеҙ һалыусы булып тора. Мәҫәлән, ул – грамматика, фонетика, лексикология, диалектология менән бер рәттән, лексикография өлкәһендә лә ҙур хеҙмәт күрһәткән ғалим. Уның редакцияһында тәүге рус-башҡорт, башҡорт-рус академик һүҙлектәре донъяға сыға.

Башҡорт фольклористикаһының фән буларак тәүге үҫеш этабы Н. К. Дмитриев исеме менән бәйле. Үрҙә әйтелгәнсә, ул 1924 йылда башҡорт халыҡ мәҡәлдәре хаҡында «Книгоноша» журналында рецензия менән сығыш яһап, был йыйынтыҡтың башҡорт фольклористикаһы өсөн әһәмиәтле күренеш булыуын билдәләй. 1941 йылда Н.К. Дмитриев «Башҡорт халыҡ әкиәттәре»н әҙерләп сығара. Был әкиәттәр А. Г. Бессонов тарафынан йыйылған һәм тәржемә ителгән була. Йыйынтыҡтың баш һүҙендә Н.К. Дмитриев әкиәт жанрының үҙенсәлектәрен билдәләй. Ул башҡорт әкиәттәрен уларҙың йөкмәткеһенә фантастик уйҙырманың характерына һәм поэтик үҙенсәлектәренә таянып, түбәндәге 6 төргә бүлә: 1) тормош-көнкүреш әкиәттәре, 2) хайуандар тураһында әкиәттәр, 3) батырҙар тураһында әкиәттәр, 4) тылсымлы әкиәттәр, 5) ғибрәтле әкиәттәр, 6) әкиәт-легендалар. Был фундаменталь хеҙмәт, билдәле булыуынса, рус телендә баҫылған башҡорт әкиәттәренең берҙән-бер тулы баҫмаһы булып тора. Ғөмүмән, Н.К. Дмитриев төрки халыҡтарының ауыҙ-тел ижады менән тәрән ҡыҙыҡһынған һәм фольклор фәне хаҡында хәҙерге көндә лә үҙ әһәмиәтен юғалтмаған фекерҙәр әйтеп ҡалдыра.

Н.К. Дмитриев башҡа төрки телдәрен өйрәнеү эшендә лә ҙур активлыҡ күрһәтә һәм капиталь хеҙмәттәр яҙа. Мәҫәлән, төрөк теле, уның диалектологияһы һәм фольклоры буйынса хеҙмәттәре бик күп. «Төрөк теленең төҙөлөшө» (1939), «Рус телендә төрөк элементтары» (1937), «Төрөк телендә ярҙамлыҡ исемдәр» (1937), «Төрөк халыҡ әкиәттәре» (1939) һәм башҡа хеҙмәттәре киң билдәле. Ул шулай уҡ ҡумыҡ, әзербайжан телдәренең фәнни грамматикаһы, ғағауыз, сыуаш, ҡырым татарҙары, төркмән, ҡумыҡ, хаҡас телдәре буйынса ла бик күп хеҙмәттәр яҙа.

Н.К. Дмитриевтың татар телен өйрәнеүҙә хеҙмәте шулай уҡ бик ҙур. Рус телен милли мәктәптәрҙә уҡытыу мәсьәләһендә Н.К. Дмитриев ҡәрҙәш булмаған телдәрҙе сағыштырып өйрәнеү методына ҙур әһәмиәт бирә. Ошо уңай менән рус теле менән татар теле һәм башҡа төрки телдәр факттарын сағыштырып анализ биргән тиҫтәгә яҡын мәҡәлә яҙа. Мәҫәлән, «Русские предлоги и татарские послелоги», «Наречия в татарском и русском языках» һәм башҡа мәҡәләләр фәндә киң билдәле. Туған телде һәм рус телен уҡытыу мәсьәләләре Н. К. Дмитриев редакцияһында баҫылған «Очерки по методике преподавания русского и родного языков в национальной школе», «Родной и русский язык в национальной школе», «Вопросы методики преподавания русского и родного языков в национальной школе» һәм башҡа хеҙмәттәрҙә бирелә. Бында Н. К. Дмитриев милли мәктәптәрҙә рус телен уҡытҡанда туған тел факттарын иҫәпкә алыуҙы мотлаҡ бурыс тип билдәләй.

Н.К. Дмитриев төрки телдәренең сағыштырма грамматикаһын төҙөү һәм яҙыу эшенә күп көс һала. Уның редакцияһында был хеҙмәттең дүрт томы («Сравнительная грамматика тюркских языков», ч.1, Фонетика. М., 1955; 4.2, Морфология. М., 1956; ч.3 Синтаксис. М., 1961; Лексика, М., 1962) баҫылып сыҡты. Н. К. Дмитриев хәҙерге көн өсөн көнүҙәк мәсьәләләрҙең проблемаларҙың береһе булған телдәрҙең бер-береһенә йоғонтоһо проблемаһы менән шөғөлләнә. Уның совет фәне тарихында тотҡан урынын билдәләп, Э. В. Севортян былай тип яҙа: «Н. К. Дмитриев – яңы тип ғалим ине, ул донъя ғилеменең һоҡланғыс кәүҙәләнеше булды. Н. К. Дмитриев үҙенең эшмәкәрлегендә күп һанлы республикаларҙың һәм өлкәләрҙең культура ихтыяждарынан сығып эш итте, тормош менән органик бәйләнештә торҙо. Ҙур ғалим һәм гражданин, аҡыллы уҡытыусы һәм иғтибарлы дуҫ, бөтәһенән элек Тыуған ил һәм фән мәнфәғәттәренән сығып эш итеүсе Н. К. Дмитриевтың яҡты образы ориенталистика тарихында бына шулай ҡаласаҡ». Н. К. Дмитриевтың юғары культуралы, оло йөрәкле, фәнгә мөкиббән бирелгән ысын интеллигент һәм бөйөк гуманист булыуын бына шундай бер факт раҫлай. Мәскәү университеты профессоры С. В. Бернштейн Н. К. Дмитриев хаҡында яҙған мәҡәләһендә былай тип хәтерләй: «1948 йылда миңә Молдавияға ҙур экспедицияға сығырға тура килде. Н. К. Дмитриев минән үҙенең уҡыусыларын – ике ғағауыз студентҡаһын экспедицияға алып китеүҙе үтенде. Мин риза булдым. Әммә университет бухгалтерияһы аҡса түләүҙән баш тартты. Н. К. Дмитриев үҙ аҡсаһын университет кассаһына индерҙе. Был хаҡта, әлбиттә, беҙ икәүҙән башҡа бер кем дә белмәне». Ул Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт ғалимдарына матди ярҙам итеп торған.

Үрҙә әйтелгәндәрҙән күренеүенсә, Н. К. Дмиртиев – киң профилле филолог – бер үк ваҡытта ул юғары уҡыу йорттары уҡытыусыһы ла, йәғни йәштәргә ғилми билем биреүсе лә. Замандаштары уның ғәжәп талантлы лектор булыуын билдәләй. Ул милли республикаларҙың фәнни тикшереү үҙәктәрендә һәм вуздарында ла байтаҡ лекциялар уҡый. Айырыуса Башҡортостан менән тығыҙ бәйләнеш тота. Форсаты тейгән һайын беҙҙең республикаға килеп тора, башҡорт ғалимдары, дәүләт етәкселеге менән дуҫтарса мөнәсәбәттә була, ул лекцияларҙы саф башҡорт телендә һөйләй торған булған.

Н. К. Дмитриев үҙенең ғилми шәкерте Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев менән тығыҙ аралаша. Башҡорт филологияһы буйынса беренсе доктор булған Ж. Ғ. Кейекбаев үҙенең остазы мәшһүр ғалим Н. К. Дмитриев хаҡында бик ололап иҫкә ала торғайны.

Н.К. Дмитриевтың ғилми мираҫы бик ҙур. Ул 200-гә яҡын ғилми хеҙмәттең авторы. Уның байтаҡ баҫылмаған әҫәрҙәре Мәскәү һәм Башҡортстан архивтарында һаҡлана. Был мираҫ һәр яҡлап өйрәнеүҙе көтә. Яҡын киләсәктә Н. К. Дмитриевтың «Һайланма әҫәрҙәре»н мотлаҡ баҫып сығарыу кәрәк: был, башҡорт филологияһы һәм мәҙәниәте өсөн әһәмиәтле булыу менән бергә, ошо мәҙәниәтте һәм филологияны үҫтереү өсөн күп көс һалған профессор Н. К. Дмитриевты ололау, уның изге эшенә ҙур хөрмәт күрһәтеү булыр ине.

**Марат ЗӘЙНУЛЛИН,**
**филология фәндәре докторы, профессор,**
**Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы**.

## ӘҘӘБИӘТ:

**Аракин В. Д.** Н.К. Дмитриев и его вклад в отечественную тюркологию // Советская тюркология, 1973, № 4, с. 71 – 80.

**Гарипов Т. М.** Корифей отечественного языкознания // Ватандаш, 1998.

**Дмитриев Н. К.** Башҡорт теленең грамматикаһы/ яуаплы редакторы М.В. Зәйнуллин – Өфө, 2008.

**Дмитриев Н. К**. Строй тюркских языков. М.: Издательство восточной литературы, отв.редактор Э. В. Севертян, 1962. – 607 с.

**Зәйнуллин М. В.** Атаҡлы тюрколог// Башҡортостан уҡытыусыһы, 1988, №9. – 45-46-сы биттәр.

**Ишбулатов Н. Х.** Профессор Н. К. Дмитриев // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1969, № 8. – 44-45-се биттәр.

Профессор Н.К. Дмитриев и актуальные проблемы тюркологии // Материалы международной научной конференции. Отв. редактор М. Зайнуллин. – Уфа, РИЦ БашГУ, 2008. – 441 с.

Профессор Н. К. Дмитриев и башкирская филология. Материалы республиканской конференции. Отв. редактор М. Зайнуллин. – Уфа, РИЦ БашГУ, 1998.–212 с.

Профессор Николай Константинович Дмитриев. Биобиблиография. Составитель проф. М. В. Зайнуллин – Уфа: РИЦ БашГУ, 2002. – 68 с.

**Юлдашев А. А.** О книге проф. Н. К. Дмитриева «Грамматика башкирского языка»

***Работа выполнена при финансовой поддержке гранта ГНТП РБ «Республика Башкортостан: новые парадигмы общественно-политического, социально-экономического и духовно-культурного развития» в рамках научно-исследовательского проекта «Сохранение и развитие языков народов Республики Башкортостан: проблемы и перспективы» на 2013 г.***

# ДАНЫ ҺӘМ ЭШЕ ҠАЛДЫ…

*(Булат Ғафаровтың тыуыуына – 75 йыл)*



Булат Баҡый улы Ғафаров 1938 йылдың 27 авгусында Ейәнсура районының Өмбәт ауылында тыуған. Ошонда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Абзан урта мәктәбендә белем алыуын дауам итә. Башҡорт әҙәбиәтенә һөйөүе, филолог булыу хыялы 1957 йылда Башҡорт дәүләт университетының тарих-филология факультетына алып килә. Университетты 1962 йылда тамамлағас, Булат Баҡый улы Баймаҡ районы Түбә ҡасабаһындағы 2-се мәктәпкә эшкә ебәрелә. Ул бында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен алып бара, уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары вазифаһын башҡара. Мәктәптә эшләгән йылдарҙа ул әҙәбиәт уҡытыу методикаһы менән ҡыҙыҡһына, эҙләнә һәм, тәжрибә уртаҡлашыу ниәтенән, «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Ағиҙел» журналдарында ғилми-методик характерҙағы мәҡәләләр яҙып баҫтыра һәм ғилми-практик конференцияларҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың актуаль проблемалары буйынса доклад менән сығыш яһай.

1970 йылда Булат Баҡый улы Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһына асисстент итеп эшкә саҡырыла. Тынғыһыҙлығы, үҙ-үҙенә талапсанлығы, туҡтауһыҙ эҙләнеүе, белемен камиллаштырыуы ғилми-методик хеҙмәт яҙыуға килтерә, һәм ул 1978 йылда кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. 1980 йылда – доцент, ә 1995 йылда профессор дәрәжәһен ала.

Б.Б.Ғафаров студенттарҙың уҡыу, ғилми-тикшеренеү эштәрен оҫта ойоштороусы юғары квалификациялы белгес ине. Ул башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы курсынан лекциялар уҡыны, практик, лаборатор дәрестәр үткәрҙе, студенттарҙың педагогик практикаһын етәкләне. Мәктәптә әҙәбиәт уҡытыуҙың актуаль проблемалары буйынса махсус семинарҙар алып барҙы. Уның етәкселегендә студенттар курс, диплом эштәре яҙҙы, ғилми-практик конференцияларҙа мәҡәләләр менән сығыш яһаны.

Б.Б.Ғафаров башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһын төплө өйрәнеү өсөн аспирантура асыуға иреште һәм үҙ мәктәбен булдырҙы. Уның етәкселегендә аспиранттар әҙәбиәт методикаһынан төрлө йүнәлештә фәнни эҙләнеүҙәр алып барҙы. Үкенескә ҡаршы, остазыбыҙҙың ғүмере ҡыҫҡа булды, һәм уның ике аспиранты – Ф. Ә. Аҡҡужина-Хөснөтдинова менән Г. Ш. Аҙнабаева ғына кандидатлыҡ диссертацияһын Мәскәүҙә яҡлап өлгөрҙө. Уҡытыусы-методист булараҡ,

Б. Б. Ғафаров мәктәптәр, район һәм ҡала мәғариф бүлектәре менән тығыҙ бәйләнештә эшләне: уҡытыусыларҙың асыҡ дәрестәренә йөрөнө, төрлө методик ярҙам күрһәтте, квалификацияны арттырыу курстарында лекциялар уҡыны; конференцияларҙа, секция ултырыштарында башҡорт әҙәбиәтен уҡытыуҙың яңы ысулдары һәм алымдары, алдынғы технологиялар тураһында сығыштар яһаны; йыш ҡына төрлө мәктәптәрҙә, уҡыусылар менән осрашып, уҡытыусы һөнәре, туған тел һәм әҙәбиәт проблемалары тураһында әңгәмәләр ойошторҙо.

Профессор Б.Б.Ғафаров Башҡортостанда педагогик белем биреүҙе ойоштороусы етәксе булараҡ киң билдәлелек яуланы: 1974–1982 йылдарҙа Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтында филология факультетының декан урынбаҫары, ә 1982–1997 йылдарҙа ошо факультеттың деканы булып эшләне. Булат Баҡый улының инициативаһы һәм тырышлығы менән башҡорт филологияһы факультеты асылды. Ул 1997–2003 йылдарҙа башҡорт филологияһы факультетын етәкләне, шул нигеҙҙә тел ғилеме үҫешенә, республика мәктәптәре өсөн юғары квалификациялы белгестәр әҙерләүгә ҙур өлөш индерҙе. Етәксе, тәжрибәле уҡытыусы-методист, ғалим булараҡ, республика сиктәрендә генә түгел, күрше өлкәләрҙә лә танылыу яуланы.

Профессор Булат Баҡый улы 100-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт баҫтырып сығарҙы, шул иҫәптән – 2 монография, 16 уҡытыу-методик ҡулланма, 5 дәреслек, 5 программа һ.б. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен атап китәйек: «Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә төрлө жанрҙағы әҫәрҙәрҙе өйрәнеү» (Өфө, 1992), «Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә лексик-стилистик күнегеүҙәр башҡарыу» (Өфө, 1994), «Лирик әҫәрҙәрҙе өйрәнеү» (Өфө, 1996), «Әҙәбиәттән яҙма эштәр» (1994), (1999), «Мәктәптә башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүҙең теоретик һәм методик нигеҙҙәре» (2001).

Ғалим «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Ағиҙел» журналдары, «Йәшлек», «Башҡортостан», «Ашҡаҙар» гәзиттәре менән әүҙем хеҙмәттәшлек итте. Уның методик мәҡәләләре, уҡыу ҡулланмалары – бөгөн дә уҡытыусылар һәм студенттар өсөн файҙалы сығанаҡ.

Булат Баҡый улы фән, мәғариф өлкәһендәге ҡаҙаныштары һәм ғилми-педагогик эшмәкәрлеге өсөн Башҡортостан Республикаһы, Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының Маҡтау грамоталарын, «РСФСР-ҙың мәғариф алдынғыһы» билдәһен алды, «БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы», «Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы», «Рәсәй Федерацияһының Махсус педагогия һәм социаль фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы», «Махсус урта һәм юғары белем биреүҙең маҡтаулы хеҙмәткәре» тигән исемдәргә лайыҡ булды.

**Фәүриә АҠҠУЖИНА,**
**БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы**
**башҡорт әҙәбиәте кафедраһы доценты.**

## ХАЛЫҠ ӘЙТҺӘ, ХАҠ ӘЙТӘ

Мәҡәл-әйтемдәр халыҡтың быуаттар һуҙымында тупланған тапҡыр аҡылын һаҡлауы менән әһәмиәтле. Уларҙың туғанлыҡҡа бәйләләрен ҡарап үтәйек.

Ҡан-ҡәрҙәште мал *ҡәрҙәше* айырған.
Ауырыу – аштан, дау – *ҡәрендәштән,*
Таҙ – таныштан, ҡутыр – ҡамыштан.
Ашап-эскәндә дуҫ яҡшы, ҡанлы көндә *ҡәрендәш* яҡшы.
Ҡатын *ҡәрендәш* ҡаҙан янында, ир *ҡәрендәш* ишек төбөндә.
*Ҡәрендәшең* юҡ булһа, далала ҡалыр яңғыҙ баш.
Ҡәҙер белмәгән *ҡәрендәштән* ҡәҙер белгән эт яҡшы.
*Ҡәрендәшең* үлһә лә, ҡәҙерләүсең үлмәһен.
*Ҡәрендәштең* байы яҡшы, ҡатындың һауы яҡшы.
Йән *ҡәрендәште* мал ҡәрендәш айырған.
Тауҙа булыр тарғыл таш, тарыҡһаң, сыға күҙҙән йәш;
Тар ҡултыҡтан уҡ тейһә, тартып алыр *ҡәрендәш.*
Яҙ ҡышынан билдәле, ҡыҙ – *ҡәрендәшенән.*
Яҡын дуҫ йыраҡ *ҡәрендәштән* яҡшыраҡ.
Яулы көндә ят яҡшы, ҡанлы көндә *ҡәрендәш* яҡшы.

Күреүебеҙсә, туған-ара мөнәсәбәттәрҙә киҫкенләшеү осраҡтары булыуына ҡарамаҫтан, ҡан-ҡәрҙәшлек ептәренең өҙөләүе хупланмай. Юҡҡамы ни башҡорттоң үҙ нәҫелдәштәрен ете быуынына тиклем мотлаҡ белергә тейеш булыуы йола, ҡанун рәүешендә үтәлгән һәм халыҡты туплау, бер бөтөнгә ойоштороуҙа төп шарт булып быуындан-быуынға күсә килгән.

Үҙ-ара мөнәсәбәткә бәйле мәҡәл-әйтемдәр ҙә фәһемле:

Аҡылдың *юлдашы* – бәхет.
Алйот *юлдаш* булмаҫ, ишәк *моңдаш* булмаҫ.
Арбалыға *юлдаш* булма, юрғалыға *юлдаш* бул.
Ат – егеттең *юлдашы.*
Атлы *юлдаш* арбалыға иш түгел.
Атлы йәйәүлегә *юлдаш* түгел.
Ауға барһаң, зирәк бул, *юлдашыңа* терәк бул.
Ашты һеңгәс маҡта, *юлдашты* белгәс маҡта.
Берәү йәнгә *юлдаш,* берәү малыңа *юлдаш.*
Бүре һарыҡҡа, бай ярлыға *юлдаш* булмаҫ.

Ир үҙенән күрер, ирлекһеҙ *юлдашынан* күрер.
Ирҙең *юлдашы* ла ат, *моңдашы* ла ат.
Ир-егетте *юлдашына* ҡарап беләләр.
Ир-егеттең ике *юлдашы* бар: батырлыҡ һәм тәүәккәллек.
Йүнһеҙгә юлһыҙ *юлдаш.*
Йыланға *юлдаш* булһаң, ҡулың сағыр.
Йыр – кешенең *юлдашы.*
Кешене юл боҙмай, яман *юлдаш* боҙа.
Күңеле һуҡырға *юлдаш* булма, күҙе һуҡырға *юлдаш* бул.
Ҡараҡ менән *юлдаш* булма, ғәйбәтсе менән *серҙәш* булма.
Ҡатының – ғүмерлек *юлдашың.*
Ҡурҡаҡ менән *юлдаш* булма, көйһөҙ менән *моңдаш* булма.
Ҡурҡаҡты *юлдаш* итмә.
Һуҡыр күңелле әҙәмде *юлдаш* итмә, *юлдаш* итһәң, хаҡ юлында уңыш көтмә.
Тиле менән *тиңдәш* тә, *юлдаш* та булма.
Тыштан йыуаш, эстән шайтанға *юлдаш.*
Уғры менән *юлдаш* булма, ҡатын-ҡыҙ менән *серҙәш* булма.
Үҙ башыңды дауға бирһәң дә, *юлдашыңды* яуға бирмә.
Үҙеңдән *юлдашың* батыр булһын.
Һуҡырҙың күҙе – бармаҡ, *юлдашы* – таяҡ.
Юл *юлдашһыҙ* булмай.
*Юлдашланмайынса* кешене белеп булмай.
*Юлдашлының* юлы киң.
Юлға сыҡһаң, *юлдашың* үҙеңдән артыҡ булһын.
Юлға сыҡһаң, янып сыҡ, *юлдашыңды* танып сыҡ.
Юлға *юлдаш* алып сыҡ.
Юлда юлыҡҡан *юлдаш* булмаҫ.
Юлдан ҡал, *юлдаштан* ҡалма.
*Юлдаш* тапмаған юлынан яҙыр.
*Юлдашы* яманды яу алыр.
*Юлдашың* яман булһа, йыраҡ йөрөп тән ҡатма,
Ҡатының яман булһа, кеше алдында һүҙ ҡатма.
Юлы уңыр егеттең *юлдашы* сығыр алдынан.
Юрға менгән *юлдашынан* айырылыр,
Күп йәшәгән *ҡорҙашынан* айырылыр,
Күп һөйләгән дуҫынан айырылыр.
Юрғалы менән *юлдаш* булма, наҙан менән *серҙәш* булма.
Юрғалы менән *юлдаш* булһаң, юлда ҡалырһың.
Яҡшы йәнеңә *юлдаш,* яман малыңа *юлдаш.*
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң – ирешерһең моратҡа,
Яман менән *юлдаш* булһаң – ҡалырһың һин оятҡа.
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң – уңырһың,
Яман менән *юлдаш* булһаң – туңырһың.
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң – шатланырһың,

Яман менән *юлдаш* булһаң – ҡартайырһың.
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң – эшең бөтөр,
Яман менән *юлдаш* булһаң – башың китер.
Яҡшы *юлдаш* юлға күндерер,
Яман *юлдаш* юлдан дүндерер.
Яман айғыр өйөрөн яуға алдырыр,
Яман егет *юлдашын* дауға ҡалдырыр.
Яман менән *юлдаш* булһаң – ярға йығылырһың,
Яҡшы менән *юлдаш* булһаң – малға юлығырһың.
Яман *юлдаш* яу булыр, бөтә эше дау булыр.
Яман *юлдаш* яуға ҡалдырыр, яман бей дауға ҡалдырыр.
Яман *юлдаштан* яман таяҡ яҡшы.
Яман *юлдаштан* яңғыҙлыҡ яҡшы.
Яман *юлдашты* ярты көн һаҡла.
Яманға баш булғансы, яҡшыға *юлдаш* бул.
Аҡыллы үҙен ғәйепләр, алйот *иптәшен* ғәйепләр.
Алтау ала булһа – аулағаны китер,
Икәү *иптәш* булһа – аңдығаны китер.
Выжданлыға выжданһыҙ *иптәш* түгел.
Иплегә *иптәш* күп.
*Иптәшең* һуҡыр булһа, күҙең ҡыҫ.
Үҙең һәләк бул – *иптәшеңде* ҡотҡар.
Яҡын *иптәшем* киткәс, ҡанатым һынды.
Ағай-энең бар ерҙә «дошманым юҡ» тимә,
Апһының бар ерҙә «*көндәшем* юҡ» тимә.
Бер ҡатындың ире үлһә, ҡырҡ ҡатынға көндәш була, ти.
*Көндәш* күргәндең ҡыҙын алма.
*Көндәшле* өйҙә көн дә көйөнөс.
*Көндәшлегә* төн оҙон, көнләксегә көн оҙон.
*Көндәштең* көлө лә көндәш.
Көткәнгә көн оҙон, *көндәшлегә* төн оҙон.
*Өйҙәш* булғансы, *көндәш* бул.
Аптыраш менән йөҙәш икәүһе кергән *өйҙәш.*
*Өйҙәш – көндәш.*
*Өйҙәш көндәштән* яман.
*Өйҙәш* менән торғансы, *көндәш* менән тор.
*Өйҙәш* өс көн торһа, өй минеке, тиер.
*Өйҙәш* аҫраһаң – һүҙ сығыр, тауыҡ аҫыраһаң – сүп сығыр.
*Өйҙәш* тә бер, *көндәш* тә бер: ҡысҡырыш та талаш.
Эт менән ҡоҙа булһаң, һөйәк менән туй итерһең,
Яман менән *өйҙәш* булһаң, яу менән көн итерһең.
Ағай-эне татыу булһа, менергә ат етә,
*Килендәштәр* татыу булһа, ашарға аш етә.
Килен – *килендәшкә көндәш.*
Атаһы *ҡорҙаштың* балаһы *ҡорҙаш.*

Дуҫты айырған – дау, *ҡорҙашты* айырған – яу.
*Ҡорҙашыңа* – түр башың.
Ағай-эненең аты уҙғансы, *ауылдашыңдың* тайы уҙһын.
*Күршеләш* байың булһын, аҡһаҡ тайың булһын.

Шулай итеп, халҡыбыҙ меңйыллыҡтар дәүерендә бөртөкләп йыйған тәжрибә-белемдәрен был осраҡта ла йыйнаҡлап, мәҡәл-әйтемдәрҙә төйнәп һаҡлаған. Улар – ысын мәғәнәһендә һәр кемдең тормошона ҡағылышлы иҫкәртеү-киҫәтеүҙәр, тәрбиә ҡанундары. Халҡыбыҙҙың тел байлығындағы был аҫыл һүҙҙәр, йышыраҡ ҡулланылып, бер-беребеҙҙе ҡәҙерләр, хөрмәтләр сара булып хеҙмәт итһен, кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә һығылмалылыҡ, йомшаҡлыҡ, ихтирамлылыҡ билдәһе булып ҡалһын ине! Уларҙың яҙма телмәрҙе нисек биҙәүен түбәндәге миҫалдарҙан күҙәтергә мөмкин:

*Арҡалаштар* барҙа аҙашманым,
Аяҡтарым ғына талмаһа.

(Шәһәрғәзи Ғәбдиев)

*Ҡатын-ҡыҙ шиғыр юлы кеүек,*
*Мең төрлө яңғыраш уята беҙҙә.*
*Шул мең төрлө яңғыраштың береһе*
*Ауаздаш булһа ҡатын-ҡыҙ күңеленә –*
*Ҡатын-ҡыҙ йөрәгендә һөйөү уяна.*

(Шамил Анаҡ)

*Яҡшымы алтын кейеү, ҡәрҙәш һөйөү, меңдәр йыйыу?*
*Остоҡ саҡлы булмаһа күңелдә инсанлыҡ һөйөү.*

(Ғизетдин Иҫәнбирҙин)

Кил *әле һин, иптәш!* Бир һин миңә
Һөйәлләнеп ҡатҡан ҡулыңды:
Янған йөрәк менән ысын, ихлас
Тәбрик итәм изге юлыңды.

(М. Ғафури)

Яңғыҙлыҡтан яфа сиккән саҡта
*Иптәш* була икән сәғәт тә.

(М. Ямалетдин)

Кешеләрҙе ғүмер оҙонлоғо ғына
Оҙаҡ йәшәтмәне, йәшәтмәҫ.
Ҡыҫҡа ғүмерҙе лә онотолмаҫлыҡ,
Файҙалы итә бел һин, *иптәш.*

(Б. Бикбай)

Бер ни ҡалмаҫ телдән, илдән,
Ҙур тарихлы башҡортлоҡтан –
Оран һалып остан осҡа,
*Иңдәш* булып йәндәш дуҫҡа,
Ҡалҡынмаһаң, Башҡортостан!

(Р. Ниғмәтуллин)

Ялп-ялп иткән ябалаҡ
Кемгә *юлдаш* булмаған?
Ҡырҙа үҫкән төҙ ҡурай
Кемгә *моңдаш* булмаған?

(Ҡобайырҙан)

*Тормоштоң мин төрлө сағын*
*Күрҙем, булды һөйөнөсө, нужаһы.*
*Тик һөйөүем өйҙәш йәшәмәне,*
*Ә күңелем булды хужаһы.*

(А. Игебаев)

Яуҙа – *яуҙаш, дандаш* һәм *ҡәберҙәш*
Изге һуғыш үткән майҙанда.

(М. Кәрим)

*Мөхәббәт – ул йәшлек юлдашы,*
*Шатлыҡ, һағыштарҙың юл башы.*

(Ҡ. Даян)

*Юлдашы* булмам һис ваҡыт ебектең,
Орсоғо булмам һис ваҡыт сүбәктең.

(С. Ҡудаш)

*Юлдаш* булһын миңә егәрлелек,
Башҡорт аты, һинең түҙемлек.

(Ғ. Рамазанов)

*Саҡ туңған йылға өҫтөнән*
*Үтергә булһаң тәүләп,–*
*Ҡыйыулығыңды юлдаш ит,*
*Ҡурҡма!*
*Баҫ тәүәккәлләп.*

(Фәнил Күзбәков)

Йыйып ҡына әйткәндә, халыҡтың тапҡыр аҡылын ижади үҫтереү бөгөнгө шиғриәтте лә балҡытып ебәрә.

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**

**Наоми**
**ВУЛЬФ**

# *Матурлыҡ хаҡында миф*

## Азат булыу ихтыяжы

Ниһайәт, оҙаҡ шымып торғандан һуң, ҡатын-ҡыҙ урамға сыҡты. 1970 йыл башында феминизм тергеҙелеүҙең әҙемтәһе булып килгән ике тиҫтә йыл эсендәге тәүәккәл эшмәкәрлектән һуң, Көнбайыш ҡатындары юридик азатлыҡҡа өлгәште, бала табыуҙы контролләү, юғары белем хоҡуғын алды, эшҡыуарҙар рәтен тулыландырҙы һәм төрлө һөнәргә эйә булды, үҙенең социаль роле тураһындағы иҫке, ҡатып ҡалған төшөнсәне баштүбән әйләндерҙе. Бер быуын алышынғандан һуң гүзәл зат үҙен азат итеп тоямы икән?

Үҫешкән илдәрҙең бай, белемле, азат ҡатын-ҡыҙы бығаса бер гүзәл зат та күрмәгән азатлыҡҡа эйә, әммә үҙен етерлек дәрәжәлә бәхетле тоймай. Ул төпкө аңда йәшәгән, иғтибарға лайыҡ булмаған ваҡ ҡына нәмәләрҙә лә, азатлыҡ етмәй тигән тойғо менән артабан да сикләнә алмай. Күптәр ябай ғына нәмәләр – тышҡы ҡиәфәт, тән, йөҙ, сәс, кейем – ҙур әһәмиәткә эйә икәнлеген танырға ла ояла. Әммә оялыу, ғәйеп һәм ҡаршылыҡ тойғоһон кисереүгә ҡарамаҫтан, күпселек гүзәл зат үҙенә: «Бәлки, сәбәп уларҙың яңғыҙ булыуында һәм нервылары ҡаҡшауында түгелдер, ә, бәлки, ҡатын-ҡыҙ азатлығы менән ҡатын-ҡыҙ матурлығы араһындағы бәйләнештәлер?» – тигән һорау бирә.

Ҡатын-ҡыҙ юридик һәм матди ҡаршылыҡтарҙы ни тиклем күберәк еңеп сыға, уның иңенә матурлыҡ тураһындағы күҙаллауҙар шул тиклем ауыр йөк булып ята. Күптәребеҙ үҫешендә торғонлоҡ кисереүен; үткәндәр менән сағыштырғанда, хәҙер ҡаушап ҡалыуын, килешмәүсәнлек, оятһыҙлыҡ һәм, ниһайәт, арығанлыҡ атмосфераһы хакимлыҡ итеүен тоя. Күп йылдар оҙайлы һәм файҙаһыҙ көрәш алып барғандан һуң, оло быуын ҡатын-ҡыҙы үҙен янып бөткәндәй хис

---

*Наоми Вульф — Америка журналисткаһы, шағирә һәм әҙәби тәнҡитсе. Уның «Матурлыҡ хаҡында миф» тигән китабы Америка Ҡушма Штаттарында 1991 йылда баҫылып сыға һәм тиҙ арала популярлыҡ яулай. 1993 йылда «Иностранная литература» журналы (№3) шул китаптан айырым бүлектәр нәшер итә (инглиз теленән русаға О.Басинская ауҙара). Бөгөн «Ағиҙел» әлеге журналда сыҡҡан ошо бүлектәрҙе тәҡдим итә. Руссанан башҡортсаға Зәйтүнә ӘЙЛЕ тәржемәһендәге материал беҙҙең уҡыусыларҙа ла, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ затында, ҡыҙыҡһыныу уятыр, тигән өмөттәбеҙ.*

итә, күп йылдар уларҙың сырағының яҡтыһын «шулай тейеш» тип ҡабул иткән йәш быуын яңы ут тоҡандырыу тураһында бигүк хәстәрлек күреп бармай.

Һуңғы тиҫтә йылда беҙ власть структураларына үтеп индек; шул ваҡытта дөрөҫ туҡланыуҙы боҙоу осраҡтары күбәйҙе, косметик хирургия медицинаның иң тиҙ үҫешкән тармағына әйләнде. Һуңғы биш йылда ҡулланыу сығымдары икеләтә артты, порнография ҡәҙимге кино һәм видеопродукцияны ҡысырыҡлап сығарҙы, ә Америка ҡатын-ҡыҙының 33 проценты тикшеренеүселәргә тормоштарындағы иң төп маҡсат 10 – 15 фунтҡа ябығыу икәнлеген белдерә. Йылдан-йыл аҡсаға, власҡа, мөмкинлектәргә һәм юридик хоҡуҡтарға эйә ҡатын-ҡыҙ һаны арта бара, әммә физик тойғолар күҙлегенән ҡарағанда, беҙ, бәлки, ысынлап та, «азат булмаған» өләсәйҙәребеҙгә ҡарағанда насарыраҡ хәлдәбеҙҙер. Хәҙерге тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: Көнбайыштың һалҡын ҡанлы, һөйкөмлө, уңышлы ҡатын-ҡыҙының азатлығын ағыулаусы бер нәмә бар. Ул ағыу – матурлыҡ тураһындағы күҙаллау, үҙ-үҙеңде күралмаусанлыҡ, тышҡы ҡиәфәтең тураһындағы бәйләнсек уйҙар, ҡартайыуҙан ҡурҡыу сығанағы.

Үҙҙәрен көслө тип һанаған бик күп ҡатын-ҡыҙҙың тап шундай хистәр кисереүе бер ниндәй ҙә осраҡлылыҡ түгел. Феминизмға ҡаршы маҡсатлы көрәш алып барыла, унда гүзәл зат матурлығы тураһындағы күҙаллауҙар уларҙың үҫешенә ҡаршылыҡ тыуҙырыусы сәйәси ҡорал рәүешендә файҙаланыла. Төп ҡорал – «матурлыҡ тураһындағы миф». Был – Сәнәғәт революцияһы ваҡытынан уҡ билдәле социаль феномендың заманса версияһы. Ҡатын-ҡыҙ өй усағы тураһындағы мифтан арынғас, уның йоғонтоһо бөткәс, бушлыҡты матурлыҡ тураһындағы миф тултыра.

Феминизмға хәҙерге һөжүм бик ажар, сөнки матурлыҡ идеологияһы – боронғо идеяларҙың иң һуңғыһы, һәм ул, кире осраҡта, феминизмдың икенсе тулҡыны азат итәсәк ҡатын-ҡыҙҙы һаман да контролдә тоторға һәләтле. Ул үҙ өҫтөнә әсәлек, ғаилә усағына бәйлелек, изгелек һәм күндәмлек тураһындағы миф үтәй алмаған социаль мәжбүр итеү, социаль баҫым бурысын алған, ҡатын-ҡыҙға феминизм биргән бөтөн яҡшы нәмәләрҙе юҡҡа сығара.

Бындай ҡорал ярҙамында хәҙерге Көнбайыш ҡатын-ҡыҙы тормошоноң төрлө кимәлдәге феминизм мираҫын юҡҡа сығарырға тырышалар. Феминизм беҙгә эшкә урынлашҡанда енес буйынса дискриминациялауға ҡаршы закон бирҙе; Бөйөк Британияла һәм Ҡушма Штаттарҙа шунда уҡ бығаса тарихта булмаған – ҡатын-ҡыҙҙы тышҡы ҡиәфәт буйынса дискриминациялау ҡануны эшләнде. Патриархаль дин емерелеү сигенә етте – уны тән ауырлығы һәм йәш тирәләй тыуҙырылған культ алмаштырҙы. Фриден (Бетти Фриден – 50-60-сы йылдарҙа феминизмдың билдәле идеологы, «Нәзәкәтлек мистикаһы» һәм «Был минең тормошомдо үҙгәртте» тигән китаптар авторы) тарафынан илһамландырылған феминисткалар нәзәкәтлелек мистикаһын пропагандалаған хужалыҡ тауарҙары рекламаһына ҡаршы көрәштә еңеп сыҡты. Ул ваҡытта диета һәм косметика индустрияһының баҫымы аҫтында йәш, ябыҡ манекенщица, нәзәкәтлек критерийы сифатында, бәхетле хужабикәне алмаштырҙы.

Сексуаль революция ҡатын-ҡыҙ шәһүәтлеген (сексуаллеген) асырға ярҙам итте; «матур порнография» ҡатын-ҡыҙ тарихында беренсе тапҡыр тауар «матурлығы»н туранан-тура эротика менән яһалма рәүештә бәйләп, ҡатын-ҡыҙҙың шәһүәтлек үҙҡимммәте хаҡындағы нескә аңын ватырға тырышты. Тыуымды көйләү хоҡуғы Көнбайыш ҡатын-ҡыҙына тән ауырлығын контролдә тотоу мөмкинлеген бирҙе, уның ҡарауы, маникенщицаларҙың тән ауырлығы ғәҙәти ҡатын-ҡыҙ ауырлығынан 23 процентҡа кәмене. Күҙ алдында дөрөҫ туҡланыу боҙолдо, киң күләмле невроз хупланды, сөнки ул ҡатын-ҡыҙҙы аҙыҡты һәм ауырлыҡты контролләүҙән мәхрүм итте. Ҡатын-ҡыҙ, сәләмәтлек – сәйәси категория, тип

таныуҙы талап итте, шул уҡ ваҡытта «косметик хирургия»ның тәрәнерәк үтеп инеүсе, үлемесле яңы ысулдары ҙур тиҙлек менән үҫешә башланы, ҡатын-ҡыҙҙың медицина ҡоллоғона эләгеүенең иҫке формаларын көсәйтте.

Яҡынса 1830 йылдан башлап һәр яңы быуынға миф тураһындағы үҙ варианты менән күрәшергә тура килде. «Миңә, – ти суфражистка Люси Стоун 1855 йылда, – әгәр тәнемә тулыһынса үҙем хужа түгел икән, тауыш биреү, милек менән идара итеү хоҡуғына эйә булыуым ғына аҙ». 80 йыл үткәс, ҡатын-ҡыҙ тауыш биреү хоҡуғына эйә булғас һәм уларҙың ойошҡан хәрәкәтенең беренсе тулҡыны һүрелгәс, Вирджиния Вульф, гүзәл зат үҙ тәне тураһында дөрөҫөн әйтә алғанғаса тағы ла тиҫтә йылдар үтәсәк, тип яҙа. 1962 йылда Бетти Фриден Нәзәкәтлелек мистикаһы ауына эләккән йәш ҡатындың әйткәндәрен былай тип билдәләй: «Һуңғы ваҡытта мин көҙгөгә ҡарайым да – әсәйемә оҡшаясағымдан ҡурҡам». Һигеҙ йылдан һуң, феминизмдың икенсе киҫкен тулҡыны килеүен хәбәр итеп, Жермена Гриер шундай «стереотип»ты һүрәтләй: «Уның һөйкөмлөлөгө, хатта «матурлыҡ» һүҙе лә бар... ул – ҡурсаҡ... Мин был маскарадтан ялыҡтым». Икенсе тулҡындың шундай бөйөк ҡаҙаныштарына ҡарамаҫтан, беҙ азат түгел. Хәҙер инде ҡыйратылған баррикадаларға ҡарай алабыҙ: революция беҙҙе баҫып алып, үҙенең юлындағы барлыҡ нәмәне үҙгәртте, шул саҡта донъяға килгән сабыйҙар ҡатын-ҡыҙ булып үҫеп етте, әммә ғәҙеллек һаманғаса тулыһынса тормошҡа ашырылмаған.

Матурлыҡ хаҡындағы миф түбәндәгеләрҙе аныҡлай: «матурлыҡ» тип аталған сифат һәр ерҙә һәм ысынбарлыҡта йәшәй. Ҡатын-ҡыҙ – уны кәүҙәләндерергә тырышырға, ә ир-ат уны кәүҙәләндергән гүзәл затҡа эйә булырға теләргә тейеш. Бындай ҡараш ир-ат өсөн түгел, ҡатын-ҡыҙ өсөн ҡәтғи талап булып тора, һәм бындай хәл-торош тәбиғи һәм мотлаҡ, сөнки биология, шәһүәтлек һәм эволюция менән бәйләнгән: көслө ир-ат ҡатын-ҡыҙ өсөн көрәшә, ә матур ҡатын-ҡыҙ бала табыу функцияларын яҡшыраҡ үтәй. Гүзәл заттың матурлығы уларҙың түллелегенә тап килергә тейеш, ә был система енси һайлап алыуға нигеҙләнгәнлектән, унан ҡотолоп һәм уны үҙгәртеп булмай.

Былай барыһы ла дөрөҫлөккә тап килмәй. «Матурлыҡ» – алтын стандарт кеүек үк, валюта системаһы. Теләһә ниндәй система кеүек үк, ул сәйәсәт менән билдәләнә һәм беҙҙең йөҙ йыллыҡта Көнбайышта был ир-аттың тейелгеһеҙлеге хакимлығын һаҡлап ҡалыуҙың иң камил һәм һуңғы ысулы булып тора. Ҡатын-ҡыҙҙы физик стандарттар көсләп таҡҡан яһалма ҡиммәттәр системаһына урынлаштырып, ул ҡатын-ҡыҙ ир-ат үҙенә алған мөмкинлектәр өсөн тәбиғәткә ҡаршы килгән алышҡа сығырға тейеш булған хәҙерге хәл-торошто сағылдыра.

Көнбайыш, гүзәл зат матурлығының барлыҡ ҡанундары Платондың Идеаль ҡатын-ҡыҙынан барлыҡҡа килгән, тип күрһәтергә тырышһа ла, «матурлыҡ» бөтөнләй дөйөм һәм үҙгәрмәүсән атама ла, эволюция функцияһы ла түгел: уның идеалдары төрҙәр үҫеше барлыҡҡа килгәндән дә тиҙерәк үҙгәрә. Хатта Чарльз Дарвин үҙенең, тәбиғи һайлау принцибынан тайпылған «матурлыҡ» «енси һайлау» продукты булып тора, тигән аңлатмаһы менән дә риза булмаған, сөнки гүзәл заттың «матурлыҡ» аша бер-береһе менән ярышыуы башҡа барлыҡ һөтимәрҙәр араһында ғәмәлдә булған тәбиғи һайлау принцибына ҡаршы килә. Антропология, инә (самка) ата (самец) уларҙы һайлаһын өсөн «матур» булырға тейеш, тигән күҙаллауҙы инҡар итә. Эвелин Рид, Элейн Морган һәм башҡалар иркәктең полигамиялы һәм орғасының моногамиялы булыуы тураһындағы социобиологик раҫлауҙарҙы инҡар итте. Юғары приматтарҙың аталары енси бәйләнештәрҙә инициатор булып тора: улар, үҙҙәренә яҡынлыҡ эҙләп, бик күп партнерҙар алмаштырып ҡына ҡалмай, ә «көтөүендәге ауырлы булмаған орғасы иң теләгәне булып тора, һәм был цикл уның ғүмере буйына дауам итә».

Матурлыҡ тураһындағы миф һәр ваҡытта ла ошолай ҡуҙалланмай. Бай ҡарттарҙың йәш, матур ҡыҙҙар менән йәрәшеүе ғәҙәти күренһә лә, Урта диңгеҙ буйында беҙҙең эраға тиклем яҡынса 25000 йылдан алып 700 йылға тиклемге матриархаль культтарҙа хәл-торош ҡапма-ҡаршы һүрәтләнә: «Алиһәнең бик күп һөйәрҙәре була… Бына миҫал: өлкәнерәк ҡатын-ҡыҙ һәм һылыу, еңел алмаштырып була торған егет – Иштар һәм Таммуз, Венера һәм Адонис, Кивела һәм Аттис, Исида һәм Осирис… Уларҙың берҙән-бер тәғәйенләнеше – илаһи ҡарынды ҡәнәғәтләндереү». «Матурлыҡ»ты ҡатын-ҡыҙ ғына яһамай һәм уны ир-ат ҡына баһаламай: Нигериялағы водабе ҡәбиләһендә иҡтисади хакимлыҡ ҡатын-ҡыҙ ҡулында, ә ҡәбилә ир-аттың матурлығына мөкиббән; ир-ат сәғәттәр буйына ҡатмарлы косметика менән мәшғүл һәм үҙ-ара – сағыу итеп буянып һәм кейенеп, янбаштарын тирбәлдереп атлап йөрөп – ҡатын-ҡыҙ баһалаған матурлыҡ конкурстарында ярыша. Матурлыҡ тураһындағы мифты аҡлауҙың бер ниндәй тарихи һәм биологик нигеҙе юҡ. Уның бөгөн ҡатын-ҡыҙ менән нимәлер эшләүе бары тик ихтыяждан сыға: властың хәҙерге структураһында , иҡтисадта, мәҙәниәттә ҡатын-ҡыҙға һөжүм итеү кәрәк.

Әгәр матурлыҡ тураһында миф эволюцияға, сексҡа, эстетикаға һәм Аллаһы Тәғәләгә нигеҙләнмәй икән, ул нимәгә нигеҙләнгән һуң? Ул үҙенә интимлыҡты, сексты, тормошто һәм гүзәл затты данлауҙы алыуға дәғүә итә. Ғәмәлдә ул үҙенә эмоциональ ситләшеүҙе, сәйәсәтте, финанстарҙы һәм сексуаль йәберләүҙе берләштерә. Матурлыҡ тураһындағы миф бөтөнләй ҙә ҡатын-ҡыҙ тураһында түгел. Ул – ир-ат институттары һәм улар булдырған власть тураһында.

Билдәле бер ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙа «гүзәл» тип исәпләнгән сифаттар – бары тик ошо осорҙа теләнгән ҡатын-ҡыҙҙың үҙ-үҙен тотошо символдары ғына: матур булыуға тышҡы ҡиәфәт түгел, ғәмәлдә үҙ-үҙен тотошо әмер бирә. Ҡатын-ҡыҙ араһындағы дәғүәселек – уларҙы айырырға тейешле мифтың бер өлөшө. Йәшлек (әлегә тиклем) һәм ғиффәтлек, сафлыҡ ҡатын-ҡыҙҙа «гүзәл» тип һанала, сөнки тәжрибәһеҙлекте һәм сексуаль мәғлүмәтһеҙлекте символлаштыра. Ҡатын-ҡыҙҙың ҡартайыуы «йәмһеҙ», сөнки гүзәл зат, олоғая килә, көслөгә әйләнә һәм шуға күрә улар араһындағы бәйләнештәр ҡайтанан өҙөлөп тора: олораҡ ҡатын-ҡыҙ йәшерәктәрҙән ҡурҡа, йәштәр – ҡарттарҙан, һәм матурлыҡ тураһындағы миф барлыҡ тормоштарын пыран-заран килтерә. Ә иң мөһиме – үҙ-үҙеңде тойоу тотошлай «матурлыҡ»ҡа бәйле булһын, беҙ даими кемдеңдер ситтән һоҡланыуына, таныуына мохтаж булһын өсөн кәрәк, сөнки тышҡы ҡиәфәт барыһының күҙ алдында һәм уны тиҙ генә рәнйетергә, ҡыйырһытырға мөмкин.

Матурлыҡ тураһындағы миф патриархат барлыҡҡа килгәнгә тиклем ниндәйҙер төр булараҡ йәшәһә лә, уның хәҙерге формаһы – сағыштырмаса күптән түгел уйлап табылған нәмә. Миф ҡатын-ҡыҙҙың матди бәйлелеге хәүефле сиккәсә көсһөҙләнгәндә сәскә ата. Сәнәғәт революцияһына тиклемге уртаса ҡатын-ҡыҙ «матурлыҡ»ҡа ҡарата киң күләмдә тиражланған физик идеал менән өҙлөкһөҙ сағыштырыуҙың йоғонтоһон хәҙерге гүзәл зат татығанса кисерә алмаған. Киң күләмле производство технологиялары үҫеше эпохаһына тиклем – дагерротиптар, фотографиялар – ғәҙәти ҡатын-ҡыҙ бындай образдар менән сиркәүҙән ситтә бик һирәк осраштҡан. Сөнки ғаилә – етештереү берәмеге булып һаналған, һәм гүзәл зат хеҙмәте ир-ат хеҙмәтен тулыландырып торған, аристократка йәки фәхишә булмаған ҡатын-ҡыҙҙың ҡимммәте уларҙың хеҙмәт тәжрибәһендә, эшлеклелегендә, физик көсөндә һәм түллелегендә, тип баһаланған. Тышҡы һөйкөмлөлөк, әлбиттә, әһәмиәткә эйә булған, әммә ғәҙәти ҡатын-ҡыҙ өсөн никах баҙарында «матурлыҡ» етди атрибут булып тормаған. Матурлыҡты заманса ҡабул итеү сәнәғәт үҫешендәге алға китеүҙән, етештереү берәмеге булараҡ ғаилә юҡҡа сығарылғас, ә урбанизация һәм тыуып килгән завод

системаһы инженер-социологтар көндөҙ эшкә китеүсе, «ашатыусы» категорияһын индергән йорт хужалығын «айырым өлкә» тип атауҙы талап иткәндән һуң, киң танылыу ала. Урта синыф киңәйә, тормош, белем кимәле күтәрелә, ғаилә бәләкәйләнә; белемле, эшләмәүсе, сәнәғәт капитализмының үҫеш системаһын ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә тормошона көсләп бәйләнеүен хәл иткән синыф барлыҡҡа килә. Беҙҙең күҙаллауҙарыбыҙҙың ҙур өлөшө ҡатын-ҡыҙ «матурлығ»ы 1830 йылдарҙан иртәрәк булмаған, беренсе тапҡыр ғаилә усағы культы атамаһы барлыҡҡа килгән һәм матурлыҡ стандарты уйлап табылған осорға тап килә. Беренсе тапҡыр яңы технологиялар модалы иллюстарцияларҙа, дагерротиптарҙа, ферротиптарҙа һәм баҫма гравюраларҙа ҡатын-ҡыҙ нисек булырға тейешлектең өлгөләрен күрһәтеүгә өлгәшә. 1840 йылдарҙа беренсе тапҡыр шәрә фәхишәләрҙең фотоһүрәттәре эшләнә, быуат уртаһында «матур» ҡатын-ҡыҙҙың образы файҙаланылған реклама барлыҡҡа килә. Классик сәнғәт өлгөләренең күсермәләре, донъяуи сибәркәйҙәрҙең, батша һөйәркәләренең һүрәттәре менән почта открыткалары, фарфор статуэткалар урта синыф ҡатын-ҡыҙы һатып алған сикле өлкәгә ташҡын булып ағыла.

Сәнәғәт революцияһы заманынан Көнбайышта урта синыф ҡатын-ҡыҙының үҙ-үҙен тотошо тормоштоң матди аспекты кеүек үк йоғонто яһаған идеалдар һәм стереотиптар ярҙамында идара ителә. Был уникаль хәл-торош уларға ҡаршы «мәҙәни заговор» теорияһын анализлау мөмкинлеген бирә. Матурлыҡ тураһындағы мифты үҫтереү беҙҙе ошо ҡулса эсендә бикләү өсөн ҡатын-ҡыҙҙың ҡыҙыҡһыныуҙарының тәбиғи компоненттары тип күрһәтелгән социаль легендаларҙың береһе генә була. Бер үк ваҡытта шундайыраҡ икенсе уйҙырмалар ҙа тыуҙырыла: әсәһенең даими күҙәтеүен талап иткән бала саҡ тураһындағы күҙаллауҙар; урта синыф ҡатын-ҡыҙын үҙен истерикаға (ҡыҙма) бирелеүсе, невропат итеп күрһәтергә мәжбүр итеүсе ҡатын-ҡыҙ биологияһы хаҡындағы күҙаллауҙар; тәртипле ҡатын-ҡыҙ – енси яҡтан һалҡын, тигән инаныуҙар;«типик ҡатын-ҡыҙ»ҙың эш төрҙәре – күңелһеҙ, бик күп ваҡытты алған канва менән сигеү йәки селтәр бәйләү кеүек шөғөлдәр. Былдай викториан уйлап табыуҙары ике функция үтәй: улар ҡатын-ҡыҙ энергияһын һәм аҡылын зыянһыҙ йүнәлешкә бороп ебәреү ысулы булараҡ хупланһа ла, гүзәл зат уларҙы сағылдырыу өсөн йыш ҡына ысын дәрт һәм ижадты файҙалана.

Әммә урта синыф ҡатын-ҡыҙының модаға, сигеүгә, балалар тәрбиәләүгә, ә инде йөҙәр йылдар хужабикә ролендә ижади ынтылышы ошо легендалар менән дәртләндерелеп тороуға ҡарамаҫтан, төп маҡсатҡа өлгәшелә: быуат ярым дауамында тиңе булмаған феминистик агитация барышында был стереотиптар гүзәл заттарҙың белем кимәле күтәрелеүе, уларҙың ирекле ваҡыты һәм сағыштырмаса матди бойондороҡһоҙлоғо барлыҡҡа килеүе һөҙөмтәһендә тыуған хәүефкә һөҙөмтәле ҡаршы торҙо.

Ҡатын-ҡыҙҙың аҡылын һәм ваҡытын йотоп торған тәбиғи тәғәйенләнеш тураһындағы социаль легендалар фаш ителә, әммә, һуғыштан һуңғы йылдарҙағы Нәзәкәтлек мистикаһында ҡалҡып сығыр өсөн, яңы шарттарға яраҡлашалар. Ул ваҡытта феминизмдың икенсе тулҡыны ҡатын-ҡыҙ журналдары «романтика», «ғаилә ҡотон һәм ғаилә тормошон булдырыу фәне» тип һүрәтләгән нәмәләрҙе юҡҡа сығара. «Ғаилә яҡынлығы» тураһындағы теңкәгә тейгән уйҙырма әһәмиәтен юғалта, һәм урта синыф күпләп өйҙәренән урамдарға сыға.

Шуға күрә легендалар йәнә үҙгәрә: феминистар хәрәкәте байтаҡ уйҙырмаларҙы фаш иткәс, һөжүмде йөҙәр тапҡыр көсәйтеү өсөн, уны бер өлкәгә генә йүнәлтергә кәрәк була. Ул, башҡаса бер ниндәй көскә эйә булмаған язалаусы ҡанундарҙың тыйыуҙарына һәм язаларына, дини бойороуҙарға һәм репродуктив ҡоллоҡҡа барлыҡ сикләүҙәрҙе тергеҙеп, азат ҡатын-ҡыҙҙың йөҙөнә һәм тәненә

ябырыла. Йорт эштәрен алып барыуҙың ауырлығы матурлыҡты һаҡлау буйынса Сизиф хеҙмәте менән алмаштырыла. Шул уҡ ваҡытта иҡтисад, хоҡуҡ, дин, секс, мәғариф, мәҙәниәт ҡатын-ҡыҙҙы үҙ биләмәләренә теләр-теләмәҫ кенә индерә, бигүк асылып бармай, ҡатын-ҡыҙ аңын матурлыҡ тураһындағы миф биләп ала. «Матурлыҡ» идеяһын файҙаланып, ул – үҙ ҡанундары, иҡтисады, дине, шәһүәтлеге, мәғарифы һәм мәҙәниәте менән – альтернатив донъя тыуҙыра. Был элементтарҙың һәр ҡайһыһы, уға тиклем йәшәгәндәре кеүек үк, репрессив була. Хәҙер, беҙ бер ни тиклем матди бойондороҡһоҙ булғас, Көнбайыштың уртаса ҡатын-ҡыҙын психологик яҡтан көсһөҙләндереү, һындырыу еңелерәк. Һуңғы быуында ҡалҡып сыҡҡан матурлыҡ тураһындағы миф элеккегә ҡарағанда тағы ла аяуһыҙыраҡ технология ҡулланырға тейеш. Уның заманса арсеналы – хәҙергеге идеалды миллионлап тиражлау. Был образ, ҡағиҙә булараҡ, коллектив сексуаль фантазияның емеше булып иҫәпләнһә лә, ғәмәлдә унда шәһүәтлек бик аҙ. Ул ҡайһы бер ир-ат институттарының ҡатын-ҡыҙ азатлығының хәүеф менән янауынан ҡурҡып тыуҙырылған. Улар ҡатын-ҡыҙ ғәйебен һәм беҙҙең азат булыуыбыҙ тыуҙырған ығы-зығылы ҡурҡыуын эксплуатациялай икән, тимәк, беҙ бик тәрәнгә инәбеҙ. Енестәр мөнәсәбәте үҙгәреүенең тиҙлегенән ҡаушап ҡалған һәм шаҡ ҡатҡан ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат ихтыяры менән тормошҡа ашырылған был коллектив реакцион иллюзия – үҙгәрештәрҙең елле-дауыллы океанындағы ҡаты ер киҫәге генә.

Замана ҡатын-ҡыҙын киң күләмдә «матур» итеп һүрәтләү ҡапма-ҡаршылыҡҡа эйә: мифҡа ярашлы, көнбайыш ҡатын-ҡыҙы үҫешкән һәм үҙенең индивидуаллеген камиллаштырған ваҡытта, «матурлыҡ», билдәләмә буйынса, инертлана, үҙгәрешһеҙ ҡала һәм үҙенсәлектәрен юғалта. Бындай иллюзия кәрәк һәм ул аңлы рәүештә эшләнгән, күрәһең: «матурлыҡ» ҡатын-ҡыҙҙың ысынбарлыҡтағы хәл-торошона туранан-тура ҡаршы килә. Аңһыҙ иллюзияның йоғонтоһо аңлы баҙар манипуляцияһына әүерелеп, көндән-көн арта, киңәйә бара: ҡеүәтле производство – йылына 33 млрд. доллар әйләнеш биргән диетик индустрия, косметика сәнәғәте (20 млрд), косметик хирургия (300 миллион) һәм порнография индустрияһы (7 млрд доллар) – аңһыҙ хафаланыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән капиталдан ойоша һәм, үҙ сиратында, киң күләмле мәҙәниәткә йоғонто яһап, был иллюзияны геометрик прогрессияла файҙаланырға, стимул бирергә, нығытырға һәләтле. Был йәшерен һүҙ беркетеү теорияһы түгел, быға ихтыяж да юҡ. Ғәҙәти ғаиләләрҙә нисек әкиәт һөйләнелә – йәмғиәт үҙ-үҙенә әкиәттәрҙе шулай һөйләй. Генрик Ибсен уларҙы «мотлаҡ булған алдаҡ» тип атай, ә психолог Дэниэл Гоулман, улар социаль кимәлдә нисек йоғонто яһай, ғаилә эсендә лә шундай уҡ йоғонто яһай, тип яҙа. «Йәшерен һүҙ беркетеү ҡурҡыныс дәлилдән иғтибарҙы ситкә йүнәлтеү йәки уның әһәмиәтен ҡабул итерлек кимәлгәсә үҙгәртеү менән хупланыла». Бындай социаль һуҡырлыҡ хаҡы, тип яҙа ул, йәмғиәттең емергес иллюзиялары. Ҡатын-ҡыҙ алдында шундай мөмкинлектәр асылды: улар ир-ат хакимлығын ҡаҡшатыу менән янай, һәм ике енестең дә коллектив ҡурҡыу реакцияһы контробраздар талап итә.

Ҡатын-ҡыҙға был иллюзияға бик ныҡ бирелә һәм был ысынбарлыҡҡа тап килә. Ул бары идея ғына түгел, ул өс үлсәмгә (трехмерность) эйә була һәм Тимер ҡатынға әүерелә. Ысын «тимер ҡатын» урта быуаттағы немец язалау ҡоралы була: һүрәтләнгән кәүҙәһе – тән формаһындағы футляр һәм йылмайып тороусы гүзәл һыҙатлы йәш ҡатын-ҡыҙ. Бәхетһеҙ ҡорбанды яйлап ҡына эскә бикләйҙәр, ҡапҡас, хәрәкәтләнеү мөмкинлеген сикләп, шартлап ябыла һәм кеше аслыҡтан, һыуыҡтан йәиһә тағы ла мәрхәмәтһеҙерәк ысулдан – эскә ҡағылған тимер тештәр ҡаҙалыуынан һәләк була. Ҡатын-ҡыҙ барып ҡапҡан йәки үҙҙәренең ирке менән барып эләккән заманса иллюзия ҡапҡаны ла шулай уҡ мәрхәмәтһеҙ һәм хәрәкәтте сикләй, шулай уҡ исем өсөн генә матурлап биҙәлгән. Хәҙерге мәҙәниәт

Тимер ҡатындың тышҡы ҡиәфәтенә лә иғтибарҙы йүнәлтә, шул уҡ ваҡытта ысын ҡатын-ҡыҙҙың тәнен һәм йөҙөн тәнҡит утына тота.

Ни өсөн ижтимағи ҡоролош, аныҡ ҡатын-ҡыҙҙың йәшәүен, йөҙҙәребеҙҙе һәм тәндәребеҙҙе күрмәмешкә һалышып, әһәмиәтебеҙҙе сикһеҙ рәүештә ҡайтанан «гүзәл» шаблондарға ҡайтарып ҡалдырырға тырышып, һаҡланыу ихтыяжын тоя икән? Аңһыҙ шәхси ҡурҡыу «кәрәкле алдаҡ» тыуҙырыуҙа ҡеүәтле көс булыуы ихтимал, ә иҡтисади императив быға тулы гарантия бирә. Ҡолдар хеҙмәтенә нигеҙләнгән иҡтисад шундай ҡолдар образын тыуҙырыуға мохтаж, улар «ҡоллоҡ институты»н аҡлай. Көнбайыш иҡтисады хәҙер тулыһынса түбән хеҙмәт хаҡы түләнгән гүзәл зат хеҙмәтенә бәйле. Ҡатын-ҡыҙҙы үҙенең «түбән баһалы» булыуын танырға мәжбүр иткән идеология беҙҙе баһалап еткермәүҙәрен тойоу мөмкинлеге биргән феминизмға ҡаршы тороу өсөн кәрәк. Бының өсөн заговор ҡорорға ла кәрәкмәй, бары тик тейешле атмосфера ғына булырға тейеш. Хәҙерге иҡтисад гүзәл заттың матурлыҡ мифы сиктәрендәге хәленә таяна. Иҡтисадсы Джон Кеннет Гэлбрейт «йорт эштәрен алып барыуға «юғары тәғәйенләнеш» итеп ҡарауҙың оҙон ғүмерле булыуы»на түбәндәгесә аңлатма бирә: ҡатын-ҡыҙ тураһында тәбиғәте буйынса Нәзәкәтлек мистикаһы эсенә бикләнгән йән эйәһе тип күҙаллау, ти ул, «ҡатын-ҡыҙҙың беҙҙең индустриаль йәмғиәтте үҫтереүҙәге ҡулланыусы булараҡ билдәле бер роль уйнауы фактын йәшереү популяр социология, матбуғат, матур әҙәбиәт аша һеңдерелде… Иҡтисади сәбәптәр менән сикләнгән тәртип тора-бара социаль изгелеккә әүерелә». Ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге баһаһын изге хужабикә идеалына еткереп үлсәү мөмкинлеге ҡалмағас, элеккеләре фашланғас, яңы ҡулланыусы бойороғон булдырыу һәм производствола уларҙың хоҡуҡтарын ҡыҫыуға яңы аҡланыуҙар табыу өсөн матурлыҡ тураһындағы миф “изге матурлыҡ” идеалы тураһындағы аңлатманы индерә.

Тимер ҡатынды тағы бер иллюзия тулыландыра: ҡатын-ҡыҙ хәрәкәтенең абруйын төшөрөү өсөн, ҡабаттан Йәмһеҙ Феминистканың карикатураһы тергеҙелә. Ул төп нөхсә түгел, ә XIX быуатта уҡ феминисткаларҙы мыҫҡыл итеү өсөн уйлап табылған. Уның яҡлылар «Ҡатын-ҡыҙ һомғоллоғо прототибы… иртәнге ысыҡ кеүек саф һәм таҙа» тип йөрөткән билдәле Люси Стоун яуызлыҡ теләүселәр тарафынан Викториан феминисткалары тураһында яҙылған алымда мыҫҡыл ителә: «ирҙәргә оҡшаған ҙур кеше башмаҡтар кейә, сигара тарта һәм һалдат кеүек һүгенә». 1960 йылда, был карикатура тергеҙелмәҫ элек үк, Бетти Фриден, алдан күреп: «…бөгөн тиражланған феминистканың биҙҙергес образы Штаттарҙа ҡатын-ҡыҙҙың тауыш хоҡуғын индереүгә аяҡ терәп ҡаршы тороусыларҙы иҫкә алырға мәжбүр итә», – тип яҙа. 30 йыл үткәс, уның һығымтаһы хаҡ булыуы иҫбатлана: ҡатын-ҡыҙҙы йәмәғәт эшмәкәрлеге өсөн язалау, уның шәхесен түбәнһетеү маҡсатында тергеҙелгән был карикатура һәр урында дан-дәрәжә яратҡан ҡатын-ҡыҙға яңы сикләүҙәрҙең өлгөһө булып китә. Феминистар хәрәкәтенең уңышлы икенсе тулҡынынан һуң, матурлыҡ тураһындағы миф ҡатын-ҡыҙҙы тормоштоң барлыҡ кимәлдәрендә лә көсһөҙләндереү өсөн камиллаштырыла. Ҡатын-ҡыҙ тәненә бәйле неврόздар эпидемия характерын ала. Миф уларҙың ауыр һәм ғәҙел көрәштә яулап алған ҡаҙанышын әкренләп, һиҙҙермәйенсә, үҙенең емергес көсөнөң ғәмәлдәге зыяны тураһында мәғлүмәт бирмәй генә емерә.

Бөгөнгө матурлыҡ тураһындағы миф бынан йөҙ йыл элек булған Нәзәкәтлек мистикаһына ҡарағанда ла мәкерлерәк. Ҡурсаҡ өйөнөң ишеге шартлап ябылды. Бынан бер быуын элек гүзәл зат төрлө ҡулайламалар менән тынҡыслап тултырылған шәхси йорто рәүешендәге ожмахынан йөҙ борҙо, әммә улар бөгөн килеп эләккән ҡапҡандан шартлатып ябып сығып китер ишек юҡ. «Матурлыҡ»тың

хәҙерге һөжүменең емергес көсө ҡатын-ҡыҙҙы физик яҡтан юҡ итә, психологик яҡтан өмөтһеҙләндерә. Әгәр беҙ нәзәкәтлек артына йәшеренгән ауыр йөктән арынырға теләһәк, тәү сиратта, беҙгә тауыш биреү, плакаттар һәм үҙ фекерендә үткәрергә тырышыу түгел, ә тормошҡа яңы ҡараш кәрәк буласаҡ.

## Матурлыҡ тураһындағы мифҡа таянып

Беҙҙе буйһондорорға тырышҡан машина юҡҡа сығып, беҙ тере ҡалғас, икенсе төрлө киләсәк төҙөй аласаҡбыҙмы?

Матурлыҡ тураһындағы миф ҡатын-ҡыҙ тормошоноң социаль сикләүҙәрен беҙҙең йөҙөбөҙгә һәм тәнебеҙгә күсереп, яңы хоҡуҡтарыбыҙға ҡаршы тора. Уға яуап итеп, бер быуын элек ҡатын-ҡыҙ үҙҙәренең йәмғиәттәге урыны тураһында һораған кеүек, «Үҙ тәнебеҙҙә беҙ кем?» тип һорарға тейешбеҙ.

Ҡатын-ҡыҙ нимәне тәшкил итә? Ул унан яһаған образ булып торамы? Уның ғүмере һәм тәжрибәһе ниндәйҙер ҡиммәткә эйәме? Яуап ыңғай икән, беҙ уны күрһәтеүҙән оялырға тейешбеҙме? Ни өсөн мотлаҡ йәш күренергә кәрәк?

Гүзәл зат тәненең мөмкинлек сиктәре, уны аша атларға ярамағанлығы тураһындағы фекер бик йәш. Беҙ, күрәһең, уны тулыһынса аңлап та етмәйбеҙ. Был фекерҙе артабан үҫтерә алабыҙмы? Әллә барлыҡ ҡатын-ҡыҙ ҙа тәбиғәттән уны формалаштырыуҙарға, шымартыуҙарға, физик ҡыҫылыуҙарға дусар итеүгә ҡулайлаштырылған һығылмалы затмы?

Ҡатын-ҡыҙ тәне, ир-ат тәне кеүек үк, үҙенең бөтөнлөгөнә шундай уҡ ҡарашҡа лайыҡмы? Кейемгә мода менән ҡатын-ҡыҙ тәненә мода араһында айырма бармы? Әгәр ҡасандыр гүзәл заттың тышҡы ҡиәфәтен арзанға, ауыртыныуһыҙ һәм бер ниндәй хәүефһеҙ үҙгәртеп була икән, беҙ уны эшләргә тейешбеҙме? Өлгөргәнлек менән ҡартайыу араһындағы тигеҙлек бөтөргә тейешме? Әгәр ошолар барыһы ла тормошҡа ашһа, беҙ бер нәмә лә юғалтмайбыҙмы?

Ҡатын-ҡыҙҙың шәхес булыуы иҫәпкә алынамы? Беҙҙе бүтән кемгәлер оҡшарға тырышырға теләргә мәжбүр итеп буламы? Ҡатын-ҡыҙ тәненең төҙөлөшөндә ниндәйҙер әҙәпһеҙ, килешмәгән нәмә бармы? Ҡатын-ҡыҙ тәненең кәмселекле булыуы тураһындағы күҙаллауҙар хәҙер ҡатын-ҡыҙ аҡылының кәмселеге тураһындағы элекке идеяны алмаштыра. Ҡатын-ҡыҙ үҙ аҡылының бер ҙә кәм түгеллеген раҫланы, шулай булғас, тәндәребеҙ нимәһе менән кәм һуң?

Ысынлап та, «матурлыҡ» сексты аңлатамы? Ҡатын-ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәте уның шәһүәтлегенә тап киләме? Ул сексуаль ләззәткә һәм үҙен ихтирам итеүҙәренә хоҡуҡлымы? Йәки ул был хоҡуҡты, элек никах аша яулап алғандағы кеүек, «матурлыҡ» ярҙамында яуларға тейешме? Нимә ул ҡатын-ҡыҙ шәһүәтлеге һәм ул нимәгә оҡшаш? Уның сауҙа рекламаһы һүрәтләүе менән берәй уртаҡлығы бармы? Ҡатын-ҡыҙ уны тауар кеүек һатып алырға тейешме? Ғәмәлдә ҡатын-ҡыҙҙы һәм ир-атты бер-береһенә нимә тарта, нимә ылыҡтыра?

Ҡатын-ҡыҙ матурмы, әллә юҡмы? Әлбиттә, беҙ матур. Әммә беҙ быға матурлыҡ тураһындағы мифтан тулыһынса баш тартмай тороп ышанмаясаҡбыҙ.

Былар барыһы ла, беҙ, бер ниндәй ғәйеп тоймайынса, ирендәребеҙҙе буямай йөрөһәк тә ярай, тигәнде аңлатамы? Шулай булып ҡуймаһын. Беҙ ҡатын-ҡыҙ шәһүәтлеген, быуындар араһындағы бәйләнеште, туҡымаларҙы, уларҙың формаһын, төҫөн ҡарау һәм тойоу ләззәтен ҡатын-ҡыҙҙың бер үк ваҡытта саф һәм бысраҡ булған шатлыҡ сығанағын – ул биләп алған һәм аманат итеп тотҡан бөтөн нәмәне мифтан айырып алырға тейешбеҙ. Беҙ мифты емереп, сексҡа, мөхәббәткә, һөйкөмлөлөккә, зауыҡҡа зыян килтермәйәсәкбеҙ, киреһенсә, уларҙың быға тиклем булғандан да нығыраҡ асылыуына мөмкинлек бирәсәкбеҙ. Мин ҡатын-ҡыҙҙы үҙен яҡшы тойған нәмәләрҙе түгел, ә, тәү сиратта, беҙҙе нимә насар

тойорға мәжбүр итә – шуны тәнҡитләйем. Барыбыҙға ла матур һәм һөйөклө, ҡәҙерле булыу оҡшай.

Әммә 160 йыл дауамында Көнбайышта ҡатын-ҡыҙҙың белемле урта синыфын ҡатын-ҡыҙ камиллығы тураһындағы төрлө күҙаллауҙар ярҙамында алданылар. Был боронғо уңышлы алым ҡатын-ҡыҙ мәҙәниәтенән барлыҡ яҡшы нәмәне алып, ир-ат хакимлыҡ иткән йәмғиәттең иң ҡаты һәм ҡәтғи талаптарын индерҙе. 1920 йылда – ҡатын-ҡыҙ оргазмы, 1950 йылдарҙа – ғаилә һәм бала, 1980 йылдарҙа матурлыҡ мәҙәниәте шундай цикләүҙәргә дусар ителә. Шундай тактика һөҙөмтәһендә беҙ һәр быуында сирҙең үҙен түгел, уның симптомдары буйынса фекер алышып, бушҡа ваҡыт уҙғарабыҙ.

Барбара Эренрайх менән Дирдра Инглиштың эштәрендә ышандырырлыҡ итеп күрһәтелгән ошо идеалдарҙы уҫал маҡсаттарҙа булдырыу моделенә тарихыбыҙ дауамында шаһитбыҙ. Беҙ уны, проблеманы мәңгегә хәл итеү өсөн, хәҙерге матурлыҡ тураһындағы миф менән сағыштырырға тейешбеҙ. Әгәр шуны эшләмәһәк, матурлыҡ тураһындағы мифты юҡҡа сығарыу менән уның урынын яңы идеология биләйәсәк. Ахыр сиктә матурлыҡ тураһында миф – тышҡы ҡиәфәт, диета һаҡлау, хирургик операциялар йәки косметика хаҡында – йорттағы хеҙмәт тураһында һөйләгән Нәзәкәтлек мистикаһынан артыҡ һөйләмәй. Һәр быуында ҡатын-ҡыҙ тураһында миф тыуҙырыуға өлөш индергәндәрҙе ысынбарлыҡта был проблемалар борсомай.

Нәзәкәтлек мистикаһын ижад итеүселәр ялтырап торған иҙән ҡатын-ҡыҙ төп асылын сағылдырыуына ышанмай. Иҫләүемсә, ҡатын-ҡыҙ хәрәкәте ҡыҫымын тотоп тороуҙың һуңғы ысулы итеп килбәтһеҙ рәүештә (неуклюже) ҡатын-ҡыҙҙың күрем ваҡытындағы психологик тайпылыштары тураһындағы идеяны тергеҙгәндә, бераү ҙә күремдең эшкә һәләтлеккә йоғонто яһауына ышанманы. Шуның кеүек, матурлыҡ тураһындағы миф өсөн дә ҡатын-ҡыҙҙың ауырлығы, сәс ҡуйылығы йәки тән шымалығы бөтөнләй мөһим түгел. Әгәр иртәгә үк өйгә ҡайтҡас, эшһеҙ ҙә, бойондороҡһоҙлоҡһоҙ ҙа, оргазмһыҙ ҙа, аҡсаһыҙ ҙа тора алабыҙ, тип белдерһәк, миф шунда уҡ үҙенең ҡыҫымын бушатасағын интуиция аша һиҙәбеҙ.

Быны аңлау ауырыу симптомдары артындағы ысын проблеманы асыҡ күрергә һәм уға анализ яһарға ярҙам итәсәк. Миф күҙлегенән сығып ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙҙың ғәмәлдә ниндәй булыуы – бары тик улар үҙҙәрен йәмһеҙ тип һанаһын – мөһим түгел икән, ҡатын-ҡыҙ үҙен гүзәл тип иҫәпләгәндә, уның тышҡы ҡиәфәте ниндәй булыуы мөһим түгел икәнен аңларға тейешбеҙ. Ысын проблема ҡатын-ҡыҙ косметика ҡулланамы, юҡмы, ябығамы йәки һимерәме, хирургик ярҙамға мөрәжәғәт итәме йәки унан ҡасамы, биҙәнәме йәки биҙәнмәйме, кейемен, йөҙөн, тәнен сәнғәт әҫәренә әйләндерәме йәки бөтөнләй биҙәүестәрҙән баш тартамы – унда түгел. Ысын проблема беҙҙең һайлау мөмкинлегебеҙ булмауҙа ғына.

Нәзәкәтлелек мистикаһы хакимлыҡ иткән ваҡытта урта синыфтағы барлыҡ ҡатын-ҡыҙ ҙа, шәхси әүәҫлектәренә ҡарамаҫтан, өйгә мәжбүри бәйлелеккә дусар ителә. Хәҙер, хәл-торош бик ныҡ үҙгәргәндән һуң, йорт-эштәрен бөхтә итеп башҡарыусылар уны һаман да шулай башҡара, ә инде бөхтәлеккә иҫтәре китмәүселәр өсөн башҡа шөғөлдәр бар. Беҙ бығауҙарҙан бер ни тиклем ҡотолдоҡ, ләкин донъя емерелмәне. Матурлыҡ тураһындағы мифтың ысынбарлығын асып биргәс тә, матурлыҡ мәҙәниәтенә мөнәсәбәтебеҙ менән дә шулай буласаҡ – был шулай булырға тейеш тә, ләкин әлегә буй етмәҫлек булып тойола. Косметикаға бәйле проблема ҡатын-ҡыҙ унан башҡа үҙен кәмселекле йәки күренекһеҙ тип тойғанда ярҙамға килә. Нисек ябығыу проблемаһы ҡатын-ҡыҙ үҙен үҙе тулы кәүҙәле булғаны өсөн күрә алмағанда ғына тыуа.

Ҡатын-ҡыҙҙы, шәхесен яҡлау өсөн үҙ-үҙен даими контролдә тоторға, уға иғтибар итһендәр өсөн генә биҙәнергә, эштән ҡолаҡ ҡаҡмаҫ өсөн генә ябығырға, балаларын үҫтереү мөмкинлеге булһын өсөн генә һөйәрен әүрәтергә мәжбүр итәләр икән – тап шул саҡта «матурлыҡ ағыуы» үҙен күрһәтә лә инде. Бында мәсьәлә биҙәүестәрҙә, сексуаллектә, матурланыуға киткән ваҡытта һәм хатта һөйәр табыу теләгендә лә түгел. Күпселек һөтимәрҙәр үҙ-үҙен тәрбиәләй, һәр мәҙәниәттең үҙенең биҙәнеү ысулдары бар. Иң мөһиме – ауыртыныу һәм ләззәт, мәжбүр итеү һәм азатлыҡ араһындағы көрәш.

Әгәр ҡатын-ҡыҙҙа етди шәхесте таныйҙар икән, уның тышҡы ҡиәфәтен үҙгәртеүе, кейемен үҙгәртеүе мәрәкә һәм ҡәнәғәтлек алыу ғына булып ҡаласаҡ. Шәһүәтлегебеҙҙе үҙебеҙ контролләһәк, уны күрһәтергә теләп кейгән кейемебеҙ осраҡлы күренеш кенә булып торасаҡ. Ҡатын-ҡыҙ шәһүәтлеге тулыһынса законлы, тәбиғи тип табылғанда, дәртебеҙ теләк тыуҙырған предметҡа һис оялыуһыҙ йүнәлтелгәндә, шәһүәтлегебеҙҙе күрһәтеп тороусы кейем йәки беҙҙең тәртибебеҙ оялтыу, ғәйепләү йәки һөжүм итеү өсөн сәбәп була алмаясаҡ.

Матурлыҡ тураһындағы миф ҡатын-ҡыҙҙы ялған һайлау алдына ҡуя: шәһүәтле булырғамы, әллә етдиме? Беҙ ошо ялған һәм тәбиғи булмаған дилемманы кире ҡағырға тейешбеҙ. Ир-аттың шәһүәтлеге уларҙы етдилеген бер ҙә кәметмәй: бер үк ваҡытта етди ҙә, шәһүәтле лә кеше булыу – тимәк, тулы мәғәнәһендә кеше булыу ул. Әйҙәгеҙ, беҙгә ошо иблис һайлауын тәҡдим итеүселәргә ҡаршы тороп, «мин»ебеҙҙең бер яғын һайлап, беҙ уның икенсе яғынан да ҡолаҡ ҡағырға тейешле булыуыбыҙҙан баш тартайыҡ. Ҡатын-ҡыҙҙың ысын һайлау мөмкинлеге булған илдә, беҙ үҙ ҡиәфәтебеҙ менән нимә ҡылһаҡ та, ахыр килеп, ул барыбер нисек кәрәк шулай баһаланасаҡ: Алла белмәгән проблема түгел әле.

Үҙебеҙҙе ваҡ-төйәк тип һанауҙан туҡтаһалар, беҙ ваҡ-төйәк биҙәүестәр менән һис бер нәмә уйламай биҙәнә аласаҡбыҙ. Йөҙөбөҙҙө, кейемебеҙҙе, тәнебеҙҙе үҙ-үҙебеҙҙе сағылдырыуҙың бер формаһы итеп ҡуллана башлаһаҡ, ҡатын-ҡыҙ матурлыҡ тураһындағы мифтан азат буласаҡ. Беҙ ҡәнәғәтлек алыу өсөн биҙәнә алабыҙ, әммә хоҡуҡтарыбыҙ тураһында бар тауышҡа белдерергә тейешбеҙ.

Күпселек яҙыусылар Ҡатын-ҡыҙ утопияһынан фантазияны, ләззәтте, «һоҡланыу»ҙы тамырынан йолҡоп алырға тырышты. Әммә «һоҡланыу» – ул бары тик кешенең һоҡлана белеү һәләтен генә сағылдыра һәм зыянлы түгел. Ул беҙгә кәрәк – ләкин яңы билдәләмәлә. Беҙ яуыз динде атеизм ярҙамында юҡҡа сығара йәки насар шағирҙы шиғыр яҙыуҙан баш тарттырып бөтөрә алмайбыҙ. Ауырыу ләззәте менән бары тик сәләмәтлек ләззәте ярҙамында көрәшергә мөмкин.

Бер ҡатлы булмайыҡ. Беҙ иҫкелекте юҡҡа сығарырға рөхсәт итмәгән йәмғиәттә матурлыҡҡа яңы мәғәнә бирергә тырышабыҙ. Үҙебеҙ теләгәнсә күренеү, беҙҙе ишетеүҙәренә өлгәшеү өсөн, кәм тигәндә, феминизмдың өсөнсө тулҡыны кәрәк.

## Телмәр йәки йәмәғәт алдында сығыш яһау

Матурлыҡ тураһындағы миф буйынса фекер алышыуҙың ауырлығы шунда: ул аяуһыҙ ысул ҡуллана – ғәмәлдә ошо мәсьәләләрҙе күтәреп сыҡҡан һәр ҡатын-ҡыҙҙы уның тышҡы ҡиәфәтен тәнҡитләп язалай. Иҫ китерлек, әммә ошо ҡыйыш атып тура тейҙереү бер атыуҙа «ике ҡуян»ды үлтерә: ҡатын-ҡыҙ ниндәй генә булмаһын, уның тышҡы ҡиәфәте һүҙҙәренең абруйын төшөрөүгә һәм матурлыҡ тураһындағы мифтың йәмғиәткә йоғонтоһо тураһындағы күҙәтеүҙәрен шәхси проблема итеп ҡалдырыуға килтерә.

Бәхетһеҙлеккә күрә, мәғлүмәт саралары, ғәҙәттә, гүзәл заттың тышҡы ҡиәфәтен шундай итеп һүрәтләй – был уларға ҡара яға йәки уларҙың сығыш яһауына ышанысты бөтөрә, ә матбуғатты уҡыусы йәки телевизор ҡараусы ҡатын-

ҡыҙға теләктәшлек күрһәтергә ҡамасаулай. Феменизмға ҡаршы мифтың төп маҡсаты шунда ла инде. Әгәр беҙ телевизорҙан йә матбуғатта сығыш яһаған гүзәл зат менән эстән килешмәһәк йәки иғтибарыбыҙ уларҙың фигураһына, нисек биҙәнеүенә, прическаһына, кейеменә йүнәлтелеүе арҡаһында уларҙы тыңламайбыҙ йәки уҡымайбыҙ икән – тимәк матурлыҡ тураһындағы миф тулы көсөнә эшләй.

Ҡатын-ҡыҙ өсөн халыҡ алдында сығыш яһарға йөрьәт итеү – тимәк, үҙенең тышҡы ҡиәфәтен бәйләнсек имтиханға дусар итеү ул, һәм, күреүебеҙсә, быны бер генә гүзәл зат та күтәрә алмай. Әгәр ҡатын-ҡыҙ миф тураһында һөйләй икән (шулай уҡ дөйөм ҡатын-ҡыҙ проблемалары тураһында), тимәк, ул дөрөҫ күренә алмай, уның быға мөмкинлеге юҡ. Был ваҡытта бер генә ишара ла күҙ уңынан ситтә ҡалмай. Уны йә «бик йәмһеҙ», йә «бик яҡшы» тип ҡабул итәләр – ундай кешегә нисек ышанаһың инде? Был алым сәйәси планда бик яҡшы эшләй: бөгөн ҡатын-ҡыҙ үҙе үк ни өсөн башҡаса ҡатын-ҡыҙҙар төркөмөндә йәки хәрәкәтендә ҡатнашмауының сәбәптәрен әйтеп бирә икән, йыш ҡына программалағы йәиһә ҡараштарҙағы айырмалыҡҡа түгел, ә эстетикаға йәки шәхси зауыҡҡа һылтаналар. Әгәр беҙ аңыбыҙҙа гелән иғтибарҙың бындай тайпылышының феминизмға ҡаршы булыу нигеҙен һәм уның реакцион маҡсаттарын тотабыҙ икән, уға ҡамасауларға ла мөмкинбеҙ. «Беҙҙең өсөн ҡатын-ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәте уның тураһында барыһын да һөйләй» тигән бәйләнсек раҫлауҙы инҡар итеү, бер-беребеҙҙе матурлыҡ тураһындағы миф сиктәренән тыш тыңлау алға табан сәйәси аҙым булып тора.

## Ғәйеп

Ғәйеп – матурлыҡ тураһындағы легенданы туҡландырып тороусы сығанаҡ; уны юҡҡа сығарыу өсөн, әйҙәгеҙ, ошо ҡеүәтле мифҡа буйһоноп, үҙебеҙҙе һәм башҡа ҡатын-ҡыҙҙы ғәйепләүҙән мәңгелеккә туҡтайыҡ. Беҙ ынтылырға тейешле иң мөһим үҙгәреш шунан ғибәрәт: ҡасан да булһа киләсәктә кемдер был мифты беҙгә ҡаршы ҡулланырға тырышһа ла, беҙ ниндәй хата ебәргәнебеҙҙе асыҡлар өсөн көҙгөгә ҡарамаясаҡбыҙ. Гүзәл зат эш урынында тышҡы ҡиәфәт буйынса дискриминацияға – ғәҙәттәге ҡәнәғәтһеҙлек белдереүҙәргә («Ни өсөн һеҙ шундай һығып торған свитер кейәһегеҙ?», «Ни өсөн үҙегеҙҙең тышҡы ҡиәфәтегеҙгә иғтибар бирмәйһегеҙ?») яуап ҡайтарырға өйрәнгәндән һуң ғына ҡаршы тора аласаҡ. Беҙ мифтың эшмәкәрлеге тураһында уның уйҙырма булыуына тулыһынса ышанмай тороп һүҙ йөрөтә алмайбыҙ: ҡатын-ҡыҙ үҙе теләгән нәмә менән шөғөлләнһен өсөн уны йә бик күрекһеҙ йә артыҡ сибәр тип баһалайҙар икән, бында эш уның тышҡы ҡиәфәтендә түгел. Ҡатын-ҡыҙ үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә һөжүмде йәки уның тураһында ялағайланыу баһаһын бер ваҡытта ла етди ҡабул итергә кәрәкмәгәнлеген, бының сәйәсәт булыуын иҫендә тотҡанда ғына миф тураһында халыҡ алдында сығыш яһарға йөрьәт итәсәк.

Беҙҙең өндө тығырға тырышыу көндән-көн үҫәсәк. «Һеҙгә әйтеүе еңел», «Феминистка булыу өсөн һеҙ артыҡ сибәр», «Уның ф745менистка булыуына аптырарға кәрәкмәй – бер күҙ ташлау ҙа етә», «Шундай итеп кейенгән – уға тағы нимә кәрәк икән?», «Ни өсөн һеҙ улар һеҙгә һоҡлана тип уйлайһығыҙ?», «Мейеһеҙ» һ.б. шуның кеүек фекерҙәрҙең асылын белгәс, бәлки, шаштырып маҡтауҙар йәки кәмһетеүҙәр тулҡынына ҡаршы тороуы һәм уларға яуап биреүе еңелерәк булыр.

Миф тураһындағы һөйләшеү күпселегебеҙҙең хистәр ҡылын сиртә. Шуға күрә үҙебеҙҙең һәм башҡа ҡатын-ҡыҙҙың хәленә инә белергә, был хистәр менән бик һаҡ булырға кәрәк. Әгәр матурлыҡ тураһындағы миф дин икән, тимәк, үҙебеҙ

ҡатнашҡан ритуалдар етешмәй; әгәр ул иҡтисади система икән, тимәк хеҙмәтебеҙ ғәҙел баһаланмай; әгәр был шәһүәтлек икән, тимәк һаманғаса ҡатын-ҡыҙ шәһүәтлеге аҡ тап булып ҡала; әгәр был көрәш икән, тимәк үҙебеҙҙе батыр, ҡыйыу, ныҡлы һәм боласы итеп тойоу мөмкинлеген бирмәйҙәр; әгәр ул ҡатын-ҡыҙ мәҙәниәте икән, тимәк ир-ат мәҙәниәте беҙҙе һаман инҡар итә. Ҡасан беҙ мифтың ҡатын-ҡыҙ аңында булған барлыҡ яҡшы нәмәләрҙе алып бөткәнен аңлайбыҙ – шул саҡта ғына «матурлыҡ»тан йөҙ бороп, уның алмаштырырға теләгән барлыҡ нәмәләренә иғтибар менән ҡарай башлаясаҡбыҙ.

## Феминизмдың өсөнсө тулҡыны

Әлегә хәл-торошобоҙ шулай. Нимә эшләргә мөмкин һуң? Беҙ «тышҡы күрһәткестәре буйынса һөнәри яраҡһыҙлыҡ» принцибын юҡҡа сығарырға, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һөнәри берләшмәләрен хупларға, тышҡы ҡиәфәтте, йәш буйынса дискриминацияны, зарарлы хеҙмәт шарттарын хеҙмәт килешеүе буйынса һөйләшеүҙәр предметы итеү талаптарын ҡуйырға, телевидениела йәки башҡа өлкәләрҙә эшләүсе дискриминацияға дусар ителгән гүзәл заттар бер-бер артлы судҡа ғариза яҙырға; кейем-һалымда тиңлек булдырырға; ҡыйыулыҡ тупларға һәм был хаҡта һөйләргә тейешбеҙ.

Йыш ҡына беҙгә, моданы һәм рекламаны эшләгәндә беҙҙең тауышҡа ла ҡолаҡ һалыуҙарына өлгәшергә кәрәк, тиҙәр, әммә был – баҙарҙың хәрәкәт итеүсе механизмы буйынса баһалағанда – хәүефле-оптимистик хаталаныу. Ҡатын-ҡыҙға иҫәпләнгән реклама үҙбаһабыҙҙы түбәнәйтә; әгәр ул ялғанлай икән, һөҙөмтәһе булмаясаҡ. Әйҙәгеҙ, беҙҙе «матурлыҡ индексы» буйынса баһалауҙарына өмөтләнмәйек. Әгәр ҙә шулай була ҡала икән, ул үҙенең мәғәнәһен юғалтасаҡ. «Матурлыҡ» төшөнсәһе ҡатын-ҡыҙ ауыҙынан сыҡмай тороп, уның ярҙамында беҙҙе алдаясаҡтар ғына.

Беҙ ҡартайыу азатлығын һәм шәһүәтле булып ҡалыуҙы талап иттек, әммә был «йәш ҡалып ҡартайыу» тигән клишеға әүерелде. Уңайлы кейем кейә башлағайныҡ, тәнебеҙ уңайһыҙлыҡ тойҙо. Уҙған быуаттың 70-се йылдарындағы «тәбиғи» матурлыҡ тәре (икона) булып ҡалды, 80-се йылдарҙағы «сәләмәт» матурлыҡ яңы ауырыуҙар эпидемияһын тыуҙырҙы, ә «матурлыҡ – ул көс» тигән лозунг ҡатын-ҡыҙҙы үҙ мускулдарының ҡоло яһаны. Был процесс ҡатын-ҡыҙҙың «матурлыҡ» индексын үҙгәртергә тырышҡан һайын дауам итәсәк, шуға күрә беҙгә уға ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртергә кәрәк. Баҙар аңдың күтәрелеүенә ярҙам итмәй. Баҙар моделдәренә һөжүм яһап юҡҡа көс әрәм итеү файҙаһыҙ: улар күптән түгел генә булған тарихты иҫәпкә алып, икенсе төрлө үҫешергә һәләтһеҙ.

Идеалдарға туранан-тура йоғонто яһай алмағанда ла, уларҙы көс-ҡеүәттән мәхрүм итә алабыҙ. Беҙ уларҙан йөҙ бороп, бер-беребеҙгә күҙ һалып һәм ҡатын-ҡыҙ субмәҙәниәтендә матурлыҡтың альтернатив образдарын: гүзәл затты бар асылында күрһәткән пьесаларҙы, музыканы, фильмдарҙы, һәр быуында булған, ләкин һуңынан онотолған арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙҙарҙың биографияларын табып, «матурлыҡ» менән тишкеләнгән тишектәрҙе тултыра, үҙебеҙ күтәрелә һәм башҡа гүзәл заттарҙы ошо мифтан тартып сығара алабыҙ, әммә бының өсөн альтернатив варианттарҙы табыуға көслө теләк булырға тейеш.

Мифтан башҡа нисек йәшәүебеҙҙе күҙ алдына ла килтерә алмағас, беҙгә мәҙәни ярҙам кәрәк. Бөтөн тарихыбыҙ дауамында үҙебеҙ, шәһүәтлегебеҙ, ысын матурлығыбыҙ тураһындағы күҙаллауҙар сит ҡулдарҙа булды. 20 йыллыҡ ҙур ынтылыштан һуң, гүзәл зат ошо билдәләмәләрҙе асыҡларға тырышҡас, айырым рәссамға ҡарағанда йоғонтолораҡ булған баҙар беҙҙең теләктәребеҙҙе билдәләү хоҡуғын үҙенә алды. Ҡатын-ҡыҙҙы күрә алмаған символдарға үҙебеҙҙең

шәһүәтлегебеҙҙән өҫтөнлөк итергә рөхсәт бирербеҙме? Беҙ, Тимер ҡатынды емерер һәм еңер өсөн, үҙ теләктәребеҙҙән мәҙәниәт төҙөргә, ышандырырлыҡ, ымһындырырлыҡ картиналар, романдар, пьесалар һәм фильмдар тыуҙырырға тейешбеҙ. Әйҙәгеҙ, сексты Тимер ҡатындан айырыу өсөн, мәҙәниәтебеҙҙе киңәйтәйек.

Шул уҡ ваҡытта беҙгә «матурлыҡ» рекламаһын тәҡдим итеүселәрҙең киң күләмле мәҙәниәтебеҙҙе нисек талапсан тикшергәнлеге хаҡында ла оноторға ярамай: әлегә, улар телевидениела, матбуғатта ҡатын-ҡыҙға иҫәпләнгән иң яҡшы ваҡыт менән идара иткәндә, ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәрен киң күләмле мәҙәниәттә нисек тоя – матурлыҡ тураһындағы миф шул хикәйәләүгә тон бирәсәк тә инде. Әйтмәһәң дә аңлашыла: иғтибар үҙәгендә «эшкәртелмәгән ҡатын-ҡыҙ» торған тарих һирәк күренәсәк. Әгәр беҙгә үҙенең 60 йәшендә 60 йәшлек булып күренгән ҡатын-ҡыҙҙы күрһәтһәләр, матурлыҡ тураһындағы миф сатнар ине. Шул уҡ ваҡытта шуны ла аңлау фарыз: эфирҙа миф бары тик шул арҡала ғына йәшәгән кешеләр тарафынан һатып алынған булыуы һөҙөмтәһендә генә оҙон ғүмерле булып ҡала килә.

Ниһайәт, Тимер ҡатындың ниндәй формаларға инеүен, беҙҙең ҡаныбыҙға нисек йоғонто яһай алыуын белгәс, һәр саҡ һаҡ булырға тейешбеҙ. Тап ошо образдар беҙҙе ялҡытҡас, улар ҡатын-ҡыҙҙың күңел торошондағы үҙгәрештәргә ҡулайлаша башлаясаҡ: реклама биреүсе, әгәр аудитория юҡ икән, уңышҡа өмөт итә алмай. Ҡатын-ҡыҙҙы ҡабат ылыҡтырыр өсөн, мәҙәниәт булдырыусылар гүзәл зат образын күләмле итергә мәжбүр буласаҡ. Тимер ҡатындың ни тиклем ялҡытҡанын күрһәтеп, ҡатын-ҡыҙ беҙҙе асылда кешегә һанаған киң күләмле мәҙәниәт булдыра ала. Мәҙәни атмосфераның үҙгәреү процесы авангардында, нигеҙҙә, киң мәғлүмәт сараларында эшләгән ҡатын-ҡыҙ тора. Мин уларҙың күптәренән матурлыҡ тураһындағы мифтың аңлатмаһы ҡуйған сикләүҙәр менән ҡәнәғәтһеҙлек белдергәнен ишеттем. Байтағы үҙен изоляцияла тип тойған һәм ошо ҡоршауҙан сығырға тырышҡан. Күрәһең, миф тураһында яңынан башланған бәхәстәр һәм уларҙың эҙемтәләренең етдилеге даими рәүештә матбуғатта, телевидениела, радиожурналистикала – баштан башлап ҡабат күрәшкә күтәрелергә әҙер ҡатын-ҡыҙҙы яҡлау буйынса яңы берләшмәләр төҙөргә ярҙам итәсәк.

Матурлыҡ мифының аңлы рәүештә эшләнгән образдарына ҡаршы мәҙәниәт ойоштороу менән, Тимер ҡатын шунда уҡ күрекһеҙгә, шәфҡәтһеҙгә әйләнәсәк, күп нәмә яңыса ҡабул ителә башлаясаҡ. Беҙҙең рухи ихтыяжыбыҙҙы тормош циклдарына бағышланған йолаларҙа, ғөрөф-ғәҙәттә сағылдырған матурлыҡ культы ла раҫлай. Беҙгә ошо бушлыҡты тултырырлыҡ йолалар уйларға һәм уларҙы тормошобоҙға индерергә кәрәк. Дуҫтарыбыҙ араһында ҡатын-ҡыҙ тормошоноң төрлө осорона бағышланған йолалар һәм байрамдар индерә алабыҙмы? Әлегә беҙ бары тик тыуған көндәрҙе һәм туй көндәрен генә билдәләйбеҙ, ә таҙарыныу, конфирмация, ауырыуҙан һуң һауығыу һәм бала тыуыуға, тәүге күрем килеүгә, ғиффәтлелекте юғалтыуға, уҡыу йортон тамамлауға, беренсе эшкә урынлашыуға, никахҡа, айырылғандан йәки ҙур ҡайғы кисергәндән һуң яңы тормошҡа ҡайтыуға, стипендия алыуға, менопаузаға бағышланған көндәр хаҡында уйлап ҡараманығыҙмы? Был байрамдар ниндәй генә формала булмаһын, беҙгә барыбер ҡатын-ҡыҙ тормошоноң төрлө этаптарын сағылдырған яңы тантаналар кәрәк.

Шәһүәтлегебеҙҙе мифтан һаҡлау өсөн беҙ уны бала йәки берәй йәнлек кеүек ҡәҙерләргә, уның хаҡында хәстәрлек күрергә, тәрбиәләргә кәрәклегенә ышанырға тейешбеҙ. Шәһүәтлек ғүмерлеккә бирелгән, үҙгәрмәүсән нәмә түгел, ул тере йән кеүек: нимә менән туҡлана, шуға ҡарап үҙгәрә. Беҙ сексуаль көсләү йәки файҙаланыуҙан ситтә тора алмайбыҙ, шулай ҙа улар менән күҙмә-күҙ

осрашҡанда, нисек бар, тап шулай итеп ҡабул итергә тырышырға кәрәк. Беҙ шәһүәтлек көс ҡулланыуҙан һәм файҙаланыуҙан азат булған хыялдарға һәм образдарға ынтылырға, хәҙер тәнебеҙ нимәнән ғибәрәт икәнлеген аңлаған кеүек, хыял донъябыҙҙың нимәне тәшкил итеүен аңларға тырышырға тейешбеҙ.

Моғайын, эротикала енестәр тиңлеген уйҙа ғына күҙ алдына килтереү ауырҙыр. Шәһүәтлекте тәнҡитләүселәр «уның үҫешенең булыуы мөмкин түгел» тигән күҙаллау менән генә сикләнә. Әммә күпселек ҡатын-ҡыҙ көс йәки сит клишелар ҡулланыу йоғонтоһо аҫтында матур ҡурсаҡҡа әүерелеү тураһындағы хыялдар менән ағыулана. Мин, был фекерҙе аңлы рәүештә шарттарҙы – ләззәт һәм мөхәббәт араһында аныҡ бәйләнеш булдырып – үҙгәртеп була, тип уйлайым. Шәһүәтлек матурлығы тураһындағы күҙаллауҙар беҙ хыялланғандан да артығыраҡ үҙгәрә ала.

Беҙгә, бигерәк тә аппетиты булмаған һәм порнография менән зарарланған быуындарға, шәрәлек менән яҡынлашырға кәрәк. Күпселек гүзәл зат хатта бер тапҡыр ғына коллектив шәрә ҡатын-ҡыҙ араһында булғандан һуң да ауыр тойғолар кисерә. Бынан көлөргә лә мөмкин, әммә Тимер ҡатындың шәрәлегенән сер шаршауын алып ташлауҙың берҙән-бер ысулы – экскурсиялар, фестивалдәр, походтар ойоштороп, ял ваҡыттарында, төрөк мунсаһында йәки пляждарҙа барыһының да шәрә ҡалыуы. Студент корпорацияларынан алып спорт клубтарына йөрөгән ирҙәр шул ваҡытта тыуған берҙәмлек һәм үҙ тәнеңә ихтирам булдырған бындай минуттарҙың ҡәҙерен белә. Беҙҙең сикһеҙ күп төрлөлөгөбөҙҙөң матурлығы тураһындағы ябай асыш һүҙҙәргә ҡарағанда ҡиммәтерәк: йәш ҡыҙға Тимер ҡатындың ялғанлығын аңлау өсөн шундай бер тәжрибә лә етә.

Миф менән күҙгә-күҙ ҡарашҡас, ҡатын-ҡыҙҙың йөҙө һәм тәне тураһында баш ватырға түгел, ә «Был хәл-торош менән кем идара итә?» тигән һорау бирергә кәрәк. Кем быға хеҙмәт итә? Кем һөйләй? Кем файҙа ала? Ниндәй аҫтыртын мәғәнә һалынған? Әгәр ниндәйҙер ҡатын-ҡыҙ алдында кемдер уның тышҡы ҡиәфәтен тикшерә башлай икән, ул үҙенә «Был кешенең миндә ни эше бар?» тигән һорау ҡуя ала. Уларҙың мөмкинлектәре тигеҙме? Яуап итеп ул да шундай уҡ һүҙҙәр әйтә аламы?

Бик йыш ҡына ҡатын-ҡыҙҙың иғтибарын уның тышҡы ҡиәфәтенә ысын ҡыҙыҡһыныуҙан түгел, ә сәйәси сәбәптәр буйынса йүнәлтәләр. Был айырманы тиҙ тойоп алырға өйрәнһәк, был үҙе үк беҙҙе азат итәсәк. Енси теләк, күңел әүрәтеү йәки физик һөйкөмлөлөк – баҙар һүрәтләгәнгә ҡарағанда, был сифаттар демократиялыраҡ һәм субъективыраҡ – ҡәһәрләргә түгел, беҙгә бары тик сәйәси алданыуҙарҙан баш тартырға ғына кәрәк.

Ирония шунан ғибәрәт: ҡатын-ҡыҙҙың теләктәшлеге үҫеүе генә «матурлыҡ» вәғәҙә иткән нәмәне бирә: матурлыҡ тураһындағы мифты 70-се йылдарҙағы ҡатын-ҡыҙ тирәләй тупланған сәйәси әүҙемлекте тергеҙеп һәм заманса талаптарға яуап биргән, 90-сы йылдарҙың яңы проблемаларын үҙ эсенә алған феминизмдың өсөнсө тулҡынын булдырып ҡына еңергә мөмкин. Ошо тиҫтә йылдарҙа дошмандар шымыраҡҡа һәм аҡыллыраҡҡа әйләнде, уларҙы – бигерәк тә йәш ҡатын-ҡыҙға – таныуы бик ауыр. Йәштәрҙе ылыҡтырыу өсөн беҙгә шәхси абруй хисен сәйәси мәсьәләләр рәтенә ҡуйырға, уны, аҡса, эш, балалар хаҡында хәстәрлек, хәүефһеҙлек менән бер рәттән, ҡатын-ҡыҙҙың иң көнүҙәк ихтыяжы исемлегенә индерергә кәрәк.

Проблемалар күләме үҙгәрҙе. Мин, меңдәрсә йәш ҡатын-ҡыҙ, классик мәсьәләләр менән бер рәттән, ваҡыт тарафынан һәм беҙҙең хәрәкәткә реакция булараҡ тыуҙырылған яңы проблемаларҙы ла иҫәпкә аласаҡ феминизмдың өсөнсө тулҡынына ҡушылырға теләй һәм әҙер, тигән инаныуға килдем. Өсөнсө тулҡынға ауырлыҡтар менән осрашырға тура киләсәк. Йәш ҡатындар уларҙы ҡурҡыу

солғап алыуын, үҙҙәрен изоляцияла тойоуҙарын белдерә. Был айырма феминизмға ҡаршы һөжүмдең асылын аңлата ла инде: революцияны туҡтатыуҙың иң яҡшы ысулы – уны кеше нимәһендер юғалтыуҙан ҡурҡырлыҡ итеп ойошторорға кәрәк. Туҡланыуҙы боҙоуҙа сәйәси аҫтыртынлыҡты, йәш ҡатын-ҡыҙҙың «матурлыҡ»ҡа көсөргәнешле мөнәсәбәтен, ошо мөнәсәбәттең уларҙың шәһүәтлегенә нисек йоғонто яһауын асыҡлау талап итеЛә: әгәр һеҙ ашай алмайһығыҙ икән, тимәк, тәнегеҙгә хоҡуғығыҙ юҡ. Шуға күрә йәш ҡатын-ҡыҙға мираҫ булып ҡалған феминизмға ҡаршы пропаганданы анализларға һәм уларҙы үрҙә яҙылған дәлилдәр менән ҡоралландырырға кәрәк буласаҡ. Феминизм мираҫын тейелгеһеҙлектә ҡалдырып, өсөнсө тулҡын, алдағылары кеүек үк, йәш буйынса бүленеп тормошҡа ашырылырға тейеш: әсәйҙәрҙең кәңәше ни тиклем аҡыллы булмаһын, беҙ уларҙы түгел, тиҫтерҙәребеҙҙе тыңлайбыҙ. Өсөнсө тулҡын шатлыҡ, баш-баштаҡлыҡ, тантана, фиҙакәр хеҙмәт һәм ауыр көрәште үҙ эсенә алырға тейеш һәм уны йәш ҡатын-ҡыҙҙы ғәрипләндереүсе постфеминизм тип аталған – «барлыҡ көрәш тә еңелеүгә дусар булған» тигән тәҡүә өмөттәрҙе – уйҙырманы кире ҡағыуҙан башларға кәрәк. «Постфеминизм» тип аталған был ҡот осҡос һүҙ йәш ҡатын-ҡыҙҙы элекке проблемалар менән күҙмә-күҙ осрашырға һәм ҡабат үҙҙәрен ғәйепле тойорға (барыһы ла яйланған бит, эйеме) саҡыра. Ул уларҙы теоретик ҡоралһыҙ ҡалдырып, ҡабат үҙҙәрен яңғыҙлыҡта тойорға мәжбүр итә. Беҙ бер ваҡытта ла ҡәнәғәтлек менән: постдемократик эпоха, тимәнек. Демократия, билдәле булыуынса, тере һәм ныҡлы түгел, уны һәр быуын яңыртып торорға тейеш. Был демократияның феминизмды кәүҙәләндергән яғы өсөн дә урынлы. Шулай итеп, әйҙәгеҙ, яуланғандарҙа ғына туҡталып ҡалмайыҡ.

Ҡатын-ҡыҙ «матурлыҡ»ты заманса формала теләргә өйрәнде, шуға күрә, шул уҡ ваҡытта беҙ феминисткаларҙы күҙаллағандан да ауырыраҡ көрәш көткәнен асыҡланыҡ. «Матурлыҡ» идеологияһы – шәрбәтле микстура, ул ҡәнәғәтһеҙлек белдергән ҡатын-ҡыҙға, яҡын киләсәктә ышанысҡа эйә буласаҡбыҙ һәм талаптарыбыҙҙы һис ҡурҡыуһыҙ әйтә аласаҡбыҙ, беҙҙе баһалаясаҡтар, ихтирам итәсәктәр, һүҙебеҙгә ҡолаҡ һаласаҡтар, тип вәғәҙә итте (ғәмәлдә, ҡатын-ҡыҙҙың ысынлап та «матур» булғыһы килеүе бик икеле; улар барлыҡ ҡәһәрле проблемаларҙы онотор өсөн генә «матурлыҡ» теләүе һәм камиллыҡҡа сарсауы мөмкин. Әгәр һайлау мөмкинлектәре булһа, күпселек, «башҡалар»ҙа булған матурлыҡҡа эйә булырға теләгәнсе, моғайын, күңел түрендә йөрөткән теләген, шәхси шәһүәтлеккә һәм ҡурҡыу белмәҫ «мин»гә эйә булырға теләр ине).

Гүзәлдәрҙең реклама йөҙө азатлыҡтың һәм батырлыҡтың шундай өлгөләрен тәҡдим итә: «Матурҙар һәм ҡыйыуҙар өсөн һыу инеү костюмы», «Ҡыйыуһыҙҙар өсөн ҡыйыулыҡ», «Азатлыҡ өсөн көрәшеүселәр – үҙ һүҙен әйтергә һәм башҡаларҙан айырылып торорға ҡурҡмаған ҡатын-ҡыҙ өсөн». Әммә бындай ҡыйыулыҡ һәм үҙ-үҙеңә ышаныусанлыҡ матди ҡаҙаныштар менән нығытылмай тороп, ысынбарлыҡҡа әүерелмәйәсәк, улар бары тик башҡа ҡатын-ҡыҙҙа көндәштәрҙе түгел, ә арҡаҙаштарҙы күргәндә генә барлыҡҡа киләсәк.

80-се йылдарҙа проблемаларыбыҙҙы индивидуаль рәүештә хәл итеп, беҙҙән ҡотолорға тырыштылар. Ахырҙа шундай сиккә – матурлыҡ тураһындағы миф сиктәрендә – бер кешенең хәленән килгән кимәлгә барып еттек, әммә был ғына аҙ: беҙ һәр саҡ властың юғары эшелонында ни бары – 2, профессорурала – 5, фирмалар идараһында 5 процент ҡына вазифа биләйәсәкбеҙ, һәм, әгәр алға ынтылыу өсөн бергә тупланмаһаҡ, шулай дауам итәсәк. Шымараҡ биттәр, тығыҙыраҡ түштәр, әлбиттә, беҙгә ысын ышаныс килтермәйәсәк һәм донъяға ҡарашыбыҙҙы киңәйтмәйәсәк. Быға бары тик ҡатын-ҡыҙҙың сәйәси үҫеш нигеҙҙәренә – балалар

тураһында хәстәрлек күреү программаларына, дискриминацияға ҡаршы һөҙөмтәле закондарға, бала тәрбиәләү буйынса ял алыу, бала табыуҙы аңлы рәүештә планлаштырыу, хеҙмәт өсөн ғәҙел баһа алыуға һәм сексуаль көсләү өсөн ысын яза биреүгә – кире ҡайтыу аша ғына өлгәшергә мөмкин. Үҙебеҙҙең мәнфәғәттәребеҙҙе башҡа ҡатын-ҡыҙҙың мәнфәғәте менән тиңләштермәйенсә, тәбиғи теләктәшлегебеҙ яһалма рәүештә дәғүәселек һәм көндәшлекте барлыҡҡа килтергән «матурлыҡ» ҡаршы һөжүменең ойоштороу ҡаршылыҡтарын еңмәйенсә, беҙ быға өлгәшә алмаясаҡбыҙ.

Ысынбарлыҡтың әсе хәҡиҡәте шунда: миф баҙар тарафынан хупланһа ла, ул, әгәр ҡатын-ҡыҙ уны бер-береһенә ҡаршы файҙаланмаһа, көсһөҙ. Мифтан ҡотолоу өсөн ҡатын-ҡыҙға теләктәшлек кәрәк. Иң ауыр, әммә иң кәрәкле үҙгәреш ирҙәр ярҙамында ла, киң мәғлүмәт сараларында ла түгел, беҙ башҡа ҡатын-ҡыҙға нисек ҡарап, улар менән үҙебеҙҙе нисек тотоуға бәйле барлыҡҡа киләсәк.

## Быуындар хеҙмәттәшлеге

Әгәр бер-беребеҙҙе матурлыҡ тураһындағы мифтан, ә ҡатын-ҡыҙ үҫешен уның элекке иронциялы яҙмышынан – ҡабат-ҡабат велосипед уйлап табыуҙан ҡотҡарырға теләйбеҙ икән, быуындар араһындағы бәйләнеште тергеҙергә кәрәк. «Кампани» журналы мөхәррире Джил Хадсон йәш быуынға мифтың ниндәй йоғонто яһауын күрһәтә: йәш ҡатындар, ти ул, «бөтөнләй феминистка булырға теләмәй», сөнки «феминизм шәһүәтле тип һаналмай».

Әгәр яҡын киләсәктә ҡатын-ҡыҙға быуындарҙың тарҡаулығы арҡаһында ғына ҡабат элекке көрәшкә күтәрелергә, 20 йыл дауам иткән йөҙәткес, ҡатын-ҡыҙ хәрәкәтен «шәһүәтһеҙ» тип сағылдырған, йәштәргә ошо көрәштең тәү сиратта сексҡа шәһүәтлелекте ҡайтарыуын онотоорға ярҙам итергә йүнәлтелгән пропаганда йоғонтоһона бирелеп, барыһын да баштан башларға тура килһә, был алйотлоҡ һәм фажиғә булыр ине.

Йәмғиәт йәш ҡатын-ҡыҙҙың был бәйләнештәрҙе булдырыуын яҡламаясаҡ, ә беҙ актив рәүештә ялтырауыҡлы журнал тыштарындағы һылыуҡайҙарҙыҡына ҡарағанда аҡыллыраҡ яңы идеалдар табып ҡына мифтан ҡотола алабыҙ. Беҙгә быуындар араһындағы бәйләнеш мотлаҡ кәрәк: бөгөнгө азатлығыбыҙҙы биргән ҡатын-ҡыҙҙың йөҙҙәрен күрергә тейешбеҙ, улар беҙҙең рәхмәт һүҙҙәрен ишетергә лайыҡ. Йәш ҡатындар «әсә» ҡурсауынан мәхрүм – уларҙы яҡламайҙар, уларға йүнәлеш бирмәйҙәр. Ә бит улар остазға, уларға оҡшарға тырышыу өсөн өлгөгә мохтаж. Оло быуындың хеҙмәте һәм тәжрибәһе – әгәр уларҙы уҡыусыларға, талибәләргә, үҙҙәренең ҡул аҫтындағыларға өйрәтәләр икән – юҡҡа сыҡмай. Шулай ҙа ике быуынға ла хеҙмәттәшлеккә кәртә булған тышҡы импульстарға ҡаршы торорға кәрәк буласаҡ. Йәш ваҡытта беҙҙе оло ҡатын-ҡыҙ менән сағыштырыуҙан ҡасырға өйрәтәләр; үҙебеҙ олоғайғас, йәштәрҙе ҡәтғи баһаларға, уларға һанламай һәм кәмһетеп ҡарарға ярамай. Матурлыҡ тураһындағы миф яһалма рәүештә ҡатын-ҡыҙҙың бер быуынын икенсеһенә ҡаршы ҡуйыу өсөн ҡулайлаштырылған: әгәр беҙ аңлы рәүештә улар араһындағы бәйләнеште нығытһаҡ, миф беҙҙе мәхрүм итергә теләгән тормош тулылығы ла кире ҡайтасаҡ.

## Бүлгелә һәм хакимлыҡ ит

Ғәмәлдә ҡатын-ҡыҙ бер-береһе өсөн бөтөнләй ҡурҡыныс түгел. Әгәр мифты онотһаҡ, беҙ – тәбиғи союздаштар. Ҡатын-ҡыҙ бер-береһенән ҡурҡһын өсөн беҙҙе, апайҙарығыҙ һеҙгә ҡаршы ниндәйҙер серле һәм ҡеүәтле йәшерен ҡоралға эйә, хыялдағы ул ҡорал – «матурлыҡ» тураһындағы миф, тип инандырырға тейештәр ине.

Мифтың феминизмға ҡаршы эшләүсе көс булараҡ асылы һәм сәбәбе – уның бүлгеләнеү өсөн нигеҙ булдырыу һәләте. Һәр ерҙә: «Матур булғаным өсөн мине күрә алмайһығыҙ», «Һин уны күрә алмаҫҡа тейешһең. Уның бөтөн нәмәһе бар», «Иртәнән алып матур күренгән ҡатын-ҡыҙ минең асыуыма тейә», «Бына үкенес: уның хатта битендәге күҙәнәктәре лә күренмәй», «Оҙон буйлы, һары сәсле – һинең уны үлтергең килмәйме?» кеүек һүҙҙәрҙе ишетергә мөмкин.

Мифҡа ҡотҡо һалып тороусы көнәркәшлектең, үпкәләүҙең, дошманлыҡтың тамырҙары тәрәнгә китә. Апалы-һеңлеләр, ғәҙәттә, береһен «матур ғына» тигән өсөн үпкә һаҡлай. Ҡыҙҙары үҫә башлағас, йыш ҡына әсәләр ауырлыҡ кисерә. Ҡатын-ҡыҙ дуҫлығының аяуһыҙ ысынбарлығы – иң яҡын әхирәттәреңә көнләшеү. Хатта һөйәркә булған ҡатын-ҡыҙ ҙа матурлыҡта дәғүәсе булырға тырыша. Матурлыҡ тураһында һөйләшеү беҙгә ғазап килтерә, сөнки миф бер ҡатын-ҡыҙҙың тәнен беҙҙе кәмһетеү өсөн ҡуллана. Йөҙөбөҙ һәм тәнебеҙ, йыш ҡына үҙебеҙ ҙә белмәҫтән һәм теләгебеҙгә ҡаршы килеп, башҡа ҡатын-ҡыҙҙы язалау ҡоралына әйләнә. Хәҙер «матурлыҡ» – ҡатын-ҡыҙ, башҡа гүзәл заттарҙыҡы менән сағыштырып ҡарап, үҙенең йөҙөнөң һәм тәненең «баһа»һын билдәләгән система ул. Был даими сағыштырыу уларҙы айыра һәм еңеп сыға: башҡа ҡатын-ҡыҙҙы тәнҡит күҙлегенән баһаларға мәжбүр итә. Әммә гүзәл затты бер-береһенә ҡаршы ҡуйыуҙан ҡотолорға мөмкин. Бының өсөн беҙгә күпселек тыйыуҙарҙы емерергә, бик күп ябыҡ темалар буйынса фекер алышырға кәрәк буласаҡ. Мәҫәлән, матур әйбергә булған кеүек, мөнәсәбәттең кире яғы. Тиҫтәләрсә ҡатын-ҡыҙҙы тыңлап, мин аныҡ гүзәл затҡа матурлыҡ тураһындағы миф килтергән ыҙаларҙың уның тышҡы ҡиәфәте ниндәй булыуға бер мөнәсәбәте лә юҡ икәнен асыҡланым. Тимер ҡатынды кәүҙәләндереүселәр шул ҡиәфәткә буйһоноусыларҙан кәм ҡорбан түгел. Миф беҙҙән башҡа ҡатын-ҡыҙҙың «матурлығы»на бер үк ваҡытта һуҡыр рәүештә көнләшеүҙе, һуҡырҙарса дошманлыҡты талап итә. Дошманлыҡ та, көнсөллөк тә мифҡа берҙәй хеҙмәт итә һәм беҙҙең барыбыҙҙы ла яралай.

«Һылыуҡай» система үрендә оҙаҡ ваҡыт булмаһа ла, уға миф вәғәҙә иткән һоҡланғыс иркенлектә булыуға йыраҡ әле. Үҙеңде сәнғәттең тере предметына әүерелдереп, халыҡтың һоҡланыулы ҡараштарынан ҡәнәғәтлек алыу – ниндәйҙер власть кеүек, әммә ул оҙаҡҡа бармай. Ул үҙ тәнеңә мәңгелеккә ҡайтыу; шәһүәтлек ғорурлығының асылыу, «матурлыҡ» кәртәләрен еңгән ғәҙәти ҡатын-ҡыҙ шәһүәтлеге менән таң ҡалыу; ауыр панцирҙы хәтерләткән оялсанлыҡты, ғәйеп тойғоһон ситкә ташлауҙан ләззәт алыу һәм уларҙы еңеллек менән онотоу ләззәтен бирмәй. Бары тик шул ваҡытта ғына ҡатын-ҡыҙ «матурлыҡ»тың ысынбарлыҡта нимәне үҙ эсенә алғанлығы хаҡында һүҙ йөрөтә алаcаҡ: беҙ белмәгән кешеләрҙең иғтибары; беҙ лайыҡ булмаған наградалар; беҙгә татлы аҙыҡҡа тартылғандай тартылған ирҙәр менән секс; башҡа ҡатын-ҡыҙҙың дошманлығы, ваҡытынан оҙаҡҡараҡ һуҙылған йәшлек; ҡартайыуҙың бәғерһеҙлеге, индивидуаллек өсөн оҙайлы һәм ныҡышмал көрәш. Һәм беҙ «матурлыҡ» вәғәҙә иткән бөтөн яҡшы нәмә: ышаныс, шәһүәтлек, сәләмәт шәхестең шәхси абруй тойғоһоноң ғәмәлдә «матурлыҡ»тың үҙенсәлекле өлөшө түгеллеген, был сифаттарға барлыҡ ҡатын-ҡыҙ ҙа лайыҡлы булыуын һәм, миф емерелгәс улар барыһы ла ҡул һуҙымында ғына буласаҡ икәнлеген аңлаясаҡбыҙ. «Матурлыҡ» тәҡдим иткән нәмәләрҙең барыһына ла беҙ тыуғандан алып хоҡуҡлыбыҙ. Ҡасан беҙ «матурлыҡ»ты шәһүәтлектән айырабыҙ, үҙ һыҙаттарыбыҙҙы, үҙенсәлектәребеҙҙе баһалай башлайбыҙ – шунда ғына беҙҙе берләштереүсе тәнебеҙ менән ләззәтләнеү мөмкин буласаҡ. Матурлыҡ тураһындағы миф тарихта ҡаласаҡ. Әммә әлегә ҡатын-ҡыҙ бер-береһенең тормош тәжрибәһен тәнҡитләй икән, «матурлыҡ» серлелек

шаршауы артында ҡаласаҡ һәм беҙҙе даими контролдә тотоусылар өсөн файҙалы буласаҡ. Беҙ каста системаһында йәшәйбеҙ, был – бигүк күңелле булмаған ысынбарлыҡ. Ул тәбиғәттән бирелмәгән һәм даими түгел; ул сексҡа ла, Аллаһҡа ла, Ғайса пәйғәмбәргә лә нигеҙләнмәгән. Уны үҙгәртергә мөмкин һәм кәрәк тә. Хәл-торош беҙҙе эшкә тотонорға саҡыра, һәм был һөйләшеүҙе ситкә ҡуйып, кисектереп тороу мөмкин түгел. Уны башлау менән мифтың яһалма кәртәләре емерелә башлаясаҡ, шуны аңлаясаҡбыҙ: әгәр ҡатын-ҡыҙ «матур» күренә икән, был уның үҙен шундай итеп тойоуын аңлатмай; шул уҡ ваҡытта ул тәү ҡарашҡа һиҙелмәһә лә, үҙен гүзәл итеп тойоуы мөмкин. Ябай ҡатын-ҡыҙ үҙен һимеҙ тип иҫәпләүе бар, йәш ҡыҙҙың тиҙерәк ҡартайырға ашығыуы ихтимал. Бер гүзәл зат икенсеһенә ҡарағанда, ул уның үҙен нисек ҡабул итеүен дә күҙ алдына килтерә алмай: һомғол күренһә лә, бәлки, үҙен ас тороп интектерәлер; саманан тыш әҙәпһеҙ кейенһә лә, сексуаль йәһәттән ҡәнәғәттер. Ҡатын-ҡыҙ юғары үҙбаһа һөҙөмтәһендә лә, түбән үҙбаһа һөҙөмтәһендә лә тулы тәнле булыуы; косметиканы башҡаларҙан айырылып тороу теләге арҡаһында йәки киреһенсә, йәшеренеү ихтыяжынан ҡулланыуы мөмкин. Һәр ҡайһыбыҙға бер минутлыҡ «рейтингыбыҙ» һөҙөмтәһендә беҙгә ҡарата мөнәсәбәттең нисек үҙгәргәнен кисерергә тура килгәне бар. Шәхес өсөн был тәжрибә емергес булһа ла, ул гүзәл затҡа беҙҙе «матурлыҡ», бик тиҙ төшөрөп алынған фоторәсемдәр менән ышандырырға тырышҡандағыға ҡарағанда, киңерәк һайлауға эйә. Тышҡы ҡиәфәткә хәҙерге ҡарашыбыҙ беҙгә бик аҙ биргәнен аңлайбыҙ; ниндәй ҡиәфәттә булыуға ҡарамаҫтан, бер үк хистәр кисерәбеҙ: ҡайһы бер ваҡытта күңелгә ятышлы, бик йыш – күңелһеҙ, әммә һәр саҡ ҡатын-ҡыҙға хас кисерештәр була, һәм был уртаҡлыҡ миф беҙҙе бер-беребеҙҙән айырырға тырышҡан һанһыҙ кәртәләрҙе үтеп сыға.

Ҡатын-ҡыҙ ир-атты үҙҙәренә ҡарауҙа, әммә тыңламауҙа ғәйепләй. Ләкин беҙ үҙебеҙ ҙә шулай уҡ эшләйбеҙ бит. Хатта йышыраҡтыр ҙа әле. Беҙгә бер-беребеҙ хаҡында тышҡы ҡиәфәт, – әйтерһең дә, тышҡы ҡиәфәт – ул телмәр, сәйәси ҡараштар, абруй йәки баҫымта (агрессия) – буйынса фекер йөрөтөүҙән туҡтарға ваҡыт. Бер ҡатын-ҡыҙҙың икенсеһенә әйтергә теләгәне күпкә ҡатмарлыраҡ һәм миһырбанлыраҡ, уны тышҡы ҡиәфәт аша ғына биреү мөмкин түгел.

Әйҙәгеҙ, бер-береһен көндәш итеп күрмәгән, иерархик һәм бәғерһеҙ булмаған матурлыҡтың асылын асайыҡ. Ни өсөн бер ҡатын-ҡыҙҙың ҡәнәғәтлеге, ғорурлығы икенсеһендә борсолоу тыуҙырырға тейеш? Ир-ат сексуаль йәһәттән дәғүәләшкәндә генә сексуаль дәғүәселек юлына баҫа, әммә ҡатын-ҡыҙҙы миф теләһә ниндәй хәл-торошта ла «сексуаль көндәшлек»кә ҡуя. Билдәле партнер арҡаһында дәғүәләшеү бик һирәк; ғәҙәттә көрәш «ир-ат өсөн» түгел, тимәк, биологик күҙлектән ҡарағанда, унан ҡотолоп була.

Ҡатын-ҡыҙ, шулай итеп, ниндәйҙер кимәлдә «башҡа ҡатын-ҡыҙ» арҡаһында ярыша, сөнки беҙ барыбыҙ ҙа – бер секта ағзалары һәм, нигеҙҙә, миф тыуҙырған ҡара тишекте (черная дыра) ваҡытлыса ғына булһа ла тултырырға тырышабыҙ. Дошмандарса көндәшлек – заманса сексуаль ҡуйылыш: бер-береңә физик тартылыу рөхсәт ителмәүе быны өлөшләтә раҫлай. Әгәр ҡатын-ҡыҙ бер-береһенә тартылыуҙы раҫлау өсөн шәһүәтлеген ҡайтанан билдәләй икән, миф башҡаса яралмаясаҡ. Башҡа ҡатын-ҡыҙҙың матурлығы үҙендә хәүеф йәки үпкәләтеү илтмәйәсәк, ә ҡәнәғәтлек һәм награда булып торасаҡ. Гүзәл зат башҡаларҙы үпкәләтеү йәки хыянатта ғәйепләнеүҙән ҡурҡмай ғына биҙәнә, биҙәүестәр тағып йөрөй ала. Шул ваҡытта, тәнебеҙ менән ләззәтләнеп, тыныс ҡына теләгәнсә биҙәнә, үҙебеҙҙе «башҡа ҡатын-ҡыҙ араһында» кире күҙлектән түгел, ә ыңғай күҙлектән күрһәтә аласаҡбыҙ. Ә инде үҙебеҙгә ошо физик ихтыяжға рөхсәт бирһәк, баҙар башҡаса ир-ат теләге тураһындағы күҙаллауҙа байый алмаясаҡ. Башҡа

ҡатын-ҡыҙға тартылыу күп ҡырлы булыуын шәхсән белгәс, беҙҙе һөйөклө иткән сифаттарҙың кемгәлер килем килтергән сер түгеллегенә ышанмаясаҡбыҙ.

Бер-беребеҙгә мөнәсәбәтте үҙгәртеп, беҙ көнәркәш булмаған матурлыҡты танығыбыҙ. Миф «икенсе ҡатын»ды билдәһеҙ хәүеф итеп һүрәтләй. «Велла» фирмаһының сәсте нисек буятыу буйынса брошюраһы, сәсен буяғандан һуң ҡатын-ҡыҙҙың образын күҙаллап, «икенсе ҡатын-ҡыҙ менән танышығыҙ» тип белдерә. Идея шунан ғибәрәт: «матурлыҡ» хатта үҙеңдең идеаллаштырған образыңды ла «икенсе»гә, сит-ятҡа әүерелдерә, бының өсөн уның менән махсус танышырға ғына кәрәк. Был фраза киҫәтеүҙәр тураһындағы фекергә этәрә: һөйәркәләр, ғаиләләрҙе тарҡатыусы сибәркәйҙәр.

Беҙ ошо билдәһеҙ Икенсе ҡатынға яҡынлашыу менән мифты юҡҡа сығарасаҡбыҙ. Сөнки ир-аттың ҡатын-ҡыҙға иғтибар итеүе бик йыш «матурлыҡ» тәьҫире аҫтында формалаша һәм шым ғына ситтән күҙәтеүсе ҡатын-ҡыҙҙың беҙгә көнәркәш булып күренеүенә аптырарға түгел.

Беҙ был шикте юҡҡа сығарып, аралағы алыҫлыҡты ҡыҫҡарта алабыҙ: ни өсөн үҙ-ара иғтибарлы, киң күңелле һәм ҡупшы булмаҫҡа? Әйҙәгеҙ, бик йыш ирҙәр өсөн генә һаҡланған күҙ ҡамаштырырлыҡ иғтибарҙың бер тамсыһын ғына булһа ла бер-беребеҙҙе әсир итеү өсөн ҡулланайыҡ. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә комплименттар әйтәйек, бер-беребеҙгә һоҡланайыҡ. Беҙ Икенсе ҡатын менән таныша алабыҙ: уның ҡарашын тоя, ул юлда машина туҡтатырға торғанда кәрәк урынына алып бара, ул ингәндә ишек асып тора алабыҙ. Урамда таныш булмаған ҡатын-ҡыҙҙы осратып, уға баштан-аяҡ һағайыулы ҡараш ташлағансы, ни өсөн күҙҙәренә ҡарап йылмаймаҫҡа?

Был көнәркәшлек булмаған матурлыҡҡа хәрәкәт башланды ла инде. Миф һәр саҡ ҡатын-ҡыҙ бәҫен кире ҡаҡты. Һәр ерҙә ҡатын-ҡыҙ беҙҙе унан һаҡлау өсөн намыҫ кодексын эшләнә. Беҙ өҫтөн-мөҫтөнлөктән баш тартабыҙ. Беҙ бер-беребеҙгә ихлас маҡтау яуҙырасаҡбыҙ, матурлығыбыҙҙы башҡа ҡатын-ҡыҙҙы кәмһетеү өсөн файҙаланыусы хәл-ваҡиғаларҙан ҡасасаҡбыҙ, ир-аттың осраҡлы иғтибарын яулау өсөн көрәшеүҙән баш тартасаҡбыҙ. 1989 йылда «Мисс Калифорния» конкурсында ҡатнашыусы һыу инеү кейеменән: «Матурлыҡ конкурстары барлыҡ ҡатын-ҡыҙға зыян килтерә» тигән яҙыу тартып сығара. Бер кино акрисаһы, кадрҙа шәрә төшөргә кәрәк булғас, тамашасы ҡатын-ҡыҙға ихтирам йөҙөнән диетаға ултырыуҙан һәм күнекмәләр үткәреүҙән баш тарта. Беҙ кемдеңдер ҡулында ҡорал һәм көнәркәш булыуҙан сығыу юлдарын табабыҙ. Был яңы перспектива беҙҙең нисек күренеүебеҙҙе түгел, ә беҙҙең быға нисек ҡарауыбыҙҙы, нисек ҡабул итеүебеҙҙе, мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртә. Беҙ башҡа ҡатын-ҡыҙҙың тәнен һәм йөҙөн Тимер ҡатын ҡиәфәте аша түгел, ә улар нисек бар – шулай күрә башлайбыҙ. Көлгән ҡатын-ҡыҙҙы күреп шаҡ ҡатабыҙ, ғорур атлап барыусы гүзәл затты күреп ихлас ҡыуанабыҙ, көҙгөгә ҡарап йылмаябыҙ, күҙ тиәләренә йыйырсыҡтар ятыуын күҙәтәбеҙ, шуның менән ҡәнәғәт булып тағы йылмаябыҙ. Бары тик ҡатын-ҡыҙ ғына бер-береһенә ошо яңы перспективаны аса алһа ла, мифты ҡолатыуҙа ир-аттың ҡатнашлығы ла тәбрикләнә. Әлбиттә, уларҙың күпселеге матурлыҡ тураһындағы мифты йоҙроҡ кеүек файҙалана, әммә ике енес тә хәҙер мифты ғәмәлгә аныҡ ирҙәр йәки һөйәрҙәр түгел, ә ир-ат хакимлығына буйһондоролған институттар ашырыуын таный. Күрәһең, кешелек мифтың көсө шәхси енси мөнәсәбәттәрҙән түгел, ә күпселеген йәмғиәттең мәҙәниәтенә һәм иҡтисадына бәйле икәнлеген аңлай башлай. Ике енес тә үҙҙәрен алдауҙарын таный.

Ир-ат ҡатын-ҡыҙға мифты еңергә ярҙам итергә бурыслы, сөнки сиратта улар үҙҙәре тора. Реклама эшләүселәр күптән түгел шуны аңланы: теләһә ҡайһы

енестең үҙенең шәһүәтлегенә ышанысын юҡҡа сығарырға мөмкин. «Гардиан» гәзите яҙыуынса: «Хәҙер ир-ат ҡыҙҙарға түгел, көҙгөгә ҡарай... Хәҙер матур ир-аттың бөтөн нәмә менән сауҙа итеүен күрергә була». Гомосексуаль субмәҙәниәт образдарын файҙаланып, реклама хәҙер ир-ат тәнен матурлыҡ тураһындағы мифҡа яраҡлаштырып һүрәтләй башланы. Сөнки иғтибар күбеһенсә шәһүәтлеккә йүнәлтелә, дөйөм алғанда ир-аттың сексуаль үҙихтирамы емерелә. Улар ҡанға батҡансы, йонсоғансы көс һынашыуға өйрәнгәс, мифтың ир-ат варианты беҙгә уның ҡатын-ҡыҙ варианты килтергән зыянға ҡарағанда ла нығыраҡ зыян килтерәсәк.

Психиатрҙар ир-атта туҡланыу боҙолоуға бәйле ауырыуҙарҙың артыуы хаҡында иҫкәртә. Хәҙер, ир-ат яңы сауҙа тауарына әүерелгәс, уның асҡысы булып үҙ-үҙең менән ҡәнәғәтһеҙлек тора, реклама образдары гетеросексуаль ир-атҡа ҡатын-ҡыҙ уларҙы нисек итеп күреүе һәм нимә теләгәнлеге хаҡында ярым алдаҡ мәғлүмәтте һеңдерә башлай, шундай уҡ алдаҡты улар ир-ат хаҡында гетерсексуаль ҡатын-ҡыҙға һөйләгәйне. Әгәр улар пропагандаға ышанып үҙҙәрен ситлеккә алып барып бикләһәләр, бынан беҙ ҙә, бер кем дә бер нәмә лә отмаясаҡ.

Әммә мифты юҡҡа сығарыу ир-аттың мәнфәғәтендә, сөнки быға планетаның йәшәү-йәшәмәүе лә бәйле. Ер артабан да үҙенә сикһеҙ енси һәм матди ҡәнәғәтһеҙлекте тергеҙеүгә нигеҙләнгән ҡулланыусы идеологияһын рөхсәт итә алмай. Беҙгә ҡулланған нәмәләребеҙҙән дөрөҫ ләззәт алырға өйрәнергә кәрәк. Беҙ планетаны бөтөн нәмәне биреүсе ҡатын-ҡыҙ – Тәбиғәт-Әсә итеп күҙаллаған кеүек, ҡатын-ҡыҙ тәнен дә ир-ат өсөн даими үҙгәреп тороусы итеп күҙаллайбыҙ. Әгәр беҙ ҡатын-ҡыҙҙың Ер өсөн яңы метафораға ҡоролған тәнен ихтирамға лайыҡ органик бөтөнлөгөндә яҡлайбыҙ икән, үҙебеҙгә лә, планетаға ла ярҙам итәсәкбеҙ.

Экологик көрсөк йәмғиәттең һәм коллективтың яңыса фекерләүен кисекмәҫтән талап итә. Беҙ, әлбиттә, ир-ат институттары донъяға был ғәҙәти булмаған ҡарашты яҡын аралағы бер нисә йылда ғәмәлгә индереренә өмөтләнәбеҙ. Әммә биш мең йыл самаһы камиллашҡан ҡатын-ҡыҙ традицияһына урап ҡайтып, уны йәмғиәткә яраҡлаштырыу яҡшыраҡ булмаҫмы?.. Сөнки матурлыҡ тураһындағы миф ҡатын-ҡыҙ традицияһын һыҙып ташлай, һәм, ошо юлдан барып, беҙ планетаны үлемесле хәүеф аҫтына ҡуябыҙ.

Беҙ үҙебеҙ өсөн һайлау хоҡуғын асыҡ ҡалдырабыҙ. Беҙгә тәнебеҙҙе түгел, тәртиптәрҙе үҙгәртеү зарур. Кемгә кәрәк – шул мифһыҙ ҙа ҡатын-ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәтен шелтәләйәсәк. Әйҙәгеҙ, шул ваҡытта үҙебеҙҙе ғәйепләүҙе туҡтатып, сәбәләнеүҙән, ғәфү үтенеүҙән арынып, ниһайәт, ләззәт ала башлайыҡ. «Матур» ҡатын да, башҡалар ҙа, даими кемдеңдер иғтибарын алып ҡыуанған ҡатын-ҡыҙ ҙа, үҙенә иғтибар йәлеп итеүҙән ҡасҡаны ла, көн һайын бер төрлө кейемдә йөрөгән гүзәл зат та, көн һайын төрлө кейем кейгән ҡатын-ҡыҙ ҙа бер нәмә лә отмай. Үҙен матур тип һанаған һәм донъяның үҙгәреп, уның ошо ысын йөҙөн күреүен талап иткән ҡатын-ҡыҙ ғына ота.

Ҡатын-ҡыҙ үҙенә һәм башҡаларға ла нормаль туҡланырға, шәһүәтле булырға, эш комбинезонында йөрөргә, төрлө аҫыл таштарҙан биҙәлгән диадема кейергә, ҡартайырға, кутерьелар теккән күлдәк, туҙып бөткән плащ йәки һалдат итеге кейергә, йөҙ-башын урап, йәшенеп йәки яланғас йөрөргә, үҙенә нимә оҡшай шулай эшләргә һәм быға иғтибар итмәҫкә рөхсәт иткәндә, һәр ҡайһыбыҙ үҙ тәне менән үҙ теләге буйынса нимә эшләргә теләй, шулай эшләй ала, был – уның шәхси эше, тип һанағанда ғына ота. Күпселек ҡатын-ҡыҙ үҙен системанан алып сыҡһа, ул емерелә башлай. Институттар, ҡайһы бер ир-ат, ҡатын-ҡыҙ беҙҙең тышҡы йөҙөбөҙҙө, ҡиәфәтебеҙҙе беҙгә ҡаршы файҙаланырға тырышып ҡараясаҡ. Әммә беҙ был ҡармаҡҡа эләкмәйәсәкбеҙ.

Ҡатын-ҡыҙға файҙа килтергән матурлыҡ тураһында аңлатма бармы?

Әлбиттә. Уның бөгөнгө вариантында уйынға урын юҡ. Матурлыҡ тураһындағы миф зыянлы, тәкәббер, шуға күрә уға күп нәмә бәйле. Ул уйын биргән ләззәтте иҫәпкә алмай. Ҡыҙыҡһыныуға уйнайһығыҙ икән, ставканың ни тиклем юғары булыуы мөһим түгел, ирекһеҙҙән уйнаған уйын ҡомарлы була, тора-бара көрәшкә әүерелә. Миф хакимлыҡ иткәндә, ставкаға – ғүмер, тоғро булмаған мөхәббәт, дыуамал һәм ялған шәһүәтлек ҡуйыла. Был – сит ҡағиҙәләр буйынса уйын, унан бер нисек тә баш тартыу мөмкин түгел. Һайлау ҙа, ирекле ихтыяр ҙа, еңеллек тә, ысын уйын да юҡ.

Әммә үҙебеҙҙе ҡотҡарыу өсөн беҙ шундай тормошто күҙалларға тейешбеҙ: унда тәнгә уның ҡиммәте ауырлыҡ түгел, ә аңлы рәүештә, үҙеңә ашып торған сикһеҙ мөхәббәт һөҙөмтәһендә тыуған театрлаштырылған маскарад. Матурлыҡтың яңы төшөнсәһе беҙҙең власть тураһындағы яңы аңлатмаларыбыҙҙы сағылдыра. Кем, беҙгә иерархия кәрәк, ти? Мин матурлыҡты, бәлки, һеҙ күрмәгән ерҙә күрәмдер. Һеҙҙең өсөн улай булмаһа ла, ҡайһы берәүҙәр миңә ҡәҙерлерәк. Шунан, нимә булған? Минең нисек ҡабул итеүем улар өҫтөнән хакимлыҡ итмәй. Ни өсөн айырым кешеләр генә матур тип һаналырға тейеш? Һоҡланыу күп нәмәне һөйрәп сығарыуы мөмкин. Ни өсөн ғәҙәти булмағандар ғына күңелдә ниндәйҙер эҙ ҡалдырырға тейеш? Ғәҙәти булмаған барлыҡ нәмәнең ҡиммәте – ул ир-ат идеяһы, ул, дәрткә ҡарағанда, капитализм менән күберәк уртаҡлыҡҡа эйә. Нимәгә мөмкин булмағанды теләргә? Балалар, мәҫәлән – иң ябай йән эйәләре, әммә уларҙы ҡәҙерләйҙәр, уларҙы матур тип һанайҙар.

Ҡатын-ҡыҙ үҙен мифтан ситтә нисек тойор ине икән? Кем әйтә ала? Моғайын, беҙ алмаш-тилмәш ябығырға һәм һимерергә, ошо үҙгәрештәр менән ләззәтләнергә теләрбеҙ, ауыртыныуҙан һәм уның тыуҙырыусы сәбәптән ҡасырбыҙ. Сөнки уны насар тип һанаясаҡбыҙ. Моғайын, беҙ үҙебеҙҙе биҙәргә тырышырбыҙ һәм бынан, рауза сәскәһен биҙәргә тырышҡандағылай, ысын кинәнес алырбыҙ. Бәлки, ҡатын-ҡыҙ үҙ тәненә ғазапты ни тиклем аҙыраҡ килтерә, был тәндәр беҙгә шул тиклем матурыраҡ булып күренер. Ул ваҡытта беҙҙә таныш булмаған кешеләрҙең һоҡланыулы ҡарашын тойоу теләге тыумаясаҡ, уның кәрәге лә юҡлығын аңлаясаҡбыҙ. Йөҙөбөҙҙөң ҡартайыуын тыныс ҡабул итеп, тышҡы ҡиәфәтебеҙҙең етешһеҙлектәр тупланмаһы тип иҫәпләүебеҙҙән туҡтарбыҙ, сөнки беҙҙең бар еребеҙ ҙә камил. Бәлки, башҡаса йөҙөбөҙҙө үҙгәртергә теләмәҫбеҙ.

Нимәнән башларға? Әйҙәгеҙ, баҫалҡы, ҡомһоҙ булмайыҡ, ләззәт артынан ҡыумайыҡ, ауыртыныуҙарҙан ҡасайыҡ, нимә теләйбеҙ, шуны кейәйек, ашайыҡ, эсәйек. Башҡа ҡатын-ҡыҙҙың һайлауын ихтирам итәйек. Үҙебеҙ теләгән сексты эшләйек, теләмәгәненә ҡәтғи ҡаршы торайыҡ. Һәм, бер көн килеп, беҙгә ҡағиҙәләрҙе шундай итеп үҙгәртеү мөмкин буласаҡ – бер кем дә беҙҙең матурлығыбыҙға ышаныуыбыҙҙы ҡаҡшата алмаясаҡ. Әйҙәгеҙ, ошо матурлыҡты данлайыҡ, уның менән көйәҙләнәйек һәм хозурланайыҡ: хистәр сәйәсәтендә ҡатын-ҡыҙ бик гүзәл.

Ҡатын-ҡыҙға һөйөү хисе аша бирелгән матурлыҡ билдәләмәһе рух төшөнкөлөгөн – уйындан, нарцислыҡты – үҙ-үҙеңә һөйөү, өлөштәргә бүлгеләнеүҙе – бөтөнлөк, бушлыҡты – барлыҡ, хәрәкәтһеҙлекте хәрәкәт менән алмаштыра. Ул прожекторҙан төшөп, шәхесте ҡаплаусы утҡа түгел, ә йөҙҙән һәм тәндән сыҡҡан яҡтылыҡҡа рөхсәт бирә. Матурлыҡ шәһүәтле, күп ҡырлы һәм көтөлмәгәнсә. Беҙ башҡаларҙа шуларҙы күргәндә һәм ҡурҡмағанда ғына уларҙы үҙебеҙҙә таба алаҡаҡбыҙ.

Бер быуын элек Жермена Гриэр ҡатын-ҡыҙҙан: «Һеҙ нимә эшләйәсәкһегеҙ?» – тип һорай. Уларҙың яуабы сирек быуат дауам иткән киҫкен боролош яһай. Хәрәкәтебеҙҙең сираттағы этабы айырым шәхестәрҙең дә, ҡатын-ҡыҙҙы дөйөм алғанда ла, көҙгөгә ҡарап, унда нимә күрергә теләүенә бәйле. Ә нимә күрербеҙ?

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ тәржемәһе.**

# ЯЙЫҠТАР – БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ИҢ БОРОНҒО АТА-БАБАЛАРЫ

Мәҡәләмдең башында халҡыбыҙҙың барлыҡҡа килеүе тураһында тарих фәнендәге фекерҙәр менән ҡыҫҡаса ғына таныштырып үтке килә. Башҡорттарҙың халыҡ булып ойошоуы, Уралда уларҙың ҡасандан бирле йәшәүе тураһындағы мәсьәлә – фәндә иң бәхәсле проблемаларҙың береһе. Мәҫәлән, урындағы тарихсыларҙың күбеһе, башҡорттар Көньяҡ Уралға IX – X быуаттарҙа ғына килгән, уға тиклем бында фин-уғыр, боронғо иран телле ҡәбиләләр йәшәгән, тигән ҡараш яҡлы. Уның иң абруйлы авторы – академик Р. Ғ. Кузеев булһа, хәҙер был фекерҙе академиктың эйәрсендәре профессор В. А. Иванов, фән кандидаттары Г. Н. Гарустович, И. В. Антонов берҙәм яҡларға тырыша. Был ғалимдарҙың, шул иҫәптән академик Р. Ғ. Кузеевтың да, хеҙмәттәрендә уларҙың ҡарашын нигеҙләрлек дәлилдәр килтерелмәй. Тимәк, уны уйлап сығарылған төшөнсә тип ҡарарға кәрәк.

Шул уҡ ваҡытта фәндә, башҡорттар Уралда борон замандарҙан бирле, кәм тигәндә 2 мең йылдар элек йәшәгән, тигән фекер киң таралған. Был ҡарашты хеҙмәттәрендә СССР-ҙың атаҡлы телсе-төркиәтсе ғалимдары В. В. Бартольд, С. Е. Малов, Ж. Ғ. Кейекбаев, М. З. Зәкиев яҡлап сығып, һәр береһе үҙ дәлилдәрен өҫтәне. Ошо фекерҙе үҙ аллы яҡлаусы-үҫтереүселәрҙең береһе Башҡортостан этнография фәненә нигеҙ һалыусы, 1916 һәм 1925 йылдарҙа баҫылған «Башҡорттар» тигән фундаменталь тарихи китаптың авторы С. Н. Руденко булды. Ул, башҡорттар тел, көнкүреш, мәҙәни, сәйәси һәм башҡа һыҙаттары яғынан ныҡлап берләшкән халыҡ булып, беҙҙең эраның I быуаттарынан Уралда йәшәй, тигән фекерҙе нигеҙләне.

Түбәндәге фекерҙәр аңлайышлыраҡ булһын өсөн, тағы бер мәсьәләгә туҡтап китергә кәрәк. СССР-ҙа төрки халыҡтарҙың барлыҡҡа килеүен тикшергәндә, «улар Евразия далаларына яңы эраның – III-IV, ә күпләп VIII-IX быуаттарҙа ғына Үҙәк Азия (Ҡытай, Монголия) яҡтарынан күсеп килгән» тигән рәсми фекер ерегеп, уны етәксе вазифаларҙа ултырған ғалимдар төрлөсә яҡларға тейеш булды. Академик Р.Ғ.Кузеев та ошо вазифаны үҙ өҫтөнә алып һәм уны ғәйрәтле тормошҡа ашырыусыларҙың береһе ине. Был яһалма ҡамасаулыҡтар этнография фәненең үҫешенә тотҡарлыҡ яһаны, ләкин хәҡиҡәттә бер ҡасанда биктә тотоп булмай, ул барыбер үҙ үҫешенә юлды таба. Ысынлап та, рәсми тотҡарлыҡтарға ҡарамаҫтан, юғарыла исемләнгән ғалимдарҙың һәм уларҙың фекерҙәштәренең тикшеренеүҙәре фән ҡаҙаныштарының өлгөһө була алды һәм беҙгә улар менән ғорурланырға кәрәк.

Уралдың иң ҙур йылғаларының береһе – Яйыҡ (Даих, Дахо, Джаик, Даикс) үҙ исеме менән яңы эраның II быуатынан бирле билдәле булып, ошо быуатта йәшәгән рим тарихсыһы Птолемейҙың картаһында ла күрһәтелгән. Мәғлүмәттең ысынбарлыҡҡа тап килеүен замандашы Страбон дөрөҫләй һәм яйыҡтарҙы (даиктарҙы) Каспий диңгеҙенең төньяҡ ярында урынлаштыра. Ләкин «Яйыҡ»

төшөнсәһен, халыҡ исеме (этноним) булараҡ, беҙҙең эраға тиклемге V быуатта йәшәгән бөйөк грек тарихсыһы Геродот телгә ала. Ошо дәлилдәр нигеҙендә тарих фәнендә, «Яйыҡ-Даик» төшөнсәһененең яңы эраға тиклем Көньяҡ Урал, Ҡаҙағстан, Арал диңгеҙе яҡтарында күсмә тормошта йәшәгән ҡәбиләләрҙең исеме менән туранан-тура бәйләнеше булған, тигән ҡараш күптәндән йәшәп килә. Уны Көньяҡ Урал археологтары араһында беренселәрҙән булып атаҡлы белгес, профессор К. Ф. Смирнов яҡлап сыҡты. Ғалим фекеренсә, был күренеште шулай аңлатырға кәрәк: йә халыҡ исеме йылғаға бирелгән, йә йылға исеме халыҡ исеменә әйләнгән, йә икеһе лә өсөнсө уртаҡ исемдән барлыҡҡа килгән. Ошо өс варианттарҙың ҡайһыһы ғына хәҡиҡәткә тап килмәһен, Яйыҡтың, йылға исеме булараҡ, ошо дахо-даиктар (яйыҡтар) көн иткән осорҙа, кәм тигәндә беҙҙең эраға тиклемге VI-IV быуаттарҙа уҡ осрағаны асыҡлана. Шулай итеп, Яйыҡ – халыҡ-йылға исеменә кәмендә 2500–2600 йыл.

Яйыҡтан Уралда башҡа йылғалар ҙа исем алған. Оло һәм Кесе Эйек, Ик, Иж, Ыҡ атамаларының «Яйыҡ»тың әйтелеш варианттары булыуы ла шик тыуҙырмай. Был йылғалар Урал тауҙарының көнсығыш һәм көнбайыш битләүҙәре буйлап аға. «Яйыҡ» атамаһының йылға исеме булараҡ киң таралғанлығының Ҡаҙағстан, Себер яҡтарында осрауы ла раҫлап тора.

Йылға атамаһы булараҡ, Яйыҡ тарихсы фекерен үҙенә тағы ла бер яғы менән йәлеп итә. Бөтә донъя телселәренең берҙәм ҡарашынса, Яйыҡ тәү башлап төрки телле халыҡтар араһында барлыҡҡа килә. Был фекерҙе тәүләп әйтеүсе Рәсәй һәм СССР-ҙың бөйөк тарихсы-шәреҡсеһе академик В. В. Бартольд. Уныңса, «яйыҡ» атамаһы – тарих фәнендә йәше асыҡ билдәләнгән иң боронғо төрки сығанаҡлы. Тимәк, ул исем Урал буйын һәм уның тирәһендәге сикһеҙ далаларҙа төрки ҡәбиләләр йәшәгән осорҙа барлыҡҡа килгән. Был турала бөтә башҡорт тел ғалимдарынан С. Е. Малов, Ж. Ғ. Кейекбаев, Н. К. Дмитриев, Ф. Ғ. Хисаметдинова кеүек күренекле фән докторҙары яҙып сыҡты. Уларҙың хеҙмәттәрендә атамаларға Д (Джаик)-Ҙ (Ҙаик)-Й (Яйыҡ) хәрефтәренең йыш ҡына бер-береһе менән алмашынып тороуы төрки телдәренә хас күренеш икәнлеге иҫбатлана.

Яйыҡтың әйтелеш варианттарының күпселеге – уның Уралда тиҫтәләгән быуаттар үҫешенең бер сағылышы. Ләкин, Яйыҡ халыҡ (ҡәбилә) һәм йылға исеме генә түгел, ул боронғо башҡорттарҙа киң таралған һәм иң абруйлы тәбиғәт күренештәренең береһе булған һыу аллаһы – Яйыҡ хандың исеме лә. Был яңылыҡ беҙгә XIX-XX быуат сиктәрендә йәшәгән башҡорт халҡының этнографияһын, мәҙәниәтен тикшергән тарихсы Д. Соколовтың хеҙмәтенән билдәле. Шуныһы ғәжәпләндерә: боронғо башҡорттарҙың һыу аллаһы Яйыҡ хан тураһында бай һәм мауыҡтырғыс мәғлүмәттәр Таулы Алтайҙың төп халҡында хәҙерге көндәргәсә һаҡланған. Боронғо ата-бабаларыбыҙ яйыҡтарға алдараҡ әйләнеп ҡайтырбыҙ, ә хәҙергә алтайҙарҙың Яйыҡ ханы, уларҙың дини йолалары менән танышып үтәйек. Был мәғлүмәттәр Урал Яйыҡтары менән туранан-тура бәйләнгән.

Яйыҡтарҙың Боронғо Башҡортостан тарихындағы, шул иҫәптән башҡорт халҡының ойошоу осорондағы ролен тейешле кимәлдә аңлатыу өсөн, уларҙың археологик ҡомартҡылары тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреү урынлы. Юғарыла әйтелгәндәрҙән күренеүенсә, яйыҡтар – тимер быуат баштарында (беҙҙең эраға тиклемге осор) Көньяҡ Уралда иң ҙур, ә сәйәси, мәҙәни берҙәмлеге менән иң көслө ҡәбилә төркөмдәренең туғанлығын аңлатҡан уртаҡ исем. Улар артынан меңәрләгән археологик ҡомартҡылар (убалар, ҡаласыҡ-ҡәлғәләр һ.б.) ҡалған.

Улар төҙөлөштәре һәм биргән табыштары яғынан төрлө төркөмдәргә бүленә һәм алтын, көмөш, тимер, баҡыр-еҙ әйберҙәргә сикһеҙ бай. Шуларҙың иң мөһимдәренә генә туҡталып китәйек. Әлбиттә, яйыҡтарҙың иң күп өлөшө йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеп, күсмә тормошта йәшәгән. Улар яҙ-йәйҙәрҙе һыуға,

үләнгә бай Уралдың дала, урман-далаһында, ә көҙөн һәм ҡышын Арал диңгеҙе буйҙарында, Көньяҡ Ҡаҙағстан далаларында үткәргән. Был төркөм яйыҡтарҙың мәҙәниәтенә тупраҡтан өйөлөп, диаметры уртаса – 20-100, бейеклеге 1-10 метр убалар, йәғни тәрән соҡорҙарҙан торған ҡәберлектәр хас. Ғәҙәттә, убаның уртаһында бик тәрән, заманында матур итеп йыһазландырылған, табыштарға бай ҡәбер булып, уның тирәһендә – унлаған бәләкәй ҡәберҙәр. Беҙ, археологтар, был күренеште түбәндәгесә аңлатабыҙ: убаның уртаһындағы ҡәберҙә абруйлы ырыу-ҡәбилә башлыҡтары ерләнһә, уны уратып яҡын туғандары күмелгән. Хәҙергә тиклем тикшерелгән йөҙәрләгән Яйыҡ убалары араһында донъя кимәлендә дан алған Филипов убалары айырылып тора. Улар – Ырымбур өлкәһе ерендә, Яйыҡ йылғаһы буйҙарында бер-бер артлы теҙелеп киткән диаметры 80–100 бейеклеге 8 – 10 метрҙай егермеләп тупраҡ өйөмдәре. Һис шикһеҙ, заманында был убалар 5 – 10 метрға бейегерәк булған. Мәҫәлән, Филипов убаларынан 150 – 200 саҡрымдағы Яйыҡ йылғаһының түбәнге ағымында (Ҡаҙағстандың, Уральск өлкәһе) бейеклеге – 18, диаметры 160 метрлы уба һаҡланған. Уны уратып бейеклеге – 8 – 10, диаметры 80 – 100 метрлап дүрт уба урынлашҡан. Был уба комплексы Көньяҡ Уралдағы иң ҙуры.

Донъя фәненә, яҡшы билдәле Филипов убаһында 1987-1988 йылдарҙа Өфө археологы, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәре Анатолий Пшеничнюк тикшеренеүҙәр үткәрҙе. Уның диаметры – 100, бейеклеге – 9 метр, түбәһендә тәрәнлеге – 6, уба эсендәге ағас ҡоролмаларҙың сереп емерелеүе арҡаһында барлыҡҡа килгән.

Убаның уртаһындағы балсыҡ ҡатламында тәрәнлеге – 2, күләме 19х20 метрлы ҙур ҡәбер соҡолоп, уға ағас бура түшәлгән. Бура-өйҙөң иҙәне таҡталарҙан түшәлгәндер, тигән ҡараш бар. Бураның өҫтөнән бер нисә метр бейеклектә арҡырыбуй түшәлгән бүрәнәләр ҙә булған, ләкин уларҙың серегән төкөмдәре ғына һаҡланған. Ҡәбергә оҙонлоғо 17 метр, киңлеге 70-80 сантиметрлы һөҙәк кенә түбәнәйә барған коридор (дромос) бар, ул, моғайын, ҡәберлеккә инеп йөрөү өсөн махсус ҡалдырылғандыр. Иҙән бейеклегендә коридор ҡәбер соҡоро менән тоташа, ошонда уҡ ҡаҙып ултыртылып, ике бүрәнәгә нығытылған ишек күҙаллана. Ысынлап та, ҡәбер ҙур һәм тәрән соҡорҙа бүрәнә өй формаһын хәтерләтә.

Ентекле тикшереү һөҙөмтәһендә, А. Х. Пшеничнюк убаның тәүге төҙөлөшөн түбәндәгесә күҙ алдына баҫтыра. Оҙон коридорлы бура өйлө ҡәбер өҫтөнән заманында бүрәнәләрҙән майҙаны 100 метрҙан кәм булмаған ҡатмарлы ҡоролма төҙөлгән. Анатолий Харитоновичтың фекеренсә, ҡоролма бер-береһе менән тоташҡан ағас буралarҙан тороп, уларға 45 градус кимәлендә оҙон бүрәнәләр терәлгән. Бураларҙың өҫтөнән тағы ла бер нисә метр бейеклектә арҡыры-буй түшәлгән бүрәнәләр остары һәм ботаҡтары һалынып, ағас ҡоролма өҫтөнән сама менән 15–20 метр ҡалынлыҡта ер ҡатламы-уба өйөлгән. Тупраҡ ҡатламдары сиҙәм ерҙән ҡалын ҙур кирбес һымаҡ киҫеп алынған өлөштәрҙән торған, тигән фекер бар. Оҙаҡ ваҡыт, бәлки, бер нисә быуат үткәндән һуң, ҡоролманың ағастары серегән һәм уба өҫтөндәге ер ҡатламы ишелеп, убаның уртаһында ҙур соҡор хасил булған.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, был уба борон замандарҙа уҡ бик ныҡ таланған. Ҡәберҙә археологтар өсөн ҡиммәтле тимер, баҡыр-еҙ әйберҙәр (хәнйәрҙәр, 60 – 80 литр һыйҙырышлы ҡаҙандар, бысаҡтар, алҡалар) һәм йөҙәрләгән ваҡ ҡына алтын пластинка киҫәктәре табылған. Шулай ҙа Анатолий Пшеничнюк – донъя археологтары араһында һирәк осраған иң бәхетлеләрҙең береһе: көтмәгәндә ҙур табыштарға юлығып, ул боронғо Урал тарихын тикшереү өлкәһендә ҙур фәнни асыш яһай.

Убаны өйгән яйыҡ олатайҙар, күрәһең, ҡәбергә һалынған ҡиммәтле әйберҙәрҙең бурҙар тарафынан урланасағын һиҙемләгән, шуға ла ҡайһы бер үтә ҡиммәт әйберҙәрҙе алтын пластинкалар менән биҙәлгән ике ағас һандыҡҡа һалып, ҡәберҙән бер нисә метр алыҫлыҡта, бер метрҙай тәрәнлектә һәр береһен айырым урынлаштыра, һәм улар беҙҙең көндәргәсә матур һаҡлаған.

Һандыҡтарға бейеклеге – 50, оҙонлоғо 30-35 сантиметр ағастан яһалған, алтын пластинкалар менән ҡоршалған болан фигуралары, тиҫтәләгән киң ауыҙлы, йомро төплө ағас сеүәтәләр һалынған булған. Һәр сеүәтә төрлө ҡош, хайуан, балыҡ һүрәттәре киүек ҡойоп яһалған алтын пластинкалар менән биҙәлгән; улар бер үк ваҡытта биҙәү һәм тотҡа ролен дә үтәгән. Бер һандыҡтың эсенән 1,8 кг. самаһында саф алтындан ҡойолған көршәк сыҡты. Уның ике яғын ҡыр кәзәһе фигураһына оҡшатып, тотҡалар ҡойолған. Ошондай көршәктәрҙең ике ише – Иранда табылып, уларҙың береһе хәҙер – Тәһран, икенсеһе Лондон музейында һаҡлана. Һис шикһеҙ, был антиквариат яйыҡтар тарафынан Уралға көньяҡ илдәрҙән (Иран) алыш-биреш кимәлендә килеп юлыҡҡан. Ә болан алтындарҙың химик составы Екатеринбург ҡалаһы профессоры В.В. Зайков тарафынан геохимик алым менән тикшерелеп, ғалим шундай һығымтаға килә: Филипов боландарының алтыны Урал (Баймаҡ) алтынынан ҡойолған.

Һүҙ ыңғайында түбәндәге факты ла әйтмәйенсә булмай. Өфө ҡалаһының үҙәгендә III–XVI быуаттарҙа Өфө - II ҡаласығы урынлашҡан. Унда күп йылдар археологик ҡаҙыныуҙар үткәрелә; уның V–VII быуат ер ҡатламдарында унға яҡын алтын сыбыҡ киҫәктәре табыла. Күрәһең, улар алтын оҫталары өсөн төрлө биҙәнеү әйберҙәре эшләү өсөн сеймал булған. Профессор В.В.Зайков ошо Өфө алтынының да Уралда табылғанын асыҡлаған. Тимәк, Урал – алтын сығарыу һәм уны эшкәртеү буйынса борон заманда уҡ Евразия далаларында билгеле иҡдисади һөнәр һәм сауҙа үҙәктәренең береһе, уларҙың ысын хужалары атабабаларыбыҙ булған.

Юғарыла әйтеп үтелгән алтын, көмөш, баҡыр-еҙ табыштар 2004 – 2007 йылдарҙа Мәскәү археологы Л. М. Яблонский тарафынан тикшерелгән башҡа Филипов убаларында ла табыла. Филипов алтындарының ғәжәйеп мажаралы үҙенсәлеге лә бар. А. Х. Пшеничнюк убаның тупрағын бульдозер, скрепер менән ҡаҙыта, һәм шул арҡала алтын әйберҙәр менән тултырылған ағас һандыҡтарҙың тышы емерелгән хәлдә табыла. Ә уникаль табыш тураһында мәғлүмәт бөтә донъяға тарала, йәмәғәтселек уларҙың халыҡҡа, белгестәргә күрһәтелеүен талап итә. Һуңғы бурысты атҡарыу өсөн оҫта реставраторҙарға ихтыяж тыуып, СССР-ҙа ундайҙар булмай сыға. Башҡортостан хөкүмәте исеменән Ленинград (хәҙер Санкт-Петербург) ҡалаһындағы Эрмитаж белгестәре алып барған һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә, Нью-Йорктың (АҠШ) Неополитань музейы менән килешеү төҙөлә. Уға ярашлы, бөтә ватылған, һынған табыштарҙы тәбиғи хәленә ҡайтарыуҙы музей хеҙмәткәрҙәре үҙ өҫтөнә ала һәм шулай уҡ ошонда бөтә табыштарҙың күргәҙмәһе нигеҙендә «Евразияның алтын боландары» тигән фәнни халыҡ-ара конференция ойошторола. Күргәҙмә-конференция 2000 йылдың йәйендә үтте һәм А. Х. Пшеничнюк менән миңә лә унда ҡатнашыу бәхете тейҙе. Сәйәхәт тәьҫораттары хаҡында һөйләп тә, яҙып та бөтөрөрлөк түгел. Конференцияла ҡатнашыусылар боронғо Урал яйыҡтарының мәҙәниәтен, Евразия далаларында йәшәгән замандаштары-күршеләре араһындағы тотҡан ролен бик юғары баһаланы. Һуңынан ошо күргәҙмә Италияла, Эрмитажда (Ленинград) Мәскәүҙә һәм Өфөлә лә уҙғарылды. Был фәнни ойоштороу саралары БР Президенты Мортаза Рәхимовтың туранан-тура ҡатнашлығы һәм ярҙамы арҡаһында мөмкин булды. Шунан файҙаланып, археолог буларaҡ, ошо ярҙамы өсөн

тәүге президентыбыҙға иптәштәрем исеменән һуңлап булһа ла, рәхмәтемде белдерәм.

Яйыҡтарҙың Башҡортостандың боронғо тарихындағы икенсе ҙур матди мираҫы булып тимер быуат баштарында барлыҡҡа килгән ҡәлғә-ҡаласыҡтар иҫәпләнә. Улар йылғаларҙың бейек яр морондарында, тау баштарында төҙөлә, текә ярҙар кеше үтә алмаҫлыҡ хәлгә килтерелә, ә ялан яҡтарынан 2–5 метр бейеклегендәге киң ер ҡойма, тәрән, киң соҡорҙар менән нығытылған була, ҡәлғәнең эсендә ағас өйҙәр, тирмәләр ҡоролоп, унда ырыу-ҡәбилә башлыҡтары һәм уларҙың яҡын туғандары, абруйлы кешеләр көн итә. 60 йылдан ашыу археологик эшем шуны күрһәтте: ошо ҡаласыҡ урындар хан-ҡала, ҡала-тау исемендә һаҡланып, хәҙерге башҡорттарҙың күптәре был атаманың нимә икәнен аңламай, тик урындың барлығын ғына белә. Үҙемә ҡалһа, ошондай исемле урындарҙың барлығын ишетһәм, һәр ваҡыт уларҙы барып ҡарай һәм унда боронғо башҡорттарҙың ҡаласыҡ-ҡәлғәһенең емерелектәрен таба инем.

Ҡала-тау, хан-ҡала атамалы боронғо ҡоролмаларҙың фәнни әһәмиәте ошонан тора: тәү башлап улар Иран, Төркмәнстан, Үзбәкстан тарафтарында барлыҡҡа килә һәм «ҡала» – «нығытма» мәғәнәһендә атап йөрөтөлә. Хәҙерге телселәрҙең, тарихсыларҙың дөйөм ҡарашы буйынса, үрҙә әйтелгән илдәрҙә 20 меңдән ашыу топонимик исемдәр һаҡлана. Ошо объектив ысынбарлыҡ Көньяҡ Уралда, бигерәк тә Ағиҙел буйҙарында барлыҡҡа килгән ҡәлғә-ҡалатауҙарҙың сығышы менән Арал диңгеҙе тарафы менән тығыҙ бәйләнгән яйыҡтар тарафынан төҙөлөүе тураһында һөйләй. Хәҙерге Өфө ҡалаһы ерендә унға яҡын ҡаласыҡтың эҙе табылып, улар заманында ҡала-тау, имән-ҡала тип йөрөтөлгән, һәм был мәғлүмәт яҙма документтарҙа ла сағылған. Шулай итеп, хәҙерге Өфө боронғо нигеҙҙәре менән яйыҡ олатайҙарҙың тарихы менән туранан-тура бәйле. Был һығымта тиҫтәләгән археологик табыштар һәм физик-химик ысулдар ҡулланып тикшерелгән асыштар менән иҫбатлана. Мәҫәлән, 2006 йылдан Киров районындағы Пушкин урамы менән Салауат Юлаев проспекты киҫешкән урынында Өфө-II исемле ҡаласыҡ тикшерелә. Уның өс метрҙан ашыу ер ҡатламдарының иң аҫтында табылған ағас күмер ҡалдыҡтары Австралия физиктары тарафынан радиоуглерод алымы ҡулланып өйрәнелә һәм күмерҙәрҙең беҙҙең эраның III, IV, V быуаттарында барлыҡҡа килеүе асыҡлана. Тимәк, ошо ваҡыттарҙан бирле Өфө-II ҡаласығы XVI быуаттың урталарына тиклем өҙлөкһөҙ үҫешкән, унда тормош гөрләп торған. Юҡҡа ғына башҡорттар Рәсәйгә ҡушылғандан һуң ошо Башҡорт ҡалаһы майҙанында, хәҙерге Дуҫлыҡ монументы урынында күскенсе урыҫтарҙың беренсе быуыны үҙҙәренең ҡәлғәһен ҡороп ҡуймаған.

Был ҡаласыҡтар, әлбиттә Уралдың урман-дала райондарында йәшәгән яйыҡтарҙың ултыраҡ тормошҡа күсәнлеге тураһында һөйләй.

Үрҙә мин, Яйыҡ халыҡ (ҡәбилә төркөмдәре), йылға исеме генә түгел, ул боронғо башҡорттарҙа киң таралған һәм иң абруйлы тәбиғәт күренештәренең береһе булған һыу аллаһы Яйыҡ хандың исеме, тип әйтеп үткәйнем. Шуныһы ғәжәп: боронғо башҡорттарҙың һыу аллаһы Яйыҡ хан тураһында бай һәм мауыҡтырғыс мәғлүмәттәр Таулы Алтайҙың төп халҡында ошо көндәргәсә һаҡланған һәм был хәлдең ышаныслы аңлатмаһы бар, һәм ул турала һүҙ бер аҙ алдараҡ буласаҡ. Хәҙергә алтайҙарҙың Яйыҡ ханы, уларҙың дини йолалары менән танышып үтәйек, сөнки был мәғлүмәттәр Урал яйыҡтарының тарихи, дини йолалары менән туранан-тура бәйләнгән.

Боронғо Яйыҡ һыу аллаһының алтай халҡында бөгөнгәсә йәшәп килеүе тураһындағы мәғлүмәттәрҙе тәү башлап һәм тулы рәүештә бынан 130 йыл элек Рәсәйҙең бөйөк тарихсыһы, тел белгесе В.В.Радлов яҙып ҡалдырған. 1860–1870

йылдарҙа ул Ҡытай, Монголия, Себер, Алтай, Ҡаҙағстан һәм Урта Азия халыҡтарының тарихын, телен, этнографияһын, мәҙәниәтен тикшерә, бай мәғлүмәттәр йыя. Хеҙмәттәренән күренеүенсә, фәнни сәйәхәттәре ваҡытында В. В. Радлов хатта төрлө археологик тикшеренеүҙәр алып бара, мөһим асыштар ҙа яһай.

Ғалимдың Рәсәй һәм донъя тарих фәнендәге абруйлы урынын сикһеҙ бейеклектәге яҡты йондоҙ менән сағыштырырға мөмкиндер. Уның иң бөйөк асышы булып яңы эраның VII–IX быуаттарында Себерҙә, Үҙәк Азияла көн иткән төрки халыҡтар яҙмаһын уҡыу серен асыуы торалыр. Ул был асышты бөйөк Дания ғалимы, төрки телдәр белгесе В.Томсен менән бер үк 1893 йылда, йәғни үҙ аллы рәүештә яһай. Минеңсә, ошо талантлы ғалимға боронғо Урал-Алтай төркиҙәре тураһында үтә мөһим мәғлүмәт йыйып ҡалдырырға насип була. Өҫтәп шуны әйтәйек: Йыйыҡ алла тураһындағы мәғлүмәттәрҙе 1924 йылда А.В.Анохин тигән тарихсы-этнограф та йыя, ләкин, нигеҙҙә, ул В. В. Радлов мәғлүмәттәрен ҡабатлай; һуңғылары тулыраҡ булыуы менән дә айырылып тора.

Алтай халҡындағы Йыйыҡ алла тураһындағы мәғлүмәттәр арбау, сихырлау, күрәҙәлек итеү һәм төрлө йәндәр менән аралашыуға ҡайтып ҡала. Һис шикһеҙ, һүҙ бик борондан килгән дини йолалар һәм фекерләүҙәр тураһында бара, уларҙа кешенең донъяға дөйөм ҡарашы сағылыш таба. Фекеребеҙ уҡыусыға аңлайышлыраҡ булһын өсөн, был теманы киңерәк планда бирергә булдым.

Себер һәм Алтай халҡында юғарыла телгә алынған им-томдарҙы атҡарыусыны «шаман» тип атағандар, ә уның башҡарған эшмәкәрлеген камлау (русса – камлание) тиҙәр. Һис шикһеҙ, шаманлыҡ боронғо башҡорттарға ла яҡшы таныш булып, мең йылдан ашыу ислам дине йоғонтоһонда улар халыҡтың хәтеренән сыҡҡан тип әйтерлек. Алтайҙарҙа иһә был йола сағыштырмаса тулы һаҡланған. Беҙҙеңсә, шаманлыҡ итеү, камлау һүҙҙәренә «арбаусы», «арбаулау» төшөнсәләре тап килгәндәй.

Шаманлыҡ нигеҙендә донъяла төрлө йәндәрҙең үҙ аллы йәшәүенә ышаныу тойғоһо ята. Ул йәндәр кешеләр менән һәр ваҡыт аралашып йәшәй, файҙа йәки зыян килтереүҙәре лә ихтимал. Ошо сифаттар йәһәтенән йәндәр изгеләргә һәм яуыздарға бүленә. Мәҫәлән, этнографтарҙың мәғлүмәттәре буйынса, алтайҙарҙа бөтә яуыз йәндәр ер аҫты донъяһында тереклек итә. Уларҙың төп атаһы – аллаһы булып Ерлек ата (алла) һанала. Ерлек аллаға ярҙам итеүсе көстәр бар, улар араһында ете Пай-Мәтер (Таш батыр), Ҡарыш, Кәрәй хан, Өсәр йәки Осар хан, Ябаш хан, Ҡамыр хан һәм Шәҙәй хан исемле улдары һәм башҡа көстәр бар.

Ерлек алланың улдары вариҫлыҡ вазифаһын атҡарып, Ер аҫты донъяһына идара итә. Яуыз көстәр бөтә Ер шары буйлап таралған, сифаттары яғынан мәскәйҙәргә, үлемесле ауырыуҙар килтереүселәргә һәм ата-бабалар рухын яҡлаусыларға бүленә. Яуыз йәндәр имеш, бер-береһе менән һуғышып, талашып йәшәй, убыр кеүек, туя белмәй, кешене йотоуҙары ла ихтимал. Кеше ауырығанда алтайҙар, уны яуыз йән ашай, ә үлһә, яуыз йән йотто, ти. Яуыз йәндәр, төркөм-төркөм булып, үлгән кешеләр элек йәшәп киткән ауыл, ырыуҙар тирәләп тереклек итә, ләкин уларҙың икенсе ауылдарға һәм ырыуҙарға ла күсеп китеүе ихтимал.

Ерлек хан үҙе ул тиклем яуыз түгел, яуыз йәндәрҙең төрлө ҡылыҡтарын хупламай, ҡайһы саҡ уларҙан ыҙа сигә. Ерлек хоҙайҙың (алла) кешегә булған мөхәббәтен яулау өсөн, уның хөрмәтенә ҡорбан килтерергә, бүләк бирергә, теләк теләргә, ҡатмарлы башҡа йолаларҙы атҡарырға кәрәк: тик ошондай ялбарыуҙар мәлендә уны бөйөкләргә, кешеләргә йомшаҡ күңеллелеген яуларға мөмкин. Ерлек хоҙайға ялбарыуҙарҙы еткереү менән махсус кешеләр – йыр-бейеүгә, шиғыр-мимикаға һ.б. хәрәкәттәргә оҫта юраусылар ғына башҡарған. Яуыз көстәрҙе тәртипкә килтереү, кешеләрҙе уларҙың яфаһынан ҡотҡарыу өсөн, Ерлек

алла улдарын ебәрә. Кешеләрҙе күреү өсөн Ерлек алланың улдары ишек яңаҡтарында, тупһа буйында тора, тау баштарында, йылға-күлдәрҙә, яландарҙа йәшәй. Дөйөм алғанда, Ерлек хандың улдары – кешегә файҙа килтерергә әҙер торған йән эйәләре. Кеше, ғәҙәттә, Ерлек алланан, уның улдарынан ҡурҡа үҙен «ҡара нәмә», улдарын «ҡара төҫ» тип ҡабул итә.

Алтайҙарҙың фекеренсә, Ерлек аллаға, уның бөтә көстәренә Үлгән (Улгаж) алла һәм уның ярҙамсылары – «төҫтәре» ҡаршы тора. Улар күктә йәшәүсе изге йәндәр. Үлгән йәндәр, Бөйөк Тәңренән ҡала, – икенсе изге көс. Ул күктә, ай, ҡояш, йондоҙҙар артында йәшәй, бөтә Йыһанды, шул иҫәптән утты, ҡояшты барлыҡҡа килтереүсе. Йыһан, Ер донъяһы менән идаралыҡ итә, күкте тетрәтә, ямғыр, ҡар яуҙыра, кешеләрҙе төрлө бәлә-ҡазанан ҡурсалай.

Үлгән алланың Ҡаршыт, Пүрә-хан (бәлки, Бүре хандыр), Яйыҡ хан, Яжыл хан, Бөрсә хан, Ҡарағош, Паҡты-хан (Яҡты хан), Ер (Әр) хан исемле ете улы бар, улар күктә йәшәй. Үлгәндең тағы туғыҙ ҡыҙы булып, улар аҡ йәндәр тип йөрөтөлә, исемдәре юҡ. Үлгән алланың ярҙамсылары араһында Яйыҡ исемлеһе лә бар, ҡайһы бер сығанаҡтарҙа ул Үлгән хоҙайҙың улы рәүешендә тасуирлана. Үлгән уны ергә кешеләрҙе яуыз көстәрҙән ҡурсаларға ебәрә, шуға күрә ул төрлө доғаларҙа, теләктәрҙә Алла-Хоҙай исеме менән атала. Яйыҡтың төп бурысы – кешеләр һәм Үлгән алла араһындағы мөнәсәбәтте, аралашыуҙы булдырыу һәм үҫтереү.

Шамандың Яйыҡ хан тураһында йырында ошондай һүҙҙәр бар:

*«Үлгән – Хоҙайҙың хәбәрсеһе,*
*Уттай ҡыҙыл. Ҡаймалы болоттай,*
*Тоноҡ (асыҡ) теҙгенле йәйғорҙай,*
*Ҡамсылы асыҡ йәшендәй Күктә хәбәр (әмер) алыусы нурлы Яйыҡ».*

Русса варианты: «Вестник «Улганя-бия, с каймой из красной тучи, с глухим (замкнутым) поводом из радуги. С местью из бледной молнии, На небе язык (весть, приказание) берущий светлый Яйык». (Ошо һәм алдағы шиғри юлдарҙы башҡортсаға 1995 йылда шағир С. Әлибай тәржемә итте. Мин уға мең рәхмәтлемен.)

Яйыҡ хан алтайҙарҙа ҙур хөрмәт ҡаҙанған. Яҙын бейәләрҙе башлап һауғанда, Яйыҡ ханға бағышлап, бейә һөтөнә ҡушып талҡан яһайҙар. Был йола Яйыҡ ханды (күккә) күтәреү тип атала. Шул уҡ ваҡытта уның киләсәктә лә кешеләргә мәрхәмәтле булыуын теләйҙәр. Үлгән хоҙайҙың бик күп ярҙамсылары бар. Яйыҡ хан рәүешендә көслө һәм изгеләр (аҡ төҫ) исемлегендә Сөйлә хан (ат күҙле алыҫтан күреүсән, кешеләрҙе һаҡлай), Ҡарлыҡ хан (Сөйлә хандың ярҙамсыһы), Уткучы (Ут ҡыуыусы, кешеләргә мөләйем) ер, тау эйәләре бар. Уларҙың барыһы ла изге көстәрҙе тәшкил итә.

Кешеләр төйәк иткән Ер шары, алтайҙарса, атамалы йән эйәләренең берлеге булып сыға. Ошо донъяуи берлек Ер-һыу тигән төшөнсәне аңлатҡан. Үҙ илендә уларҙың һәр береһе бейек тауҙар түбәһендә, йылғаларҙың башланғыс урындарында тороп, ерҙе һуғарыу, муллыҡ биреү көсөнә эйә булған. Яйыҡ хан бөйөк иллаһи хандар исемлегендә дүртенсе торған.

В. В. Радлов буйынса, Яйыҡ йылға-диңгеҙ көстәренә етәкселек итә, дөрөҫөрәге ҙур, ташҡын һыуҙарҙың эйәһе, Май-ана (инәй) һәм Май-Тара тигән исем менән дә йөрөтөлә. Кешеләрҙе төрлө бәлә-ҡазаларҙан ҡотолоуҙың иң ышаныслыһы – ергә ташҡын һыу ебәреү, күрәһең, ул төрлө ауырыуҙарҙы, үлектәрҙе йыуып алып китә, донъяны таҙарта, тип уйлағандар.

Алтайҙарҙың күҙ аллауынса, изге көстәр түбәндәгесә урынлашҡан: күк йөҙө

ун ете ҡаттан тороп, иң юғарыла Тәңре – унан түбәндә – алтын тәхеттә Үлгән алла ултыра. Ҡояш-инәй (Ҡун-ана) – етенсе, Ай-атай – алтынсы ҡатта йәшәһә, Яйыҡ хан дүртенсе, ҡайһы бер сығанаҡтарҙа өсөнсө ҡатта урын биләй [13].

Ялбарыуҙар, теләктәр теләгәндә шаман – төп герой. Бындай йолалар, ғәҙәттә, күп кешеләр ҡатнашлығында башҡарыла. Әлбиттә, иң тәүҙә изге көстәр эйәләренә – күктә йәшәгән аллаларға һәм алла кимәлендәге хандарға мөрәжәғәт ителә. Бәлки, был мөрәжәғәттең кемгә тәғәйенләнеүе йоланың ниндәй сәбәп менән атҡарылыуына ла бәйле булғандыр, ләкин теләктең төп маҡсаты – барыбер Тәңре һәм Үлгән аллаға ялбарыу. Арбаусының ҡайһы бер мөһим сифаттарына – шиғырҙы көйләп әйтеү, төрлө көстәр тауышын, хәрәкәттәрен бейеүгә оҡшатып күрһәтеү тураһында үрҙәрәк телгә алған инек. Арбаусы (шаман) тағы бер нисә үтә мөһим сифаттарға эйә булырға тейеш: уның йөҙө, тауышы, ҡылыҡтары кешеләрҙе ышандырырлыҡ, уларға көслө тәьҫир яһап, тәрән тойғолар, хистәр уятырлыҡ рухи, сихри көстәргә эйә булыуы мотлаҡ. Арбауҙың тәьҫирлек көсөн арттырыу өсөн, шаман тунын йәки еләнен, баш һәм аяҡ кейемдәрен төрлө төҫтәге таҫмалар, сулпылар, ҡыңғырауҙар, тәңкәләр менән биҙәй. Сей тиренән эшләнгән барабанға һуғып, үҙе көй сығара.

Күккә олғашып, ундағы аллалар менән бәйләнешкә кереүҙе еңеләйтеү өсөн, оҫта арбаусы төрлө бейеклектәге ағас баштарына оҙон еп (арҡан) бәйләгән. Был осраҡта еп аллаларға арбаусының йәнен алып барыусы тура юл ролен үтәгән. Шаман үҙе лә, тамаша ҡылыусылар ҙа күккә олғашҡанда, уның йәненә ҡоштар ярҙамға килә, тип уйлаған һәм быға ышанған. Ҡоштар ярҙам итһен өсөн, арбаусы ҡоштар тауышын сығарған, йәнәһе, улар менән бәйләнешкә инеп, маҡсатын аңлатҡан, ярҙам һораған.

Оҫта арбаусыны гипноз көсөнә эйә кеше менән сағыштырырға мөмкиндер. Арбаусы тәүҙә аҡрын ғына хәрәкәттәр яһай, тора-бара етеҙерәк ҡуҙғала, тауышы төрлөсә һәм яңғырауыҡлыраҡ була бара. Тамашасыларҙың һүҙҙәренә, үҙҙәрен тотошона ҡарап, арбаусының йәне ҡайһы тарафтарҙа һәм нисек йөрөүенә ышанып, үҙҙәренең дөйөм ошо теләк-күренештәрҙең айырылғыһыҙ ағзаһы итеп һиҙгәндер.

Ғалимдарҙың фекеренсә, Себер һәм Алтай халыҡтарының шамандары арбау процедураһын сәғәттәр, ҡайһы осраҡта бер нисә көн буйы алып бара. Ғибәҙәт ҡылғанда арбаусы, ҡағиҙә булараҡ, арый, хәле бөтә, тауышы әкрен генә ишетелеп, ауыҙынан күбектәр сыҡҡылай. Ошо хәлде күҙәткән этнограф-ғалимдар арбаусыларҙың хис-тойғоларға бай һәм уларға тиҙ бирелеүсән булыуын айырып күрһәтә. Ләкин, ниндәй генә хәлдә ҡалмаһын, шаман үҙенең һөйләгәненә һәм ҡылыҡтарына илтифатлыҡты бер ҡасан да юғалтмаған. Һүҙ ыңғайында әйтәйек, шаман һөнәре быуындан-быуынға бирелеп, атаһы – улына, инәһе ҡыҙына өйрәткән, кеше психологияһына йоғонто яһау серҙәрен аңлатҡан.

Арбаусының йәне, имеш, күккә олғашҡан саҡта өсөнсө йәки дүртенсе ҡатта Яйыҡ ханды осратҡан, башҡа ҡаттарҙағы илаһи көстәрҙең хандарына мөрәжәғәт иткән кеүек, уға ла ярҙам һорап ялбара. Һәр арбаусының ижады үҙенсәлекле, бында ҡанунға әйләнгән төшөнсә юҡ. Ләкин Яйыҡ ханға әйтеләгәндәре араһында шундайҙары бар:

*«Өс өлөшлө Аҡ-Яйыҡ,*
*Алтын ҡырлы Аҡ-Яйыҡ...*
*Яҡтылыҡ хаҡына*
*Юл күрһәтеүсе бул!*
*Халыҡлы мәңгелек ил төҙө,*
*Һүнмәҫ һәм дөрләп янъан ут сығарънда*

*Ҡаҡшамаҫ һәм үлмәҫ иркенлек килтер!*
*Яманлыҡҡа илтмәгән ризалығыңды бир!*
*Һинең ҡулыңдан балалар үлмәһен,*
*Елән итәктәреңдән яманлыҡ (хата) килмәһен!*
*Киләсәк быуындар хаҡына муллыҡ һорайым,*
*Балаларҙың үрсеүен теләйем.*
*Әйҙә, икеһе лә (ире, ҡатыны) йәшәһендәр!*
*Мин Яңылышмаҫ Хоҙайҙан һорайым:*
*Әйҙә, балаларға үрсем килтерһен,*
*Әйҙә, мал-тыуарға именлек бирһен!*
*Балаларым тыуып, уларҙы ҡарап, йәшәрмен микән?*
*Мал-тыуарым булырмы теүәл?*
*Әйҙә, кешеләр бәхеттә йәшәһен,*
*Ғазап тигәндәре, әйҙә, булмаһын!*
*Һинән тыныс тормош һорайым,*
*Әйҙә, бер яманлыҡ та булмаһын!*
*Минең кейемем йоҡарҙы,*
*Минең мендәрем тәпәшәйҙе.*
*Булырмы был һиңә уңайлы,*
*Күренерме был һиңә яҡшы, Яйыҡ?*
*Күгем, һиңә табынам,*
*Яҡтылыҡ хан, һинән ҡурҡам.*
*Таң менән балҡыған ҡояш,*
*Төндәрен яҡтыртҡан ай, –*
*Яҡтылыҡ хандың тәҡдире.*
*Һылыу матурлыҡты биреүсе*
*Гүзәл Алтайҙы төҙөүсе*
*Бәхетле халыҡ тыуҙырҙың.*
*Кедр урманы йәшеллек менән ҡапланды*
*Йырсы кәкүк ҡысҡыра.*
*Яһаҡ түләүсе халыҡ яҡшыраҡ йәшәй башлағанда,*
*Кедр урманы йәшеллеген түккәндә,*
*Мин һиңә табынам,*
*Һине Тыуҙырыусы тип атайым».*

Русса варианты: «Трехсоставной Белый Яик, С золотыми краями Белый-Яик… Будь путеводитель к Ясности-Хану, Создай прочно бесмертный юрт (население), вырезая огонь неугасимый и пылающий, создай крепкую, бессмертную голову (благоденствие), не ведя к худому, Дайте добро! Из-под мыщц (руки) пусть не убывают (дети), из-под полы (одежды) да не будет ошибки. Прошу для (будущей) головы плодовитости, просил о прибыли головы. Пусть оба (хозяин и хозяйка) здравствуют! Я прошу от Безошибочного: пусть даст плодовитость на детей, (пусть) создаст счастье на скот. Буду ли жить, имея детей? Будет ли скот мой благополучен? Пусть выкроит счастье головы! Что называется страданием, то петь не будет. Прошу всегда жить спокойно, пусть не случается ничего дурного! Моя покрышка стала тонка, моя подушка стала низка. Создаст ли все это удобно, выразит ли все это хорошо (Яик)? Небо, которому я поклоняюсь, Ясность-Хан которого страшусь  рано выходящее солнце, месяц (луна), сияющий вечером, – предопределение Ясности-хана. Создатель стройной красоты,

Алтай в красе создавший, создал равноправный народ. Ядровый (кедр) лес

покрылся листвой. Певунья кукушка запела. Когда народ – данники, здравствуя, стали жить, тогда ядровый лес распустил хвою. Молюсь тебе называя Создателем».

А.В.Анохин Яйыҡ хандың хәҙерге алтайҙарҙа үтә популяр илаһи образ булыуын айырым күрһәтә. Ул ошондай күренештәргә лә иғтибар иткән: алтайҙар яҙ көнө тәүге бейәләр һауғандан алған һөткә талҡан ҡушып, бутҡа һымаҡ ашамлыҡ эшләгәндәр. Был йоланы «Яйыҡты күтәрәбеҙ» тип аңлатҡандар. Шул уҡ ваҡытта улар Яйыҡ хандан, үткән йылдарҙағы кеүек, быйыл да кешеләргә мәрхәмәтле булыуын теләгән, уға арнап ҡорбандар салған, туҡыманан униң һынын эшләп, күп һәм төрлө таҫмалар менән биҙәгәндәр.

Йыр-бейеү һәм башҡа төрлө хәрәкәттәр менән еткерелгән был теләктәр XIX һәм XX быуаттарҙа киң ҡулланылып, һәр арбаусының һүҙҙәре үҙенсә булған кеүек, тиҫтәләгән быуаттар араһында бөйөк илаһи көстәргә бағышланған теләкдоғаларҙың йөкмәткеһе, һис шикһеҙ, байыған, ләкин төп мәғәнәһе ҡалып, аҙ үҙгәреш кисергән. Боронғо дини йолаларҙың кешегә йоғонто яһау көсө, күрәһең, уларҙың тормош ерлегендә, йәғни үҙе йәшәгән мөхит, көнкүреш менән бәйләнешле булыуындалыр. Шуға күрә хәҙерге алтайҙар телендәге теләктәр ҙә уларҙың боронғо ата-бабаларынан бирелгәндер.

«Хәҙерге һәм боронғо алтайҙарҙың Яйыҡ хан тураһындағы мәғлүмәттәренең Боронғо Башҡортостанға мөнәсәбәтениндәй?» тигән һорау тыуыуы ихтимал. Бөйөк илаһи шәхес булараҡ, алтайҙарҙың Яйыҡ ханы Башҡортостандың боронғо тарихы менән туранан-тура бәйле. Фекерҙе иҫбатлау өсөн, мәғлүмәттәр килтерәм.

1. Боронғо һәм хәҙерге алтайҙарҙың Яйыҡ исемле йылғаһы булмаһа ла, Яйыҡ исемле илаһи хандары бар. Ә хәҙерге башҡорттарҙың күбеһе Яйыҡ ханды белмәһә лә, исемен бөйөк йылғаһына биреп, боронғо ата-бабаларының аманатын ошо көнгәсә һаҡлап килгән. Илаһи көс эйәһе булараҡ, Яйыҡ хан бик боронғо башҡорттарға яҡшы билдәле булған. Был хаҡта «Урал» эпосында ышандырырлыҡ мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, Яйыҡ йылғаһы Уралдың «Ҡатил батша ҡыҙынан тыуған улы Яйыҡ батыр исемен йөрөтә, ә йылғаһы булат ҡылыс менән Урал тауын яра сапҡандан һуң хасил була. Ошо уҡ юлдар «Аҡбуҙат» эпосында ла ҡабатлана. Тимәк, алтайҙар кеүек, боронғо башҡорттар ҙа Яйыҡ ханды илаһи шәхес рәүешендә күҙ алдына килтергән булып сыға.

2. Алтай халыҡтарына йылғаларҙы илаһи көстәр исеме менән атау хас. Алтайҙа ҙурҙан иҫәпләнгән Катун (Ҡатын) йылғаһы – шуларҙың береһе; риүәйәттәр буйынса, Ҡатын – легендар иллаһи шәхес атамаһы.

Уралда бөтә йылғалар ҙа тип әйтерлек мифик батырҙар исеме менән йөрөтөлә. Нөгөш, Иҙел (Ағиҙел), Һаҡмар йылғалары, Яйыҡ һымаҡ уҡ, Урал батырҙың улдарының хөрмәтенә аталған. Килтерелгән миҫалдарҙан күренеүенсә, боронғо Урал халыҡтарында һәр тәбиғәт күренешенә илаһи көстәрҙең етәкселек итеүенә, ҡурсалап тороуына инанып, ул көстәрҙе әҙәм сифатында күҙ алдына килтереп, кеше исемдәре менән йөрөткәндәр. Юғарыла әйтелгәндәрҙән ошондай һығымта яһарға кәрәк: боронғо башҡорттар һәм уларҙың атабабалары, хәҙерге алтайҙар һымаҡ, Яйыҡ ханға бағышлап теләктәр теләгән, уға арнап ҡорбан салып, башҡа ҡатмарлы йолалар башҡарған. Урал яҡтарында Яйыҡ хан кеүек илаһи персонаждың абруйы, кешегә йоғонто яһарлыҡ көсө, уйлауыбыҙса, Алтай халыҡтарына ҡарағанда күпкә көслөрәк булғандыр һымаҡ. Сөнки Уралда һыу-диңгеҙ аллаһы Яйыҡ хан бөйөк йылға менән тиңләнеп, икеһе бергә айырылғыһыҙ мифик күренеште хасил иткән. Ошолай фекерләгәндә, беҙҙә, мәҫәлән, Яйыҡ хан образы, моғайын, тәү башлап Урал ерлегендә барлыҡҡа килгәндер, тигән уй тыуа. Уйлауыбыҙса, Яйыҡ ханды илаһи көс итеп күккә

күтәреү, бөйөкләү, уға табыныу Урал халыҡтары (ҡәбиләләре) араһында Яйыҡ йылғаһы донъя карталарында төшөрөлә башлағанға тиклем (II быуат) күп, бәлки, тиҫтәләгән быуаттар элек башланғандыр. Яйыҡ исеменә оҡшаш, бәлки, шул уҡ исемдә йөрөткән яйыҡтар (даиҙәр, даиктар) һәм уларҙың замандаштары – тимер быуат башында Көньяҡ Уралда йәшәгән башҡа халыҡтар өсөн (исседондар, ииркалар, аримастар, аргиппейҙар-таҙҙар һ.б.) ул ғәҙәти нормаға әүерелгән күренеш тә булғандыр.

3. Борон Урал һәм Алтай яҡтарында Яйыҡ йылғаһы, Яйыҡ хан алла исемдәренең киң таралғанлығы ошо ҙур ареалда йәшәгән халыҡтар араһында тарихи сығыштың һәм дини йолаларҙың уртаҡ булыуы менән бәйлелер кеүек. Дәлил итеп Үлгән алла образын килтерергә мөмкин. Сағыштырып ҡарағанда, Үлгән алланың башҡорт халҡының «Урал батыр» һәм «Аҡбуҙат» эпостарындағы Шүлгән образы менән оҡшашлығы күҙгә ташлана. Шүлгән – илаһи герой: ер-һыу аҫты донъяһының батшаһы. Был яҡтан Шүлгән батша Себер, Алтай халыҡтарының Ерлек аллаһын хәтерләтә (ул да Ер-һыу аҫты батшаһы), ә исеме күктәге Үлгән алланыҡына яҡын – ҡабатлай тиһәң дә була. Күрәһең, Алтай халыҡтарында Шүлгән-Үлгән һүҙендә Ш-хәрефенең төшөп ҡалыуы шул уҡ төрки телдәр үҫешенең айырмалыҡтарына буйһонғандыр. Хәҙергә боронғо Урал һәм Алтай халыҡтарында был атамаларҙың һәм сифаттарының алмашыныу сәбәптәрен аңлатыуы ҡыйын, уны маҡсат итеп ҡуймайбыҙ ҙа. Ләкин Үлгән һәм Шүлгән илаһи персонаждарҙың уртаҡ мифологик ерлектә барлыҡҡа килеүенә шик юҡ кеүек. Юғарыла күрһәтелгән исем һәм сифат айырмалыҡтары һәм оҡшашлыҡтары тулыраҡ рәүештә киләһе тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә асыҡланыр. Себер, Алтай халыҡтары һымаҡ, боронғо башҡорттарҙың да хисле һәм тәьҫирле булыуы тураһында мәғлүмәттәр күп. Мәҫәлән, башҡорт әкиәттәре ҡош телдәрен аңлаған, улар менән бәйләнешкә ингән геройҙарға бай. Улар тылсымлы хәрәкәттәре менән ғәскәр булып килгән кешеләрҙе таш һынға әйләндереүгә, ҡабаттан ул һындарға йән биреүгә һ.б. шундай фантастик һәләттәргә эйә. Был осраҡтарҙа, әлбиттә, арбаусылар күҙ уңында тотола. Тимәк, улар ҡатнашлығында илаһи көстәргә бағышлап күп кешеләрҙең теләктәр теләү, ялбарыу боронғо Урал халыҡтарында (башҡорттарҙа) ғәҙәти күренеш булған.

Һүҙ ыңғайында түбәндәге фекерҙе лә әйтеү урынлы булыр.

Тарихи, этнографик хеҙмәттәрҙән күренеүенсә, Алтай яҡтарында йәшәгән боронғо, урта быуат һәм хәҙерге төрки халыҡтарҙа төрлө йолаларҙы башҡарғанда шаманлыҡ ҙур роль уйнаған. Уларҙың боронғо башҡорттар менән тарихи, мәҙәни уртаҡлыҡтарын күҙ уңында тотоп, юғарыла беҙҙең тарафтан боронғо башҡорттарҙа ла шаманлыҡ көслө булған, ләкин ул мосолман диненең йоғонтоһо һөҙөмтәһендә кәмей барып, бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан, тигән фекер әйтелгәйне. Ошоно ҡеүәтләп, бер үтә ҡыҙыҡлы миҫал килтергем килә. Билдәле булыуынса, XVIII быуаттың аҙағында (1770) бөйөк рус ғалимы-тарихсыһы И. Лепехин Уралға килә һәм дала яҡтарында (Ырымбур, Яйыҡ буйлап) йәшәгән башҡорттарҙың көнкүреше, мәҙәниәте, йолалары менән таныша. Көндәлек яҙмаһынан күренеүенсә, ул бер башҡорттоң өйөндә ҡатыны бала табыу алдынан тулғаҡ тотоуҙан интеккән сағына тап була. Хужа өйө эргәһенә күпләп йәштәрҙе йыйып, улар менән бергә шашынып бейеү ойоштора һәм, ҡулына ҡылыс тотоп, ике тапҡыр мылтыҡтан ата. Күрәһең, бейегән саҡта йырҙар ҙа йырлағандарҙыр. Мылтыҡ атҡандан һуң хужа: «Мин шайтанды күрҙем һәм уға аттым», – тип аңлата.

Ысынбарлыҡта ҡатыны бала тыуҙырырға ятҡанда башҡорт иренең ҡылыҡтары (күпләп кешеләр йыйылыу, ҡылыс тотоп, шашынып йырлап-бейеү, шайтанға мылтыҡтан атыу) шамандар атҡара торған йоланы хәтерләтә. Башҡаса

аңлатма мөмкин дә түгел, шуға күрә, башҡорттарҙа XVIII быуат аҙаҡтарында шаманлыҡ юҡҡа сыҡмаған әле, тигән фекер тыуа.

4. Әйткәндәрҙән тағы бер мөһим һығымта яһарға мөмкин. Атаҡлы академик В.В. Бартольд һәм уның фекерҙәштәренең (С.Е. Малов, Ж. Ғ. Кейекбаев һ.б.) берҙәм асышы буйынса, Яйыҡ атамаһы боронғо төрки халыҡтар араһында барлыҡҡа килгән. Был фекерҙе, тел ҡанундарынан башҡа, мифик Яйыҡ хан образының хәҙерге көнгә тиклем алтайҙар менән башҡорттарҙа һаҡланыуы ла ҡеүәтләй. Ошо факттарҙан сығып, бик борон замандан, кәмендә тимер быуат башынан да һуң түгел, Уралдан Алтайға тиклемге ерҙәрҙә төрки ҡәбиләләрҙең йәшәгәнен танырға тейешбеҙ. Фекерҙе һәм дәлилдәрҙе үҫтерә барып, Яйыҡ атамаһын йөрөткән дайҙарҙың (урысса варианттары – даиҙәр, даиктар) төрки телле булыуына ышанырға тура килә. Урал тирәләп уларға күршеләш йәшәгән башҡа халыҡтарҙың да күптәре төрки телле булыуы ихтимал. Шулай итеп, Яйыҡ хан, Яйыҡ-йылға атамалары тарихына бәйле мәғлүмәттәр тимер быуат башында Урал-Алтай ареалында төрки халыҡтар араһында йәшәгән, тигән фекер – ышаныслы һәм кире ҡаҡҡыһыҙ фәнни дәлил.

«Төрки халыҡтар Урал-Алтай тарафтарында ҡасандан көн иткән икән?» тигән урынлы һорау тыуа. Юғарыла беҙ уға өлөшләтә яуап биргәйнек инде. Был осраҡта тарихи дәүерҙең үҙенсәлекле бер миҙгеле булып Яйыҡ атамаһының барлыҡҡа килеүен иҫәпләргә кәрәк. Даи-даик-яйыҡ исемле халыҡтар йөҙөндә Яйыҡ атамаһының Көньяҡ Уралда тимер быуат башында ереккәнлеге бер ниндәй ҙә шик ҡалдырмай. Ә уларҙың ҡасандан бирле ҡулланыла башлауы тураһында хәҙер күрәҙәселек рәүешендә генә фекер йөрөтөргә мөмкин. Уйлауыбыҙса, төркиҙәрҙең был яҡтарҙағы эҙҙәре тарих төпкөлдәренә – баҡыр-еҙ, энеолит, неолит осоронан уҡ Көньяҡ Урал, Себер, Алтай, Ҡаҙағстан, Урта Азия, Түбәнге Волга, Азов-Ҡара диңгеҙ яр буйҙары ҡәбиләләренең этник һәм мәҙәни яҡтан бик ҡатнаш, ләкин бөтәһенә лә уртаҡ мәҙәни ҡаҙаныштарының булыуын күрһәтеү уңайлы булыр ине. Бәлки, телгә алынған уртаҡлыҡ ошо киң Евразия далаларында йәшәгән халыҡтарҙың мәҙәни, тел, тарихи уртаҡлығының бер сағылышылыр? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тарих фәнендә ошоға тиклем бындай фараздар хупланманы, хатта тыйылды ла: бай археологик, тел, антропологик, этнографик материалдарға аңлатма биргәндә күҙ уңында тотолманы. Шуға күрә тарихи тюркология фәнендә, Алтайҙан Уралға, Ҡара диңгеҙгә тиклем арала төрки халыҡтарҙың тик III-IV быуаттарҙан күпкә боронғораҡ осорҙа йәшәү мөмкинлеге тураһындағы ҡараш бөтөнләй нигеҙһеҙ, тип баһаланды. Килтергән мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, ошоға тиклем фәндә йәшәп килгән, «имеш, Евразия далаларында бик борон замандан IV-V быуаттарға тиклем тик фин-уғыр, иран телле халыҡтар йәшәгән» тигән теорияның ысынбарлыҡта үтә шикле булыуы, уның фәндән бик алыҫ (дәлилһеҙ) уйҙырма икәнлеге күҙгә салына. Тарих фәненә был кәмселектәрҙән тиҙерәк арыныу мотлаҡ.

5. Тағы ла бер мөһим фактҡа күҙ йомоп ҡала алмайбыҙ. Хәҙерге (XX быуат) алтайҙарға илаһи персонаждары араһында Һомай-Үмәй образы билдәһеҙ. Уның тураһында хатта 1910 – 1912 йылдарҙа алтай арбаусылары буйынса бай материал йыйған А.В.Анохин да телгә алмай. Ә бына В.В.Радловтың мәғлүмәте үтә ҡыҙыҡлы. Ғалимдың яҙыуына ҡарағанда, Яйыҡ хан – Үлгән алланың улы, уны йыш ҡына Май-ана (инәй) һәм Май-Тара тип тә атағандар. Был осраҡта Майана (инәй) образы Һомай-Үмәй атамаһының алтайҙарса вариантына оҡшай. Әгәр ҙә шулай булһа (быға авторҙа бер ниндәй ҙә шик юҡ), Яйыҡ хан образының Һомай-Үмәй образы менән атамаһы һәм сифаты яғынан тура килеүе күренә. Ләкин был дәлил дә тейешле аңлатма биреүҙе талап итә. Илаһи Яйыҡ хан образы,

күҙәтеүҙәрҙән аңлашылыуынса, Урал-Алтай араһында ғына билдәле булыуы күренә.

Әйтергә кәрәк, В.В.Радлов, А.В.Анохиндарҙың хеҙмәттәрендәге мәғлүмәттәр әйтеп үтелгән территориаль уртаҡлыҡҡа мөһим асыҡлыҡ керетергә мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, алтайҙарҙың илаһи образдарға бағышланған йырҙарында Яйыҡ, Итил кеүек йылға атамалары телгә алына. Илаһи бөркөттәргә бағышланған йырҙа былай тиелә:

*«Птицы небесные, пять маркут,*
*Вы с мощными медными когтями,*
*Из меди ноготь, словно месяц,*
*Из железа клюв, словно месяц.*
*Мощен размах широких крыльев,*
*Подобен вееру длинный хвост,*
*Левое крыло закрывает месяц,*
*А правое крыло – солнце;*
*Ты, мать девяти орлов,*
*Кто не собьется с пути, перелетая Яик,*
*Кто не утомится на Эдирле*
*С песней приди ко мне!..*
*Тот, кто не заблудился на Яике,*
*Ты, гусь с крепким клювом!..»*

Йырҙа беҙҙең Яйыҡ (Урал) һәм Волга (Итил) йылғалары тураһында һүҙ барғаны асыҡ күренә, һәм был асыҡлыҡ керетеүҙе талап итә: ни өсөн Алтайҙа йәшәгән халыҡ Европа һәм Азия сиге буйлап аҡкан йылғалар тураһында үҙҙәренеке кеүек йырлай һуң? Минеңсә яуап былай: алтайҙарға популяр илаһи Яйыҡ хан образы Көньяҡ Уралдан күсеп киткән боронғо башҡорт ҡәбиләләре – яйыҡтар тарафынан индерелгән булһа кәрәк. Был фекер бик ябай иҫбатлана: Себерҙә, Алтайҙа Яйыҡ атамалы ҙур йылға юҡ һәм һыу аллаһы Яйыҡ-хандың образы тик Көньяҡ Уралда, Яйыҡ йылғаһы буйында йәшәгән халыҡ араһында ғына тыуыуы ихтимал. Был фекер-дәлилгә ҡарата миндә бер ниндәй ҙә шикләнеү юҡ. Тимәк, алтайҙарҙың ойошоу тарихында боронғо Урал башҡорттарының туранан-тура ҡатнашлығы бар. Әйтергә кәрәк, беҙҙең өсөн көтөлмәгән ошо фекер тураһында алтайҙар күптән белә. Мәҫәлән, алтай халҡының тарихи аңында уларҙың боронғо ата-бабаларының Уралдан килеүе тураһында хәтер һаҡланып, был факт этнограф-ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә лә сағылыш тапҡан.

Тарихи сығанаҡтарҙан күренеүенсә, хәҙерге алтайҙарҙың Уралдан Алтайға күсеп килгән ата-бабаларының бер төркөмө «толос» (варианты теелес) башҡортса «төйәләҫ» исемле булған. Төйәләҫтәрҙең хәҙерге вариҫтары алтай халҡы составында иң ҙур этник төркөмдәрҙең береһен тәшкил итә. Тағы шуныһы ғәжәпләндерә: Көньяҡ Уралда – Әбйәлил һәм Баймаҡ райондары биләмәләре буйлап Төйәләҫ йылғаһы аға, һәм ул Яйыҡҡа барып ҡоя. Тимәк, боронғо башҡорттарҙың бер төркөмө Уралдан Алтайға күсеп китеүе – ысынбарлыҡ һәм алтай төйәләҫтәре башҡорттарҙың иң яҡын боронғо туғандары булып сыға. Алтай төйәләҫтәре – боронғо ҡан-ҡәрҙәштәребеҙгә уның өсөн рәхмәтлебеҙ: Урал башҡорттарында ислам һәм хәҙерге әҙәбиәт, мәҙәниәт йоғонтоһонда юғалып барған мөһим тарихи, этнографик, фольклор мәғлүмәттәрен бөгөнгәсә һаҡлап ҡала алған. Әлбиттә, был башҡорт халҡының боронғо тарихын өйрәнеүҙә ҙур асыш, һәм ул махсус тикшеренеүҙәргә мохтаж. Киләсәк эҙләнеүҙәрҙә ғалимдарға түбәндәге һорауға ла яуап табыу бурысы тора: «Алтайҙарҙа яҡшы һаҡланған

Яйыҡ хан алла образы һәм уға бәйле бөтә ғөрөф-ғәҙәт һәм йолалар Урал башҡорттары тарихының ҡайһы осорон сағылдыра?» Фәнни логик фекерләү күҙлегенән ҡарағанда, Урал башҡорттарының Алтай яҡтарына күсеп китеүе төп башҡорттар ислам диненә күскәнгә тиклем булған, тип фаразларға мөмкин. Үрҙә әйтелгән фекерҙәрҙең күмәк махсус фәнни тикшереүҙәрҙә асыҡланыуы мотлаҡ. Шул уҡ ваҡытта Һомай-Үмәй образының таралыу ареалы сикһеҙ ҙур; ул Үҙәк һәм Урта Азия, Себер, Ҡаҙағстан, Урал-Волга халыҡтарына яҡшы таныш.

Тағы ла шуныһы иғтибарҙы айырыуса йәлеп итә: Һомай-Үмәй тураһындағы тәүге мәғлүмәттәр тимер быуат башында яҙылған һәм Ахура Мазда (зороастризм) дине менән бәйләнгән әҫәрҙәрҙә осрай. Юғарыла телгә алынғанса, ул – Ахура Мазданың яҡын ярҙамсыһы, кешелек донъяһын, бөтә тереклекте ҡурсалаусы, етәкләүсе илаһи образ. Төркиҙәрҙең руна яҙмаларында Һомай-Үмәй Үҙәк Азия халыҡтарының төп аллаларының береһе итеп кәүҙәләндерелә. Яйыҡ хан һәм Һомай-Үмәйҙең илаһи образдар булараҡ таралыу шарттарын сағыштырып ҡарағанда, Һомай-Үмәйҙең Урал, Алтай, бәлки, Үҙәк Азия халыҡтарына Яйыҡ ханға ҡарағанда һуңыраҡ билдәле булыуы ла ихтимал. Тик шул саҡта ғына алтайҙарҙың Яйыҡ хан менән Май-ананы (Үмәйҙе) бутауҙарын аңларға мөмкин: улар бер үк сифатлы илаһи образдар һәм оҙаҡ ваҡыттар буйы йәнәш йәшәп килһә лә, тарихи сығанаҡтары төрлөсә булған.

Һомай-Үмәй образы сығышы яғынан Ахура Мазда дине менән бәйле булыуын, «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпостарында килтерелгән мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, боронғо башҡорттарҙың мифологияһына Авестаның йоғонтоһо шул тиклем көслө булған, хатта ҡайһы бер сюжеттарҙың, персонаждарҙың исем һәм сифат оҡшашлығы һәр кемде ышандырырлыҡ. Һүҙ ыңғайында Ахура Мазда алла дине Авестаның тәү башлап барлыҡҡа килеүен фәндә Иран, Афғанстан, Урта Азияла йәшәп, күпселеге фарсы телендә һөйләшкән халыҡтарға бәйлелеген күрһәтеп китеү мотлаҡ. Был ысынлап та шулайҙыр, һәм беҙ был фекерҙе һис тә шик аҫтына ҡуймайбыҙ. Ләкин Ахура Мазда – алла Үҙәк Азия һәм Монголия халыҡтарын Ормузд атамаһы менән таныш. Тимәк, Ахура Мазда дине ҡасандыр Урта Азия, Ҡаҙағстан аша Монголия яҡтарына үтеп ингән, һәм уның бөтә донъя буйлап таралыу тарихы һәм этаптары булған. Ошо уҡ күренеш беҙҙең Урал, Иҙел, Себер яҡтарында ла булған, тип уйларға тулы хаҡыбыҙ бар. Был этаптарҙың йәки этаптың ваҡытын (йәшен), эске йөкмәткеһен асыҡлау киләсәк тикшеренеүҙәрҙең бурысылыр, ләкин хәҙер уларҙың ысынбарлыҡҡа тап килеүен билдәләү ҙә мөһим.

Әйтелгәндәрҙән шундай һығымта яһарға ҡала: борон заманда, бәлки, тимер быуат башындалыр, Евразия далаларында йәшәгән халыҡтар (ҡәбиләләр), шул уҡ Урал яҡтарында ла Ахура Мазда диненең көслө йоғонтоһона дусар ителгән, шул саҡта уларға ошо дин менән бәйле мифологик сюжеттар һәм персонаждар күпләп үтеп керә һәм урындағы диндәрҙең айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнә. Заманында был фекерҙе бөйөк урыҫ һәм совет шәрексеһе В. В. Бартольд нигеҙле рәүештә әйткәйне, беҙҙең Яйыҡ йылға, Яйыҡ хан һәм Һомай-Үмәй атамаларының үҫеш, таралыу тарихына бәйле күҙәтеүҙәребеҙ ул фекерҙең дөрөҫлөгөн иҫбатлауға ғына ҡайтып ҡалды. Был асыштың мөһим фәһеме шундалыр: «Көньяҡ Урал һәм уға яҡын далаларға тимер быуат башына һәм унан да боронғораҡ осорҙа ерле халыҡ булып фарсы телләләр генә йәшәгән» тигән фекерҙең, нигеҙҙә, хәҡиҡәткә тап килмәүе күренә. Хәҙерге ваҡытта был ерҙәрҙең халҡы теле, мәҙәниәте һәм тарихи сығышы яғынан кәм тигәндә бик ҡатнаш икәнлеге асыҡлана. Төркиҙәр иһә Урал һәм Алтай яҡтарында ҙур халыҡ төркөмөн тәшкил иткән, һәм уларҙың тимер быуат башына тиклем ҡатмарлы тарихи юл үткәне һиҙелә. Ул саҡта төрки донъяһы Урал-Алтай ареалы менән сикләнмәгән, уға Үҙәк

һәм Урта Азия, Ҡаҙағстан далалары ла ингән. Килтерелгән мәғлүмәттәр «төрки ҡәбиләләр тимер быуат башында Иҙел һәм Ҡара диңгеҙ яр буйҙарында ла йәшәгән» тигән ҡайһы бер ғалимдарҙың (С. Е. Малов, Ж. Ғ. Кейекбаев) фекеренең нигеҙлелеген тағы бер тапҡыр раҫлай.

Юғарыла әйтелгәндәргә йомғаҡлау рәүешендә, иғтибарҙы тағы ла бер мәғлүмәткә йүнәлтергә булдыҡ. Тимер быуат башында, беҙҙең эраға тиклемге VI-V быуаттарҙан беҙҙең эраның III-IV быуаттарына тиклемге осорҙа, Көньяҡ Уралда яйыҡтар (даик-даи) менән күршеләш булып, яҡындан аралашып исседондар, иирктар, аримастар, аргиппейҙәр, саҡтар, массагеттар, савроматтар, сарматтар һ.б. күп ҡәбилә төркөмдәре йәшәгән. Уларҙың күбеһе Арал диңгеҙе буйҙарынан, Көньяҡ Ҡаҙағстан далалары яҡтарынан килеп, араларында яйыҡтар һан, сәйәси һәм ойошҡанлыҡ яғынан иң көслөләре булған. Шулай булмаһа, Яйыҡ (Урал) йылғаһына, уның ҡушылдыҡтарына үҙ атамаларын мәңгелеккә бирә, һыу аллаһы Яйыҡ хандың образын тыуҙыра һәм уның менән бәйле төрлө йолаларҙы, дини төшөнсәләрҙе киң Уралды төйәк иткән ҡәбиләләр, башҡорттарҙың бөгөнгө ата-бабалары араһында ышандырырлыҡ итеп тарата һәм үҫтерә алмаҫ ине. Ошо тарихи факттарҙы иҫәпкә алғанда, Көньяҡ Уралда тимер быуат баштарында йәшәгән тиҫтәләгән ҡәбиләләрҙе берләштереүсе, ойошҡанлыҡтарын күрһәтеүсе уртаҡ шартлы – Яйыҡ исеме менән атау уңайлыраҡ. Боронғо тарих фәнендә бындай күренештәр йыш осрай. Мәҫәлән, юғарыла исемләнгән ҡәбилә төркөмдәрен «савроматтар», «сарматтар» тип дөйөмләштереп әйтеп килделәр, ләкин уларҙың Урал тарихына ҡағылышлы конкрет мираҫтары әлегә мәғлүм түгел. Был яҡтан яйыҡтарҙың мираҫы төрлө тармаҡлы, киң булып бөгөнгәсә килеп еткән.

Тарих менән ҡыҙыҡһынған һәр кеше, шул иҫәптән, ошо мәҡәләне уҡыусысыға шуны асыҡлау мөһим: Урал яйыҡтарының һәм күршеләш-замандаштарының башҡорт халҡына ҡалдырған бөйөк мираҫы булып «Урал батыр» героик эпосы иҫәпләнә. Уның яйыҡ ҡәбиләләре араһында ижад ителеүе йөкмәткеһенән үк күренә. Мәҫәлән Урал батырҙың улы Яйыҡ батыр, атаһы үлгәс, уның ҡылысын алып, Урал тауҙарын яра һуға, һәм унан көслө һыу ағып сығып, Яйыҡ йылғаһы барлыҡҡа килә. Беҙ был эпик сюжеттың барлыҡҡа килеүен кәмендә Геродот-Птолемейҙар заманы менән билдәләй алабыҙ, сөнки ул ваҡытта Уралда яйыҡтар йәшәгән һәм Яйыҡ исемле ҙур йылға донъя карталарында ла сағылыш таба.

Эпос авторҙары тимер быуат башында, хатта баҡыр-еҙ быуаттар заманында Урта Азия, Яҡын һәм Урта Көнсығышта йәшәгән халыҡтарҙың көнкүреше, мәҙәниәте менән яҡшы таныш булып, был белем кимәле эпоста тулы сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, эпостың төп геройҙары ағалы-энеле Урал һәм Шүлгән, үҙ бурыстарын тормошҡа ашырыу йәһәтенән, ошо көньяҡ (Урта Азия) илдәренә, ҡалаларына сәйәхәт ҡыла, төрлө ҡатмарлы ваҡиғаларға дусар була. Шуныһы мөһим: эпоста һүҙ барған сюжеттар, телгә алынған геройҙар, ҡалалар исемдәре ошо ваҡытта Евразия (Урта Азия, Яҡын һәм Урта Көнсығыш) халыҡтарында киң таралған зороастра (зороастризм) диненең төп йөкмәткеһе (тексты) булған Авестала ҡабатлана, һәм был оҡшашлыҡ «Урал батыр» эпосының Авеста менән кәмендә замандаш булыуын иҫбатлай. Тимәк, башҡорт халҡының героик эпосы Авестаны яҡшы белгән талантлы авторҙар тарафынан ижад ителгән һәм Урал шарттарына ҡулайлаштырып үҙ аллы бөйөк эпик әҫәр барлыҡҡа килтергән.

Юғарылағы фекерҙәрҙе йомғаҡлап, тағы ла ошоларҙы билдәләп үтке килә. Донъя тарих һәм фольклор ғилемендә күптәндән, аксиома һымаҡ, «эпостар – уны тыуҙырған халыҡтың поэтик формала яҙылған тарихы, ул тик ҡан-ҡәрҙәшлек нигеҙендә быуындарҙан-быуындарға күсеп йәшәй, үҫә, уны икенсе бер халыҡ бер ваҡытта ла үҙләштерә алмай» тигән фекер йәшәй. Тимәк, был дөйөм төшөнсә юғарыла әйтелгән «Урал батыр» эпосының авторҙары – яйыҡ

ҡәбиләләре башҡорт халыҡтың иң боронғо, ләкин туранан-тура тарихи ата-бабалары ул» тигән фекерҙе йәнә бер ҡеүәтләй. Шул уҡ ваҡытта донъя халыҡтарының тарихи һәм этник-мәҙәни үҫеше тураһындағы күҙәтеүҙәр түбәндәге аңлатмаларҙы бирә. Эпосты тыуҙырыусы уны быуындан быуынға тапшырып, ошо хәҙерге көндәргә тиклем һаҡлай алған халыҡтың тормошо иҡтисади яҡтан сағыштырмаса тулы, этник-мәҙәни, сәйәси ойошҡанлыҡ һәм поэтик оҫталыҡ сифаттарына эйә булыуы мотлаҡ. Тик ошондай шарттарҙа көн иткән халыҡта ғына «Урал батыр» эпосы кеүек гүзәл фольклор әҫәрҙәре барлыҡҡа килә һәм бөгөнгәсә һаҡлана алған. Ошо халыҡтар исемлегендә, күренеүенсә, башҡорт халҡы абруйлы урын биләй. Беҙгә һәм киләсәк быуын башҡорттарына, ғалимдарға, киң йәмәғәтселеккә тарихыбыҙға нигеҙ һалған ата-олатайҙарға меңмең рәхмәтле булып, уларҙың оҫталығына ғорурланып, мираҫын артабан үҫтереү өлкәһендә арымай-талмай эшләү генә ҡала.

**Нияз МӘЖИТОВ,**
**Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы,**
**Башҡорт дәүләт университетының**
**академик-консультанты.**

**ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ:**

1. Бронштэн В.А. Клавдит Птолемей: II в. н.э.М., 1988.
2. Страбон. География в 17 книгах. М., 1964. 483-се бит.
3. Геродот. История. М., 1972. 52-се бит.
4. Смирнов К.Ф. Савроматы и сарматы // Проблемы археологии Евразии и Северной Америки. М., 1977. 129–138-се бит.
5. Бартольд В.В. Работы по истории и филологии тюркских монгольских народов. соч. T.V. М., 1968. 37-38-се биттәр.
6. Соколов Д. Название «Яик» // Труды оренбургской ученой архивной комиссии. Вып. 33. Оренбург. 1906. 147–-149-сы биттәр.
7. Радлов В.В. Из Сибири. М. 1989. 355 – 409-сы биттәр.
8. Анохин А.В. Материалы по шаманству у алтайцев собранные во время путешествия по Алтаю в 1910–1912 гг. По поручению Русского Комитета для изучения Средней и Восточной Азии // Сборник Музея антропологии и этнографии при Российской Академии наук. Том IV, 2. 1924. 4-се бит.
9. Анохин А.В. Күрһәтелгән хеҙмәт. 1–7-се һ.б. биттәр; Радлов В.В. Күрһәтелгән хеҙмәт. 357–361-се һ.б. биттәр.
10. Анохин А.В. Күрһәтелгән хеҙмәт. 12-се бит.
11. Шунда уҡ 13-сө бит.
12. Шунда уҡ 14-се бит.
13. Радлов В.В. Күрһәтелгән хеҙмәт. 357–360 -се һ.б. биттәр.
14. Анохин А.В. Күрһәтелгән хеҙмәт. 13-сө, 100-сө, 101-се биттәр.
15. Быңдай мәғлүмәт түбәндә күрһәтелгән китаптарҙа бирелгән: Руденко. Башкиры. Историко-этнографические очерки. М.-Л. 1955. Глава XIV; Мажитов Н.А. Южный Урал в VII-XIV вв. М., 1977, IV бүлек һ.б.
16. Лепехин. Продолжение записок путешествия по разным провинциям Российского государства в 1770 г. СПб, 1802. 74-се, 75-се биттәр.
17. Радлов В.В. Күрһәтелгән хеҙмәт. 380–385-се биттәр.
18. Мажитов Н.А., Султанова А.А. История Башкортостана. Древность. Средневековье. Өфө, 2010. IV бүлек.

**Редакциянан:** *даими һәм әүҙем авторыбыҙ, атаҡлы ғалим-археолог, күренекле публицист Нияз Әбделхай улы Мәжитовты оло юбилейы – 80 йәше менән ихлас тәбрикләйбеҙ. Оҙон ғүмер, һаулыҡ, бәхет теләйбеҙ.*

**Рауил**
**БИКБАЕВ**

## *Өфө-1, Өфө-2*

Академик Нияз Мәжитовҡа

*Быуын-быуын олатайҙар*
*Был ерҙә гүмер сиккән.*
*Бәлә тиһәң,*
*Бәхет үҙе*
*Аяҡ аҫтында икән.*

*Белмәҫ тә инем гүмерҙә,*
*Беҙ атлап йөрөгән ерҙәр*
*Хикмәттер, тип, шул саҡлы.*
*Ҡатламдары тарих икән,*
*Ҡуйыны тулы ҡомартҡы.*

*Ҡаҙған ерҙән балҡып асыла*
*Уҙған замандар төҫө.*
*Тәрәнерәк төшкән һайын,*
*Юғары үрләй Өфө.*

*Меңәр йыллыҡ йорт-йыһаздар*
*Ҡатламдарҙан ҡалҡалар.*
*Кемдең йәрен биҙәгәндер*
*Был беләҙек, алҡалар.*

*Ғәййәр ир ҡарашын һаҡлай*
*Таш ярсыҡтың береһе.*
*Донъяларын дер һелкетеп*
*Йәшәгәндер кемеһе.*

*Ҡомартҡыларҙан ут-ҡомар*
*Бөркөлгәндәй ысынлап.*
*Мең йыл элек янған күмер*
*Һаман яна усымда.*

*Ныҡыраҡ арбай, сихырлай*
*Был боронғо сер-йомаҡ.*
*Миңә кемдәрҙер өндәшә,*
*Телдәре таныш һымаҡ.*

*Көй ишетәм,*
*Йәнгә яҡын*
*Йырлағаны, көлгәне.*
*Күрәм алыҫ-алыҫтарҙан*
*Каруандарҙың килгәнен.*

*Ят һауыт, ят ашҡа ла*
*Борон-борондан Өфөбөҙ*
*Булған бит ул Баш ҡала.*
*Боронғо һыҙма-картала*
*Башҡорт тигән исем менән*
*Ошо ҡала атала.*

*Мең йыл элекке тормоштоң*
*Асыла нур-һырҙары.*
*Тәрәндәрҙән барлай башҡорт*
*Шәжәрә тамырҙарын.*

*Ер баҫҡан ҡаланы кеше*
*Тотҡонлоҡтан ҡотҡара.*
*Яуһын Аллаһ рәхмәттәре*
*Археолог дуҫтарға.*

*Ҡара тирҙәр түгеп улар*
*Ер генә ҡаҙмай һис тә:*
*Аҡтарып тарих ҡуҙҙарын,*
*Эшләйҙәр ҡайнар цехта.*

*Өфөләге асыштарҙы*
*Фән донъяһы алҡышлай.*
*Киләсәккә дәрттәр өҫтәй*
*Тарихтағы балҡыштар.*

*Әйтәләр Өфө-2 тип,*
*Сәйерерәк был исем.*
*Боронғоһо – тәүгеһе бит,*
*Бөгөнгөһө – икенсе.*

*Булмаһын тик өсөнсөһө,*
*Өҙөлмәһен тамырҙар.*
*Яҙһын сал баш ҡалабыҙға*
*Гел йәш булып ҡалырға.*

## ОҠШАШ ЯҘМЫШТАР

Унының тарихы былай. Яңыраҡ ҡына ГулАГ-тан ҡайтҡан татар шағиры Хәсән Туфандың 1958 йылдың апрелендә Өфөгә килеүе республикабыҙ мәҙәни-әҙәби тормошонда мөһим ваҡиға булды. Беҙ, бер төркөм студенттар, унының менән осрашыу ойоштороуҙы һорап, деканатҡа ингәс, ҡаршы килмәнеләр. Университетҡа бер төркөм башҡорт һәм татар әҙиптәре менән килгән шағирҙы күтәреп тигәндәй йөрөттөләр. Барыһында ла күтәренке кәйеф ине, һәм был әлеге фотоһүрәттә лә сағылыш тапҡан. Осрашыу Башҡорт дәүләт университетының ҙур залында булып, фото шунан һуң төшөрөлдө. Әҙәбиәт һөйөүселәргә унда таныш йөҙҙәр күп, әммә минең ике классик шағирға – Рәми Ғарипов менән Хәсән Туфанға айырым туҡталғым килә, сөнки ижадтарында ла, яҙмыштарында ла уртаҡ һыҙаттар күп.

Хәсән Туфан 1938 йылда, милләтселектә ғәйепләнеп, хөкөм ителә. 16 йыл буйына төрмә һәм ГулАГ ғазаптарын кисерә. Китаптары юҡ ителә, исеме әҙәбиәттән алып ташлана. Ул – шул замандың сәйәси золомон кисергән байтаҡ ҡына татар һәм башҡорт әҙиптәре араһында иҫән ҡалған бик һирәктәрҙең береһе. Фотоһүрәттә башына кепка кейеп, иң уртала урын алған. Үҙенә ҡарата ошолай ҙур ихтирам һәм иғтибар бүленгәнгә уңайһыҙланған да кеүек. Ә башҡалар өсөн ул – ГулАГ-тан иҫән ҡайтҡан берҙән-бер классик! Был үҙе үк мөғжизәгә тиң...

Рәми Ғарипов Туфан янында баҫып тора. Унының да йөҙөндә йылмайыу балҡый. Аңлашыла ки: яратҡан шағиры, кумиры менән осрашҡан бит! Ул унының менән аралашасаҡ, уға бағышлап шиғырҙар ҙа яҙасаҡ әле. Был ике шәхестең яҙмыштарында оҡшашлыҡ нимәлә һуң? Хәсән Туфанға «милләтсе», «халыҡ дошманы» мөһөрө һуғылып, бөтә михнәттәрҙе кисереү, ике тиҫтә йыл тиерлек әҙәбиәттән айырылып тороу артта ҡалған булһа ла, был ғазаптар артабанғы тормошонда ла һәр саҡ оҙата барасаҡ.

Рәми Ғариповтың иһә әҙәбиәткә күптән түгел аяҡ баҫҡан сағы, тәүге китабы ғына донъя күргән. Киләсәктә уға ла «милләтсе» мөһөрө һуғылыр. Дөрөҫ, төрмәгә япмаясаҡтар, әммә шул замандағы миһырбанһыҙлыҡтарҙы үҙ елкәһендә тулыһынса татыясаҡ ул. Талантлы шағир була тороп та, эште ауылда эҙләргә мәжбүр булыу (быны үҙенсәлекле һөргөн тип атарға ла мөмкин), яҙған әҫәрҙәрен баҫтырмау, китаптарын сығармау, ғаиләһе менән кеше тупһаһында йөрөү, исемен танырға теләмәү, «ҙур» түрәләрҙең баш сөйөүе, аҫтыртын эш итеү... – былар барыһы ла унының яҡты донъя менән бик иртә хушлашыуына килтерәсәк.

Эйе, хәҙер Рәми Ғариповты башҡорт әҙәбиәте классигы тип таныйҙар, китаптары ла сыға, шиғырҙары дәреслектәргә индерелгән, күбеһен яттан беләләр. Исеме мәктәптәргә бирелде, музейы бар, бәлки, уға һәйкәл дә

ҡуйылыр, сөнки ул быға, һис шикһеҙ, лайыҡ. Ирекһеҙҙән Ғабдулла Туҡайҙың түбәндәге шиғри юлдары иҫкә төшә:

*Бармы ни беҙҙә, ъөмүмән, ысын кеше ҡәҙерен белеү?!*
*Беҙ уны ҡайҙан беләйек, меҫкен үлеп аңлатмаъас?!*

Мәшһүр шағирҙың был асышы бөгөн дә актуаль булып ҡала, минеңсә. Иҫәндәрҙең ҡәҙерен беләйек!

Был ике классиктың тағы бер оҡшаш яғы: ҡатындарының тоғролоғо. Х. Туфандың ҡатыны Луиза ханым ирен ҡотҡарыу өсөн мөмкин булғандың бөтәһен дә эшләй. Ғүмере аҙағынаса уға тоғро булып була, ире азат ителеүгә аҙ ғына ҡалғас, вафат була. Хәсән Туфан һуңғы көндәренәсә ҡатынын һағынып йәшәй. Надежда Ғарипова ла иренең таянысы, беренсе ярҙамсыһы була. Рәми Ғариповтың әҙәби мираҫын һаҡлау, иҫтәлектәрен, көндәлектәрен баҫтырып сығарыуҙағы хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Ә уның ире тураһындағы иҫтәлектәре һуң!



Һүрәттәге башҡаларҙың да исемдәрен телгә алыу лазым. Х. Туфан янында Ғәйнан Әмири, Мөслим Марат, Яҡуп Ҡолмой, университеттың партком секретары (?) урын алған. Баҫып торалар: һулдан икенсе яҙыусы Рәйес Низамов (һуңыраҡ байтаҡ йылдар «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире булды), Р. Ғарипов эргәһендә – Ғази Кашшаф, Рафаэль Сафин, эшләпәлеһе – Тимер Арыҫлан. Һүрәттә шулай уҡ Марат Кәримов, Миәссәр Басиров, Әхмәт Ғайсин, Хәкимйән Зариповтарҙы танырға мөмкин. Иң артта урын алған Әнғәм Атнабаев мыйығынан танылды. Уңдан иң ситтә – университеттың икенсе курсында уҡыған Рауил Бикбаев. Ҡалғандары – студенттар, шул иҫәптән һулдан өсөнсө – ошо юлдарҙың авторы.

1962 йылда миңә Рәми Ғарипов менән бер бүлмәлә ултырып эшләү насип булды. Ул саҡта «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһы әлеге Пушкин

һәм Аксаков урамдары мөйөшөндәге бәләкәй генә бинала урынлашҡайны. Шунда уҡ «Кызыл таң», «Ленинсы-Ленинец» гәзиттәре журналистары ла эшләне. Әҙәбиәт һәм сәнғәт, мәҙәниәт-көнкүреш бүлектәре өсөн бер бүлмә бирелгән. Уның бер яғында – Рәми Ғарипов менән Миәссәр Басиров (әҙәбиәт һәм сәнғәт), икенсеһендә Әмир Гәрәев һәм мин урын алғанбыҙ. Беҙҙең янға ул саҡтағы күренекле шағирҙар, яҙыусылар, мәҫәлән, Сәғит Агиш, Ҡадир Даян, Динис Исламов, Баязит Бикбайҙар йыш килеп йөрөнө. Ошо редакцияла эшләгән сағым тормошомдағы иң иҫтәлекле осор булып хәтерҙә ҡалған.

Исемдәре киң билдәле әҙиптәр Рәми Ғарипов менән үҙ тиңе кеүек аралаша ине. Тимәк, улар уның талантын шул саҡта уҡ таныған. Рәми ағай хәтеремдә шулай уҡ бер аҙ ҡырыҫыраҡ, аралашып бармаған кеше булараҡ ҡалған. Фекерен кешегә тура ҡарап әйтә торғайны. Мәҫәлән, бер билдәле шағир Иосиф Сталин тураһында мәҫәл яҙып килтергән. Ул унда мәрхүм юлбашсыны, ата бесәй кеүек, мыйыҡтарын ҡыймылдата, тиеберәк һүрәтләгән. Рәми ағай уға: «Ағай! Һеҙ әле күптән түгел генә уға бағышлап одалар яҙа инегеҙ. Хәҙер икенсе тонға күскәнһегеҙ, улай килешмәй бит», – тине. Теге шағир ҡульяҙмаһын алып сығып китергә мәжбүр булды.

Рәми Ғариповтың кейенеүе лә башҡаларға оҡшамағайны: эшкә галифе салбар, итек менән йөрөнө. Бер аҙ аптырабыраҡ биргән һорауыма: ул күптән түгел тыуған яҡтарында комсомол ойошмаһы секретары булып эшләне, күберәк һыбай йөрөгән, бында күптән түгел генә, кейемен алмаштырырға өлгөрмәгәндер, тинеләр. Ғаиләһе ҙур, бәлки, мөмкинлеге лә юҡтыр, тиеүселәр ҙә булды.

Мин Рәми Ғариповтың юбилей (80 йыл) көндәрендә матбуғатта, шулай уҡ уҡыу йорттарында иҫтәлектәр менән сығыш яһайым. Шағирҙың ижадын хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендәге иң юғары ҡаҙаныштарҙың береһе тип иҫәпләйем.

Мине «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһына 1962 йылдың майында Рәйес Низамовтың кәңәше буйынса алдылар. Ул Бәләбәй яғында үҙ хәбәрсе булып эшләй ине. Башта ауыл хужалығы бүлегендә Ноғман Мусин менән йәнәш ултырып эшләнем, уның хаҡында ла һәйбәт иҫтәлектәрем бар. Октябрҙә мине көнкүреш бүлегенә күсерҙеләр. 1963 йылдың ҡышында башҡорт телендә сыҡҡан гәзиттәрҙе урыҫ телендәгеләрҙең тәржемәһенә әйләндереү шауҡымы сыҡты. Шул саҡтағы мөхәрриребеҙ Вәли Нафиҡов ағай: «Эш эҙләй башлағыҙ!» – тип кәңәш биргәс, Раевкала өс район өсөн сыға башлаған гәзит редакцияһына яуаплы секретарь булып киттем. Бер нисә йыл Раевкала эшләгәс, әле йәшәгән Бәләбәй ҡалаһына күсеп килдем. «Автонормаль» заводының күп тиражлы гәзите мөхәррире булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡтым.

**Хажи ӘХМӘТЙӘНОВ.**
**Бәләбәй ҡалаһы.**

## ҠАРАСАУҒЛАН – ТӨРӨКТӘРҘЕҢ ҠАРАС СӘСӘНЕ

Анатолия төркмәндәре араһынан сыҡҡан Ҡарасауғлан (төрөксә: Ҡаражаоғлан, ҡыҫҡартылған рәүештәре: Ҡаражоглан, Ҡаража) исемле мәшһүр шағир, башҡорттарҙың билдәле Ҡарас сәсәне кеүек, XVII быуатта йәшәгән. Башҡорт сәсәне Ҡарас ҡаҙаҡ аҡыны Аҡша менән әйтеше аша танылған. Ҡарасауғлан иһә – иң мәшһүр төрөк сәсәндәренең береһе. Исемен башҡортсалап әйткәндә, Ҡарасауғлан йә ҡыҫҡаса Ҡараса тип әйтергә була. Тикшеренеүселәр, Ҡарасауғлан 1606 йылда тыуған, тип иҫәпләй. Дүрт йөҙ йылдан ашыу элек донъяға килгән шағирҙың әҫәрҙәре XIX быуат баштарында ғына нәшер ителә башланы. Әхмәтзәки Вәлидиҙең дуҫы һәм фән буйынса хеҙмәттәше, танылған әҙәбиәт тарихсыһы Фуат Көпрүлү (Күперле), Абдулҡадир Инан уҡыусыһы, профессор Мүжган Жумбур ҙа Ҡарасауғландың ижадын өйрәнеүгә тос өлөш индерҙе. Тәүге йыйынтығы иһә 1927 йылда сыға. Был ваҡыттан алып бик күп шиғыр китаптары, тормошо һәм ижады буйынса тикшеренеүҙәр баҫыла. Әлеге көндә Ҡарасауғландың 500-гә яҡын шиғыры булыуы мәғлүм. Ғалимдарҙың билдәләүенсә, был иҫәпкә унан алда һәм һуңыраҡ йәшәгән Ҡарасауғландарҙың ижады ла инә. Төрөк әҙәбиәтсеһе Әхмәт Оздемир (Үҙтимер) әйтеүенсә, был – халыҡ тыуҙырған Ҡарасауғлан, был Ҡарасауғлан – “беҙҙең Ҡарасауғлан”.

Ҡарасауғлан Төркмәнстанда ла мәшһүр. Төркмәндәр уны, бында тыуған, һуңынан Төркиәгә киткән, тип иҫәпләй. Ҡарасауғландың тыуыуына дүрт йөҙ йыл тулыу айҡанлы, Төркмәнстанда ҙур саралар үткәрелә, илдең баш ҡалаһы Ашхабадта һәм Балҡанабад ҡалаһында һәйкәлдәре ҡуйыла. Төркиәнең көньяғында, Урта диңгеҙгә бик яҡын урынлашҡан Тарсус ҡалаһында, 2006 йылдан бирле йыл һайын Халыҡ-ара Ҡарасауғлан шиғыр кисәләре ойошторола. Был сараларҙа башҡорт шағирҙары ла ҡатнаша. 2010 йылғы Ҡарасауғлан шиғыр кисәләре ваҡытында был ҡалала Әхмәтзәки Вәлиди Туған урамы, бер йылдан һуң иһә Ғабдулла Туҡай бульвары тантаналы асылды.

Фольклор традицияһын һаҡлаған халыҡ хикәйәһендә, Ҡарасауғландың сәсәнлек һәләте төшөндә аҡ һаҡаллы бабай биргән һыуҙы эскәндән һуң асыла, тип тасуирлана. Төрөк сәсәндәре әҫәрҙәрен саз уйнап һөйләй. Шуға ла Ҡарасауғландың Тарсустағы һәйкәле ҡулына саз тотҡан рәүештә эшләнгән.

Төркиәнең ҡайһы бер төбәктәрендә, Ҡарасауғлан йырын тыңлау шифа бирә, тип ышаналар. Был ышаныу Башҡортостандың Күгәрсен районында йәшәгән Шәмеғол хәлфәнең бер дауалау ысулын иҫкә төшөрә. Теле шешеп килгән бер ҡатынға ул, ҡайтҡансы йырлап ҡайт, тигән. Был ҡатын шәбәйгән. Һуңынан ул, ауырығанда йырлап шәбәйәм, тип һөйләгән. Әлбиттә, ғалимдарҙың да йыр терапияһын ҡулланыуы билдәле.

Ҡарасауғлан әҫәрҙәренең тематикаһы төрлө. Беренсе сиратта – ҡатын-ҡыҙға һәм тәбиғәткә бағышланған әҫәрҙәре. Егетлек, ҡаһарманлыҡ та сәсәндең ижадына хас. Төртмәле, һыҡтау, нәсихәт шиғырҙары ла бар. Ҡарасауғлан әҫәрҙәрендә бик күп мәҡәл ҡулланылған, халыҡ ышаныуҙары шиғыр теле менән

аңлатылған. “Ер аҫтында һары үгеҙ” бәләкәй саҡта олатай-өләсәй, ҡартай-ҡәрсәй, атай-әсәйҙәребеҙҙән ишеткән риүәйәт буйынса яҙылғанын күрә алырһығыҙ. Ә инде “Ҡарасауғлан менән килен” әйтеше “Шәүрә килен” әҫәрен иҫкә төшөрә.

Шағирҙың ижады боронғо төрки традицияларын дауам иттерә. Шиғырҙарының төҙөлөшө лә башҡорт шиғырҙарына яҡын. Ҡарасауғлан хәҙерге төрөк телендә ҡулланылмаған ҡайһы бер төрки тамырлы һүҙҙәрҙе лә йыш ҡулланған.

**Әхәт СӘЛИХОВ.**

# ҠАРАСАУҒЛАН

## *Мин гүзәлгә гүзәл тимәм*

*Мин гүзәлгә гүзәл тимәм,*
*Минең гүзәл булмайынса.*
*Ҡурҡыу ҡәһәренә төшмәм,*
*Кил тиеп тә, килмәйенсә.*

*Килермен, әммә туҡмарҙар,*
*Беҙҙе был илдән ҡыуырҙар.*
*Гүзәл булғанды һөйөрҙәр,*
*Мин үлермен күрмәйенсә.*

*Бар бул, йәшә, бар бул, йәшә,*
*Өҙгөләнеп ила бирҙә,*
*Һөйрәл әйҙә ҡара ерҙә,*
*Минең күңелем булмайынса.*

*Һинең дәүерен үтеп китер,*
*Был донъялар кемгә ҡалыр.*
*Бөрө атыр, япраҡ ҡорор,*
*Ваҡытында йәшәрмәйсә.*

*Ҡарасауғлан, һүҙең хаҡтыр,*
*Дошманың дуҫындан күптер.*
*Беҙҙең өсөн айырылыу юҡ,*
*Йә һин, йә мин үлмәйенсә.*

## *Ғәмләнмә күңел, ғәмләнмә*

*Кәмдәр игелек күрә алмаҫ,*
*Ғәмләнмә, күңел, ғәмләнмә,*
*Мең ҡайғы бурыс түләмәҫ,*
*Ғәмләнмә, күңел, ғәмләнмә.*

*Һарыҡ мәләр, ҡуҙы мәләр,*
*Йылға үҙәндәре тулыр.*
*Илағандар бер көн көләр,*
*Ғәмләнмә, күңел, ғәмләнмә.*

*Егет егеткә ят булмаç,*
*Теләһәң дә, һыу һөт булмаç,*
*Мең ҡайғы бурыс түләмәç,*
*Ғәмләнмә, күңел, гәмләнмә.*

*Егет – егеттең юлдашы,*
*Ат – егеттең үҙ ҡәрҙәше.*
*Иçәнлек – һәр эштең башы,*
*Ғәмләнмә, күңел, гәмләнмә.*

*Бахыр Ҡарасауглан, бахыр,*
*Тырнап күкрәктәрен асыр,*
*Ҡара көндәр килер, китер,*
*Ғәмләнмә, күңел, гәмләнмә.*

## Күмер күҙлем сырхауланган

*Күмер күҙлем сырхауланган,*
*Бер бетеү яҙыгыҙ миңә.*
*Ҡара сәсең, ап-аҡ мәрйен,*
*Еп итеп бир, теҙҙер миңә.*

*Ҡаштарын төйөп эймәһен?*
*Ҡыҙ, һиңә күҙҙәр теймәһен.*
*Аҡ түшең ҡыя төймәһен*
*Бүләк ит тә астыр миңә.*

*Ҡулында тотҡан моҡсаһы,*
*Йөҙөндә ҡара пәрҙәһе,*
*Йәрҙең ҡуйыны – гөл баҡсаһы,*
*Зарар бирмәм, гиҙҙер мине.*

*Ҡарасауглан әйтер һүҙҙәр –*
*Аҡ мунсаҡта миңле йөҙҙәр.*
*Йәр иткәнең төрлө наҙҙар*
*Бөгөн өсөн бик аҙ миңә.*

## Ҡара күҙле, миңле Дилбәр

*Ҡара күҙле, миңле Дилбәр,*
*Ҡуйма мине ҡул еренә.*
*Алтын ҡәмәрең булайым,*
*Ура мине билдәреңә.*

*Һиҙенә күңелем, һиҙенә,*
*Егеткә үлем һуң инә.*
*Таҡ мине сәсең осона,*
*Һелкенәйем үрмесеңдә.*

*Кил, ҡыҙ, ҡаршымда торһана,*
*Был ни хәлең, тиеп һора.*
*Сәс бөртөгөңдө бирһәнә,*
*Их, еçкәрмен гөл еренә.*

*Ҡарасауглан ти: “Нишләйем?*
*Ҡулың муйыныма урайым.*
*Наҙлы йәр, ҡолоң булайым.*
*Ҡабул әйлә ҡол еренә”.*

## *Миңә ҡара, тигән Дилбәр*

*Миңә ҡара, тигән Дилбәр,*
*Ҡаштарың ҡара түгелме?*
*Шат йылмайған киленсәктең*
*Күҙҙәре ҡара түгелме?*

*Миңә ҡара, тип торма,*
*Мәғләм яратҡан, хур күрмә,*
*Матур күҙгә ҡара һөрмә*
*Һөртөлгәс, ҡара түгелме?*

*Буйың оҙон, билең нескә,*
*Сикәләрең булған сәскә.*
*Ҡулдарың менән төҙәткән*
*Сәстәрең ҡара түгелме?*

*Оялыуҙан аға тирем.*
*Матурлыҡта юҡ тиңдәшең.*
*Иң һөйөклө, ҡабул йәрһең,*
*Сәстәрең ҡара түгелме?*

*Һиндтан Йәмәнгә килтергән,*
*Инеп Бағдатҡа түгелгән,*
*Төрлө тәғәмгә һалынған*
*Борос та ҡара түгелме?*

*Һыуға ҡунған аҡҡоштарҙың*
*Ҡанаттары аҡ түгелме?*
*Сүлдәге ғәрәп бейенең*
*Сатыры ҡара түгелме?*

*Илдәр ҙә ҡунып күсенәләр,*
*Аҡтан ҡараны һайлайҙар.*
*Ағайҙар, бейҙәр ҙә эскән*
*Ҡәһүә лә ҡара түгелме?*

*Өйҙәрендә һыуҙар аға,*
*Гүзәлдәр күҙҙәргә баға.*
*Һылыуҙар сәстәренә ҡуйған*
*Сөмбөл дә ҡара түгелме?*

**Әхәт СӘЛИХОВ**
**тәржемәләре.**

# Йәшлектәре һуғышта үткән

Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Сабир Йыһаншиндың «Йәшлегебеҙ үтте һуғышта» тигән хәтирәләр йыйынтығы донъя күрҙе. Яу йылдарын энәһенән ебенә тиклем ентекле бәйән иткән китап хаҡында һүҙ оҫталары, бәлки, яҙып та сығыр, олатайҙарыбыҙ ҙа уны уҡып, үҙ фекерҙәрен әйтер. Шәхсән миндә, йәш кешелә, китап байтаҡ тәьҫораттар тыуҙырҙы, уй-кисерештәргә әйҙәне, хатта хәтирәләрҙә һүрәтләнгән күренештәр күҙ алдынан үткәндәй булды. Беҙ – Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын күреп белгән, улар иҫән саҡта ижад емештәре менән танышҡан һуңғы быуын вәкилдәре, шуға күрә лә уларҙы һанлайыҡ, данлайыҡ! Сабир Шәйәхмәт улының йөрәк йылыһын биреп, бар ҡатлам кешеһенә лә аңлайышлы итеп яҙған хәтирәләрен уҡығанда тыуған һорауҙарға яуап алып ҡалайыҡ.

Сабир Йыһаншин атлы фронтовиктың хеҙмәттәре, бығаса гәзиттә сыҡҡан мәҡәләләренән тыш, 126 брошюра булып, үҙәк һәм республика баҫмаларында донъя күргән. Былар менән генә сикләнеп ҡалмайынса, автор йөрәгенә тынғы бирмәгән уй-кисерештәре менән уртаҡлашып, китап сығарыу бәхетенә ирешкән. Унда авторҙың йыуаныс-ҡыуаныстары ярылып ята, асыу йәки тормош-яҙмышҡа үпкә тойғоһо бөтөнләй юҡ. Хатта руда сығарыу ауыр эш булыуға ҡарамаҫтан, уны ышанып йөкмәтеүҙәренә рәхмәтле булып, ҡыуаныс менән ҡабул итә. Өфө һалдаттарын яуға оҙатҡан мәлде йылы тойғолар менән һүрәтләй, әммә иҫән-һау илгә әйләнеп ҡайтыу-ҡайтмау тураһындағы уйҙар ҙа уны ситләп үтмәй. Ошо юлдарҙы уҡығанда, ниндәйҙер көстәр тәьҫир итә, хатта тәндәрҙе зымбырҙатып ебәрерҙәй импульс та бирә. Фронтовик хәтирәләрен уҡыусыға ябай ғына телдә еткерә.

Районлашы Ғүмәр менән бер урынға эләгәләр, мөһабәт кәүҙәле, көс-ғәйрәте ташып торған егет көтөүсе булып тыуған еренә тоғро хеҙмәт итергә хыяллана, әммә ҡәһәр һуҡҡан фашистар егетте сығырынан сығарып, йәшәүгә өмөттәрен томалай. Сабирҙың үҙенән айырылып китеүен ауыр кисереп, Ғүмәр хатта күҙ йәштәренә ирек бирә. Әммә авторҙы яңы урында ла бәхетһеҙлек һағалап торған: ул Хәйбрахмановтың үлеме хаҡында ишетә.

Хәрби форма кейҙергәс, ул балаларса һөйөнә: «Эх, ошондай ҡиәфәттә колхоз клубында пәйҙә булырға! Аптырауҙан ҡыҙҙарҙың күҙҙәре маңлайҙарына менер ине», – тигән һүҙҙәре авторҙың күңелен ҡуҙғытып ебәрә. Ғүмерҙәре ҡыл өҫтөндә торған яу мәлендә уларҙың күңел түрендә ҡыҙҙарға, һөйөүгә урын ҡалыуы, әлбиттә, һоҡландыра.

«Оборонаның икенсе линияһы» тигән бүлектә Сабир Йыһаншин үҙенең Башҡортостандың хозур тәбиғәте балаһы икәнен дә онотмай. Ул ҡуйы үләнгә ятып, асыҡ һауала йоҡлауын иң яҡшы ял тип ҡабул итә, ә ҡояштың иркәләп уятыуын ләззәт кисереү менән сағыштыра. Автор һүҙ көсөнөң ниндәй оло ҡөҙрәткә эйә икәнен дә һыҙыҡ өҫтөнә ала. Фашистар совет һалдаттарын көнө буйы туҡтамай тар-мар итергә ябырылғанда, элеке директор, лейтенант Николаевтың һәм майорҙың мөрәжәғәттәре һуғышсыларға көс һәм сәм өҫтәй, еңеүгә ышаныслы аҙымдар яһауға булышлыҡ итә.

Автор ысын дуҫлыҡтың ҡәҙерен белә, быға ауылдашы, иң яҡын дуҫы Искәндәр дәлил була. С. Йыһаншин китабының һәр бүлегендә тиерлек уны телгә ала. Искәндәр, үҙ сиратында, иң яҡын дуҫына васыят һымаҡ итеп: «Әгәр ҙә ҡайта алмаһам, ата-әсәйемә беҙҙең яу юлында нисек көрәшкәнде яҙ! Имен-аман әйләнеп ҡайтһаң, һөйләп бирерһең», – ти.

Уларҙың дивизияһы ҡатнашлығында 5 августа Белгород ҡалаһы азат ителә. Шул уҡ көндө Орел ҡалаһы ла тулыһынса фашистарҙан таҙартыла. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Мәскәү беренсе тапҡыр совет ғәскәрҙәренең еңеүен артиллерия салюты менән билдәләй. 23 августа автор Харьков ҡалаһын азат итеү тураһында оло кинәнес менән хәбәр итә. Ул хеҙмәт иткән 15-се гвардия уҡсылар дивизияһына «Харьков» тигән почетлы исем бирелә.

1943 йылдың йәйендә 50 көн дауам иткән Курск дуғаһындағы һуғышта төрлө батырлыҡтар күрһәтелеп, 176 яугирға Советтар Союзы Геройы исеме бирелһә, йөҙәрләгән мең һалдат орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

Совет һалдаты яу юлында ла матурлыҡты күрә белгән. Днепр йылғаһы буйында алышҡан саҡта уның ярҙарының матурлығына һоҡланып, хатта аҙ һүҙле сержант Петров та: «Хозурлыҡ! – тип ҡысҡырып ебәрә, хатта: «Егеттәр әгәр ҙә иҫән ҡалһаҡ, әйҙәгеҙ, йыл һайын ошо урында осрашайыҡ», – тигән тәҡдим индерә.

Мине авторҙың иғтибарлы һәм хәтере шәп булыуы таң ҡалдырҙы. Ниндәй гәзит-журнал, телевидение һәм радио каналдары ҡасан данлы-шанлы йылдар хаҡында ниндәй фекер әйткәнен эләктереп алып, китап аша теүәл еткерә алған. Ҡайҙа сәйәхәттә булыуҙарын, ветерандарға ниндәй ихтирам күрһәтелеүен, уларҙың яуабын ентекле тасуирлай. Рәсәй Президентының һәр бер саҡырыу ҡағыҙын баҫтыра барыуы ла күп нәмә хаҡында аңғарта.

Йәш быуын өсөн бындай китаптың сығыуы – оло мәртәбә. Ә иң мөһиме, Сабир Йыһаншин башҡа ҡәләм тирбәтеүселәргә эйәрмәй, әйтер һүҙен киләсәк быуынға еткереп, бик сауаплы эш атҡара. Ул яҙмаһында батырҙар рухын данлай.

**Алһыу МӨХӘМӘТҠОЛОВА,**
**Башҡорт дәүләт университеты студентҡаһы.**

---

## Ойоштороусы кәрәк

Мин Ҡыйғы районында «Ағиҙел» журналына яҙылыу менән ҡыҙыҡһындым. Хәл шәптән түгел: район ауылдарына журнал бөтәһе 13 дана ғына килә. Ауыл китапханалары – 4, мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡыусылары 7 дана алдыра.

Ҡыҙыҡһыныу барышында беҙҙең төбәктә баҫманы алдырып уҡыусыларҙы арттырыу мөмкинлектәре барлығы ла асыҡланды. Үҙәкләштерелгән китапхана системаһында, мәҫәлән: «Ниңә элегерәк килмәнегеҙ? Кәмендә 10 дана журналға яҙылырға мөмкин булыр ине», – тип ҡаршы алдылар. Журнал уҡыусылар араһынан «Ағиҙел»гә яҙылыуҙы ойоштороусы тапҡанда, нисек булыр ине икән? Ҡаҙна подпискаһы буйынса быны, минеңсә, эшләп була.

**Марсель САБИРЙӘНОВ.**
**Ҡыйғы районы.**

***

Әбйәлил йәмәғәтселеге сәсән-шағир Шафиҡ Тамъяни-Әминевтың тыуыуына 155 йыл тулыуҙы оло байрам итеп билдәләне. Тәүҙә Яңауыл ауылы зыяратында мәшһүр һүҙ оҫтаһы һәм атаҡлы дин әһеле рухына (1858–1936) аяттар уҡылды, фәһемле иҫтәлектәр тыңланды.

Тантанала ҡатнашыусыларҙы юлайҡан Амангилде ауылы халҡы икмәк-тоҙ, йырмоң менән ҡунаҡсыл ҡаршылап оҙатты. Артабан бихисап машиналар шағирҙың йәнтөйәге Әбделғәзегә юлланды. Ш. Тамъяни исемендәге мәктәп, ялан сәхнәһенә ҙурайтып эшләгән сәсән һүрәте, уның өс быуатлыҡ шәжәрәһе менән танышып, район хакимиәте башлығы Рим Сыңғыҙовтың тәбрикнамәһен тыңлағандан һуң, йөкмәткеле сығыштарға аһәңле йырҙар, дәртле бейеүҙәр, бағышлауҙар ялғанды. Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Риф Тойғонов, академик Әхмәт Сөләймәнов, БДУ профессоры Зәйтүнә Шәрипова, Сибай филиалының кафедра мөдире Фәҙилә Бүләкова, «Аманат» журналының баш мөхәррире Сәлмән Ярмуллин, күренекле шағир Әсхәл Әхмәт-Хужа, «Ағиҙел» журналы хеҙмәткәре, билдәле яҙыусы Сабир Шарипов, йәш прозаик Айгиз Баймөхәмәтов, төйәк әҙиптәре Иҙрис Ноғоманов, Самат Фәйзуллин, Радик Өмөткужин, сәсәниәләр Хәнифә, Вәсилә һәм Гөлнур апайҙар, Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылы һәүәҫкәрҙәре – һәммәһенең дә фекерҙәре, тәҡдимдәре ифрат фәһемле булды. Мәҫәлән, йәнтөйәгендә шағирҙың бюсын ҡуйыу, уның ҡатмарлы үә сағыу ижад юлына арналған китап әҙерләү мәсьәләһе күтәрелде. Сараларҙа район хакимиәте вәкилдәре Линиза Сәғәҙиева, Вәлит Зәйнуллин һ.б. ихласлыҡ күрһәтте, ҡайҙа ла мулла Салауат Әминевҡа, Әбйәлил башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Ишморат Әминевҡа рәхмәт белдерелде. Тантанаға иһә Шафиҡ Тамъяниҙың йөҙҙән ашыу нәҫел-нәсебе дәррәү килгәйне.

*Үҙ әсәһен һатҡан кеүек булыр*
*Әгәр, Урал, һине һатһалар...*

Йыйынында сәсәндең ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа ишетелеп, ҡулдан-ҡулға күсерелеп һаҡланған байтаҡ оҫҡонло шиғри юлдары яңғыраны. Үҙе лә раҫлаған бит: «Мин йырланым халҡым рухын...»

***

Мәжит Ғафури исемендәге Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Башҡорт дәүләт академия драма театрының бер төркөм артистары Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондарында йәйге гастролдә булды. Был юлы улар тамашасыларға драматург Наил Ғәйетбайҙың «Бер мәл санаторийҙа...» комедияһы буйынса спектакль күрһәтте. Башҡортостандың сәхнә йондоҙҙары – Рәүис Заһитов, Заһир Вәлитов, Рәмзиә Хисамова, Тәнзилә Хисамова, Минзәлә Хәйруллина, Әхәт Хөсәйенов, Гөлфиә Рафиҡова һәм башҡаларҙың уйнауы күңелдәргә хуш килде: артистарҙы халыҡ ихлас тәбрикләне.

***

Баш ҡалабыҙҙың В. Маяковский исемендәге скверында мәшһүр совет шағиры Владимир Маяковскийҙың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған шиғриәт байрамы үткәрелде. Сара әҙип үҙе уҡыуында яҙып алынған шиғырҙарын тыңлауҙан башланып китте.

Артабан һуғыш яугиры Мөхтәр Фәтҡуллин менән хеҙмәт ветераны Анатолий Михайлов башҡарыуында шағирҙың һәр кемебеҙгә билдәле әҫәрҙәре яңғыраны.

Халыҡ шағирҙары Марат Кәримов менән Ҡәҙим Аралбай сығышынан һуң һүҙ төрлө быуын шағирҙарына бирелде: Хәсән Назар, Зөлфиә Ханнанова, Рауил Шаммас һәм Алмас Шаммасов, Георгий Кацерик, Әхмәҙин Әфтәх, Зөфәр Вәлит, Айҙар Хөсәйенов, Рафаил Хафизов, Владимир Денисов, Любовь Колоколова, Юрий Горюхин, Рәшиҙә Бик һ.б.

Әҫәрҙәр башҡорт, урыҫ, татар телдәрендә яңғыраған шиғри байрамды Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина менән Марсель Сәлимов дәртле итеп алып барҙы. Шағирҙың төрлө йылдарҙа баҫылып сыҡҡан йыйынтыҡтарынан күргәҙмә булды, китап һатыу ойошторолдо.